# Ағиҙел

Өфө,
июль
2012

7(1071)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире),*
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ғәйнуллина *(яуаплы сәркәтип),*
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир),*
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),*
Гүзәлиә Тутаева, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар),*
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе),*
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар).*

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 06.07. 2012. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times» гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 200 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0109.12.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2012 (7,1071)**

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ

**Марат Кәримов.** Ҡала ҡайыны. Ш и ғ ы р ҙ а р. ..............................5
**Риф Мифтахов.** «Хыялланам йондоҙ ҡабыҙырға...» Ш и ғ ы р ҙ а р. ..............................15
**Дилә Булгакова.** Яҙ етәкләп килдең. Ш и ғ ы р ҙ а р. ......................18
**Гөлназ Ҡотоева-Ғәйнуллина.** Бәхетлемен! Ш и ғ ы р ҙ а р. .............23

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Сәлимйән Бәҙретдинов.** Хан ҡыҙы. Ҡ и с с а. ..............................31

СӘХНӘ ӘҪӘРҘӘРЕ

**Наил Ғәйетбай.** Ҡултамға йәки Түрә ҡабул итмәй. С а т и р и к к о м е д и я. ..............................44

ӨМӨТЛӨ ҠӘЛӘМ

**Линиза Шакирова.** Аға һыуҙар ҡиблаға... Х и к ә й ә. ...................65

РУХИ ЫҢЙЫЛАРЫБЫҘ

**Лео Яковлев.** Тормошо тураһында Ғүмәр Хәйәм үҙе һөйләгән бәйән. *Аҙағы.* ..............................88

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Әхмәт Сөләймәнов.** Бәҫле әҙип, эҙле ғалим *(Кирәй Мәргәндең тыуыуына 100 йыл).* ..............................114
**Таһир Ғәбитов.** Повестар оҫтаһы *(Рәйес Низамовтың тыуыуына 80 йыл).* ..............................131
**Гөлназ Ҡотоева.** Ғүмер шаңдағы *(Динә Талхинаның тыуыуына 60 йыл).* ..............................132

ПУБЛИЦИСТИКА

**Сабир Йыһаншин.** Туған телдә уҡытыу проблемалары. .............136
**Рәшит Сабит.** Егән буйҡайҙарын буйланым. ..............................150

“АҒИҘЕЛ” ҠУНАҒЫ

**Рөстәм Нуриев.** Йәшәү мәғәнәһе – игелек ҡылыуҙа. ..................168

*1812 йылғы Ватан һуғышына – 200 йыл*

**Әхмәт-Гәрәй Йәнғәлин.** Аямаған йәнен, түккән ҡанын. ............174
**Радик Ғәзизов.** Көнгәк. Ш и ғ ы р. ..............................184

«АҒИҘЕЛ»ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**М. Каримов, Р. Мифтахов, Д. Булгакова, Г. Кутуева-Гайнуллина.** *Стихи.*

ПРОЗА

**С. Бадретдинов.** Ханская дочь. *Повествование.*

СЦЕНИЧЕСКИЕ ПРОИЗВЕДЕНИЯ

**Наиль Гаитбай.** Подпись или начальник не принимает. *Сатирическая комедия.*

ПРОБА ПЕРА

**Л.Шакирова.** Утекают реки на Каабу... *Рассказ.*

ДУХОВНЫЕ СОКРОВИЩА

**Лео Яковлев.** Повесть о жизни Омара Хаяма. *Окончание.*

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**А. Сулейманов.** Творец, ученый *(100 лет со дня рождения Кирея Мэргэна).*
**Т. Габитов.** Мастер повести *(80 лет со дня рождения Р. Низамова).*
**Г. Кутуева.** Эхо жизни *(60 лет со дня рождения Д.Талхиной).*

ПУБЛИЦИСТИКА

**С. Зиганшин.** Проблемы преподавания родного языка.
**Рашит Сабит.** Гулял я по Зигану.

ГОСТЬ «АГИДЕЛИ»

**Р. Нурыев.** Смысл жизни.

*200 лет — Отечественной войне 1812 года*

**А. Янгалин.** Не пожалел душу, кровь пролил.
**Р. Газизов.** Кунгак. *Стихотворение.*

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Марат
КӘРИМОВ**

# ҠАЛА ҠАЙЫНЫ

## *Әсәйгә*

*Рәхмәт, әсәй, мине бар иткәнһең,
Иманлы бул, балам, тигәнһең.
Фәрештәләр ташламауын теләп,
Тупылдатып ҡат-ҡат һөйгәнһең.*

*Теләктәрең, әсәй, терәк булды,
Үткәрмәне бәлә-ҡазаны.
Күңелемә күктән иңеп торҙо
Фәрештәнең изге ауазы.*

*Күктән иңгән ошо ауаздарҙа
Мин танырым әсәй тауышын.
Бәҡыйлыҡтан тороп, элеккесә
Ҡайғыртаһың улың яҙмышын.*

*Иман менән йәшәгәндәр белә —
Ҡөҙрәттәре уның киң икән.
Мин фәрештә хәстәрендә һаман,
Ул фәрештә, әсәй, һин икән.*

---

*Марат Кәримов (1930) Ейәнсура районының Күгәрсен ауылында тыуған. Оҙаҡ йылдар матбуғат өлкәһендә ең һыҙғанып эшләне. Башҡортостандың халыҡ шағиры.*

## Ҡала ҡайыны тураһында баллада

*Ҡайын, ҡайын, нимә булды?*
*Сыҡҡан көмөрөң.*
*Ҡала туҙандарын йотоп*
*Үтә ҡыҫҡа ғүмерең.*

*Япраҡтарҙың шыбырлауы*
*Иҫкән ел кеүек.*
*Аңлауһыҙға ҡайын теле*
*Беҙҙең тел кеүек:*

*«Мин бит ауыл янындағы*
*Урманда үҫтем.*
*Ә ҡаланы күргән булдым*
*Ауылдан өҫтөн.*

*Бер көн шулай ҡалағыҙҙан*
*Яттар килделәр,*
*«Үкенмәҫһең, беҙҙең менән*
*Киттек! — тинеләр. —*

*Бында бит һин юғалырһың,*
*Шырлыҡ — урманың.*
*Исмаһам, биҙәп торорһоң*
*Ҡала урамын».*

*Әммә һис тә аҡланманы*
*Минең көткәндәр,*
*Былай бөгә, тегеләй бөгә*
*Үткән-һүткәндәр.*

*Ҡайсы тотҡандар олондо*
*Тунай йыл һайын.*
*Шатланалар: «Дөрөҫ үҫә*
*Хәҙер был ҡайын».*

*Мунсахурҙарын әйт әле,*
*Ҡайҙа йәлләүҙәр!*
*Минең йәшел япраҡтарҙан*
*Миндек бәйләйҙәр.*

*Ҡоштар һайрауын оноттом,*
*Эсем зар ғына;*

*Ботаҡыма ҡуна бары*
*Ҡарҡалар ҡына.*

*Һемәйтте мине был ҡала,*
*Имгәтте тамам.*
*Үҙемдең матур саҡымды*
*Ҡайтара алмам.*

*Урманым иҫкә төшә лә*
*Ҡуям һыҙланып...»*
*Иланы ҡайын, иланы*
*Үҙен ҡыҙҙанып.*

*Ила, ҡайын, илаҡанда*
*Бушана күңел.*
*Шул яҙмышҡа тарыҡандар*
*Һин генә түгел.*

*Ана, күптәр ауылдаҡы*
*Тамырын өҙөп,*
*Ҡитә ҡалаларҡа, унда*
*Йәшәргә йөҙөп.*

*Ә ҡаланың үҙ ҡалыбы,*
*Һыйҡаны — һыя.*
*Һыймаҡанын һыйҙырам тип,*
*Имгәтеп ҡуя.*

*Яҙмышыҡыҙ бер икәнде*
*Тойорҙар әле,*
*Һине ҡосоп, күҙ йәштәрен*
*Ҡойорҙар әле...*

## ***Һуңҡы уй***

*Тыныс ҡына йәшәй ине*
*Күп ордендар кавалеры,*
*Булмаҡандыр яраларҙан*
*Ямалмайса ҡалҡан ере.*

*Байрамдарҙа түш тултырып*
*Барыһын таҡып алыр ине,*
*Һәр бер орден, һәр бер миҙал*
*Йондоҙ булып яныр ине,*

*Миһырбанлы күңелдәргә*
*Йондоҙ нуры ҡуныр ине,*
*Ҡара тормош күләгәһен*
*Йәһәннәмгә ҡыуыр ине.*

*Ана, күрше әрәмтамаҡ*
*Ордендарҙан күҙен алмай.*
*Ғәжәп, ошо оңҡот бәндә*
*Ордендарҙа нимә аңлай?*

*Улай тимә, оңҡот тимә,*
*Яҡшы аңлай үҙенә күрә.*
*Шул орденды әгәр һатһаң,*
*Ҡулға күпме аҡса керә!*

*Аҡса кәрәк! Тиҙерәк кәрәк!*
*Ул юғалтты түҙемлеген.*
*Ғазраилды көтәһе юҡ,*
*Ул Ғазраил үҙе бөгөн!*

*Ветерандың ирендәре*
*Ниҙер әйтеп шыбырҙаны.*
*«Уның башына етәме*
*Яуҙа алған шөһрәт-даны?*

*Бандиттары үрсеп ятҡан*
*Был ил уның илеме ни?*
*Шундай илде яҡлайым тип*
*Ул ҡан ҡойған инеме ни?*

*Еңеү шауҡымында ғына*
*Ник йәшәлгән ғүмер буйы?»*
*Шул буталған донъялыҡта*
*Ветерандың һуңғы уйы...*
*Ветерандың һуңғы уйы...*

## ***Эҙ яҙҙырыу***

*Әй, йәшлектең тиле сағы!*
*Беҙ бит үлемһеҙ, имеш.*
*Шуға йәшәлгән әжәлгә*
*Өҫтән ҡараған килеш.*

*Күптән тиле йәшлек үткән,*
*Бер аҙ аҡыл да ингән.*

*Үлемһеҙлек кикреге лә,*
*Нимә эшләһен, шиңгән.*

*Инде ҡарттарҙың ҡорона*
*Илтә ғүмер ағышы.*
*Сеү! Артымдан кемдер ҡыуа,*
*Кемдең аяҡ тауышы?*

*Әжәл икән. Туҡтатырға*
*Ымлап тамағын ҡыра.*
*«Йәшәү лимитың тулған!» — тип*
*Салыш ауыҙын йыра.*

*Мин ул тиклем йүләр түгел*
*Тыңларға уның һүҙен.*
*Йән фарманға тороп саптым,*
*Күҙҙән яҙҙырҙым үҙен.*

*Өйөмә ҡайтып йығылдым,*
*Ишекте эстән элеп.*
*Тын алырға ла ҡурҡыта,*
*Ятамын ярты үлеп.*

*Ана, ишек дөбөрҙәтә,*
*Ҡутара инде биген!*
*Минең ҡайҙа йәшәгәнде*
*Нисек тиҙ белгән тиген.*

*Тәҙрә аша сығып тайҙым,*
*Шундай минең характер.*
*Күҙ яҙҙырыу ярҙам итмәй,*
*Эҙ яҙҙырыу кәрәктер.*

*Хәҙер инде башҡасараҡ*
*Минең ғүмер һөрөүем:*
*Нисә йылдар өйгә ҡайтмай*
*Эҙ яҙҙырып йөрөүем.*

*Әжәл эҙләп тапмаҫына*
*Ышанысым ныҡ әле.*
*Әжәл түгел, ҡатындың да*
*Табалғаны юҡ әле.*

*Таба ҡалһа, ағайығыҙ*
*Күрмәгәнде күрәсәк,*
*«Алиментщик!» — тип әжәлгә*
*Үҙе тотоп бирәсәк.*

## *Бизнесмен*

*Фәҡир заманалар үтте,*
*Байыр заманалар етте.*
*Ана, хәҙер бизнес менән*
*Шөғөлләнә эте-бете.*

*Минең диндар күршемде ал,*
*Бурыстарға бата-бата,*
*Мал ала ла уны һуйып,*
*«Хәләл ит» тип маҡтап һата.*

*Ҡиммәт хаҡҡа ҡарамайса*
*Күптәр уға сират тора.*
*Кемдәр тора? Дин тотмаған*
*Үҙебеҙҙең брат тора.*

*— Быға тиклем харам ашап,*
*Нисек борсолманыҡ, — тиҙәр, —*
*Хәләл ризыҡ ашау менән*
*Ҡайтыр мосолманлыҡ, — тиҙәр.*

*Туҡта, мәйтәм, миңә лә бит*
*Фарыздыр ул быңдай ғәмәл.*
*Мине бизнесмен итәсәк*
*Тылсымлы шул бер һүҙ: хәләл!*

*Тик бизнеста юҡ ғәҙеллек,*
*Алдашыу ҙа ярай бында.*
*...Аҡ алъяпҡыс быуып, иртән*
*Торам Өфө баҙарында.*

*«Хәләл» һүҙен йәбештереп*
*Һатам тауыҡ күкәйҙәре.*
*«Хәләл» тигәс, ҡырылышып*
*Ала ҡала түтәйҙәре.*

*Күкәй менән сикләнеү юҡ,*
*Ҙур пландар йөрөтәмен.*

*Бер урыҫтан сусҡа алдым,*
*Әле шуны һимертәмен.*

*Тиҙҙән ҡала баҙарында*
*Әйтеремде уйлап ятам:*
*«Мосолмандар! Ашығығыҙ!*
*Хәләл дуңғыҙ ите һатам!»*

## Телевизор нимә һөйләй

*Телевизор нимә һөйләй,*
*Бер тыңлап ҡара икән.*
*Тормошобоҙ яҡшырғандан —*
*Яҡшыра бара икән.*

*Сереп байығандар һаны*
*Артҡандан-арта икән.*
*Был йәһәттән хатта АҠШ*
*Беҙҙән дә артта икән.*

*Хакимдарҙың ғәмәлдәре*
*Бары тик аҡтан икән,*
*Власть һағында торғандарға*
*Эш хаҡы артҡан икән.*

*«Дом — два» ла кем менәндер*
*Ҡемдәрҙер ятҡан икән.*
*Йырсы Алла сираттағы*
*Үҙ парын тапҡан икән.*

*Ә хөкүмәт көнө-төнө*
*Тик беҙҙе уйлай икән,*
*Пенсияға биш-алты һум*
*Өҫтәмә юллай икән.*

*Әҙәмсә йәшәр ваҡыттар*
*Беҙгә лә еткән икән.*
*Шул шатлыҡтан мәжлес ҡорам,*
*Аһ, икмәк бөткән икән!*

*Киттем кибеткә. Икмәккә*
*Хаҡ тағы артҡан икән.*
*Хаҡты арттырыусыларҙы*
*Ниндәй ҡорт саҡҡан икән?*

*Телевизорҙы һүндерҙем,*
*Лутсы ҡарама икән.*
*Бәй, тормош бит үҙгәрмәгән,*
*Һаман алама икән...*

## Бер тауыштан

*Йыйылыш бара. Шарап һыуын йота-йота*
*Мөдиребеҙ трибунала телмәр тота:*

*— Яҡынлаша түрәбеҙҙең тыуған көнө,*
*Тыуғанына фәләнсә йыл тулған көнө.*

*Шуға күрә, ағай-эне, уны ҡотлап,*
*Дәрәжәһенә тиң бүләк бирең мотлаҡ.*

*Айлыҡ хеҙмәт хаҡын бирһәк, булмаҫ зарар,*
*Ошо хаҡта сығарайыҡ мөһим ҡарар.*

*Ҡул күтәрһен кемдәр риза, кемдәр ҡаршы!*
*Зал шым булды. Йыйырылды мөдир ҡашы,*

*Хәйер, быға аптыраймы инде ҡуштан:*
*— Был ҡарарҙы ҡабул иттек бер тауыштан!*

*Һеҙгә — берҙәм коллективҡа рәхмәт! — тине.*
*Ул бер тауыш уның үҙенеке ине.*

## Шәп кеше

*Шәп кешеләр күп түгелдәр —*
*Бармаҡ менән һанарлыҡ.*
*Береһен беләм — ғүмерлеккә*
*Дуҫлашырға ярарлыҡ.*

*Ниңә үҙен күрмәҫкә лә*
*Элемтәгә кермәҫкә,*
*Рәхәтләнеп, эс бушатып*
*Һөйләшмәҫкә, көлмәҫкә?*

*Көтөү минуттарын рәзе*
*Оҙаҡҡа һуҙыу ярай!*
*Ана көҙгө! Ана үҙе!*
*Миңә йылмайып ҡарай.*

## Еҙнәй бәкеһе

Берәй ерҙә был йоланың
Бармы ише:
Ҡәйнешенә бәке бирә
Еҙнәй кеше.

Малайҙарға шатлыҡ юҡтыр
Шунан артыҡ,
Бәке менән маҡтана ул,
Танау тартып.

Мин йөрөнөм маҡтаналмай
Байтаҡ заман,
Апайҙарым ниңә кейәү
Тапмай һаман?

Һәм, ниһайәт, тапты улар
Эҙләгәнен,
Сит милләттән булып сыҡты
Еҙнәләрем.

Иосиф еҙнәй, Войтек еҙнәй,
Ҡоля еҙнәй,
Семен еҙнәй — минең өсөн
Оло еҙнәй.

Йөрөнөм мин күкрәк киреп,
Морон сөйөп,
«Ниндәй генә милләттән юҡ
Туған! — тиеп.—

Урыҫы бар, йәһүде бар,
Полягы бар,
Әле әйтмәй ҡалғандары
Тағы ла бар!»

Ояты ни! Ә шулай ҙа
Ҡилә әйтке:
Береһе лә тотторманы
Миңә бәке.

Бының өсөн бәрәһеңме
Башты ташҡа,

*Һәр миләттә ғәҙәт башҡа,*
*Йола башҡа.*

*Төкөрөп бир, әйҙә, еҙнә*
*Бәкеһенә!*
*Һүҙем күсә апайҙарҙың*
*Бәхетенә.*

*Йәшәнеләр тормошобоҙ*
*Уңмаҫмы, тип,*
*Ике ярҙы тоташтырып*
*Булмаҫмы, тип.*

*Бының өсөн төрлө-төрлө*
*Юлдар табып,*
*Сит милләткә ҡыҙҙар табып,*
*Улдар табып.*

*Беҙгә генә килде мәллә*
*Был буталыш?*
*Юҡ, юҡ, ана күпмеләрҙә*
*Шул уҡ яҙмыш!*

*Иртәгәбеҙ нисек булыр?*
*Томан... томан...*
*Уян, уян, милләттәшем,*
*Уйлан, уйлан!*

*Нимә ҡалыр был тарихта?*
*Үҙебеҙме?*
*Әллә бары үҙебеҙҙең*
*Эҙебеҙме?*

*Булыр ҡәйнештәрҙә әле*
*Минең уйым:*
*Байрам иткән саҡта апай —*
*Ҙары туйын,*

*Күҙҙәрендә шатлыҡ уты*
*Ҡабынырмикән?*
*Бәке бирер еҙнәләре*
*Табылыр микән?..*



**Риф**
**МИФТАХОВ**

# «ХЫЯЛЛАНАМ БАШҠАЛАРҘЫ НУРЛАР ЙОНДОҘ ҠАБЫҘЫРҒА ҠАҒЫҘҘАН...»

## *Васыятыңа тоғро ҡалдыҡ, әсәй*

*Әсәй, кәңәштәрең хәтеремдә:*
*«Изгеләр бар — ауһаң, аҙашһаң.*
*Хоҙай түгел, бер кем ғәфү итмәҫ*
*Йә урлашһаң, йәки алдашһаң...»*

*Намыҫымды һаҡлап һәм дә паклап*
*Һеңде һүҙең йәнгә-хәтергә.*
*Васыятыңа тоғро ҡалдыҡ, әсәй,*
*Борсолма, тип килдем әйтергә.*

*Оят көсө тотто яман эштән,*
*Тормош, хаҡлыҡ, иман — һабағың:*
*Тик бер әйткән кәңәш-иҫкәртеүҙән*
*Ғәзел йәшәү серен аңланым.*

*Киткәнеңә ярты быуат, әсәй...*
*Һинең йәштән күптән оломон,*
*Тик ғүмергә һиңә табыныусы*
*Кәңәш көткән кескәй улыңмын.*

*Балаларым — һинең ейәнсәрҙәр*
*Тик фотоңдан ҡарап таныйҙар.*
*Йәшәү маҡсатында — васыятыңа,*
*Ышан, әсәй, тоғро ҡалырҙар.*

---

*Риф Мифтахов (1939) Ишембай районы Кинйәбулат ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлап, оҙаҡ йылдар матбуғатта эшләне. БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

*Тормоштары, беләм, еңел булмаҫ*
*Хаҡ-ғәҙеллек эҙләп барғанда:*
*Хоҡуҡһыҙлыҡ, бурлыҡ, ялағайлыҡ*
*Ғәҙәти хәл булған заманда.*

*Уйланабыҙ, әсәй, борсолабыҙ:*
*Алдан атлай аҡса, ялған һүҙ.*
*Выждандылар ҡулайлашмай бит ул,*
*Ҡалһалар ҙа яңғыҙ, яҡлауһыҙ.*

*«Изгеләр бар» тигән ике һүҙең*
*Һин бар саҡта, әсәй, аҡланды.*
*Ил тарҡалып, иман тапалғанда,*
*Белеп булмай ҡайҙа аҡҡанды.*

*Әммә беләм: Әсә мөхәббәте*
*Ваҡыт хөкөмөнән көслөрәк.*
*Балаһына күскән уның йәне*
*Була бит ул имле, изгерәк.*

*Йылдар үтер... Беҙ килербеҙ, әсәй,*
*Ожмахтағы йәнең уянып,*
*Ерҙә — елдәр, күктә Ай булыр ҙа*
*Беҙҙе ҡосор моңһоу йылмайып...*

*Эй, кешеләр, ниңә хәҡиҡәтте*
*Быуын-быуын һуңлап аңлайбыҙ:*
*Беҙгә, ергә аңлы ғүмер биргән*
*Әсә кеше — Бәхет аллабыҙ!*

## Яңғыҙлыкка дарыу юк

Был донъяла ике ҡурҡыныс бар:
Береһе — үлем, береһе — яңғыҙлыҡ.

Халыҡ йырынан.

*Ҡатын-ҡыҙҙар, зинһар, биҙәнмәгеҙ,*
*Һеҙ матурлыҡ тигән ырыуҙан.*
*Ир-ат зауығына тәм-йәм итеп,*
*Тәңре һеҙҙе гүзәл тыуҙырған.*

*Һәр берегеҙ башҡа: йөҙ-күҙегеҙ,*
*Буй-һынығыҙ, хыял-уйығыҙ.*
*Ҡылығығыҙ менән ерҙә килеш*
*Йондоҙҙарҙай серле булдығыҙ.*

*Бейеклеккә, бөйөклөккә әйҙәп,*
*Көс бирҙегеҙ ир-ат халҡына.*

*Ҡай берегеҙ ниңә, ҡош шикелле,*
*Бәхет көтөп яңғыҙ талпына?*

*Күпме ир-ат яңғыҙ ярҙа ҡалған*
*Үҙен тапмай ошо донъяла.*
*Ә бит кеше тигеҙ мөхәббәтле*
*Ғаилә бәхетенән көс ала...*

*Ҡатын-ҡыҙҙар, әйҙә, биҙәнегеҙ:*
*Ир-ат күрһен — иҫтән яҙһындар...*
*Яңғыҙлыҡҡа дарыу табып булмай,*
*Юҡ, булмаһын ерҙә яңғыҙҙар!*

*Икһеҙ-сикһеҙ ғаләм киңлегеңдә*
*Ер ғүмере — ҡояш сығыуҙан.*
*Әҙәм затын Хоҙай, зарлы түгел,*
*Парлы булыу өсөн тыуҙырған!*

## Тоғро дуҫ

*Күп дуҫтарҙан ҡалды тик бер дуҫым,*
*Исеменә лайыҡ — «Дружок».*
*Уның кеүек яҡын, ихлас, алсаҡ*
*Хәҙер, ахыры, башҡа дуҫым юҡ.*

*«Аҡманай»[*]ға килһәк, көтөп йөрөй*
*Ҡойроҡ болғап ҡапҡа төбөндә.*
*Итле һөйәк ҡай саҡ булмаһа ла,*
*Һәр саҡ янда — көн дә, төнөн дә.*

*Йөрөмәй ул тамаҡ хаҡы өсөн,*
*Ул аҙыҡһыҙ ҡалыр эт түгел.*
*Булһа икән кеше йәнендә лә*
*Һис үҙгәрмәй торған эт күңел.*

*Тоғролоғо менән ихласлығын*
*Юғалтҡанда бәндә боҙолоп,*
*Әҙәм заттарына һөйөүендә*
*Эт заттары ҡалды үҙ булып.*

*Һирәгәйгәндә янда тыуған, дуҫтар,*
*Ҡай берәүҙән үҙем биҙгәндә,*
*«Дружок» — дуҫым, өмөт-ышанысты*
*Һин һаҡлайһың көн-төн эргәмдә.*

---

*[*]Аҡманай — Шишмә районы Келәш ауылы эргәһендә яҙыусыларға бирелгән баҡса исеме.*



**Дилә**
**БУЛГАКОВА**

## *Яҙ етәкләп килдең*

*Яҙ етәкләп керҙең күҙҙәремә,*
*Күҙҙәремдән китер юл бармы?*
*Нисек үтергә һуң,*
*Нисек һүтергә һуң*
*Аралаъы ятҡан йылдарҙы?*

*Баш осомдан осҡан ҡошсоҡтарҙы*
*Күҙ ҡарашым менән парланым.*
*Һөйөү килде күктән,*
*Наҙҙар көттөм күптән,*
*Яҙ етәкләп килгән йән йәрем.*

*Араһында яңғыҙ ҡоштар оса,*
*Табырҙармы унда үҙ парын?*
*Буш оялар уста,*
*Ғүмер ниндәй ҡыҫҡа,*
*Үкенмәҫлек йәшәйек, йән йәрем.*

*Оноттоң мәллә киткән ҡошсоҡтарҙың*
*Юлдарында ҡалъан моңдарын?*
*Ник түгеләм икән,*
*Ник бөгөләм икән,*
*Ҡосаъыңа кереп, йән йәрем!*

---

*Дилә Булгакова (1937) Ҡырмыҫҡалы районының Боҙаяҙ ауылында тыуған. Ҡырҡ йыл медицина өлкәһендә эшләй. Бик күп китаптар авторы, байтаҡ шиғырҙарына йырҙар яҙылған.*

*Шағирәне күркәм юбилейы менән ихлас тәбрикләйбеҙ.*

## Йәп-йәш көйө

*Йөрәгемдең түркәйендә,*
*Һағындыра тыуған яғым.*
*Бик йыш ҡына төштәремә*
*Килеп керә бала сағым.*

*Әсәйемдең йәп-йәш сағы*
*Толомдарын тарап үрә.*
*Йырлай-йырлай өй алдында*
*Керҙәр сайҡай, керҙәр элә.*

*Атайым да еккән атта*
*Ҡайтып керә төштәремдә.*
*Ғәзиздәрем йәп-йәш көйө*
*Йәшәй һаман төштә генә.*

## Сәстәреңдә сәскә еҫе

*Сәстәреңдән сәскә еҫе килә,*
*Гөлдәр, ахры, һине үҙ иткән.*
*Күл күҙеңдә ҡояш һыу ҡойона,*
*Хыялыңда, әйтсе, кем икән?*

*Буй-һыныңа күҙ теймәһен әле,*
*Кейгән күлдәккәйең килешкән.*
*Беләгеңдә селтәр пар беләҙек,*
*Бик боронғо ҡара көмөштән.*

*Алҡаларың аҫыл гәүһәр таштан,*
*Билкәйеңә еткән толомоң.*
*Көйәнтәле ҡыҙый, һабантуйҙың*
*Биҙәнең бит йола-уйынын.*

*Шишмәләргә төшсө һыу алырға,*
*Улаҡтарҙан услап һыу алам.*
*Бәйгеләрҙән ҡайтҡан толпарымды*
*Һыу эсерәйек бергә — һыуһаған.*

* * *

*Ваҡыттың минутын һанап*
*Ямғырҙар тамсыланы.*
*Гүйә, ярышып йәшендәр*
*Болотто ҡамсыланы.*

*Ҡурғаш болоттарҙы яйлап*
*Әйҙәне елдәр ары.*

*Әммә йөрәгемдә ҡалды*
*Йәшенден саткылары.*

*Ашыға тулып ташырға*
*Күптән көтөлгән минут:*
*Мин берсә — атылған йәшен,*
*Берсә — тулышҡан болот...*

## Йылың кәрәк, балам!

*Күҙҙәреңдә һанһыҙ йондоҙҙарың*
*Тоташтырған әле йөрәк ҡылын.*
*Ел-дауылдан, боҙ-ямғырҙан*
*Һаҡлар, балам, һине минең йылым.*

*Баш өҫтөмдә аҡҡан болоттарҙы*
*Елдәр киҫә толом-толом.*
*Селләләрҙә күшекмәҫкә һиңә,*
*Һаҡлар, ҡаплар минең йылым.*

*Йылылыҡтан мәхрүм итә күрмә,*
*Өҙөлмәһен нескә йөрәк ҡылым.*
*Йәшәр өсөн, йәшнәр өсөн, балам,*
*Иғтибарың кәрәк, һинең йылың.*

*Рәхмәтлемен булған яҙмышыма,*
*Һулар һауам, гүйә, һинең тының.*
*Йылдарыңда аҙашмаҫҡа, балам,*
*Һаҡлап ҡалыр һине минең йылым.*

*...Болоттарҙы яра утлы йәшен,*
*Ямғыр йыуа киткән ҡоштар юлын.*
*Күңелдәрең һинең бойоҡҡанда,*
*Йылытһын да ине минең йылым.*

*Әсә кеше гел изгелек теләй,*
*Фатихалы булыр барған юлың.*
*Хисегеҙҙән үргән ояғыҙҙы*
*Йылытһын да ине минең йылым.*

## Тал бишекле төйәк

*Тал бишекле, бал бишекле төйәк,*
*Әсәйле яҡ, һиңә табынам.*
*Әбейҙәрең, бәпкәләрең менән,*
*Тыуған яғым, һине һағынам.*

*Ҡояш етәкләгән таңдарымда*
*Елдәр иçһә тыуған яғымдан,*
*Бәйгеләргә сыҡҡан аттарыңды,*
*Һабантуйҙарыңды һағынам.*

*Тыуған ерем, кәрәҙле бал иле,*
*Һинең өсөн генә йән атам.*
*Муйылдарың, йүкәләрең менән,*
*Бал ҡорттарың менән яратам.*

*Һағындыра ҡыр өйрәкле күлең,*
*Кер сайҡаған ҡыҙҙар баçмаһы.*
*Ер еләкле ғәзиз еркәйемдән*
*Айырылырға ғына яҙмаһын!*

## ***Юғалттым һине, юғалттым***

*Юғалттым һине, юғалттым,*
*Күралмам кеүек ҡабат.*
*Күктәргә тиклем атылам,*
*Ике ҡулым – пар ҡанат.*

*Өнһөҙ тауҙарға өндәшәм:*
*Ҡайҙа һуң минең һөйгән?*
*Урмандарға килеп керәм –*
*Ағастар башын эйгән.*

*Йылғаларға йүгерәмен, –*
*Тулҡындар ярҙы уя,*
*Мин һинһеҙ – айһыҙ, ҡояшһыҙ,*
*Йондоҙҙар йәшен ҡоя.*

*Юғалттым һине, юғалттым,*
*Ҡайҙан табырға тиҙем!*
*...Йә Хоҙа, ҡурҡыныс төштән*
*Үбеп уяттың үҙең.*

## ***Мөхәббәтем – йән ҡошом***

*Хыялыңа тиң иттеңме*
*Йондоҙҙарҙың балҡышын?*
*Янып ерҙәргә атылдың,*
*Мөхәббәтем – йән ҡошом.*
*Өмөттәр етәкләп елдең,*
*Ҡаршыланы яңылышың.*
*Ҡайнаған боҙҙарҙа ҡалдың,*
*Мөхәббәтем – йән ҡошом.*
*Ғәфүҙәр итә алманың*

*Ялғанлыҡтың яңылышын,*
*Аунаптар ятып иланың,*
*Мөхәббәтем — йән ҡошом.*
*Ник үкһегән тәҡдиреңде*
*Ҡамсыланы яҙмышың?*
*Рәнйептәр киттең микән ни,*
*Мөхәббәтем — йән ҡошом?*

## Тынғыһыҙ урманым

*Шауланың, мөхәббәт урманым,*
*Ниндәй наҙ-моңдарға уралдың?*
*Бар донъям уянды һиҫкәнеп,*
*Күңелем тынлығын урланың.*

*Тынғыһыҙ мөхәббәт урманым,*
*Әллә мин, әллә һин һуңланың?!*
*Күтәрҙең япраҡтар буранын.*
*Яҙмыштар ҡауышыр яр бармы?*

*Ота алмам уртаҡ моңдарҙы,*
*Ҡаршылайым яңғыҙ таңдарҙы.*
*Тынғыһыҙ мөхәббәт урманым,*
*Әллә һин, әллә мин һуңланым?!*

## Йәшлеккә юл бармы?

*Йылдарҙың киткәнен һиҙмәнем,*
*Сәсемә һарылған ҡарҙары.*
*Тауҙарға менептәр ҡараным:*
*Йәшлеккә барырға юл бармы?*

*Тойғонан тулышҡан йәшлекте*
*Үткәндәр ҡайҙарға йәшерҙе?*
*Бер тапҡыр үрелеп күрһәмсе*
*Юлдарҙа аҙашҡан йәшлекте.*

*Тауҙарҙы күсереп ҡуйһаң да,*
*Туҡтатып булмай шул йылдарҙы.*
*Диңгеҙҙәр кисергә әҙермен:*
*Йәшлеккә барырға юл бармы?*

*Нисек һуң яңынан сорнарға*
*Үтелгән, һүтелгән юлдарҙы?*
*Күктәргә менергә юлдар бар,*
*Йәшлеккә барырға юл бармы?*



**Гөлназ**
**ҠОТОЕВА-ҒӘЙНУЛЛИНА**

# БӘХЕТЛЕМЕН!

## *Йылыға йылышыу*

*Эҙләйем йылы йән,*
*Йылылыҡ —*
*Эйәреп китергә артынан.*
*Йығылып киткәндә*
*Ҡул бирер,*
*Төҙәйтер,*
*Мин ситкә тартылһам.*

*Мин йылы булырға теләйем.*
*Тик артһын ул йылы —*
*Алғандан.*
*Эҙләйем йылы йән,*
*Ышығын.*
*Күшеккәс,*
*Ҡанатым талғандан.*

*Мин яҡын булырға теләйем, —*
*Йомарлам ҡар ирей усымда.*
*Тәҙрәлә былт һүнде уттары,*
*Йоҡлаға йыйынған дуҫым да*

---

*Гөлназ Ҡотоева-Ғәйнуллина (1974) Әбйәлил районы Ишҡол ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Башҡортостандың Шәйехзада Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты, филология фәндәре кандидаты. «Ағиҙел» журналының яуаплы секретары.*

*Бер вакыт сыкканмы*
*Урамға,*
*Сыҙамай ярһыуын баҫырға?*
*Баҙмай ҙа торғанмы*
*Аптырап*
*Минең дә ишегем асырға?*
*...Йомарлам кар ирей усымда,*
*Йокоға талғандыр дуҫым да...*
*Йөрәгең нимәгә һыҙлай, тип,*
*Һыуыкта туңырһың, кыҙыкай, тип,*
*Бер кем дә өҙөлмәй каршымда.*

## *Бәхеткә юл*

*Кыйырсык Ай –*
*Затлы мөгөҙ.*
*Алтынданмы, көмөштән?*
*Мин мәхрүм ителмәгәнмен*
*Бәхет тигән өлөштән!*

*Кыйырсык Ай –*
*Алтын урак.*
*Үҙем сәскәнде урам.*
*Алтын бойҙай бөртөгөмө,*
*Ташмы тултырған курам?*

*Кыйырсык Ай –*
*Затлы билдә.*
*Һил.*
*Тигеҙ тын алышым.*
*Аклы-каралы көндәрҙе*
*Йәйғорлоға алыштым.*

*Кыйырсык Ай –*
*Затлы тарак.*
*Толомома каҙаным.*
*Яңы көндөң нурын асты*
*Көмөш сыңлы аҙаның.*

*Кыйырсык Ай –*
*Бәхетемдең*
*Затлы, татлы билдәһе.*
*Күктә айҙы тойған мәл дә –*
*Һил тормош ул илдәге.*

*Ай капкаһын астым инде,*
*Ята ялтлап нурҙан юл.*
*Кыйырсык Ай,*

*Балҡы шулай,*
*Көттөрмәй бәхеткә тул!*

## *Мәл*

*Күҙҙәремде йомоп тойоп ятам*
*Шишмә шылтырауын,*
*Ҡояш ялтырауын,*
*Ҡоштар сырҡылдауын,*
*Үлән ҡалтырауын,*
*Болот ҡабарыуын,*
*Йөҙөң ағарыуын.*

*Керҙәр кипмәй ҡала,*
*Тынмай илай бала.*
*Ишек шығырлауы, –*
*Аҡсарлаҡтар яуы.*

*Етеп килә яуын.*

*Ҡыуа, өйгә ҡыуа,*
*Баҫа ҡараңғылыҡ.*
*Һыуыҡ өй эсендә,*
*Шыптыр-шыптыр ямғыр...*

*Йоҡо баҫа өйҙө.*
*Тышта бейей – ямғыр.*
*Ошо тантанала*
*Тик тороуы ауыр.*

*Эҙҙәр яһап уҙам,*
*Ҡулдарымды һуҙам, –*
*Болот, мине алсы,*
*Сәсем һиндәй туҙған.*

*Йәшен!*
*Былт яҡтылыҡ.*
*Атты күккә төбәп.*
*Мин кем бынан ары?*
*Тоям күктә – көбәк.*

*Бөгөн*
*Йә иртәгә?*
*Бәлки, йөҙ йыл (?) үтер?*
*Ғүмер тигән беҙҙән*
*Шаулап үтеп китер.*

## *Вакыт – тар*

*Ваҡыттар – аяуһыҙ.*
*Эткеләй, төрткөләй.*
*Бер бөтөн йәндәрҙе*
*Ете ят иткеләй.*

*Ваҡыттар – аяуһыҙ.*
*Онота, оттора.*
*Түҙгәнде ярата,*
*Түҙгәнгә тоттора –*
*Бәхетен, көткәнен.*
*Өмөтөн.*
*Үткәнен –*
*Һабаҡ тип йоттора.*
*Мәңгегә хәтерҙә*
*Йәшәгәндә – Ерҙә.*
*Туҡтамай ул бер ҙә.*
*Саба ла саба*
*Ҡайҙалыр табан?*
*Офоҡҡа елдерә.*
*Ҡемделер бөлдөрә.*
*Ҡемделер күтәрә.*
*Ҡемгәлер үтергә,*
*Йомъағын һүтергә*
*Саба, эх, ваҡыттар...*

## *Йәтеш*

*Мөлдөр генә күҙең*
*Миңә йәтеш –*
*Наҙың, яҙың саъыла, һис алдатмай.*
*Был ҡулдарың,*
*Был сәстәрең –*
*Йәтеш.*
*Аяҡтарың –*
*Миңә табан атлай.*

*Көңөлгенәң йәтеш*
*Көңөлемә, –*
*Түгеләм дә,*
*Йыйып алсы, тием.*
*Йәтеш миңә һинең һәр бер һүҙең,*
*Минең «юҡ»ҡа*
*Тура килгән «эйе»ң.*

*Йәтеш миңә һинең керпектәрең*
*Иртән уянғанда дер-дер иткән.*
*Йәтеш миңә һинең күперҙәрең, —*
*Һыу өҫтөнән ҡоро атлап үтәм.*

*Йәтеш тибештәре йөрәгеңдең,*
*Дәртем арта, арта кеҫек көсөм.*
*Бер-беребеҙҙе Хоҙай яратҡандыр*
*Парлы итеп,*
*Бергә булһын өсөн.*

## Балҡыш

*Ғүмер таңым һинең балҡыуыңа*
*Тап килгән бит,*
*Гүзәл декабристка.*
*Ҡанатыңды йәйеп осор төҫлө*
*Төбәлгәнһең тәҙрә аша*
*Ҡышҡа.*

*Ни уйлаған икән ултырғанда*
*Ошо гөлдө*
*Әсәм миңә арнап?*
*Һыуыҡтарҙы ҡыуып,*
*Өй эсендә*
*Декабристка*
*Нығыталыр ҡанат.*

*...Быйыл гөлөм*
*Һуңлап сәскә атты.*
*Яҙҙар менән күкрәй.*
*Ана, күрсе?!*
*Бирешмәйһең әле ҡырауҙарға,*
*Гөлдәй сағың,*
*Тип өндәште күрше.*

*Бирешмәйбеҙ әле һынауҙарға.*
*Ҡыштар үткәс,*
*Килер яҙҙарым бар.*
*Уфылдашып көрт тауҙары ауа, —*
*Ямғыр ҡатыш яуа тышта*
*Аҡ ҡар.*
*Ғүмер таңым һинең балҡыуыңа*
*Тап килгәнгә*
*Алам һинән өлгө.*

*Декабристка*
*Алһыу тажы аша*
*Төбәгәндәй ҡышҡа*
*Зәһәр һөңгө, —*
*Балҡыуҙары менән арбай йәнде,*
*Балҡыуҙары менән әсир итә.*

*Балҡыуҙарым менән бәхетлемен,*
*Йылмайыуҙан башлана һәр иртәм.*

## Мәғәнә

*Яҡтылыҡ бар*
*Йә юҡ —*
*Ҡараңғылыҡ.*
*Йылылыҡ бар йә юҡ.*
*Һалҡын донъя.*
*Ҡараңғы ғаләм уртаһында йә ситендә*
*Ер*
*Һәм*
*Әҙәм.*
*Яҙмыш. Уҙмыш.*
*Тарих.*
*... Һәм мин.*
*Их!!!*
*Саңға хәтлем бәләкәймәй,*
*Үҙем булып;*
*Айырым бер күҙең булып.*
*Нурың булып.*
*Изгелеккә ҡурың булып*
*Йәшәргә ине лә!*
*Ҡәҙерен белеп,*
*Нәҙерен белеп.*
*Теге донъяға лайыҡлы күсергә*
*Әҙерен белеп*
*Йәшәргә ине лә*
*Йәшәргә ине!*
*Әжерен биреп...*

## Яҙ өлөшө

*Яҙғы көн һайрай тупһала,*
*Сыйырсыҡ моңон түгеп.*
*Ҡыштан йонсоно кешеләр.*
*Бикле тороуҙан бүгеп,*
*Баҡырышты мал-тыуар ҙа —*
*Уларға аҙыҡ наҡыҫ.*
*Ҡитә алмай инде йонсой*

*Елеккә үткән был ҡыш.*
*Яҙғы көн һайрай тупһала —*
*Үлән шыталыр инде.*
*Яланда, ҡарҙарҙы тишеп,*
*Умырзая күренде.*
*Тау ҡарҙан әрселеү менән*
*Түҙмәй йөрәк, ашҡына.*
*Зәңгәр киңлекте ҡосорға,*
*Менергә тау башына.*
*Бәхеттән нишләргә белмәй*
*Торорға хайран ҡалып.*
*Һөрәнләргә.*
*Шаңдау китһен,*
*Төшһөн ҡойолоп ҡалып, —*
*Яңырыуым яҙҙарҙа бит.*
*Һайрайым, осам, ҡунам.*
*Үҙемде ошо миҙгелдең*
*Өлөшө итеп тоям.*

* * *

*Йырылды гөрләүек,*
*Йырылды.*
*Яҙ, һиңә арнаған*
*Йырымды*
*Йырларға йүгерҙе*
*Алыҫҡа.*
*Йылғала йәшәгән*
*Балыҡҡа.*

*Йырылдым.*
*Мин үҙем — гөрләүек.*
*Йырымда —*
*Зәп-зәңгәр бейек күк.*
*Баҫыуҙар — елдәргә тулҡынған,*
*Тарихты һөйләгән сал ҡылған.*
*Әйтерем — тәғәйен халыҡҡа.*
*Һал һыуға,*
*Белһен шул балыҡ та.*

* * *

*Иҫеңдәме теге исемһеҙ хат?*
*Мин, мин яҙҙым уны,*
*Сара тапмай...*
*Ни яҙғаным хатта онотолған,*
*Тик хәтерем һаман шуны һаҡлай.*
*Мин аңламай инем үҙемде лә,*
*Ниндәй хис ул,*

*Һинән нимә көтәм?*
*Яҡын килһәң — ҡасам.*
*Ғазапланам.*
*Күренмәһәң,*
*Төштә илап бөтәм.*
*Иҫеңдәме теге исемһеҙ хат?*
*Мин, мин яҙҙым уны, аңларһың, тип...*
*Осто, осто хатым йыраҡтарға,*
*Берекмәне беҙҙең аралар тик.*
*Иҫеңдәме теге исемһеҙ хат,*
*Күҙ алдыңа кем килгәндер, бер — сер.*
*Ул мин инем.*
*Хәҙер, йылдар үткәс,*
*Яҙам шуны ғына:*
*«Мине кисер!»*

## Бәхет

*Бәхет юлы ҡылдан нескә,*
*Нәфис,*
*Тотһаң, ыуала.*
*Донъяла мин бармын, тигән*
*Уйҙан күңел ҡыуана.*

*Йөрәгемде телеп үтә*
*Бер минутта нисә хис.*
*Минең хәсрәтле булыуым*
*Ҡамасау түгелдер һис —*
*Көттөрөп килгән бәхеткә,*
*Өмөткә тулышыуға.*
*Монарҙай ғына алдатҡыс,*
*Ебәктәй генә шыма.*
*Тоттом,*
*Бәхетлемен, тиһәң,*
*Һиҙҙермәй ҡулдан шыуа.*

*Бәхет ғүмере — ҡылдан ҡыҫҡа,*
*Уға тиҙ күнегелә.*
*Тик юғалтыу ҡурҡынысын*
*Тойғанда һиңә килә —*
*Бәхет тәме,*
*Бәхет йәме.*
*Нурлана күңел ҡоттан.*
*...Монарҙай ғына алдатҡыс,*
*Ыуала ҡулда, тотһаң.*

# Сәсмә әҫәрҙәр

## АВТОРҘАН КӘЛИМӘ



*Үткән быуаттың 90-сы йылдарында миңә бер нисә тапҡыр Ҡурған өлкәһендә, өлкә архивында, булырға тура килде. «Совет Башҡортостаны» гәзитенең өс һанында «Ҡан ҡәрҙәштәр төйәге» тигән күләмле сәйәхәтнамәм дә донъя күрҙе. Ошо сәфәр мәлендә хан ҡыҙы, Хан ҡурғаны (ҡорғаны) тураһында ишеткән легенда күңелемә уйылды... Ул ҡыҫҡа ғына: «Тубыл буйында борон Ҡадир хан йәшәгән, уның тел менән әйтеп биргеһеҙ матур ҡыҙы булған. Ул йәп-йәш кенә көйө әхирәткә күскән. Атаһы оло ҡәҙер менән ҡыҙын ер ҡуйынына биргән. Боронғо йола буйынса алтын-көмөштәрен, гәүһәрҙәрен дә эргәһенә һалып, ҙур ҡурған өйҙөргән. Һуңынан шул урында Ҡурған ҡалаһы барлыҡҡа килгән...»*

*...Шуға ла иғтибар итегеҙ: борон ҡанбабаларыбыҙ Ирәмәлдә «илаһтар ғүмер иткәнгә» инанған һәм уны изге тау һанаған. Был хаҡта миңә Иҙел башында йәшәгән ҡәрҙәштәребеҙ ҙә, тыуған яҡты өйрәнеүсе А. И. Дмитриев та һөйләне. Ошо мәғлүмәттәр, телгә алған легенда, халыҡ ижады нигеҙендә «Хан ҡыҙы» тигән мөхәббәт ҡиссаһы тыуҙы ла инде. Унда йәр һайлауға бәйле ҡатын-ҡыҙ һылыулығы, ир-егет идеалы, йәнә атын белеү, танышыу, арбау, һөйөү белдереү, һынау, ризалыҡ алыу кеүек йолалар, ғаилә ҡиммәттәре лә сағыла. Минеңсә, улар хәҙер ҙә әһәмиәтен юғалтмаған.*

Сәлимйән
БӘҘРЕТДИНОВ

# ХАН ҠЫҘЫ

## ҠИССА

Боронғо, бик боронғо дәүер ине. Ер-һыу шундай саф, шундай хозур, мөһабәт, әҙәм ҡулы теймәгән йәменә. Болот кеүек тауҙарын алыҫта, уй ғына етер алыҫта ҡалдырып, дала буйлап көнтыуышҡа ҡарай бер егет елә. Толпарын һыулатып, утлатып ала ла йәнә ҡоштай оса. Толпары аҡбуҙ тоҡомо – еңел, текә тояҡлы, оҙон бәкәлле, ҡуян ботло, тар бөйөрлө, ҡарсыға түшле, бөркөт ҡабаҡлы, ҡамыш ҡолаҡлы, ҡыҫыр йылан тамаҡлы, ас яңаҡлы, соңҡа эйәкле, ҡымты иренле, киң танаулы, баҡыр күҙле, ҡырас яллы, ҡалҡыу мундаллы, ҡуш урайлы, суртан һыртлы...

Иҫертерлек хуш еҫле туғайҙарҙа йылҡы сыңрай, һыйырҙар мөңрәй, буғалар үкерә, ҡуй-һарыҡ ҡуңрай. Һунарсыларҙы, балыҡсыларҙы тап итеп, уларҙан ниндәй ер-һыу, ырыу икәнен белешә, тирмәләрҙә туҡтап, хужаларына сәләм биреп иҫәнләшә, һаба-һаба ҡымыҙ һемерә, йәнтөйәгенең ҡурайынан һағышлы моңон бөркә лә тағы ыласындай талпына егет. Төшөндә күргән иҫ киткес һылыу ҡыҙ, ул ғүмер иткән Тубыл буйы алҡындыра уны. Унда ашҡынһа-елкенһә лә, егет йәмлеләрҙән йәмле Уралын, ҡәүеменә ата ла, инә лә булған Уралын уйлай...

* * *

Армыт-армыт тауҙар иле, уралып ятҡан Уралтау – Ер билғауы, Таш Билғау. Ғәжәйеп хозур, илаһи, иҫ киткес бай, хөр төйәк. Ата-бабам бары ла быуын-быуын торған ил. Бында – ҡарағас, ҡарағай, шыршы, имән, ҡайын, йүкә, уҫаҡ, саған, ерек... Бында – айыу, бүре, төлкө, аҫ, бурһыҡ, һыуһар, әлгәнйәк, кеш, һеләүһен, ҡуян, тейен, янут, шәшке, ҡама, көҙән, йофар, йәтсә, болан, мышы, ҡоралай... Бында – бөркөт, шоңҡар, ҡыйғыр, ҡарсыға, аҡҡош, ҡарағош, ябалаҡ, һупайҙы, тумыртҡа, кәкүк, һандуғас, ҡарлуғас, күгәрсен, сәпсек, торна, ҡауҙы, бүҙәнә, һуйыр, ҡор, сел, тартай, сөрәгәй...

Бында йәмғеһе лә йөп-йөһөн донъя көтә: солоҡтарҙан батман-батман кәрәҙле бал, туғайынан еләк-емеш, көртмәле, имгә үлән, сәскә йыя; мышы, ҡоралай, ҡуян, һуйыр, ҡорона һунар итә, ыласын сөйә; йылҡы, тана-торпо, ҡуй баға; ағытмай бейә һауып, һаба тултырып ҡымыҙ бешә, ҡаймаҡ яҙып, май таҫҡый, эркет ҡайната, ҡорот йомарлай, ҡаҙылыҡ тултыра, ит ҡаҡлай; танһыҡҡа ҡарағай, ҡарағас һағыҙы сәйнәй, ҡайын һыуы эсә; ҡаҡы, ҡуҙғалаҡ, йыуа, ҡымыҙлыҡ, балтырған ашай; кейем-һалым таярлай; һаҙаҡ һуға, уҡ юна...

Йәмлеләрҙән-йәмле Ер Билғауының бейек түбәһендә тирә-яҡты байҡап,

---

*Сәлимйән Бәҙретдинов (1950) Ҡыйғы районының Иҙрис ауылында тыуған, Башҡорт дәүләт университетын тамамлай. Яҙыусылар союзы ағзаһы, филология фәндәре кандидаты. «Ватандаш» журналы редакцияһында эшләй.*

баймандан байман донъяға һоҡланып, аталы-уллы ир-уҙаман менән ир-егет баҫып тора. Ер Билғауына һоҡланып, ир-уҙаман һамаҡлай:

*Иҙел башы – Ирәмәл тау,*
*Яйыҡ башы – Ялпан тау,*
*Әйҙең башы – Һары һаҙ,*
*Уйҙың башы – Ҡара таш,*
*Мейәс башы – Күмәс тау.*

– Улым, – тине ата. – Беҙҙең ҡәүем тап ошо Иҙел, Яйыҡ, Әй, Йүрүҙән, Мейәс баш алған ерҙәрҙә түл йәйә, ҡәрҙәштәребеҙ Уй, Тубыл далаларында ла ғүмер һөрә. Ҡанбабабыҙ Бәкәтун, уның улы Әйле, нәҫел-нәсәбе иһә Мейәс буйында хушлана. Бөтә башҡорт төйәк иткән, донъя көткән Урал – йәннәт ер, Тәңре яратҡан һыуалыш ер. Тәүтөйәк, йәнтөйәк тураһында аң беҙгә нәҫелдән нәҫелгә ҡан менән генә түгел, йән менән дә бирелә. Йән бер нәмәне лә онотмай, йән – үлемһеҙ.

– Тәнем бөтһә, минең йәнем дә йәнтөйәгемде иҫләрме?

– Иҫләр, улым. Йәндең һис ҡасан һушы юғалмай, тиҙәр.

– Әллә шуға мине Нурйән тип атаныңмы, атам?

– Тәңре ҡөҙрәте менән һәр бәндәгә лә нур бирелгән, кемгә аҙыраҡ, кемгә күберәк. Ул һиндә башҡаларҙан яҡтыраҡ, сағыуыраҡ. Бәлки, һин Ирәмәлдә йәшен йәшнәгәндә тыуғанғалыр. Ошо илаһи нур тылсымы менән ҡәрҙәштәреңдән көслөрәкһең, етеҙерәкһең, мәргәнерәкһең. Әммә ҡайһы берәүҙәр нурлыларҙан көнләшә, уларға яманлыҡ ҡыла. Абай бул, улым.

– Атам, шунда донъяға килгәнгәме, күңелемде гелән Ирәмәл тарта. Инде аҙна буйы ныҡлап саҡыра кеүек.

– Ирәмәл – изге тау, Нурйән. Донъябыҙҙағы, көнитмешебеҙҙәге бөтә хәл-күренештәрҙе ҡәүемебеҙ әүәл-әүәлдән алыҫтарҙан ағарып күренгән ошо илаһи тау менән бәйләй. Әгәр яҙын Ирәмәлдең түбәһен болоттар солғаһа, йәшен утлы ҡамсыларын һелтәһә, тирә-йүнгә тере һыуҙай йылы ямғырҙар яуасаҡ, һутлы үлән күтәреләсәк. Әгәр көҙөн Ирәмәлде туҙған һоро болоттар ураһа, сыуаҡ көндәр бөтөп, йонсоу киләсәк, шунан һалҡын төшәсәк... Былар барыһы ла күккә ашҡан Ирәмәлдә тереклек иткән илаһтар эше. Һыу илаһы шишмәләр урғылдыра, йылғалар ағыҙа, әҙәмдәргә лә, мал-тыуарға ла таҙа эсәр һыу бирә, болондарҙы һуғара, һыу көҫәгән уйҙарҙы бөтөрә. Көн менән Төн илаһтары ла Ирәмәлдә тора, шунда күҙҙәрен аса, йома. Йәшен илаһы ут уйнатып, ғәйрәтен сәсә. Яҙ, Йәй, Көҙ, Ҡыш илаһтары ла ҡеүәтле: йәшелләндерәләр, ризыҡ бирәләр, донъяны төрлө төҫкә керетәләр... Улар асыуланһа, ҡар, ямғыр яумай, үлән үҫмәй, ер кибә, мал үлә, һыуыҡтар ҡатыра, әҙәм асыға... Асыуҙарын ҡуҙғатмау өсөн бөтә тереклеккә, үҫемлеккә гелән шәфҡәт ит, яҡшылыҡ ҡыл, ваҡ һорауҙар менән борсома, илаһтарҙың тыныслығын үә торағын һаҡла. Шуға ла Ирәмәл урмандарында һис кем һунар итмәй, олатайҙарҙың рөхсәтенән башҡа бер кем тауға күтәрелмәй. Илаһтарға баш эйергә, уларҙы ололарға билдәле һуҡмаҡтар буйлап изгеләргә генә барырға ярай. Һиңә лә мөмкиндер. Бәләкәйҙән ишетеп беләһең, Ирәмәл – ерҙең кендеге. Унда Күк менән Ер бәйләнештә, тиҙәр. Изге ҡанбабалар, әүлиәләр ҙә шунда ерләнгән.

– Күңелемә шом һалдың әле, атам. Барырғамы, юҡмы инде, икеләнәм.

– Тәңре тәҡдиренән уҙмыш юҡ, улым. Ир әмәле – Ирәмәлдә...

Нурйән Ирәмәлгә көнтыуыш тарафтан күтәрелде. Бер артылыштан икенсеһенә,

өсөнсөһөнә, дүртенсеһенә артылды, ҡаршылыҡҡа осраманы. Артылыштарҙан алыҫҡа бағып, оҙон-оҙаҡ тиҫтәләгән күкһел тау һырттарына, урмандарға, сағылдарға, күлдәргә һоҡланды. Илаһтар* торағы айырыуса йәмле, мөғжизәле икән. Тора-бара Көн илаһы күҙҙәрен йомдо. Нурйән ҡояшта ҡыҙған ҙур таштар ҡыуышына шайтан ҡасырыр артыш түшәп, йоҡоға талды. Төн уртаһында төшөндә ғәжәп һын – хур ҡыҙы пәйҙә булды һәм йөҙө алһыуланып өндәште:

– Эй, Нур егет! Буй еткәнсе юҡ ине күңел тартҡаным. Тәңре рәхмәте менән йәнемә керҙе йәнең. Инде мин һине, егетем, күрер, һөйөр-һөйөлөр өсөн янамын.

– Кем һин мине йәр күргән, һылыуҙарҙан да һылыу? Күҙ атыуҙан хайран иттең, сихырланың, арбаның...

– Хан ҡыҙымын, Нургөлмөн. Мәйелең төшһә, кил эҙләп. Кергәс йәнең йәнемә, көн-төн зарығып көтөрмөн. Оҙаҡлаһаң, килмәһәң, һыуһыҙ гөлдәй һулырмын. Һин һиҙәһеңдер, Нурым, йәре юҡтың йәне лә юҡ.

– Ай, Гөләм, Нургөләм, ҡуҙғыттың бит күңелем. Ҡайҙан һине эҙләйем? Тыуған-үҫкән ерең әйт?

– Толпар атҡа менерһең, көнтыуышҡа елерһең. Аҙаштырмаҫ һине күңел нурым, Тубыл буйы Алғыярҙа мине эҙләп табырһың...

Нурйән, ғүмерҙә лә күрмәгән-белмәгән аҫылдарҙан-аҫыл ҡош тотҡандай, ашҡынып ҡайтып, атаһына һалды хәбәрен:

– Ирәмәл йәремде күрһәтергә әйҙәгән икән үҙенә. Таш ҡыуышында ҡунғанда, Тубыл һылыуын күрҙем төшөмдә. Хан ҡыҙы Нургөл икән. Тәү ҡараштан уҡ берберебеҙгә тартылды йәнебеҙ. Бер көнгә лә һуңламай уны эҙләр уйым бар. Ул көтә мине тилмереп. Килмәй ҡуйһаң, һыуһыҙ гөлдәй һулырмын, ти. Арманым ыласындай, атам. Дәртем дә, дарманым да таша Нургөләмдө табырға. Ризалыҡ бир, атам... Толпарымды менеп, әле үк юлға сығам.

– Мәгәр юл аҙабы ғына түгел, әҙәм яманы ла күп булыр, балам.

– Хаҡ яҙғанын күрермен. Йәнемдән артыҡ миңә Нургөләм. Йәнем ҡорбан ҡылырға лә әҙермен уның өсөн. Ҡайталмаһам, исемем урап ҡайтыр, атам.

– Ихтыярың, улым. Уралыңа тап төшөрмә, батыр бул, ырыуыңа, башҡортоңа тоғро бул! Кәрәгеңә үҙ уҡ-һаҙағымды бирәм һиңә. Аман йөрө... Аҡ юл...

* * *

Егет хәтһеҙ ер үтеп, Тубылға, Ҡадир хандың алыҫтарға йәйелеп ятҡан биләмәләренә, йәйләүҙәренә яҡынланы. Ҡарағай ҙа, ҡайын да, уҫаҡ та күп бында. Нәҡ Нурйәндең йәнтөйәгендәге кеүек. Тубылдың һул яҡ яры буйлап тирә-йүнгә мөһәбәтлек биреп торған һоҡланғыс ҡарағайлыҡ һуҙыла. Урман араһында, туғайҙарында һөтимәр кейектәр – һомғол ҡоралайҙар, йәғни илектәр. Әйтерһең, Илек урманы. Уның ҡуйынынан, ҡомло йырҙанан, гәлсәр кеүек саф һыу алҡынып аға. Ярында – муйыл, миләш, дунала, ҡурай еләге, ҡарағат, балан... Беҙҙең Ыҡ йылғаһы кеүек, тип уйланы Нурйән. Атам дөрөҫ әйткән икән Тубыл буйында ла беҙҙең ҡәрҙәштәр йәшәй, тау, урман, һыу исемдәре лә бер үк тип.

Шишмәләрҙән, Ыҡтан бер көтөү илек, мышы һыу эсә. Ҡапыл баш осонда ниҙер йылп итеп ҡалғандай тойолдо. Егет өҫкә ҡараны: тейендәр ботаҡтан ботаҡҡа ырғый, һикерә икән... Ғәжәп йәмле һәм йәнле донъяға хайран ҡалып, атын атлатып ҡына барҙы ла барҙы Нурйән. Уның Уралы, йәнтөйәге кеүек күркәм, ниғмәтле ер! Көртмәлеһе, мүк еләге тулып ята. Уралда ла, бында ла

**Илаһтар — тәбиғәт, донъя менән идара иткән юғары заттар.*

тәндәрҙе иләҫләтер һалҡын шишмәләр, ботаҡтарына һыйыша алмаған емеш, сәскәләргә ҡунып һут һурған, алтын кәрәҙҙәрен тултырған бал ҡорттары, бал, тип ҡарағайға үрмәләгән, солоҡтарға тәпәйҙәрен тыҡҡан айыу-һайыу… Иҙелдә, Әйҙә, Ирәмәлдә лә шулай.

Бара торғас, Нурйән һаҙамыҡлы күлдәр төйәгенә килеп сыҡты. Күлдәр мөлдөрәмә тулы ҡоштабаҡ, тәгәс һымаҡ, йылымыс һыуҙары йәм-йәшел сиҙәмде сайҡап ята. Һыу баҫар туғайҙарҙа татырлауыҡ, ҡурйын үләне күҙгә салына. Һаҙ ҡошо һаралйын, һәр төрлө эреле-ваҡлы үрҙәк биҙәр биҙәктәй күлдәрҙе биҙәй. Затлы тиреле һор һыуһар һымаҡ аҫтарҙы шәйләп, Нурйән моңланды:

*Һыу буйҡайҙарында һыуһар күп,*
*Ҡойроҡтары уның йопар күк…*

Балыҡ иһә хәс тә иләүҙә мәж килгән ҡырмыҫҡалай. Нурйән эйәрҙәге артмағынан ҡылдауын алып тал таяҡҡа бәйләне һәм һаҡ ҡына ынтылып, ҡуҙғалмай ятҡан сурағайға баш яғынан кейҙереп, йылт итеп тартып та алды. Эсен таҙартып, уны ҡояшта табалай ҡыҙған яҫы ташҡа һалып ҡурҙы ла ҡарһаланмай ғына туйынды.

Бына ниндәй икән Тубыл тарафы! Болондарҙа иҫәпһеҙ-һанһыҙ йылҡы юшай, айыры тояҡ мал утлай. Ҡайҙа баҡма – йәйләүҙәре йәйелгән, киңлек, иркенлек, һиллек, рәхәтлек, муллыҡ… Ошо илаһи ерҙе төйәк иткән ҡәүем юҡлыҡты, етешһеҙлекте белмәй иге-сиге күренмәгән далала иркен һулап, иркен уйлап, көнитмешен байман итеп, имен-аман, имен-һау донъя көтәлер.

Һәр нәмәнең сите, барып бөткән ере була, тигәндәй, Нурйән оло һыуға яҡынланы. Артыҡ шәп тә, ныҡ талғын да түгел, уртаса ғына ағымлы, тулы һыулы Тубыл тирбәлә. Һул яры – бейек, уң яғы – сирәмле уйһыулыҡ. Ярҙарында – таллыҡ, туғайҙарында – ваҡ япраҡлы тубылғы. Бәлки, шуғалыр ҙа йылғаның исеме Тубылдыр.

Ярҙың һөҙәгерәк урынынан Нурйән Тубылға төштө һәм: “Эй, йәмле йылға! Зинһар өсөн йыуынырға рөхсәт ит“, – тип һораны. Тап-таҙа һыуҙа ҡойонғас, тәне сафланып китте. Аяҡтарҙы сайҡатып йөрөгәндә, һыу бер аҙ болғанды. Йылғаның төбө ҡыҙыл балсыҡлы икән. Арыуҙары йыуылып, ҡөҙрәтләнеп, Нурйән өҫкә күтәрелде һәм атын Тубыл буйлап әйҙәне. Алдағы ҡалҡыулыҡта уға нимә менәндер үҙенә әүрәтеп, ҡаратып торған бер ҡарт осраны. Ул Нурйәнгә күҙ йүгертеп, һынсыл ҡараш ташланы ла, һаҡалын һыпырып, яғымлы тауыш менән өндәште:

– Улым, алыҫтан юл тотҡанға оҡшайһың. Ҡай төйәктән, ҡай ҡәүемдән булаһың?

– Иҫәнме, быуай. Уралда, Әй башында төйәгем, башҡорт минең ҡәүемем, Бәкәтун нәҫелемен.

– Беҙҙең ҡәрҙәш икәнһең. Кемгә төбәп киләһең?

– Ирәмәлдә ҡунғанда төшөмдә бер ҡыҙ күргәйнем. Исемем Нургөл, тигәйне. Уны эҙләп еләмен.

– Улым, һин нәҡ шул ергә еткәнһең, Ҡадир хандың йәйләүенә имен аяҡ төрткәнһең. Нургөл тигәнең – хандың йөҙөк ҡашындай ҡыҙылыр. Иҫ китмәле һылыу ҙа, баҫҡан ерендә ут сығарыр сая ла, бысаҡ кеүек үткер ҙә, ауҙа беленгән мәргән дә. Ҡыҙ булһа ла тайшанмай, аҫау тотоп менә ала. Һәр тәңгәлдә бар ҡәүемде таң ҡалдыра, азаматтарҙың йөрәген яндыра. Кем генә һоратмаһын, ҡайһыһын да ишһенмәй. Бер-берегеҙ төштә күргәс, һине көтәлер, батыр. Йәйге миҙгел

йыйында бик тә мәлле килгәнһең. Аҙна көн Ҡадир хан уҙғара оло йыйын. Йола үтәп, батырҙарға ҡуйыла ошондай шарт: көрәштә, уҡ атышта, ҡырағай ат менештә кем дә кем ҡыҙҙы еңә, Нургөл шуныҡы була.

– Төшөндөм, быуай. Мәгәр Ҡадир хан, ҡыҙы Нургөл хаҡында әллә ни белмәйем. Һөйләгеҙ әле берүк, һорайым үтенеп. Яндарына бармайым һуҡыр кеүек.

– Ҡадир хан – бай хан. Һауыт-һабаһы ҡойолған көмөштән, ҡорал-ҡорамалдары яһалған алтындан. Бай ғына түгел, арыҫландай йөрәкле, бик тә таһыллы, ғәйрәтле. Бил бирмәҫ көрәшсе лә, мәргән атыусы, һунарсы ла. Йәндәй күргән ҡыҙын да бәғзе егеттәр кеүек ҡуш йөрәкле итеп үҫтерҙе. Улы булмағас, уны ике туған ағаһы менән бергә бәләкәйҙән һыбай йөрөргә, уҡ-һаҙаҡтан атырға өйрәтте, ат сабышынан, һунарҙан да ҡалдырманы. Исеме Нургөл булғанғамы, ул шундай йылдам, йылғыр, йүгән күрмәгән ҡонан-дүнәнгә менеп, ҡош һымаҡ оса. Батыр ҙа, матур ҙа. Бәйгеләрҙә быға са бер кемгә лә ал биргәне юҡ. Әммә, батыр, ҡыйыу, етеҙ булһа ла, Нургөл – ҡыҙ, инә нәҫел, ә һин ер ауырлығын күтәрерҙәй егет. Аттың яҡшыһы алға, егеттең яҡшыһы данға сыға. Мәрәйлектә – мәргәнлек ирке, мәргәнлектә – егетлек күрке.

– Аңлауымса, матур ҙа, батыр ҙа Нургөл менән фәҡәт батыр егет кенә ҡауышасаҡ?

– Ҡадир хан ҡулда ғәйрәт бөтмәһен, ырыуҙан ырыҫ китмәһен өсөн, ҡанбабалар һынағанса, нәҫелдә дауам итеүсе вариҫ батыр ирҙән тыуар ул, тип, ҡыҙын батырҙан ҡот йәйҙермәксе. Батыр инәнән һөт имгән улан да атаһы-инәһендәй батыр булыр ул, илгә терәк булыр ул, тип өмөтләнә.

– Рәхмәт, олуғ олатай. Мин – Урал нәҫеле, һынатмам.

– Ана, күрәмһең, егет, алда йәннәттәй ер – Алғыяр. Ошонда инде Ҡадир хан биләме, Нургөл һылыу тирмәһе.

– Рәхмәт, олуғ олатай! Йәнем ырыуым ҡошолай, буҙ шоңҡарҙай талпына, Нургөлөм, тип алҡына.

Һөйләшеп торған арала ниндәйҙер ғиллә менән әле генә салт аяҙ күктә ут ҡамсылары ялтланы, Сумған күле өҫтөндә күкһел-ҡара пәрҙә тартылды, әйтерһең, ниндәйҙер хәүеф үҙен һиҙҙерҙе. Бәлки, шик-шөбһә генәлер, тиктәҫкә тынысһыҙланыуҙыр...

– Хуш, бала, хуш, егет, – тип моңһоу ғына ҡарап ҡалды күңелен кинәт кенә шомло уй биләгән ҡарт. – Үтә лә һылыу ҡыҙ, бар зиһенеңде биләр йәр илекһетеп, илертеп, утҡа ла, һыуға ла төшөрә ул. Әҙәмдең яҙмышы, ғүмере, ни ҡылһаң да, күктә сыйылған.

* * *

Алғыярҙың Сумған күле өҫтөндә көтмәгәндә, уйламағанда пәйҙә булған өйөрмә өйөрөлөп, һыу йотҡандай, ҡапыл ғына бөтөп тә ҡуйҙы. Әллә булды ҡойон, әллә юҡ. Тәбиғәттәге кеүек әҙәм тормошона ла хас ошондай хәлдәр. Нурйән дә уттай ҡабынып, Алғыяр өҫтөндә тора.

Был тирәлә Тубыл йәйелеп аға. Бейек ярҙан ул тағы ла йәмлерәк күренә. Йәшеллек ҡуйынында аҡ тирмәләр, күк тирмәләр саҡырып, тартып тора. Береһе ниндәйҙер илаһи ҡөҙрәт менән үҙенә айырыуса ныҡ ымһындыра. Байып барған ҡояштан күк йөҙөнә ҡыҙыллыҡ яғылды. Шул саҡ атылып тирмәнән сыҡҡан ҡыҙҙы киске шәфәҡ нурҙары балҡытты.

– Нургөл... Нургөл... Мин төшөмдә күргән Нургөл, – тип Нурйән дә йән атты.

– Килгәнемдә әллә нескә йөрәге, хистәре менән тойҙомо икән?.. Тойғандыр... Уйҙар ғына етер арауыҡта бер-береһен төштәрендә күрҙеләр, хатта хәбәрләштеләр бит. Әле иһә Нурйән Нургөлдән күҙ күрер арала ғына. Яп-яҡын.

Йөҙөнә киске шәфәҡ нурҙары һирпелгән ҡыҙ күккә, толпары менән егет торған яҡҡа ҡарап торҙо ла йәнә эскә үтте. Ниҙәр тойоп, ниҙәр кисергәнен белһәм икән?.. Егет елкендә. Шәфәҡ батҡас, йөрьәт итеп, хан ҡыҙының тирмәһенә яҡынлашты.

*Егет:*

Хан ҡыҙы, ас тирмәң, мин керәйем,
Һинең сәсең ҡара, тиҙәр, мин күрәйем.

*Хан ҡыҙы:*

Минең сәсем күреп, һиңә ниҙәр файҙа,
Һатыусыла ҡара ебәк күрмәнеңме?

*Егет:*

Хан ҡыҙы, ас тирмәң, мин керәйем,
Һинең ҡашың ҡыйғас, тиҙәр, мин күрәйем.

*Хан ҡыҙы:*

Минең ҡашым күреп, һиңә ниҙәр файҙа,
Ҡарлуғастың ҡойроғон күрмәнеңме?

*Егет:*

Хан ҡыҙы, ас тирмәң, мин керәйем,
Һинең тешең ап-аҡ, тиҙәр, мин күрәйем.

*Хан ҡыҙы:*

Минең тешем күреп, һиңә ниҙәр файҙа,
Баҙарҙарҙа ап-аҡ ынйы күрмәнеңме?

*Егет:*

Хан ҡыҙы, ас тирмәң, мин керәйем,
Һинең буйың зифа, тиҙәр, мин күрәйем.

*Хан ҡыҙы:*

Минең буйым күреп, һиңә ниҙәр файҙа,
Күл буйында зифа ҡамыш күрмәнеңме?

*Егет:*

Хан ҡыҙы, ас тирмәң, мин керәйем,
Һинең йөҙөң нурлы, тиҙәр, мин күрәйем.

*Хан ҡыҙы:*

Минең йөҙөм күреп, һиңә ниҙәр файҙа,
Ҡара төндә тулған айҙы күрмәнеңме?
Йөрөмә, егет, йөрөмә, егет,
Минең атам бик тә усал. Белһә – тетер.

*Егет:*

Атайыңа алып бирәм алтын таяҡ,
Йөрөп ятыр баҡсаларҙа уйҙар уйлап.

*Хан ҡыҙы:*

Йөрөмә, егет, йөрөмә, егет,
Минең инәм бик тә уяу. Һиҙһә – әрнер.

*Егет:*

Инәйеңә алып бирәм алтын тараҡ,
Ул ултырыр һыу буйында сәсен тарап.

*Хан ҡыҙы:*

Йөрөмә, егет, йөрөмә, егет,
Минең ағам бик тә үткер. Күрһә – әрләр.

*Егет:*

Ағайыңа алып бирәм ҡара юрға,
Иртә таңдан сығып китер алыҫ юлға.

*Хан ҡыҙы:*

Йөрөмә, егет, йөрөмә, егет,
Минең еңгәм бик тә зирәк. Ишетһә – үртәр.

*Егет:*

Еңгәйеңә алып бирәм пар биҙерә,
Ул йүгерер таң һыуына шишмәләргә.

*Хан ҡыҙы:*

Йөрөмә, егет, йөрөмә, егет, килмә, егет,
Минең намыҫым хис-тойғоға бирмәҫ ирек.

*Егет:*

Килдем янып яндарыңа, һай, атлығып,
Зирәклегең һөйөүемә ҡуйҙы ҡанат.
Хан ҡыҙы, ас тирмәң, мин керәйем,
Төшөңдә күргән Нурйәнең мин.

Нургөл бер аҙ шымып торҙо ла, илгәҙәклек, ҡунаҡсыллыҡ күрһәтеп, бер туҫтаҡ ҡымыҙ һуҙҙы, шунан шишмә сылтырауындай наҙлы, серле тауыш менән әйтте:

– Нурйән, хан ҡыҙы тирмәһенә егет-еләнгә инергә ярамай. Иртәгә мин көн һайын яратып һыу ингән Сумған күленә кил. Шунда һөйләшербеҙ. Күл бынан төшкөлөккә ҡарай бер саҡрым арауыҡта ғына.

– Һине күргем килеп, зар булдым, өҙөлөп һағындым, Нургөләм.

– Мин дә һине көттөм, тилмереп көттөм. Түҙ, батырым...

...Кәкүк төнө, ҡыҫҡа булһа ла, ул Нурйәнгә бик оҙон тойолдо, күҙ алдынан хан ҡыҙы китмәне. Унын күҙҙәренә бағаһы, сәстәрен һыйпайһы, нескә билен ҡосаһы килде. Таң һыҙылып, ҡояш нурҙарын һибеп, күл буйы һандуғас моңона күмелде, егетте иләҫ хистәр менән биләне. Һыу суптырҙағанға, аҡҡош ҡойонамы, тип ҡараһа, һыуһылыуҙай һылыу һыу инә. Хан ҡыҙы... Нургөл... Шоморт ҡара сәстәре, ҡыйғас ҡара ҡаштары, ҡыуғалы Сумған күлендәй күгелйемкәй күҙҙәре, күпереп үк ҡалҡынған томбойоҡтай түштәре, атта уйнап сыныҡҡан, бал ҡортондай билдәре, ҡоралайҙай һомғол үҙкәйе... Телһеҙ ҡалды егет. Әммә иҫенә килеп, ҡурайын алды ла, ҡыҙҙың арбағыс һылыулығын моңға һалып, һыҙҙырып уйнап ебәрҙе. Нурйән йәндәрҙе иретер сихри тауышы менән йырлап та эйәгәс, хан ҡыҙын бөтөнләй әсир итте:

*Тубылғы ла ағас, ай, ҙур булмаҫ,*
*Тубылғы ла үтә юл булмаҫ.*
*Тубыл буйҡайында, ай, Нургөләм,*
*Һиндәй генә аҫыл гөл булмаҫ.*

Ҡыҙ егеттең ҡайнар һөйөүен ҡурай моңо, йыры менән дә белдереүен тәрән төшөнөп, һандуғастай өҙҙөрөп:

– Нурйән, – тине.

– Нургөләм, – тине Нурйән өҙөләп.

– Һин, ысынлап та, нурлы йән.

– Ә һин наҙлынан да наҙлы гөл. Һинән башҡа инде мин бер көн дә йәшәй алмам.

Йәндәре ҡауышыр өсөн бер-берeһен йөҙ йыл эҙләгәндәй һәм әле генә табышҡандай... Хистәр урғыла, хистәр таша... Йөрәктәр тоҡана, йөрәктәр ялҡынлана...

Нургөлдөң һөйөүе күктә осҡан ҡоштарҙан ireклерәк, серле айҙан серлерәк, фәрештәләрҙән килешлерәк, ҡояштан сағыуыраҡ, йондоҙҙарҙан нурлыраҡ, елдәрҙән еләҫерәк, сәскәләрҙән наҙлыраҡ... Күк ниндәй күркәм! Ер ниндәй йәмле! Һөйөү ниндәй һөйкөмлө! Мәгәр ҡауышыр өсөн танышыу, атын белеү, арбау, вәғәҙәләшеү генә түгел, һынау үтеү, ризалыҡ алыу ҙа бик кәрәк. Быны күҙ ҡараштарынан да тоя ине ҡыҙ менән егет.

– Нурйән, – тине Нургөл, – мине һоратып, тирә-яҡтан күпдин-күп яусылар килде. Килгән берен кире борҙом. Берҙән-бер ҡыҙы булғанға, бөтә байлығынан, данынан да мине артығыраҡ күргәнгә, атайым азаматтарҙы ҡайтарып тороуыма түҙҙе. Йәне ныҡ көйгән мәлдәрҙә лә әрләмәне. Әммә мине йәһәтерәк ишле итеп, туй яһап, ейәнен һөйөргә, уға тәрбиә ҡылырға ашыға. Шуға ла йән-яҡҡа сапҡындар ебәреп, йәш батырҙарҙы саҡырып: “Батырҙарҙың да батырына ҡыҙымды бирәм“, – тип оран һалды, йыйын йыйырға ҡарар ҡылды. Йола буйынса башҡа батырҙар менән бергә һин дә һынау тоторға, миңә лә һыр бирмәҫкә тейеш. Мин һине зарығып, килеп өлгөрһә генә ярар ине, тип өҙөлөп көттөм.

– Борсолма, Нургөләм. Быға са көрәштә бил биргәнем, керешемдән осҡан уҡ сәпкә теймәгән сағы юҡ. Ат сабышта ла алғырмын, – тине Нурйән әҫәрләнеп. – Һинең өсөн тау-урман күсерергә лә, ун ике башлы дейеүҙе еңергә лә, йәнемде бирергә лә әҙермен.

* * *

Алғыярҙың ҡалҡыулығында – кейеҙ үә тиреләрҙән ҡоролған тирмәләр, сатырҙар, ҡыуышлап ҡуйылған көймәләр. Ҡыҙ көҫәгән егеттәрҙең алышын, көрәшен ҡарарға, хан ҡыҙының кемдең хәләле булырын күрергә бал ҡорто күселәй халыҡ йыйылған. Майҙан гөж килә.

Нурйән түбәгә менеп баҫты ла, күкрәген киреп, Ирәмәлдәй ирәйеп: “Урал иленән һеҙгә моң сәләмем, бүләгем“, – тип ҡурайын тартып ебәрҙе. Йәнтөйәгенең мөғжизәле үҫентеһенән, үҙенең Янғантауҙай йөрәгенән урғылған моң тере һыуҙай тирә-яҡты йәмләндереп, шифалы ҡымыҙҙай күңелдәргә яғылды. Тубыл ағыуынан, ел иҫеүенән, ҡоштар һайрауынан туҡтағандай тойолдо. Күңеле йәйғорҙай балҡыған Нургөл ҡурайға ҡушылып йырлап ебәрҙе. Йәйһылыуҙай ҡыҙҙың ҡыр сәскәләрелəй наҙлы йөҙөн күреп, һандуғастай тауышын ишетеп, тамаша ҡылыусылар таң ҡалды. Нурйәндең ҡурай моңо, Нургөлдөң нурҙай йыры һәммәһен дә йөрәкһетте.

Шул саҡ егет менән ҡыҙға һаман да ғүмер сәме һүрелмәгән бер ҡортҡа яҡынланы ла: “Ниндәй моң! Ниндәй им! Берегеҙ берегеҙ өсөн тыуғандыр. Дан егет, хандың ҡыҙын алһана! Һин – хан, ул ханса булып, шыбырҙашып һөйҙәшеп,

шәрбәт эсеп, серҙәшеп, дәүран ғүмер һөрһәнә!“ – тип һамаҡланы. Был күренеш Нургөлдө көсәгән нуғай, ҡалмыҡ, ҡаҙаҡ батырҙарына һис кенә лә оҡшаманы.

Ҡояш өс арҡан самаһы күтәрелгәс, Ҡадир хан ҡәүеменең тыуы бәйләнгән ҡолғаны майҙан уртаһына сығарып ҡаҙанылар. “Йыйын! Йыйын!“ – тигән оран яңғырағас, олпат кәүҙәле Ҡадир хан тирмәһенән сығып, ҡалҡыу урынға аҡ келәм өҫтөнә ҡуйылған аҫыл биҙәкле урындығына ла ултырып тормайынса йыйынға өндәште:

– Ырыуҙаштарым, бауырҙаштарым! Төрлө тарафтарҙан килгән ҡунаҡтар, батырҙар! Тәңребеҙ ҡөҙрәте менән еребеҙ, йортобоҙ һил, имен булып, йола буйынса йыйын айының аҙна көнөндә йәнә оло ҡорға йыйылдыҡ. Ул шуның менән мәртәбәле – минең ҡыҙым үҙенә иш һайлай! Кем дә кем бөтә һынауҙы үтә, Нургөлдө уҙа, ул шуныҡы була.

...Башланды Нургөл өсөн алыш, нисек тә уны яулау өсөн көс һынаш, ярыш. Көрәш, уҡ атыш, сабыш, аттарҙа яҫҡыш, еңелеп, майҙандан сығыш... Ҡалды айбарланған батырҙарҙан дүрт батыр – башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ, нуғай. Башта – көрәш, тигәс, һайланмыштар бил бирмәй көрмәкләште, сиҙәм ерҙең ҡараһын әйләндереп бөттө, елкә тарамыштары бүртеп, шартлар сиккә етте. Ахыр килеп, нуғай менән ҡалмыҡтың быуындары йомшарып, әлһерәп-әлберәп хәлдәре бөткәс, башҡорт, ҡаҙаҡ уларҙы аяҡтан йыҡты. Бер аҙ ялға туҡтап, ҡымыҙ уртлап, тын алғас, инде башҡорт менән ҡаҙаҡ уртаға сыҡты. Нурйән Нургөлгә баҡты. Шул мәл ниндәйҙер тылсым менән тере һыу йотҡандай, йөрәгендә, тәнендә ҡөҙрәт артҡанын тойҙо һәм бар йыйынды аһ иттереп, уҙаҡташын күтәреп тә бырғыны. Ҡаҙаҡ балуаны уһылдап, ерҙән тора алмай ятты. Нурйәнде ҡеүәтләп, данлап, хуплау тауыштары яңғыраны.

– Һай, аҫыл башҡорт!

– Һай, мәрҙән!..

Йыйын башы ҡыҙ көсәүселәргә икенсе шартты иғлан итте:

– Кем дә кем балдаҡ, йәнә ҡурай аша уғын өс рәт сәпкә тейҙерә, шул уҡ атышта ал була. Башта – мин, аҙаҡтан һин атаң, тигән һүҙ көрәше булмаһын өсөн, тотошабыҙ шыбаға.

Бауҙы бер-бер артлы аялап тотоп, урынды билдәләнеләр. Нуғай оҫҡа сыҡты, көрәштә бәлтерәүҙәнме, ҡулдары ҡалтыранды. Уҡтары йөҙөк аша үтмәй, яҙа китте. Уҡсы, ҡыҙарып-бүҙарып, өнһөҙ ҡалды. Ҡаҙаҡтың иһә – бер, ҡалмыҡтың ике уғы йөҙөк аша сығып, сәпкә ҡаҙалды. Нурйән менән Нургөлдөң уктары балдаҡты ла, ҡурайҙы ла үтеп, сәптең нәҡ уртаһына тейҙе. Халыҡ шулай ҙа төҙ атыусыларға йәнә хайран ҡалды:

– Мәргәндәр! Бик үк мәргәндәр!

– Күҙҙәренең үткерлеген әйт әле.

– Мәргән күрке күҙ була шул.

Өсөнсө шарт-талап буйынса Ҡадир хандың иректә йөрөгән, әҙәм ҡулы теймәгән, ҡырағайланған йылҡы тыуын ҡыуып килтерҙеләр. Ҡор башы ығы-зығы, ҡыйҡыуҙы баҫырға тырышып, көр тауыш менән һөрән һалды:

– Эй, менгерҙәр! Баҙнат ҡылһағыҙ, теләгән арғымаҡты тотоп менегеҙ, таһыллылығыҙ һынағыҙ, Ыҡҡа табан сабығыҙ!

Егеттәр ҙә, Нургөл дә ужар сәсеп торған дыуамал тай байталдарға, ҡонан, тыу байталдарға күҙ һалдылар ҙа күңелдәре тартҡанына ҡороҡ ташланылар. Уңышһыҙлыҡтан миңрәүләнгән, һоллоғон юғалтҡан нуғайҙы сапсан ат тибеп тә осорҙо. Ул ҡабырғаһын тотоп, һыны ҡатып, ергә сүгәләнә. Ҡалғандар толпарҙарын

нуҡталап, тейендәй етеҙлек менән һырттарына һикереп менде. Бығаса йүгән күрмәгән дүнән-дүнәжендәр ажарлана, ужарлана, сапсый, тулай, өҫтәрен-дәгеләрҙе ырғытырға ярһығандан-ярһый. Үрәпсеп һикергәндә юғары сөйөлөп, ҡалмыҡ менән ҡаҙаҡ ергә ҡаҙалып барып төштө. Нурйән менән Нургөлдөң толпарҙары тыбырсынып йөрөнөләр ҙә, әйәләрен бырғый алмағас, ҡапыл ҡарғып, арт аяҡтарына үрә торҙолар, шунан алға ынтылып, күҙ алдында ел кеүек елгән, ҡош кеүек осҡан дөлдөлдәргә әйләнделәр.

– Хуп! Хуп! Хуп! – тигән тауыштар күккә олғашты.

Йөҙҙәр йылмайҙы, йөрәктәр шатланды. Нурйән менән Нургөл дә ифрат ныҡ ҡыуанышып, иркен һулыш алды. Күк тә, ер ҙә көләс. Туғайҙағы үләндәр сәскәләргә биҙәлгән, шомортлоҡтар, таллыҡтар һайрар ҡоштар менән тулған... Ҡыҙҙың алһыу йөҙөнә, нур һирпелгән күҙҙәренә ҡарап, Нурйәндең күңеле тағы ла көслөрәк елкенде:

– Нургөләм! Әллә төшөм, әллә өнөм... Йөрәгемде дөрләттең. Бары һинән йәм алам, бары һинән йәнләнәм. Һөйәм һине! Һөйәм! Һөйөүеңә йотолам...

– Ышанам, Нурйәнем! Йөрәгең аҡ, күңелең саф һинең. Мин дә тиң итәм һәм үҙеңә буй бирәм.

* * *

Ҡадир хан ғорур атлап йәнә аҡ балаҫҡа сығып баҫты. Ергә, күккә, ҡәүеменә ҡыуанып бағып, шулай тине:

– Әйткән һүҙем – атҡан уғым. Күҙ алмамдай ҡыҙымды үҙенә тиңгә, һынауҙа һынмаған уланға, Уралдан килгән Нурйән атлы егеткә, аҫыл башҡортҡа бирәм. Тубыл буйында уның кеүек ҡурайсының, йыраусының, көрәшсененең, мәргәндең, сабышсының булғаны юҡ ине. Ҡәрҙәштәрем, балдарым! Минең шатлыҡ – һеҙҙеке, һеҙҙең шатлыҡ – минеке. Шул айҡанлы уйын-көлкө, йыр-бейеү дауам итһен төн буйы. Йырсылар, көрәшселәр, уҡсылар, йүгеректәр... Ҡыҙым хөрмәтенә ярышың. Ҡаҙан-ҡаҙан аш бешкән йөҙ ҡуйҙан үә йылҡынан. Тәмләп ашап бөтөрөң, бергә табаҡташ булың. Рәхәт йәшәң еремдә, таҙалыҡта, байманда...

Халыҡ мәж килде. Дауам итте көрәш, уҙыш, уҡ атыш... Йырсылар йырын һуҙҙы. Һый башланды. Табаҡ-табаҡ ит туралды. Ҡорот, һаба-һаба ҡымыҙ, һурпа, йәнә көрәгә-көрәгә буҙа, тәпән-тәпән бал бирелде. Һәммәһе лә ҡалъя-ҡалъя өләш ҡапты, туҫтаҡ-туҫтаҡ ҡымыҙ, буҙа эсте. Ҡунаҡтарҙың, ҡәрҙәштәрҙең йөҙө айҙай, һүҙе балдай, күңеле майҙай...

* * *

Дүнән-дүнәжендәрҙән тибелеү-ҡолауҙары, бөтә йыйын ҡаршыһында хурлаҡҡа ҡалыуҙары, башҡорт батырынан еңелеүҙәре нуғай, ҡалмыҡ, ҡаҙаҡтың асыуҙарын ҡабартты. Хан ҡыҙының үҙҙәренә тәтемәүенә ҡара көнләшеү күҙҙәренә ҡан һауҙырҙы, йәрәхәтләнгән айыуҙай ҡан көҫәтте. Ҡаҙаҡ аҙарынып-ҡаҙарынып, ҡаш төйөп телдәрләнде:

– Истәк, хан ҡыҙына иш булып, тирә-яҡта данланып, бөтә ерҙә маҡталыр, беҙҙең атыбыҙ аҫ ҡалыр.

Ҡалмыҡ та йәне сыға яҙып ҡомһарылды:

– Үс алайыҡ! Үлтерәйек башҡортто!

Ҡобарған нуғайҙың да талағы ташты:

– Уға күңел бәйләгән хан ҡыҙын да атайыҡ. Бер кемгә лә булмаһын.

– Ҡайҙа? Ҡасан?

– Хан ҡыҙы иртән, төнөн Сумған күлендә һыу инә. Шунда боҫоп, аңдыйыҡ. Инде хәҙер килерҙәр истәк менән икәүләп.

Ярһыу хистәре асыу үә үс менән уҡмашҡан өс яман бошаланып ҡамыш араһына боҫто. Ҡараңғылыҡты сиктереп, ай балҡыны. Күп тә үтмәй ат бышҡырыуы ҡолаҡтарға салынды, ике һыбайлы күренде. Йәйге айлы төндөң хозурлығынан, ожмах һылыуылай һылыуҙың һөйөүенән иләҫләнеп, Нурйән ҡурайын тартып, йырлап ебәргәс, күл буйы сихри моңға мансылды:

*Күк дүнән дә толпар, ай, уйнайҙыр,*
*Теҙгенен тартһаң, буйлайҙыр.*
*Нургөлкәйем, үҙең күргәндә лә*
*Күңелкәйем һине уйлайҙыр.*

Бөтә донъя – йәм, иләм. Пар аҡҡоштар һымаҡ Нургөл менән Нурйән бер-беренә һарылды, йөҙҙә, сумды, һыу сәсрәтеп уйнаны. Өс иләмһеҙ ҡараҫҡы, шәүлә уларға бағып, иҫ-аңдары томаланып торҙо. Үҙ-ара шыбырлашып, нуғай уғын – ҡыҙға, ҡалмыҡ менән ҡаҙаҡ егеттең йөрәгенә тоҫҡаны. Был мәлдә ғашиҡтар һыуҙа күкрәктән килеш тулған айға һоҡланып ҡарап торалар ине. Шул саҡ өс уҡ, береһе аҙ ғына һуңғараҡ, зыйлап осто. Һуңғы тапҡыр йөрәге ҡабынған Нурйән:

– Хуш, Нургөләм, – тип кенә әйтә алды һәм, күл йотҡандай, һыу аҫты донъяһы алғандай, юҡ булды.

– Хуш... Йәндәребеҙ күктә табышыр...

Ҡан менән бергә ҡайнар хисе һарҡып, Нургөл ярға ынтылды... Бәлә килгәнен белгерткәндәй, ике дүнән һауаны яңғыратып кешнәне лә кешнәне.

Ҡапыл һауанан шомло сың тойоп, йөрәге ҡыҫылды Ҡадир хандың. “Балам, бәғерем“, – тип өҙгөләнде ата. Ай яҡтыһында ҡыҙының һыу инергә ятҡанын белгән, быға күнеккән хан, нөгәрҙәрен әйҙәп, Сумған күленә сапты. Ике дүнән һаман да яр һалып кешнәй. Һыуһылыуҙай Нургөл йәм-йәшел сирәмдә ҡанһырап ята. Ул, һүнеп барған күҙҙәрен асып: “Бәхил бул, атам“, – тип, йән дә бирҙе.

Ярһып сапҡан аттай, ҡыҙҙы хан, янды хан. Ҡасып өлгөрә алмаған, ҡоттары осҡан нуғай, ҡалмыҡ, ҡаҙаҡҡа һалдау һөңгөһөн күтәрҙе хан. Бәреп сәнсергә ынтылды ла, кире уйлап, бойорҙо:

– Ҡул-аяҡтарын бәйләп, йылан мыжғып торған Йылан соҡорона ырғытығыҙ! Былар, йәндәре ҡаралар – үҙҙәре лә йыландар.

Ҡеүәтле, көслө хандың тауышы ҡалтырай, дөм-ҡара сәсе далалағы сал ҡылған һымаҡ ине...

* * *

Ҡадир хан тарафынан бер саҡырым ерҙәге йәмле урында, урман аҡланында, ҡыҙын бик тә ҡәҙерләп, ҙурлап әхирәткә оҙатырға ҡарар ҡылды. Нургөл менән хушлашырға күрше ырыуҙарҙан ҡан ҡәрҙәштәр килде. Хан ҡыҙы күктән емелдәп торған Сулпан йондоҙ кеүек нурланып ята. Аҫыл таштар менән биҙәлгән, балҡып торған тажын, затлы кейемдәрен кейгән, ынйы муйынсаларын, алтын үә көмөш беләҙектәрен таҡҡан һылыу наҙланып ҡына торор ҙа Тубыл буйында быңаса күрелмәгән туй башланыр һымаҡ. Мәгәр хан ҡыҙы кәләш булып Уралға күсмәй, фани донъянан баҡый донъяға китә. Унда ла ҡыйынлыҡ күрмәһен, рәхәт йәшәһен, тип, ҡәрҙәштәре, ырыуҙаштары бүләктәр һалды.

Ир-уҙамандар ҡомло ерҙә уртаһы алты ҡуһай* тирәһе соҡор ҡаҙҙы. Уның эсенә сатыр-сотор, ҡоро-һары һалып, усаҡ тоҡандырҙылар. Ут дөрләне, ҡыҙҙы, көйҙөрҙө, өттө. “Мәңгелек йортта яман рухтар ҡалмаһын, хан ҡыҙы тыныс

* *Ҡуһай — 3 аршин.*

йоҡлаһын“, – тине шаман. Дәү соҡорҙоң эсендә тура дүртмөйөш рәүешендә ябыҡ урын, бүлек ҡорҙолар. Соҡорҙоң да, бүлектең дә ситтәрен ҡарағас менән көпләнеләр. Хан ҡыҙы ятыр урындың ике мөйөшөндә һике-кәштәләр яһанылар. Алтын, көмөш сүлмәктәрен, сөңкәләрен, тәғәстәрен, аҡыҡтарын, гәүһәрҙәрен, зөбәржәттәрен кәштәләргә теҙҙеләр, ризыҡ тулы көршәктәрен һикеләргә ҡуйҙылар. Хан ҡыҙын йыуан ҡарағастан шыма итеп юнылған табутҡа һалдылар. Алтын эйәре, көмөш йүгәне, ике тәгәрмәсле арбаһы менән бергә яратҡан аттарын да ер ҡуйынына бирҙеләр. Услап-услап тупраҡ һалдылар, шунан әйләнәһе – һикһән, бейеклеге ете ҡуһай ҡурған өйҙөләр. Уның тирәләй һигеҙ аршин ситтән бер ярым сажин тәрәнлектә ур ҡаҙҙылар.

– Был ҡурған минең өсөн дә, һеҙҙең өсөн дә иң-иң изге урын, – тине ҡәүеменә Ҡадир хан, күҙҙәре йәшләнеп. – Һис ҡасан ҡыҙымды борсомағыҙ, аманатымды боҙоп, мәңгелек йоҡоһон ҡасырмағыҙ, сит-яттарҙы ла яҡын юлатмағыҙ. Әҙәм үлә лә бөтә, тип уйламағыҙ. Нургөлөмдөң йәне Тәңре биргән ғүмере үтмәйсә, әжәле етмәйсә, ер менән күк араһында гиҙәсәк. Ул Сумған күлендә һомғол кәүҙәһе табылмаған Нурйәнгә лә тартыласаҡ. Беҙ бер биләүҙә, бер ҡуласала... Хуш, балам...

Ҡыҙын ҡурсалай алмағанына үкенде лә сабынды Ҡадир хан. Һары һағыш, ҡара ҡайғы, өмөт бағлаған ейәне уйҙа ғына ҡалыуы уны көндән-көн шиңдерҙе. Сатлама һалҡынға имән дә сыҙамағандай, хан да ҡыуға әйләнде. Ул өйҙөргән ҡурған ғына ҡалҡып торҙо һәм Хан ҡурғаны тип йөрөтөлә башланы. Унда күмелгән хазина тураһында хәбәр ҙә ҡәүемдән ҡәүемгә таралды һәм иманһыҙҙарҙы йоҡоһонан яҙҙырҙы.

Ҡараҡ күҙенә ҡараңғы танһыҡ, тигәндәй, төн убырҙары, уғрылар, дала буйлап ҡаса-боҫа, ас бүре өйөрөләй, Хан ҡурғанына яҡынланы. Изге урынды соҡой башлар-башламаҫтан уларҙы гелән Ҡадир хандың вариҫтары килеп баҫты. Ҡаршылашҡандарын – һөңгөгә күтәрҙеләр, баш эйгәндәрен – әсир иттеләр. Иртәгәһен килгәндәрен йәнә дөмөктөрҙөләр. Мәгәр уларҙы аңдып торған үлем шауҡымы хазина көҫәүселәрҙе туҡтата алманы.

Алыҫ йәйләүҙе баҫып, ҡалмыҡтар өйөр-өйөр йылҡыны ҡыуып алып киткән, ир-егеттәр уларҙы ҡыуа киткән, Алғыяр йорто ҡарауһыҙ ҡалған мәл ине. Хан ҡурғанына ҡаҙалған кәтмәндәр һил төн тынлығын боҙҙо. Дөп-дөп... Дөңк-дөңк... Дөңкөлдәү һис тынмай. Әйтерһең, ерҙе генә түгел, йәнде лә бәргесләйҙәр, дөмбәҫләйҙәр. Изге ҡәбер тупрағына осло нәмәләр сәнселеүҙән, әйтерһең, ер ҙә, күк тә, рухтар ҙа рәнйене. Ялтлап йәшен йәшнәне, сартлап, гөрләп, төн ҡараңғылығын йыртты. Күк уты уғрыларҙың күҙҙәрен сағылдырып, ҡотон алып, зәһәр осҡондар сәсрәтеп, ҡурғанға ҡаҙалды. Утлы йәшен ярған юлдан буҙат егелгән ике тәгәрмәсле алтын арба күренде. Унда сәстәре елберҙәгән, тажында аҫыл таштар, ынйылар, ҡулдарында гәүһәр беләҙектәр йондоҙҙар кеүек емелдәгән хан ҡыҙы ултыра. Арба зөбәржәт саҡҡылар уйнатып, ҡиблаға ҡарай осто. Шул саҡ Хан ҡурғаны, Сумған күле өҫтөндә йәйғор төҫлө нур-күпер пәйҙә булды, “Нургөл!..“, “Нурйән!..“ тигән саҡырыу тауыштары ишетелде. Күк балҡышында Нургөл аҡбуҙҙары менән күлгә сумды. Унан ике нур һыҙылып сыҡты. Улар ҡанатлы фәрештәләргә әйләнеп, әллә ҡош, әллә күбәләк булып, һаубуллашҡандай, тәүҙә күл, шунан Хан ҡурғаны өҫтөнән урап, нур һибеп, Уралға ҡарай осто. Нургөл менән Нурйәндең йәндәре шулай балҡый ине.



Наил
ҒӘЙЕТБАЙ

# ҠУЛТАМҒА
# ЙӘКИ ТҮРӘ ҠАБУЛ ИТМӘЙ

**Сатирик комедия, ике бүлектә**

**ҠАТНАШАЛАР:**

***Билал***
***Низам***
***Ансаф***
***Файза***
***Гөлсара***
***Мәликә***
***1-се, 2-се, 3-сө кеше***
***1-се, 2-се милиционер***
***Ҡыҙ***

## Беренсе бүлек

**Шаршау асылмаҫ элек сәхнәгә Актер сыға, ҡулында телефон.**

**Актер** (*тамашасыларға*). Хәйерле кис! Һаумыһығыҙ. (*Телефонға.*) Алло? Назар Хазарович! Һаумыһығыҙ. Һеҙҙе Көҙән комитеты рәйесенең урынбаҫары Низам Ҡәҙербаев борсой. Һеҙҙең районлар буйлап комитеттар эшен тикшереп йөрөүегеҙҙе ишеттек. Мотлаҡ рәүештә беҙгә килегеҙ. Алыҫыраҡ, әлбиттә. Ләкин һеҙ бер нәмәгә ҡарамай килергә тырышығыҙ. Беҙҙә эштәр бик хөрт. Нимә? Эйе, эйе! Бөгөн киләһегеҙ? Рәхмәт! Көтәбеҙ һеҙҙе! Һау булығыҙ!.. Булды. Былай булғас, тамаша башланды. (*Китә.*)

**Шаршау асыла.**

**Йәнәш ике кабинет – Билалдыҡы һәм ҡабул итеү бүлмәһе. Билал үҙ кабинетында видик ҡарай. Видикта билдәле йырсы Резеда Надирова йырлай. Ҡабул итеү бүлмәһендә – Файза телефондан шылтырата.**

**Файза.** Алло! Алло!

**Билал видиктың тауышын кәметә.**

**Билал.** Файза! Тоташтыраһыңмы һин мине Иҙелбаш менән, юҡмы?

**Файза.** Бер кем дә телефонды алмай, Билал Саматович.

**Билал.** Сәйер был, бик сәйер! Биш минут һайын шылтырат.

**Видик йырлай.**

*Тулҡындар, тулҡындар,*
*Ярҙарға ҡаҡмағыҙ!..*

**Билал.** Файза!

---

*Наил Ғәйетбай (1948) Баймаҡ ҡалаһында тыуған. БР-ҙың һәм РФ-ның атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

**Файза кабинетҡа инә.**

**Файза.** Резеда Надирова!.. Иҫ киткес йырлай!

**Билал.** Ниңә һаман ҡапҡыларға килтермәйҙәр?

**Файза.** Хәҙер, хәҙер, Билал Саматович! Алло! Раечка! Ниңә оҙаҡлайһың?.. Килтерәләр!

**Файза ҡабул итеү бүлмәһенә сыға. Коридорҙан тележка этеп Ҡыҙ инә.**

**Ҡыҙ.** Мөмкинме?

**Файза.** Оҙаҡлап йөрөйһөң!

**Файза һәм Ҡыҙ кабинетҡа инәләр.**

**Ҡыҙ.** Һаумыһығыҙ, Билал Саматович!

**Билал.** Сәләм… Иҙелбаш нимә эшләй?

**Файза.** Телефонды алмайҙар. Әллә үлеп бөткәндәр инде.

**Билал.** Шайтан алғыры! Һинең исемең Раечкамы әле?

**Ҡыҙ.** Эйе.

**Билал.** Күптән эшләйһеңме беҙҙә?

**Ҡыҙ.** Бер аҙна… Матур йыр тыңлайһығыҙ.

**Билал.** Ә кем йырлай, беләһеңме?

**Ҡыҙ.** Мин башҡорт йырсыларын белмәйем.

**Билал.** Минең иң яратҡан йырсым Резеда Надирова! Бына уның портреты!

**Ҡыҙ.** Ә мин гел, кемдең портреты, тип һорарға уйлайым.

**Билал.** Әйҙә, Раечка, миңә компания бул әле. Юғиһә кәйеф тә юҡ.

**Ҡыҙ.** Юҡ, юҡ! Эштә эсмәйем!

**Файза.** Раечка, һиңә ярай.

**Билал.** Файза, Иҙелбаш, Иҙелбаш!

**Файза сыға.**

**Билал.** Раечка, саҡ ҡына эс әле…

**Ҡыҙ.** Бик өгөтләйһегеҙ… Ә йыр бик матур!

**Билал.** Резеданың яңы йыры. Үҙенән үҙе бейергә саҡырып тора.

**Ҡыҙ.** Эйе шул. Әйҙә, бейейек!

**Билал.** Һине күрһәм, кәйефем күтәрелә минең…

**Бейейҙәр. Ҡабул итеү бүлмәһендә Файза телефондан шылтырата.**

**Файза.** Алло! Алло! Юҡ инде, юҡ, бер кем яуап бирмәй!

**Мәликә инә.**

**Мәликә.** Һаумы.

**Файза.** Һаумы, Мәликә. Билал Саматович ҡабул итмәй.

**Мәликә.** Кабинетында, тигәйнеләр вахтала.

**Файза.** Унда кәңәшмә бара.

**Мәликә.** Көтөрмөн. Ҡасан бөтә?

**Файза.** Тиҙ бөтмәҫ. Мөһим кәңәшмә.

**Мәликә.** Унда йырлайҙар түгелме?

**Файза.** Радио ул.

**Мәликә.** Ә ниңә кәңәшмә ваҡытында радионы һүндермәгәндәр?

**Файза.** Һинән һорамағандар.

**Файза, барып, ишекте ныҒыраҡ яба.**

Ниңә килдең?

**Мәликә.** Низамға. Ул ҡайҙа?

**Файза.** Низам Әнүәрович… эш буйынса китте.

**Мәликә.** Ниңә ҡойолоп төштөң?

**Файза.** Бер ҙә ҡойолманым.

**Мәликә.** Ҡурҡма. Миңә Билал кәрәк.

**Файза.** Әйттем бит. Ул ҡабул итмәй.

**Мәликә.** Мине ҡабул итер. Бар, әйт. Бер генә минутҡа, тиген.

**Файза.** Кәңәшмәне туҡтатыпмы?

**Мәликә.** Мәликә килгән, тиһәң, туҡтатыр.

**Файза.** Юҡ!

**Мәликә.** Хәҙер рөхсәтһеҙ барып инәм! Бар, әйт!

**Файза.** Ух!

**Файза кабинетҡа инә, видиктың тауышын әкренәйтә.**

**Билал.** Ни булды?

**Файза.** Унда Мәликә килгән.

**Билал.** Ниндәй Мәликә?

**Файҙа.** Һуң… Һеҙ уны яҡшы беләһегеҙ.

**Билал.** Әйт, ҡабул итмәй, тиген.

**Файҙа.** Әйттем. Инәм, ти.

**Билал.** Кәңәшмә бара, тиген.

**Файҙа.** Әйттем. Үткәр, ти. Үткәрмәһәң, ишекте емереп үтәм, ти.

**Билал.** Ярҙамсыға ебәр.

**Файҙа.** Ярҙамсығыҙ налоговыйҙа.

**Билал.** Низамға инһен.

**Файҙа.** Низам администрацияға китте.

**Билал.** Шайтан алғыры! Аҡҡа төшкән тараҡан! Раечка, һин китеп тор. Ул ишектән түгел, теге бүлмә аша. Һуңғараҡ саҡырырмын. Ярай, инһен! Туҡта!.. Өҫтәлде йыйыштыр, видикты һүндер!

**Билал өҫтәл артына барып ултыра. Файҙа ҡабул итеү бүлмәһенә сыға.**

**Файҙа.** Ин…

**Мәликә кабинетҡа инә.**

Бәлки, был Иҙелбаш комитетының телефоны эшләмәйҙер. Иҙелбаш хакимиәтенә шылтыратайым әле. Алло! Ниңә һеҙҙең комитетта бер кем телефон трубкаһын алмай. Әллә унда үлеп…

**Тауыш.** Унда бит кисә министр Назар Хазарович килгәйне. Комитетта эштәр хөрт… Пип… Пип… Пип…

**Файҙа.** Өҙөлдө! Алло! Алло!

**Кабинетта.**

**Мәликә.** Һаумы.

**Билал.** Һаумы, Мәликә.

**Мәликә.** Исемемде онотмағанһың икән.

**Билал.** Ни йомош?

**Мәликә.** Бында кәңәшмә бара, тигәйне Файҙа.

**Билал.** Бара ине. Был ишектән сығып киттеләр. Һин ҡыҫҡараҡ тот. Минең ваҡытым юҡ.

**Мәликә.** Сәйер кәңәшмә. Музыка уйнай ине. Араҡы, ҡыҙҙырылған тауыҡ еҫе килә.

**Билал.** Нимә, еҫкәнергә килдеңме? Нимә кәрәк һиңә?

**Мәликә.** Тупаҫланғанһың.

**Билал.** Йомошоңдо тиҙерәк әйт. Миңә Иҙелбаш менән һөйләшергә кәрәк. Ашығыс эш.

**Мәликә.** Һин яҡшы беләһең, минең йәшәр урыным юҡ. Ауылдан өй һатып алдым. Шуны күсереп ултыртыр өсөн ер кәрәк. Ҡарарға ҡул ҡуй. Бөгөн һуңғы көн. Раҫламаһаң, справкаларҙы ла, ҡултамғаларҙы ла яңынан йыйырға кәрәк.

**Билал.** Ҡарарҙар ярҙамсым аша үтә. Уға бир. Тәртибе шулай.

**Мәликә.** Мин унда булдым кисә.

**Билал.** Шунан?

**Мәликә.** Ул ришүәт һорай.

**Билал.** Аңламаным.

**Мәликә.** Взятка һорай. Ришүәт.

**Билал.** Булыуы мөмкин түгел!

**Мәликә.** Илле мең!

**Билал.** Һин уны яңылыш аңлағанһың.

**Мәликә.** Яңылыш аңлаһам, саҡыр ҙа үҙенән һора.

**Билал.** Ул әле урынында юҡ. Әгәр дөрөҫ икән, иртәгә үк эштән ҡыуам.

**Файҙа йүгереп инә.**

**Файҙа.** Билал Саматович! Иҙелбаш менән һөйләштем. Уларҙа кисә министр булған!

**Билал.** Ниңә миңә бирмәнең телефонды? Ни менән бөткән?

**Файҙа.** Әйтергә өлгөрмәнеләр, бәйләнеш өҙөлдө.

**Билал.** Тағы шылтырат!

**Файҙа китә.**

**Мәликә.** Билал, ул ярҙамсыңа йөрөтмә мине. Тот та ҡул ҡуй, раҫла ҡарарҙы. Бында һинең фамилияң тора бит.

**Билал.** Булмай. Регистрацияны ярҙамсым алып бара. Ә регистратураһыҙ ҡарар ысын түгел. Мин бер нисек тә ярҙам итә алмайым. Хуш.

**Файза йүгереп инә.**

**Файза.** Билал Саматович, Билал Саматович! Телефонограмма! Беҙгә министр Назар Хазарович килә!

**Билал.** Министр?! Беҙгә?! Бир! „Министр Назар Хазарович Бураншин 13 сентябрь Иҙелбашта булды. Бөгөн 14 сентябрь иртәнсәк юлға сыҡты, сәғәт 14-кә һеҙгә килә“. Бөгөн нисәһе?

**Файза.** 14 сентябрь.

**Билал.** Сәғәт нисә?

**Файза.** Ун бер.

**Билал.** Өс сәғәт ҡалған! Йә, Хоҙай! Ул бит, берәй айһыҙ һеҙгә бара алмам, тигәйне!

**Файза.** Шулай тигәйнегеҙ шул.

**Билал.** Ниңә ҡапыл килергә булған? Ниңә?

**Мәликә.** Тикшерергә.

**Билал.** Нимә?! Сығып кит! Күрмәйһеңме, минең ваҡытым юҡ!

**Мәликә.** Ярҙамсыларың хаҡында хәбәр барып еткән.

**Билал.** Файза, сит кешеләр ни ҡарай бында? Сығарып ебәр! Охрананы саҡыр!

**Файза.** Бар сыҡ, бар! Һинең ҡайғың юҡ хәҙер бында! Министр килә!

**Мәликә.** Ал ҡулыңды!.. Ярай, мин киттем. Тик бөгөн тағы киләсәкмен әле!

**Мәликә китә.**

**Билал.** Проходнойҙы бикләргә кәрәк. Бер кем дә инә алмаһын! Низам ҡайҙа? Файза, Низамды тап. Тиҙ генә килеп етһен!

**Файза.** Алло! Низам Әнүәрович! Тревога! Ҡурҡыныс хәл!

**Билал.** Бир әле! Һин ҡайҙа? Тиҙ килеп ет! Бер аяғың унда, икенсеһе бында!.. Нимә эшләргә йөрөй инем әле? Башым бөтөнләй эшләмәй башланы… Ниңә килә? Ни өсөн?

**Файза.** Билал Саматович, ә һеҙҙең ул Назар Хазаровичты күргәнегеҙ бармы? Шул тиклем ҡурҡыныс кешеме икән?

**Билал.** Ҡайҙан күрәйем? Мәскәүҙән Өфөгә күсеп эшләй башлағанына ике генә ай!

**Файза.** Билал Саматович, борсолмағыҙ шулай. Килер ҙә китер.

**Билал.** Һин ни беләһең? Уның Мәскәүҙән Өфөгә министр булып килеүенә ике генә ай! Шул арала дүрт районда булды, дүрт районда ла комитет башлығын эшенән ҡыуҙы!

**Файза.** Йә, Хоҙай!

**Билал.** Ана шул-шул! Иҙелбаштан беҙгә тиклем 600 километр! Ниңә Иҙелбаштан беҙгә килә? Бөтә республика аша, дүрт районды үтеп? Ниңә шул райондарҙағы комитеттарҙы ғына тикшермәй? Ә Иҙелбашта тикшереүе нимә менән бөткән? Тоташтыр, тоташтыр мине Иҙелбаш менән!

**Файза ҡабул итеү бүлмәһенә китә. Низам инә.**

**Низам.** Билал Саматович, ни булды?

**Билал.** Низам Әнүәрович, ҡайҙа йөрөйһөң? Бөгөн беҙгә Назар Хазарович килә!

**Низам.** Нисек? Ул бит әйткәйне…

**Билал.** Бөтә бәлә шунда! Бөгөн килә! Сәғәт икегә!

**Файза.** Билал Саматович! Иҙелбаш районы комитеты!

**Билал.** Иҙелбашмы? Ҡайҙа Мөслим Әсәнович?.. Нимә?.. Юҡ?.. Беләм, беләм министрҙың кисә һеҙҙә булғанлығын… Ни өсөн?.. Ярай, һау булығыҙ… Йә, Хоҙай!.. Был ниндәй кошмар?!

**Низам.** Нимә, Билал Саматович? Нимә булған?

**Билал.** Мөслим Әсәнович!.. Комитет башлыҡтарының иң алдынғыһы! Элекке министрҙан гел маҡталған Мөслим Әсәнович!.. Кисә эшенән ҡыуылған…

**Низам.** Ысынмы? Булмаҫ! Ул бит һәйбәт етәксе… ине, шикелле.

**Билал.** „Һәйбәт етәксе…“ Ул идеаль етәксе ине!.. Һәм урынына кемде ҡуйғандар?!

**Низам.** Кемде?

**Билал.** Теге хөрәсәнде! Аяғын саҡ һөйрәп йөрөгән көсөктө!

**Низам.** Кем ул?

**Билал.** Кем булһын – урынбаҫарын! Уны Мөслим Әсәнович менән сағыштырып буламы ни? Мөслим Әсәнович бит тау ине! Ҡая ине! Ә был… Туҡта! Назар Хазарович биш районда ла комитет начальниктарын алып ырғытты ла урынбаҫарҙарын урынына ҡуйып китте! Был нимә – тенденциямы?

**Низам.** Биш районда ла түгел, Билал Саматович. Мәсәғүт районында Назар Хазарович начальник урынбаҫарын Өфөгә, үҙенә урынбаҫар итеп алды.

**Билал.** Ҡара, белеп тораһың! Һин дә өмөтләнәһеңме? Белеп ҡуй: әгәр минең артҡа тибә ҡалһа…

**Низам.** Билал Саматович, ҡурҡмағыҙ! Бер нәмә лә булмаясаҡ.

**Билал.** Буласаҡ! Әгәр ошолай ҡул ҡаушырып ултырһаҡ, буласаҡ! Ултыр. Ошо минуттан чрезвычайное положение иғлан итәм! Өс сәғәт ваҡытыбыҙ бар. Беҙ шул ваҡыт эсендә йүгерергә, сабырға, шартларға, әммә йөҙ эш башҡарырға тейеш! Һәм!..

**Низам.** Нимә?

**Билал.** Назар Хазаровичты иҫ киткес итеп ҡаршылайбыҙ! Президентты ҡаршылаған кеүек! Мине был тиклем хөрмәт менән бер ҡасан да ҡаршы алғандары юҡ, тип илап ебәрһен!

**Низам.** Ул бит президент түгел.

**Билал.** Президент! Бөгөн ул – минең өсөн, һинең өсөн президент! Хатта бейегерәк! Аңланыңмы?

**Низам.** Аңланым.

**Билал.** Тимәк, былай… Алло!.. Миңә хакимиәт башлығының урынбаҫары кәрәк ине… Һаумыһығыҙ, Хәйбулла Зиннәтович! Миңә министрыбыҙ килә. Бөгөн, өс сәғәттән. Һеҙҙең ҙур түрәләрҙе ҡаршылаусы командағыҙ кәрәк ине. Әлбиттә, түләйәсәкбеҙ… Рәхмәт!.. Булды! Бөтәһенә лә әҙер булырға ҡушырмын, тине, кем кәрәк, барыһын да ал, тине. Тимәк, былай… Яҙ! Ҡалаға ингән ергә милли кейемдәрҙә икмәктоҙ биреүселәр һәм… ҡымыҙ! Ҡымыҙ кәрәк!

**Низам.** Уны ҡайҙан алабыҙ? Ҡалала бит юҡ!

**Билал.** Ер аҫтынан тап! Егерме литр! Ҡаршы алғанда булһын өҫтәлдә! Бөтә ерҙә! Аңланыңмы?

**Низам.** Аңланым.

**Билал.** Ҡаршы алған ергә… йөҙ ҡурайсы ҡуябыҙ!

**Низам.** Ҡаланың ҡаршы алыу командаһында ун ғына ҡурайсы.

**Билал.** Ун аҙ – әҙәм көлкөһө! Йөҙ булһын! Министрҙы баштан уҡ масштаб менән шаҡ ҡатырырға кәрәк. Ойоштороу эффекты менән! Аңлайһыңмы? Йөҙ ҡурайсы! Күҙ алдына килтер! Масштаб!

**Низам.** Тағы туҡһан ҡурайсыны ҡайҙан алабыҙ?

**Билал.** Мәктәптәрҙән ал. Училищеларҙан. Хакимдың урынбаҫары рөхсәт итте, тиң.

**Низам.** Унда ҡурайҙа уйнай белеүселәр аҙ.

**Билал.** Бысағымамы уларҙың ҡурайҙа уйнай белеүе? Ҡурай тоттор ҙа баҫтыр. Уйнай белгәндәре уйнар.

**Низам.** Билал Саматович, бәлки, шул ун ҡурайсы етер? Ҡапыл ғына йөҙ ҡурайҙы мин ҡайҙан табайым?

**Билал.** Һин нимә – миңә аяҡ салмаҡсы булдыңмы? Ҡара уны – минең артҡа типһә, һине лә упҡынға алып төшөп китәсәкмен!

**Низам.** Башығыҙға юҡ уй килә, Билал Саматович! Мин бит…

**Билал.** Йөҙ ҡурай! Бераүгә лә кәм түгел!

**Низам.** Аңланым.

**Билал.** Йөҙ ҡурай таба алмаһаң, таяҡтар тоттор ҙа баҫтыр! Уйнай

белмәгәндәргә нимәгә ҡурай? Шулай түгелме?

**Низам.** Шулай.

**Билал.** Тағы нимә була әле ҡаршы алғанда?

**Низам.** Сәскә биреүселәр!

**Билал.** Дөрөҫ! Йөҙ бала! Һәр балаға бирәр сәскә биреп ҡаршы сығарабыҙ. Һәр береһе Назар Хазаровичтың сикәһенән үбә лә сәскә бирә! Шәпме?

**Низам.** Билал Саматович, йөҙ бала бигерәк күп булмаҫмы?

**Билал.** Һиңә йөҙ күп булһа, йөҙ илле!

**Низам.** Ярай, йөҙ булһын.

**Билал.** Ҡаршы әйтеп теймә нервыма! Мин ошо минутта шундай хәлдә – үлтерә һуғыуым бар. Йөҙ бала!

**Низам.** Йөҙ бала. Сәскә менән. Бөтәһен дә уйланыҡ. Мин үтәргә йүгерҙем.

**Билал.** Эйе, бар. Ә-ә, туҡта әле! Һин ике таяҡ, бер ҡыҙыл лента, поднос һәм ҡайсы әҙерлә!

**Низам.** Уларҙы нимә эшләтәбеҙ?

**Билал.** Комитетҡа газ үткәреүҙе тантаналы рәүештә асабыҙ! Назар Хазарович аса – лента ҡырҡа. Шунан газды тоҡандыра. Шәпме?

**Низам.** Бик шәп! Тик беҙҙең комитетҡа газ үткәрелмәгән.

**Билал.** Һин ниңә ҡаршы өндәшәһең? Һүҙ әйтер әмәл юҡ, тотаһың да ҡаршы өндәшәһең! Тағы миңә аяҡ салырға итәһеңме?

**Низам.** Һуң бит, Билал Саматович, беҙҙең комитетта газ юҡ. Беҙгә үткәреү өсөн уны ун километр һуҙырға кәрәк.

**Билал.** Һин ниңә миңә километрҙарыңды һөйләйһең? Мин һиңә газ үткәрергә ҡушаммы ни? Лента әҙерлә!

**Низам.** Лента әҙерләрмен дә ул...

**Билал.** Шунан буфет эргәһенә соҡор ҡаҙҙыр.

**Низам.** Ниндәй соҡор?

**Билал.** Киңлеге ярты метрға ярты метр, тәрәнлеге – ике метр.

**Низам.** Шунан?

**Билал.** Шунан шунда газ баллоны күмәбеҙ. Унан шланг сығарып, кран ҡуябыҙ. Назар Хазарович лентаны ҡырҡа ла, кранды асып, газды тоҡандыра.

**Низам.** Кемгә кәрәк инде был спектакль?

**Билал.** Назар Хазаровичҡа кәрәк! Түрәләр тантаналы рәүештә яңы объекттар асырға бик ярата. Ә беҙҙә асырлыҡ яңы объект юҡ! Булмаһа, табабыҙ! Газ үткәреүҙе асабыҙ!

**Низам.** Шаҡ ҡатырлыҡ!

**Билал.** Бар! Ә-ә, туҡта әле! Завхозға әйт: ҡаланан беҙҙең комитетҡа тиклем юлдың ике яғынан да үләнде сабып сыҡһын, һәм метр һайын сәскәләр ҡаҙап ҡуйһындар.

**Низам.** Ниндәй сәскәләр?

**Билал.** Искусственный. Ә комитетҡа етәрәк корзиналар менән сәскәләр ултыртһындар. Ағастарҙың төптәрен аҡлаһындар. Бар, бар, нимә туҡтап ҡалдың?

**Низам китә.**

Алло! Өфөмө? Һаумы, Хәмит Насирович! Танымай торам. Бөгөн беҙгә Назар Хазарович килә, беләһегеҙҙер? Ниндәйерәк кеше ул? Нимә ярата, нимәне йәне һөймәй, тигәндәй... Эйе шул, Мәскәүҙән эшкә килгәненә ике генә ай бит, ҡайҙан белеп бөтәһегеҙ... Мәскәүгә шылтыратырға, элекке эшләгән урынына? Аллабирҙин? Ул Назар Хазарович хаҡында бөтәһен дә беләме? Бушҡа һөйләмәй? Аңлашылды... Рәхмәт! Файза! Низамды кире бор! Тиҙерәк!

**Файза.** Низам Әнүәрович!

**Файза йүгереп сыға.**

**Билал.** Ниндәй заман китте был?! Аллабирҙин тигән берәү Назар Хазарович хаҡында бөтәһен дә белә, ти, тик һөйләтер өсөн алдан түләргә кәрәк, ти. Йәнәһе бөгөн иң ҡыйбат тауар – информация.

**Низам инә.**

**Низам.** Ни булды?

**Билал.** Йөҙ ат кәрәк!

**Низам.** Йөҙ ат? Ниңә?

**Билал.** Назар Хазаровичты ҡаршыларға! Бына әле генә Өфө менән һөйләштем. „Әле бер холҡон да белмәйбеҙ, уҫаллығын да ат ятраҡанлығын ғына беләбеҙ“, – тиҙәр. Ат ярата! Был бит – бәхет! Был – беҙҙең ҡотолоу! Аттарҙы күрһә, Назар Хазарович һораша икән: „Ниндәй ойошманыҡы?“ „Беҙҙең комитеттыҡы“,– тиһәләр, ҡыуана, ти. Беҙ йөҙ атты ҡала юлының беҙҙең комитетҡа боролған ерендә йөрөтәбеҙ. Һораһа, әйтәбеҙ: „Комитеттың аттары! Хеҙмәткәрҙәргә ит, ҡымыҙ өсөн тотабыҙ!“

**Низам.** Тик бит беҙҙә бер ат та юҡ.

**Билал.** Бөтә ҡаланыҡын йый.

**Низам.** Бөтә ҡалала барлығы һигеҙ ат бар, Билал Саматович. Элеваторҙа – биш, электросетта – өс.

**Билал.** Эшкинмәгән! Һиңә бер йүнле эш ҡушып булмай! Файза! Мине бажа менән тоташтыр!

**Файза.** Ниндәй бажа, Билал Саматович?

**Билал.** Минең йөҙ бажам бармы ни? Шул бер бажам менән тоташтыр! Ауыл хужалығы кооперативы рәйесе менән!

**Файза.** Билал Саматович, бажағыҙ!

**Билал.** Алло! Бажа! Срочно аттар кәрәк! Иткә түгел, тере аттар! Йөҙ ат! Өфөнән яңы министрыбыҙ килә. Ат ярата, ҡәһәрең. Юлына сығарып ҡуябыҙ ҙа, комитеттың аттары, тип маҡтанабыҙ. Кәрәк, бажа, кәрәк. Бөгөн кәрәк. Ике сәғәттән! Сәғәт икенсе яртыға! Сабып килһәләр, өлгөрәләр! Рәхмәт! Балдыҙға сәләм әйт!.. Булды! Бына ошолай ойошторалар уны! Ә һин – аттар юҡ! Бар! Башҡаларын ойоштор!

**Низам китә.**

Туҡта! Мәскәүгә шылтыратайым. Бөтәһен дә белгән ул ниндәй Аллабирҙин икән?.. Мәскәүме? Миңә Аллабирҙин кәрәк ине. Юҡ? Ҡасан була? Ярай, ярты сәғәттән шылтыратырбыҙ. Вәт, замана: „Информация – иң ҡыйбат тауар!“

**Билал ҡабул итеү бүлмәһенә сыға.**

Файза, мин территорияны ҡарап сығам. Ярты сәғәттән килермен, һин егерме минуттан Мәскәүгә Аллабирҙин тигән кешегә шылтырат. Бына телефоны. Ул Назар Хазарович тураһында барыһын да белә, ти. Тик информация өсөн аҡса һорай. Бухгалтерияға әйтермен, күпме һораһа ла түләрбеҙ.

**Файза.** Аҡса һорай?

**Билал.** Аптырама. Хәҙер – заманаһы шулай. Информация – иң ҡыйбат тауар. Холҡоноң бөтә яғын һораш: нимә ярата, нимәне йәне һөймәй. Бәлки, ҡыҙҙар менән мунса төшөү күңеленә яҡындыр. Ашау яғын да онотма, яратҡан, яратмаған ризыҡтарын белеш. Шунан буфетҡа заказ бир, тикшер. Ҡара уны, ашау яғына һин яуап бирәһең.

**Файза.** Аңланым, Билал Саматович.

**Билал.** Алло! Охрана! Охранамы, тием, ҡолаҡ! Ҡасан ошо бабайҙарҙы ҡыуып, йәш егеттәр алабыҙ инде. Ҡапҡаны бикләгеҙ. Бер сит кешене индермәгеҙ. Ҡапҡа тирәһендә лә йөрөмәһендәр. Аңланыңмы? Аңланыңмы, тием. Файза, отдел кадровҡа әйт, ошо бабайҙар урынына йәш егеттәр эҙләһендәр!

**Билал китә. Низам инә.**

**Низам.** Таяҡтар булды, поднос булды, лента булды. Тик ҡайсы хөрт! Файза, һинең һәйбәт ҡайсың юҡмы?

**Файза.** Ошо барамы?

**Низам.** Шәп!

**Файза.** Бөгөн кис беҙгә барабыҙ. Онотманыңмы?

**Низам.** Файза, ниңә шулай ашығырға?

**Файза.** Минең атайым менән әсәйем һинең менән танышырға теләй.

**Низам.** Беләһең бит, бөгөн министр килә.

**Файза.** Ул Билал Саматовичҡа килә.

**Низам.** Мин улар янында булырға тейеш. Төрлө эш килеп сығыуы бар.

**Файза.** Ниндәй эш? Әсәйемдәр бит әҙерләнә.

**Низам.** Әйт, әҙерләнмәһендәр. Иртәгә барырбыҙ.

**1-се кеше инә.**
**Ҡулында – сәскәләр.**

**1-се кеше.** Сәскәләрҙе ҡайҙа илтергә?

**Низам.** Ниңә бында килдең? Оло юлдың ҡалаға ингән еренә бар. Унда репетиция бара. Сәскәләр – уларға!

**1-се кеше китә.**
**Телефон шылтырай.**

**Файза.** Алло! Мәскәү? Аллабирҙин? Ә беҙ үҙебеҙ һеҙгә шылтыратырға тора инек... Эйе, Назар Хазарович хаҡында. Түләргә? Күпме? Күпме?! Ярай, түләрбеҙ. Хәҙер үк. Счетығыҙҙы факс аша ебәрегеҙ. Эйе, ошо телефонға. Рәхмәт.

**Низам.** Кем ул?

**Файза.** Мәскәүҙән. Назар Хазаровичтың бөтә сифаттарын әйтеп бирәм, ти. Тик тәүҙә миңә ун мең аҡса ебәрегеҙ, ти. Әлегә бер генә сифатын әйтте. Араҡы ла, шарап та эсмәй, ти.

**Низам.** Бөтөнләй эсмәйме?

**Файза.** Тамсы ла эсмәй, алдына эсемлек ҡуйып, әрләнә күрмәгеҙ, ти. Низам Әнүәрович, мин ул Аллабирҙиндың счетын бухгалтерияға бирәйем, тиҙерәк уға аҡса күсерһендәр. Министрҙың ниндәй әҙәм икәнлеген белергә кәрәк бит. Шунан буфетҡа инеп сығам, нимә бешерәләр икән?

**Файза китә. Телефон шылтырай.**

**Низам.** Алло! Охрана? Эйе, беләм бер кемде лә үткәрергә ярамағанлығын. Гөлсарамы? Уны үткәрегеҙ. Үткәрегеҙ, тием! Мин уны саҡырҙым. Все! Башланды! Йә янам, йә хан булам!

**Гөлсара менән Мәликә инә.**

**Гөлсара.** Ниңә ҡапҡалар бикләп ултыраһығыҙ?

**Низам.** Билал Саматович шулай бойорған.

**Гөлсара.** Ҡайҙа барма – охрана, ҡайҙа барма – тимер ҡапҡа ла шлагбаум. Унда ярамай, бында ярамай, һеҙ бит – халыҡ өсөн эшләүсе ойошма! Ә һеҙ халыҡтан ҡасып, йәшенеп ултыраһығыҙ!

**Низам.** Гөлсара апай, юҡ-бар һөйләп ваҡытты әрәм итмәйек.

**Гөлсара.** Һеҙ бит, халыҡтан ҡасабыҙ тип, үҙ-үҙегеҙҙе төрмәгә бикләгәнһегеҙ!

**Низам.** Документтарығыҙҙы алып килдегеҙме?

**Гөлсара.** Һеҙ, халыҡҡа ярҙам итәһе урынға, халыҡҡа яуызлыҡ эшләйһегеҙ! Һеҙ – халыҡтың дошманы, һеҙ – халыҡты ашаусылар, ҡан эскестәр!

**Низам.** Бөттөмө һүҙең?

**Гөлсара.** Ҡандалалар! Бөттө. Уф! Ниңә был бисәнең портреттарын стена тултырып элеп бөткәнһегеҙ?

**Низам.** Резеда Надирова. Билал Саматовичтың яратҡан йырсыһы. Ҡайҙа документтар?

**Гөлсара.** Бына. Һиңә бирәйемме?

**Низам.** Юҡ. Әлегә һиндә булһын. Мәликә ниңә килгән?

**Мәликә.** Миңә ҡарарҙы раҫларға кәрәк. Бөгөн һуңғы көн.

**Низам.** Ниндәй ҡарар? Ниндәй раҫлау? Гөлсара апай, һеҙҙең башығыҙ эшләйме саҡ ҡына?! Хәҙер бар планыбыҙ, бар өмөтөбөҙ, бар уйыбыҙ юҡҡа сығасаҡ! Ҡайтарып ебәр!

**Мәликә.** Бойорма, йәме!

**Низам.** Гөлсара апай! Ике ҡуян артынан ҡыуһаҡ, береһен дә тота алмаясаҡбыҙ! Мәликә, бар кит!

**Мәликә.** Юҡ!

**Гөлсара.** Ниңә алданыраҡ раҫлатманың һуң Мәликәнең ҡарарын?

**Мәликә.** Теләмәне.

**Низам.** Билал Саматович раҫлатыр ҡарарҙарҙы ярҙамсыһы аша ғына ала.

**Мәликә.** Гөлсара апай, күрәһеңме? Урынбаҫар! Имеш, раҫлата алмай! Шуға ышанаһыңмы? Ул юрамал раҫлатмай. Ә һин – ниңә үпкәләштегеҙ?

**Низам.** Ҡабатлап әйтәм: Билал Саматович ярҙамсыһынан башҡа бер кемгә лә ҡарарҙарҙы алырға рөхсәт итмәй. Хатта тыя! Шул иҫәптән – миңә лә. Ә хәҙер кит!

**Гөлсара.** Низам, туҡта әле! Һин Мәликә менән Билалдың элекке мөнәсәбәтен беләһең...

**Низам.** Причем бында мөнәсәбәт?

**Гөлсара.** Мәликәнең Билалға асыуы көслө. Мәликә инһен министрға. Ул бер нәмәнән дә ҡурҡып тормаясаҡ. Етмәһә, кисә унан взятка һораған теге ярҙамсыһы. Мәликә танк кеүек инәсәк тә ошо документтарҙы ла күрһәтәсәк, кисә взятка һораған ярҙамсыһын да әйтәсәк. Бөтә яҡтан фашлаясаҡ Билалды! Ана шуға алып килдем Мәликәне!

**Низам.** Ух, ошо ҡатын-ҡыҙҙы! Бөтә нәмәне бергә болғайҙар! Әйҙәгеҙ, минең кабинетҡа! Шунда ултырып тораһығыҙ. Министр килгәс, саҡырып сығарам да осраштырам. Әлегә тауыштынығыҙ сыҡмаһын! Билал Саматович һеҙҙе алдан күрергә тейеш түгел!

**2-се кеше инә. Ҡулында – салғы.**

**2-се кеше.** Низам Әнүәрович, мин унда отоплениены ҡышҡа әҙерләйем. Ә миңә юҡ менән булашырға ҡушалар – ниндәйҙер үләндәрҙе сабырға!

**Низам.** Беҙгә министр килә!

**2-се кеше.** Килһә һуң. Үлән күрмәгән кешеме ни? Ҡайҙа сабырға?

**Низам.** Завхоз күрһәтмәнеме ни?

**2-се кеше.** Ул һеҙгә ебәрҙе.

**Низам.** Иҫәр! Кил тәҙрә янына! Күрәһеңме юлды? Ике ситен ҡый үләне баҫҡан. Ярты сәғәттән юл ситтәре таптаҡыр булһын! Аңланыңмы?

**2-се кеше.** Аңланым.

**Низам.** Бар!

**2-се кеше китә. Файза инә.**

**Файза.** Һеҙ ни эшләйһегеҙ бында?

**Гөлсара.** Һаумы, Файза.

**Файза.** һаумы. Хәҙер үк сығып китегеҙ!

**Мәликә.** Ал ҡулыңды, дамочка!

**Файза.** Низам Әнүәрович, ниңә уларҙы ҡыумайһығыҙ? Хәҙер бит министр килә!

**Низам.** Файза, эш шунда...

**Файза.** Алло! Охрана!..

**Низам.** Файза, туҡта!.. Хәҙер аңлатам. Бар, ултырып тороғоҙ минең кабинетта.

**Гөлсара менән Мәликә китә.**

**Файза.** Нисек үткән улар бында? Ниңә һин уларҙы ҡыумайһың?

**Низам.** Ҡыуырмын, ҡыуырмын... Ашыҡма...

**Файза.** Һин саҡырып килтерҙеңме?

**Низам.** Иң мөһиме – һин борсолма. Улар бер кемгә лә ҡамасауламаясаҡ.

**Файза.** Тимәк, һиңә Мәликә кәрәк? Һин бит... Мәликә менән арабыҙ өҙөлдө, тигәйнең?..

**Низам.** Файза, тыңла. Шундай нәмәләр була... Бөтәһен дә ҡапыл әйтеп булмай...

**Файза.** Хәйлә ҡораһың! Их, һин! Мәликә бит ваҡытында Билал Саматовичтан ауырлы ҡалған, аборт яһатҡан!.. Шуны беләһеңме?

**Низам.** Туҡта!.. Ярамай улай... Мәликәнең ғәйебе юҡ...

**Файза.** Ғәйебе юҡ?!. Ул һиңә һаман да оҡшаймы?..

**Низам.** Файза, тыңла!.. Эш икенселә... Уларҙың килеүе лә... Һин уйлағанса түгел!..

**Файза.** Һин шуға бөгөн беҙгә бармайһыңмы?

**Низам.** Туҡта әле! Минең һиңә үтенесем бар.

**Файза.** Һин бит алдашаһың...

**Низам.** Туҡтап тор! Зинһар, минең кабинетта уларҙың ултырғанлығын әлегә әйтмә Билал Саматовичҡа. Ишетәһеңме, Файза?

**Файза.** Ишетәм...

**Ат кешнәгән тауыш.**

**Низам.** Ҡапҡа төбөндә аттар! Былар бит – Билал Саматовичтың бажаһының аттары! Килеп тә еткәндәр! Алло, охрана! Ниңә бында килтергәндәр аттарын? Ҡала юлының беҙгә боролған

урынында тоторға ҡушылды бит. Хәҙер үк сығып аңлатығыҙ! Юғиһә бөтә асфальтты буяп бөтәләр!

**Саҡ ҡына алдараҡ ҡабул итеү бүлмәһенә 3-сө кеше инә. Ул газ баллоны күтәргән, ҡулында – көрәк.**

**Файза.** Һеҙгә кем кәрәк? Ҡуйма иҙәнгә, ҡуйма! Был ниндәй металлолом?

**3-сө кеше.** Металло-ло-лом түгел, газовый баллон. Уны ҡайҙа күмергә?

**Низам.** Ниңә бында алып килдең? Ҡайҙа мастерың?

**3-сө кеше.** Ул баллонды күтәртте лә һеҙҙе табырға ҡушты.

**Низам.** Алло! Мастер ҡайҙа? Ҡәбәхәт!

**3-сө кеше.** Хәлем бөттө! Тиҙерәк күрһәтегеҙ! Ҡайҙа күмергә?

**Файза.** Ҡуйма иҙәнгә, бысратаһың! Бар, сыға тор!

**Низам.** Ну, был мастер! Әйҙә!

**Китәләр.**

**Файза.** Ниңә саҡырған Низам был икәүҙе? Йәнә Мәликә менән араһын бәйләргә итәме? Әгәр шулай икән...

**Билал инә.**

**Билал.** Мәскәүгә шылтыраттыңмы?

**Файза.** Аллабирҙин үҙе шылтыратты. Информация өсөн ун мең һораны.

**Билал.** Ебәрҙегеҙме?

**Файза.** Шунда уҡ ебәрҙек. Алғас та шылтыратырмын, тине, бөтә информацияны бирермен, тине. Әле эсмәгәнен генә әйтте.

**Билал.** Нисек – эсмәгәнен?

**Файза.** Тамсы ла эсмәй, ти. Эскәндәрҙе күрә алмай, ти.

**Билал.** Йә, Хоҙай! Файза, бар, араҡы, шарапты шкафтан ал, йәшер сейфҡа!

**Файза шешәләрҙе йәшерә.**

**Билал.** Яҡшы! Алло! Техотделмы? Ниңә тәҙрәләрегеҙ йыуылмаған? Әгәр ун минуттан тәҙрәләрегеҙ ялт итеп тормаһа, ғариза яҙ! Кадастр бүлеген бир!.. Һинең күҙең сыҡҡанмы әллә? Күҙең сыҡҡанмы, ҡолаҡ! Тәҙрә төптәрегеҙҙең буяуҙары айырылып бөткән! Ун минуттан буялған булһын! Үҙем тикшерәм! Алло! Низам ҡайҙа! Файза, Низамды тап!

**Файза.** Алло! Низам Әнүәрович! Һеҙҙе срочно Билал Саматович саҡыра.

**Билал.** Алло, хозблок! Ниңә ҡойма буйындағы үләндәрҙе сапмағанһығыҙ? Сабаһығыҙ, атаң башы! Ултырғысыңдан айырылып сығып ҡара! Хәҙер үк сабып ҡуйығыҙ! Ишеттегеҙме?

**Низам инә.**

**Низам.** Ни булды?

**Билал.** Ниңә һаман газ баллоны күмелмәгән?

**Низам.** Ҡаҙалар. Ярты сәғәттән күмеп ҡуябыҙ!

**Билал.** Лента, таяҡтар, поднос, ҡайсы әҙерме?

**Низам.** Бына.

**Урамда шау-шыу.**

Ниндәй тауыш?

**Файза.** Ҡапҡа төбөндә ниндәйҙер кешеләр йыйылған.

**Билал.** Был ниндәй әҙәмдәр? Алло! Охрана! Кемдәр йыйылған унда? Кемдәр, тием! Ниндәй инеү? Ниндәй министр? Бер кемде лә индермәгеҙ! Ҡапҡа янынан ҡыуып ебәрегеҙ бөтәһен дә! Конторала сит-ят әҙәмдәр юҡмы? Файза, һиңә әйтәм, ят кешеләр күренмәйме конторала?

**Низам.** Юҡ, Билал Саматович, тик үҙебеҙҙекеләр генә.

**Гөлсара инә.**

**Гөлсара.** Ниндәй шау-шыу? Әллә килдеме? Ой!

**Билал.** Һин кем?

**Билал кабинеттан Гөлсара менән Мәликәне алып сыға.**

Кемдәр былар? Нисек үткәндәр бында? Низам Әнүәрович?

**Низам.** Билал Саматович, мин бит әле генә территориянан килдем.

**Билал.** Файза! Һин бит көнө буйы ошонда ултыраһың? Нисек үтте улар бында? Кем үткәрҙе?

**Мәликә.** Файза беҙҙе күрмәне. Ул бында юҡ ине. Беҙ үҙебеҙ кабинетҡа үттек тә киттек!

**Билал.** Унда атағыҙҙың башын ҡарап ултыраһығыҙмы?

**Мәликә.** Һине көтөп ултырабыҙ.

**Билал.** Мине ҡабул итеү бүлмәһендә көтөп булмай инеме?

**Мәликә.** Булмай ине. Бынан беҙҙе был һылыуҡай ҡыуып сығара ине.

**Билал.** Нимәгә көтәһегеҙ мине?

**Мәликә.** Ҡарарға ҡул ҡуйҙырырға.

**Билал.** Бөгөн булмай, Мәликә. Иртәгә кил.

**Мәликә.** Ниңә бөгөн булмай?

**Билал.** Ул ҡарарҙы ярҙамсым менән яҡшылап тикшерер кәрәк. Минең бөгөн ваҡытым юҡ. Хушығыҙ!

**3-сө кеше инә. Газ баллоны йөкмәгән, ҡулында – көрәк.**

**Низам.** Ни эшләп йөрөйһөң һин бында?

**Билал.** Был кем?

**Низам.** Газ үткәреүсе. Ниңә күммәнең баллонды?

**Билал.** Нимә, газ һаман әҙер түгелме?

**3-сө кеше.** Ҡаҙа башлағайным, теплотрасса килеп сыҡты.

**Билал.** Низам Әнүәрович! Нимә эшләп йөрөйһөң һин? Ярты сәғәттән министр килә! Эшләгеҙ тиҙерәк!

**3-сө кеше.** Тиҙерәк күрһәтегеҙ икенсе урын. Хәлем бөттө!

**Низам.** Әйҙә!

**Низам менән 3-сө кеше сыға. Ансаф инә.**

**Ансаф.** Һаумыһығыҙ! Уф! Сәғәт нисә?

**Билал.** Быныһы тағы кем?

**Ансаф.** Сәғәт нисә, тием?

**Файза.** Беренсе ярты.

**Ансаф.** Уф, Алла! Көн үткән икән тип торам. Ваҡыт бар икән әле. Мин – Ансаф Ҡотдосов.

**Билал.** Кем үткәрҙе һине? Охранамы?

**Ансаф.** Эйе, үткәрер охрана, үткәрмәй ни! Бына салбар йыртылды! Ни булды был донъяға, иптәштәр? Бөтә ергә охрана ҡуйып бөткәндәр! Эттәр, секретаршалар баҫтырғандар! Береһе үткәрмәй!

**Билал.** Нисек үттең һин бында?

**Ансаф.** Ҡойма аша! Тик бына салбар йыртылды! Кем бында начальник? Билал... Билал...

**Билал.** Мин. Шунан?

**Ансаф.** Тиҙ генә ҡултамға ҡуйығыҙ. Бөгөн раҫлатмаһам, ҡарар иртәгә юҡҡа сыға. Йәнә справкалар, ҡултамғалар йыйып ике ай йөрөргә кәрәк.

**Гөлсара.** Һеҙ кемгәлер оҡшағанһығыҙ! Бик таныш кешегә! Кемгә?

**Файза.** Эйе, кемгәлер оҡшаған шул.

**Ансаф.** Оҡшамаған! Бер кемгә лә оҡшамаған!

**Билал.** Ниңә аҡыраһың? Һин бит урамда түгел.

**Ансаф.** Тоталар ҙа – оҡшаған!.. Ҡуйығыҙ ҡултамға!

**Билал.** Иртәгә кил.

**Ансаф.** Мин әйтеп торам: бөгөн срогы үтә! Аңламайһығыҙмы әллә? Ҡарарҙы бөгөн раҫлатмаһам, гаражымды емерәләр. Ә юлды уратып үтергә була.

**Низам инә. Артынса 2-се кеше инә. Ҡулында – салғы.**

**2-се кеше.** Юл ситен сабып бөттөм. Тағы ҡайҙа сабырға?

**Низам.** Завхоздан һора! Ниңә бында киләһең?

**2-се кеше.** Завхоз әллә ҡайҙа киткән.

**Низам.** Тьфү икән дә!

**Билал.** Низам, бар, күрһәт шуға! Хәҙер килә бит министр!

**Низам.** Әйҙә, киттек!

**Низам менән 2-се кеше сыға. Телефон шылтырай.**

**Файза.** Алло! Мәскәүме? Тауышланмағыҙ!.. Тыңлайым!

**Билал.** Кем ул?

**Файза.** Мәскәүҙән, Аллабирҙин!

**Билал.** Аллабирҙин иптәш, аҡсаны алдығыҙмы?

**Тауыш.** Алдым, алдым. Рәхмәт.

**Билал.** Һөйләгеҙ, тыңлайбыҙ.

**Низам инә.**

**Тауыш.** Назар Хазаровичтың бәләкәй сағында бер йырсы ҡатын уның атаһын ғаиләһенән айырып алып киткән, шуға ул етем үҫкән. Назар Хазаровичтың йәшерәк сағында бер журналист ҡыҙ уның хаҡында бик насар статья яҙған, ғәҙел булмаған статья. Шунан Назар Хазаровичты эшенән алғандар. Яңыраҡ бер түрә Назар Хазаровичтың бисәһен тартып алған. Аңлашылдымы?

**Билал.** Аңлашылды! Тик былар беҙгә нимәгә кәрәк? Беҙ бит Назар Хазаровичтың холҡо, ятраҡан, яратмаған нәмәләре хаҡында белергә теләгәйнек.

**Тауыш.** Назар Хазаровичтың холҡо, яратҡан һәм күрә алмаған нәмәләре бына ошо ваҡиғаларға бәйләнгән. Назар Хазарович өс нәмәне күрә алмай. Беренсеһе – йырсы бисәләр, икенсеһе – журналист бисәләр, өсөнсөһө – бисәләр менән сыуалған түрәләр.

**Файза.** Ә нимәне ярата һуң ул?

**Тауыш.** Ана шул өс нәмәнән башҡа бөтә нәмәне лә ярата, һау булығыҙ.

**Билал.** Бисәләрҙе яратмай, араҡыны яратмай. Бәй, нимәне ярата икән һуң ул? Файза! Ниңә был бисәнең портреттарын бөтә ергә элеп бөткәнһең? Йәшер тиҙ генә! Низам! Минең кабинеттағын да алып ташла!

**Файза менән Низам йырсы Надированың портреттарын йәшерә.**

**Билал.** Низам Әнүәрович! Хәҙер үк сығарып ебәр! Барыһын да!

**Мәликә.** Яҡын килмә!

**Ансаф.** Мин сыҡмайым!

**Билал.** Низам Әнүәрович! Ниңә туҡтаның?

**Низам.** Улар менән һуғышайыммы?

**Билал.** Охрана саҡыр!

**Низам.** Унда ике бабай. Береһе унда ҡалһа...

**Билал.** Мин күпме әйттем һиңә, шул бабайҙарҙы ҡыуып, служба безопасности ойошторорға кәрәк, тип! Алло! Милиция! Беҙҙең конторала өс иҫерек хулиган килеп инде. Тиҙ килеп етегеҙ! Әле бригада юҡ? Ҡасан була? Килгәс тә ебәрегеҙ! Был милицияһы ла... Алло! Автопарк! Срочно ике йәш егетеңде бында ебәр! Ҡайҙа һуң улар? Тьфү генә икән дә!

**Мәликә.** Килеп сыҡманымы? Беҙ хәҙер һинең нисек урлашҡаныңды ла министрға һөйләп бирәбеҙ! Төҙөлөшкә ун миллион һум күсерәһең дә аҙаҡ документһыҙ ғына ике миллионын үҙеңә алып кеҫәңә һалаһың! Бына был папкала бөтәһе лә бар!

**Билал.** Тәк, тәк! Ошомо әле һинең Гөлсара Яппарова тигән апайың?

**Гөлсара.** Эйе. Гөлсара Яппарова мин булам.

**Билал.** Минең өҫтән гәзиткә, прокуратураға яҙып ҡараған Яппарова. Бер ни килтереп сығара алмағайның.

**Мәликә.** Унда һинең үҙ кешеләрең ултыра.

**Билал.** Шуға хәҙер министрға жаловаться итергә килдеңме? Мин бит хәҙер һеҙҙән был документтарҙы тартып ала алам.

**Гөлсара.** Бирә алам. Бында – копиялар.

**Билал.** Сәғәт нисә?

**Файза.** Бер, Билал Саматович!

**Билал.** Ух! Ваҡыты бөгөн түгел... Минең һеҙҙең менән талашып торорға ваҡытым юҡ! Ярай! Килтерегеҙ ҡарарҙарығыҙҙы! Тик ҡул ҡуйыу менән һеҙ конторанан сығып китәһегеҙ!

**Ансаф.** Сығып китәбеҙ!

**Билал.** Ниңә бында өс ҡарар?

**Гөлсара.** Өсөнсөһө минеке. Киоск ултыртырға урын кәрәк. Ҡарар күптән әҙер. Һеҙҙең ҡултамға ғына юҡ.

**Телефон шылтырай.**

**Файза.** Алло! Нимә? Нимә тиһегеҙ? Назар Хазарович килә алмай?

**Билал.** Нимә? Ҡана, бир әле! Алло! Килмәйме? Аңлашылды! Иртәгә үҙемде? Өфөгә? Рәхмәт, рәхмәт! Аңланым!.. Килмәй! Ишеттегеҙме? Министр килмәй! Минең үҙемде иртәгә Өфөгә саҡыра.

**Низам.** Нисек?

**Билал.** Бына шулай! Хәҙер бөтәгеҙ ҙә сығып китегеҙ!

**Ансаф.** Ә ҡултамға?

**Билал.** Ҡултамға юҡ! Бөттө! Ҡарарҙарығыҙҙы тәүҙә минең ярҙамсыға күрһәтегеҙ! Хушығыҙ! Файза, ҡыу барыһын да!

**Ансаф.** Мин бынан бер ҡайҙа ла китмәйем! Аслыҡ иғлан итәм!

**Билал.** Ит, ит! Ярты сәғәттән милиция килер ҙә психушкаға илтеп ябыр! *(Билал кабинетына инеп китә.)* Алло! Раечка! Көтәм! Тик артҡы ишектән ин! *(Видеодиктофон тоҡандыра.)*

*Алып кит мине*
*Ҡыҙҙар менән йырҙар иленә.*
*Унда тик булһын*
*Кино менән вино гел генә.*

**Файза.** Сығып китегеҙ бынан!

**Файза Мәликәне этә.**

**Низам.** Файза! Ҡолатаһың бит уны!

**Файза.** Һинме... һин... һатлыҡ йән!

**Мәликә.** Файза!

**Ансаф.** Һеҙ нимә эшләйһегеҙ?!

**Низам.** Ансаф!.. Туҡтағыҙ! Ул бит Резеда Надироваға оҡшаған!

**Гөлсара.** Оҡшаған шул! Бая мин әйттем бит – кемгәлер оҡшаған!

**Ансаф.** Оҡшамаған! Ир кеше бисәгә оҡшамай. Бер ҡасан да!

*Булһын карнавал.*
*Маска кейеп ал*
*һәм танырмын һине мин генә!*

**Низам.** Шәп был – идея! Киттектәр! Ансаф, киттек!

**Ансаф.** Юҡ, мин бер ҡайҙа ла китмәйем!

**Низам.** Һиңә ҡултамға кәрәкме? Кәрәкһә, әйҙә, эйәр беҙгә! Өсөгөҙҙөң дә ҡарарҙарын раҫлатабыҙ! Бөгөн! Хәҙер!

**Ансаф.** Тик алдаштан булмаһын.

**Китәләр. Билал видик тоҡандыра, өҫтәлгә вино, ашамлыҡтар ҡуя. Видикта Резеда Надирова йырлай.**

**Билал.** *Тулҡындар, тулҡындар,*
*Ярҙарҙа ҡаҡмағыҙ!..*

**Артҡы ишектән Ҡыҙ килеп инә һәм Билал менән бейей башлай. Файза, музыканы ишетеп, Билалдың кабинетына инә һәм әкрен генә бейеүгә ҡушыла.**

**Шаршау.**

## Икенсе бүлек

**Шул уҡ урын. Ҡабул итеү бүлмәһендә Файза бер үҙе. Билалдың кабинетында видикта Резеда Надирова йырлай, Билал менән Ҡыҙ сәкәштереп шарап эсәләр ҙә бейейҙәр.**

**Файза улар янына инә.**

**Файза.** Раечка, бар, Билал Саматовичҡа төшкө аш килтер.

**Билал.** Фаизочка, бар, һин килтер. Раечка менән беҙҙең һүҙ бөтмәне әле. Шулай бит, Раечка!

**Ҡыҙ.** Шулай.

**Файза китә. Билал менән Раечка бейей. Ҡабул итеү бүлмәһенә Ансаф инә. Ул ҡатын-ҡыҙ кейемендә. Дөрөҫө – Резеда булып кейенгән. Кейеме артисткаларҙыҡы кеүек бик сыбар. Аҡ сәс, сыбар күҙлек һ.б.**

**Ансаф.** Һаумыһығыҙ! Әллә бер кем дә юҡ инде?.. Был ҡатын-ҡыҙҙарҙы аңламаҫһың. Ирҙәргә оҡшайбыҙ тип ифрат ыҙа сигәләр икән. Сквознякта арт яҡ туңды. Салбар булмағас, аҫтан өрә. Ә баш, киреһенсә, тирләп бөттө бынау парик менән. Ә был осло дағалы туфли! Туфли түгел, торғаны яза бит был! Ҡатын-ҡыҙҙарҙы ыҙалатыр өсөн ирҙәр уйлап сығарғандыр быны! Меҫкендәр, нисек атлап йөрөйҙәр икән? Тубыҡ сыҡты, буғай...

**Ансаф париген сисеп, тирен һөртә, туфлийын сисеп, аяғын ыуалай, юбкаһын өҫкә күтәреп, тубығын тотҡолап ҡарай. Файза инә, ул Ансафты күрмәй. Ансаф тиҙ генә париген, туфлийын кейә, юбкаһын төшөрә, матур итеп ултыра.**

**Ансаф.** Һаумыһығыҙ!

**Файза.** Һаубыҙ әле. Бөгөн Билал Саматович бер кемде лә... Туҡтағыҙ! Һеҙ кем? Һеҙ бит... Резеда!

**Ансаф.** Таныйһығыҙ икән.

**Файза.** Билал Саматович! Билал Саматович!

**Файза кабинетҡа йүгереп инеп китә.**

**Ансаф.** Башланды! Бисмиллаһир-рахманир-рахим! Ансаф, давай!

**Кабинеттан Билал, Файза һәм Ҡыҙ сыға.**

**Билал.** Һаумыһығыҙ!

**Ансаф.** Һаубыҙ әле!

**Билал.** Йә, Хоҙай! Күҙҙәрем ни күрә? Резеда үҙе! Әҙәм ышанмаҫлыҡ хәл! Әйҙә, үтегеҙ! Беҙ Һеҙҙе бик яратабыҙ, хөрмәт итәбеҙ! Тауышығыҙға, йырҙарығыҙға табынабыҙ.

**Ансаф.** Рәхмәт, рәхмәт.

**Билал.** Бына күрәгеҙме, Һеҙҙең портреттар... Файза! Ҡайҙа улар? Сығар!

**Файза шкафтан портрет сығарып элә.**

**Ансаф.** Рәхмәт.

**Билал.** Ә иң һәйбәт портретығыҙ минең кабинетта. Рәхим итегеҙ! Раечка, Файза, табын! Резеда ханым, ниндәй юлдар ташланы һеҙҙе беҙгә? Гастролдәрме?

**Ансаф.** Гастроль дә... Берәй спонсорҙарса ярҙам итмәҫһегеҙме, тип килгәйнем.

**Ансар менән Билал кабинетҡа үтә. Ҡыҙ һәм Файза табын әҙерләй.**

**Билал.** Спонсор... Спонсор... Ауыр мәсьәлә инде ул... Илдә бит кризис... Ярай, бирәм мин Һеҙгә аҡса, бирәм. Яратҡан йырсым бит әле Һеҙ! Тик шартым бар.

**Ансаф.** Ниндәй?

**Билал.** Беҙҙең коллективҡа бушлай концерт бирәһегеҙ. Ризамы?

**Ансаф.** Риза!

**Билал.** Һөйләштек. Кәрәкле аҡса кеҫәгеҙҙә ята тип һанағыҙ. Ҡарағыҙ әле! *(Шкафтан картина сығара.)*

**Ансаф.** Шәп!

**Билал.** Резеда ханым, Һеҙҙең тауышығыҙ бик ҡалын икән. Ә бит йырлағанда...

**Ансаф.** Йырсыларҙың профессиональ ауырыуы – тамағыма һыуыҡ тейҙе.

**Файза.** Табын әҙер, Билал Саматович.

**Билал.** Резеда ханым, әллә йырлап ишеттерәһегеҙме? Мин Һеҙҙең йырлауығыҙҙы шундай яратам!

**Ансаф.** Юҡ, юҡ, тамағым! Минең компакт-диск юҡмы? Шуны ҡуйығыҙ.

**Билал.** Бар, бар! Нисек булмаһын? Миндә Һеҙҙең бөтә компакт-дискыларығыҙ бар. Хатта өсөшәр. Береһе – бында, икенсеһе – өйҙә, өсөнсөһө – машинала. Гел тыңлап йөрөйөм. Файза, ҡуй әле тегене!

*Тулҡындар, тулҡындар!*
*Ярҙарға ҡаҡмағыҙ!*

**Билал.** Әйҙәгеҙ, осрашыу хөрмәтенә. Һеҙгә виномы?

**Ансаф.** Эскәс, араҡыһын эсәйек инде уның!

**Билал.** Әртистәр араҡы ярата, тигәндәре дөрөҫ икән. Һеҙ кейәүҙәме ул?

**Ансаф.** Хәҙер бит нормальный ирҙәр юҡ. Холостой. Әй, буйҙаҡ. Короче, тол.

**Билал.** Ирегеҙ үлдеме ни?

**Ансаф.** Ирем? Бер ҡасан да булманы.

**Билал.** Ә-ә... Тол тигәнгә әйтәм дә.

**Ансаф.** Ирҙәр үлгәнен ишетһәм, үҙемде тол итеп тоям. Секретаршағыҙ бында. Приемныйға берәйһе килеп ҡуйһа?

**Билал.** Килһә, көтөр.

**Ансаф.** Көттөрөргә ярамай.

**Билал.** Бер кем дә юҡ унда. Әйҙәгеҙ.

**Ансаф.** Ә миңә бар кеүек.

**Ҡабул итеү бүлмәһенә сығалар. 3-сө кеше инә, ҡулында – көрәк.**

**3-сө кеше.** Баллонды күмдем. Ҡасан газды тоҡандырабыҙ?

**Билал.** Ниндәй газ? Ә-ә! Бөттө, дуҫҡай! Кире ҡаҙып ал баллоныңды.

**3-сө кеше.** Нисек? Күпме тырыштым. Хәҙер кире алырғамы?

**Билал.** Алырға! Министр килмәй!

**3-сө кеше.** Бәлки, ятһын! Килә ҡалһа...

**Билал.** Юҡ, юҡ! Ярамай! Хәүефһеҙлек техникаһы. Алып ҡуй!

**3-сө кеше.** Шайтан алғыры! Күпме тырыштым...

**3-сө кеше сыға.**

**Билал.** Файза! Ҡаршы алыу командаһына шылтырат. Отбой! Ҡайтһындар! Килмәй министр!

**Файза.** Алло! Ҡаршы алыу командаһымы? Отбой! Ҡайтығыҙ! Эйе, ҡайтығыҙ! Килмәй министр. Ундағы аттар көтөүсеһенә лә әйтегеҙ. Булды. Ҡайтһындар ауылына.

**Ҡыҙ.** Билал Саматович, ярай, мин китәйем.

**Билал.** Эйе, Раечка, китеп тор. Бында Фаечка бер үҙе лә... Аҙаҡ саҡырырмын.

**Ҡыҙ.** Пока!

**Ҡыҙ китә.**

**Билал.** Һеҙҙе бейергә саҡырырға мөмкинме?

**Ансаф.** Юҡ, юҡ! Минең аяғым ауырта. Осло дағалы туфли – Алла һаҡлаһын икән ул.

**Билал.** Резеда ханым, зинһар! Беҙ ипләп кенә. Рәхим итегеҙ!.. Мин Резеда Надирова менән бейеп йөрөйөм! Кешегә һөйләһәң, ышанмаç.

**Ансаф.** Билал Саматович, етте.

**Билал.** Һеҙ миңә Билал тип кенә өндәшегеҙ. Билалчик!

**Ансаф.** Билал. Билалчик!

**Билал.** Һеҙҙең ауыҙҙан бигерәк матур яңғырай.

**Был ваҡытта ҡабул итеү бүлмәһенә Мәликә инә. Ул аҡ сәсле, ҡыçҡа юбкала, ҡара күҙлек кейгән.**

**Мәликә.** Һаумыһығыҙ! Бер кем дә юҡ... Музыка! Резеда йырлай! Ансаф бында!.. Был диктофондың нисек эшләгәнен онотоп ҡуймайым. Бында басһаң, тоҡана шикелле... Алло, алло! Был мин – Мәликә. Бөгөнгә мин журналистка, исемем – Лариса! Тыңлап ҡарайым әле. Яҙҙымы икән? Яҙмаған!.. Йә, Хоҙай! Бөтә планыбыҙ юҡҡа сыға! (*Сотовыйҙан шылтырата.*) Алло! Низам, һин ҡайҙа? Тиҙ килеп ет! Диктофон эшләмәй!

**Кабинетта**.

**Ансаф.** Унда кемдер килде!

**Билал.** Файза, ҡара әле.

**Файза кабинеттан сыға.**

**Файза.** Һаумыһығыҙ, һеҙ кем?

**Мәликә.** Һаумыһығыҙ. Мин журналистка. Исемем Лариса. Билал Саматовичтан интервью алырға килдем.

**Файза.** Бөгөн уның ваҡыты юҡ. Ниңә иçкәртмәй киләһегеҙ?

**Мәликә.** Ул миңә... теләгән ваҡытта кил, тигәйне.

**Файза.** Ҡасан?

**Мәликә.** Э-э... Бер аҙна элек.

**Низам инә.**

**Мәликә.** Иптәш! Һеҙ диктофон йүнәтә беләһегеҙме? Минеке ниңәлер эшләмәй.

**Низам.** Һеҙ кем?

**Мәликә.** Корреспондентка.

**Низам.** Ысынлап та, эшләмәй. Файза, прессаға ярҙам итәйек әле. Бухгалтерияла бер диктофон бар, килтер әле шуны.

**Файза китә.**

Ни булған? Яңы ғына эшләй ине бит.

**Мәликә.** Белмәйем. Гөлсара апай нисек унда?

**Низам.** Әҙер тиерлек. Хәҙер килә. Мәликә... ғәфү ит мине...

**Мәликә.** Һиңә асыуланып буламы ни? (*Ҡосаҡлашалар.*)

**Файза инә.**

**Файза.** Бына.

**Низам.** Алло, алло! Бер, ике, өс!

**Тауыш.** Алло, алло! Бер, ике, өс!

**Низам.** Эшләй.

**Мәликә.** Рәхмәт, Ни... зам.

**Низам.** Икенсе диктофоныңды боҙма, иптәш корреспондент. Һеҙ Билал Саматовичҡамы?

**Мәликә.** Эйе.

**Низам.** Файза, бар, әйт Билал Саматовичка, корреспондент килгән, тиген.

**Файза кабинетҡа инә.**

**Низам.** Иң мөһиме – взятка хаҡында һөйләндер. Нисек тә, взятка алам, тип әйттер ҙә шуны диктофонға яҙып ал. Шул саҡта ул беҙҙең ҡармаҡта буласаҡ.

**Мәликә.** Аңлайым! Тик ул әйтерме икән?

**Низам.** Тырышығыҙ. Араҡы эсерегеҙ. Иҫерһә, уның теле асыла ул.

**Кабинетта.**

**Файза.** Билал Саматович, унда һеҙгә бер журналист килгән. Бер аҙна элек осрашырға һөйләшкәйнек, ти.

**Билал.** Күрмәйһеңме ни, мин занят! Ары йөрөһөн!

**Ансаф.** Туҡта, ниндәй журналист? Исеме нисек?

**Билал.** Эйе, ир журналисмы, әллә бисәме? Был хәҙер бик мөһим!

**Файза.** Бисә. Лариса Байгилдина.

**Билал.** О-о! Тем более! Йәһәннәм аръяғына сығып китһен! Назар Хазарович әйтте бит! Бисә журналист – кеше түгел, тине. Мин дә яратмайым бисә журналист менән бисә йырсы... Ғәфү! Мин Һеҙҙе яратам. Бар, әрләп сығар, башҡаса килеп йөрөмәһен!

**Ансаф.** Билал Саматович, туҡта! Инһен! Мин журналистарҙы яратам. Улар бит мине маҡтап яҙалар, миңә реклама яһайҙар. Ә Лариса Байгилдина – бик билдәле журналистка. Ул да яҙып ташлар. Инһен!

**Билал.** Юҡ, юҡ! Бисә журналист менән һөйләшмәйем башҡаса! Бар, бар, әйт! Эҙе булмаһын!

**Файза алъяҡҡа сыға.**

**Файза.** Билал Саматович ҡабул итә алмай.

**Низам.** Нисек? Ҡана әле!

**Низам кабинетҡа инә.**

Һаумыһығыҙ! О! Резеда Надирова! Бик шатмын! Билал Саматович, унда бер корреспондентка килгән...

**Билал.** Яҡын йөрөмәһен, ҡыу! Күрмәйһеңме ни, ваҡытым юҡ!

**Низам.** Билал Саматович, ул республика гәзитенән. Беҙҙе маҡтап яҙырға килгән. Мин инде комитеттың бөтә уңышлыҡтарын уға һөйләнем, һеҙҙән ике һүҙ ишетергә теләй. Комитетты маҡтап яҙып, етәксе бер һүҙ ҙә әйтмәһә, насар булыр, ти.

**Билал.** Шулай тейме? Дөрөҫ әйтә бит! Инһен, улай булғас!

**Низам ҡабул итеү бүлмәһенән сыға.**

**Низам.** Иптәш корреспондентка, рәхим итегеҙ!

**Мәликә.** Рәхмәт!

**Мәликә кабинетҡа инә.**

**Мәликә.** Һаумыһығыҙ! Лариса минең исемем. „Йәшлек“ гәзитенең корреспонденты.

**Билал.** Һаубыҙ, әйҙә, үтегеҙ. Беҙ яратабыҙ журналистарҙы. Рәхим итеп табынға ултырығыҙ.

**Мәликә.** Һеҙ бит – Резеда Надирова!

**Ансаф.** Эйе, һаумыһығыҙ!

**Мәликә.** Юҡ, мин ултырып тормам. Мин бер-ике һорау...

**Билал.** Өлгөрөрбөҙ! Бөтәһенә лә өлгөрөрбөҙ! Ултырығыҙ! Ә хәҙер тост! Тормошобоҙ биҙәге булған йырсы һәм журналист бисә... ғәфү! Ҡатындар өсөн! Назар Хазарович ишетеп ҡалмаһын! *(Эсәләр.)*

**Мәликә.** Билал Саматович, миңә эшемдә онотторға ярамай. Беҙгә уҡыусыларҙан бик күп хаттар килә. Уларҙа йыш ҡына ошондай һорау була. Ни өсөн бөтә учреждениеларҙа ла берәй ҡарар сығартайым тиһәң, йөҙ ҡултамға, йөҙ справка йыйырға кәрәк? Уларҙы йыйғас та барыбер ҡарарҙы раҫлатыуы – мең бәлә. Ни өсөн?

**Билал.** О-о! Был бик философик һорау! Уға яуап биреү өсөн... Ҡыҙҙар! Әйҙә, лүтсе эсәйек! Ошо креслоның артына мемориаль таҡта эләм әле! „Бында Резеда Надирова ултырҙы!“ Мин яратам Һеҙҙе, Резеда ханым! Лариса, Һеҙҙе лә яратам! Әйҙәгеҙ, мөхәббәт өсөн!

**Ансаф.** Билалсик! Лариса биргән һорауҙы онотмағыҙ.

**Билал.** Ниндәй һорау? Ә-ә!.. Шул Һеҙгә ҡыҙыҡмы?

**Ансаф.** Бик ҡыҙыҡ. Мин үҙем шундай хәлгә эләктем. Гаражымды емерергә итәләр...

**Билал.** Һеҙҙекен дәме?

**Ансаф.** Эйе. Өфөлә.

**Билал.** Кит, булмаҫ! Резеда Надированың гаражын емерергә?! Әйтегеҙ, кем баҙнат итте? Бына, күрерһегеҙ, мине Өфөгә эшкә аласаҡтар, министерствоға. Өфөгә барып ултырғас та ул әҙәмде эшенән ҡыуам! Әйтегеҙ: кем емерә? Ниңә емерә?

**Ансаф.** Яңы юл һалалар, шуға урын кәрәк.

**Билал.** Ҡара, һеҙҙә лә шул уҡ хәл икән.

**Ансаф.** Ләкин юлды саҡ ҡына урап үткәреп, минең гаражға теймәҫкә лә була. Әммә „Юлды урап үткәрергә" тигән ҡарарҙы иң ҙур түрә һис тә раҫламай. Ни өсөн?

**Билал.** Ха! Дөрөҫөн әйтәйемме, әллә алдайыммы?

**Мәликә.** Дөрөҫөн әйтегеҙ, дөрөҫөн!

**Билал.** Эйе! Аҙаҡ яҙып сығарырһың мин һөйләгәндәрҙе гәзитеңдә. Шунан минең артыма – „шап!" типһендәрме? Юҡ, булмай. Алдайым!

**Ансаф.** Алдама, Билалчик, әйт дөрөҫөн. Миңә бит белергә кәрәк ысын сәбәпте.

**Билал.** Тик һин, Лариса, мин һөйләгәндәрҙе гәзитеңә яҙмайһың!

**Мәликә.** Юҡ, яҙмайым.

**Билал.** Ант ит!

**Мәликә.** Антым-шинтем, ер йотһон!

**Билал.** Интервью әҙер булғас, килтереп уҡытаһың. Үҙем ҡарап сығам. Уйын эш түгел был, ҡыҙҙар!

**Мәликә.** Тимәк? Ни өсөн түрә ҡарарға ҡултамғаһын ҡуймай?

**Билал.** Бында аңлатып тороуҙың кәрәге юҡ. Взятка көтә, Резеда ханым, взятка! Эт! Хайуан! Резеда ханымдан – взятка!

**Ансаф.** Бәлки, бирергә лә ҡотолорғалыр? Ниндәйерәк сумма икән ул?

**Билал.** Һәр нәмәнең үҙ ставкаһы бар. Гаражды емертмәү гараж өсөн урын алыу менән бер. Илле мең!

**Мәликә.** Илле мең?! Бер ҡултамға өсөн!

**Билал.** Күп түгел, һис тә күп түгел. Ер, урын һорап йөрөүселәр эт тубығынан. Әгәр ҡултамға ҡуйыусы түрә башҡалар араһынан һине һайлаған икән, һиңә генә ер биргән икән, һин уға рәхмәт белгертергә тейешһең. Мин был практиканы һәйбәт нәмә тимәйем. Әммә борон-борондан шулай килгән инде ул. Үҙебеҙгә изгелек эшләгән кешегә рәхмәт белдерергә тырышабыҙ. Йолаһы шулай. Әммә, иптәштәр, быға ҡаршы көрәшергә кәрәк. Быны шул көйө ҡалдырырға ярамай. Бына беҙ көрәшәбеҙ. Бик ныҡ көрәшәбеҙ.

**Мәликә.** Ә өйгә ер алыу өсөн күпме взятка бирергә кәрәк?

**Билал.** Өфөләме, беҙҙәме?

**Мәликә.** Һеҙҙә.

**Билал.** Беҙҙә... өйгә ер алыу өсөн... Һин нимә, Лариса! Беҙҙә взятка юҡ! Ҡала хакимиәте менән берлектә көрәшеп, беҙ ул насар күренеште төбө-тамыры менән йолҡоп алып ташланыҡ! Эйе, беҙҙә взятка биреү һәм взятка алыу кеүек нәмә күптән бөттө! Ҡотолдоҡ, Аллаға шөкөр!

**Мәликә.** Ә һеҙҙең кеүек башҡа бәләкәй ҡалала өйгә ер алыу өсөн күпме бирәләр взятканы?

**Билал.** Эйе, башҡа бәләкәй ҡалаларҙа взятка алыу бик сәскә ата! Өй өсөн ергә – йөҙ мең!

**Мәликә.** Ә киоскыға урын алыу өсөн?

**Билал.** Бәләкәй ҡалала – илле мең. Ярай, етте эш хаҡында!

**Ансаф.** Билалчик, һин взятка алғанһыңдыр бит.

**Билал.** Юҡ, юҡ. Что Һеҙ!

**Ансаф.** Бер тапҡыр ғына, Билалчик, ошолай бәләкәй генә! Минән йәшермә инде!

**Билал.** Ярай, әйтәйем, Һеҙгә генә

әйтәм. Гонаһлымын. Бер тапҡыр алдым. Булды ундай хата.

**Ансаф.** Ә взятка алмайынса булмаймы?

**Билал.** Булмай, Резедаҡай, булмай. Бөтә түрәләр взятка ала. Ҡалала төҙөлөш бара икән, хужаһы шуның ун процентын үҙ кеҫәһенә һала тигән һүҙ. Йолаһы шулай. Быны бөтәһе лә белә. Рәсәйҙә күптән шулай киткән инде ул. Достоевский әйткән бит: „Рәсәйҙе ришүәтселектән бер ҡасан да ҡотҡарып булмаясаҡ“.

**Мәликә.** Ә һин нисек тотолмайһың?

**Билал.** Ә-ә! Чукча однако умный! Мин уны ярҙамсым аша алам.

**Мәликә.** Улай икән...

**Билал.** Ярай, етте эш хаҡында! Әйҙә, йырлашып ултырайыҡ.

*Мөхәббәт юҡ, тимә,*
*Көт уны гел генә.*
*Килер ул мөхәббәт,*
*Көтә һин бел генә.*

*Тулҡындар, тулҡындар,*
*Ярҙарға ҡаҡмағыҙ,*
*Һағыш-көйөүҙе*
*Күңелгә һалмағыҙ!*

**Ансаф.** Туҡта әле, Билалчик. Хәҙер миңә ни эшләргә? Нисек гаражды ҡотҡарып ҡалырға?

**Билал.** Аҡыллы кәңәш әйтәйемме, Резедаҡай?

**Ансаф.** Әйт, Билалчик, әйт!

**Билал.** Ул взятканы бир ҙә ҡотол.

**Ансаф.** Нисек? Шундай ҡот осҡос кәңәш әйтәһеңме?

**Билал.** Әйтәм. Взятка – рәхмәт белдереү бит ул. Бына Һеҙ минән спонсор аҡсаһы һоранығыҙ. Уға рәхмәт әйтеп, беҙгә бушлай концерт күрһәтергә булдығыҙ. Ә бушлай концерт та, бер яҡтан ҡараһаң, – взятка бит ул, икенсе яҡтан ҡараһаң,– рәхмәт әйтеү.

**Мәликә.** Әгәр һеҙ ришүәтселек тураһында шулай уйлай икәнһегеҙ... Был бит ҡот осҡос!

**Билал.** Бер ҙә ҡот осҡос түгел, Ларисаҡай. Һинең башың әле иҫкесә, советса, фекерләй. Күҙеңде асып ҡара. Беҙҙә күптән капитализм! Ә капитализмдың төп законы ниндәй? Үҙеңә ярҙам иткән кешегә рәхмәт әйт, йәғни взятка бир! Березовский, Абрамовичтар нисек тиҙ байыны, тиһең. Взятка биреп байыны, взятка биреп бөтә ил байлығын ҡулына алды. Ходорковский взятка бирмәгәйне, төрмәгә ултырттылар. Белеп ҡуй, Лариса. Түрә бит взятканы үҙенә генә алмай. Уның үҙенә ярҙам иткән кешеләре бар. Ул бит шулар менән бүлешә. Үҙенә тырнаҡ осондайы ғына ҡала. Ана шуға ла взятка алмаған түрә оҙаҡ эшләй алмай урынында. Уны ҡыуалар. Хужалары ҡыуа. Сөнки уларҙың кеҫәһенә аҡса килеүҙән туҡтай.

**2-се кеше инә. Ҡулында – салғы.**

**Мәликә.** Йә, Хоҙай, был кем?

**2-се кеше.** Ҡушҡанды саптым. Тағы ҡайҙа сабырға?

**Билал.** Беҙ уның үҙен саптыҡ! Булды, дуҫҡай, етте! Рәхмәт!

**2-се кеше китә.**

**Мәликә.** Салғы тотҡас... Үлем килгән тип торам...

**Низам инә.**

**Низам.** Эштәр нисек, ҡыҙҙар?

**Мәликә.** Шәп! Булды! *(Баш бармағын күрһәтә.)*

**Билал.** Низам Әнүәрович, әйҙә, беҙҙең менән!

**Низам.** Хәҙер киләм!

**Низам китә.**

*Килер ул мөхәббәт*
*Тулҡындай йүгереп.*
*Күңелде ялмар ул*
*Йырлатып, тилертеп!*

*Тулҡындар, тулҡындар,*
*Ярҙарға ҡаҡмағыҙ,*
*Һағыш-көйөүҙе*
*Күңелгә һалмағыҙ!*

**Ҡабул итеү бүлмәһе. Низам менән Гөлсара авансценаға килә. Низам сотовыйҙан шылтырата.**

**Телефон шылтырай**.

**Файза.** Алло! Комитет тыңлай!

**Низам** *(тауышын үҙгәртеп һөйләшә)*. Был тағы Мәскәүҙән, Аллабирҙин. Бая әйтергә онотҡанмын. Назар Хазаровичтың тағы бер сәйер холҡо бар. Уның тикшерергә килерен көткәндә юрамал, килмәйем, тип тынысландыра ла әйтмәй генә, көтмәгәндә килә лә төшә. Шуға һаҡ булығыҙ!

**Файза** *(трубканы һала)*. Йә, Хоҙай! Сәғәт ике! Алло! Ҡаршылау командаһымы? Отбой! Ә юҡ, киреһенсә, тревога! Кире барып тороғоҙ ҡала ситенә! Министр килә! Эйе, килә!.. Киләһе минутта уҡ килеп инеүе бар бит! Ә Билал Саматович кабинетында – йырсы бисә! Журналист бисә! Эсеп ултыралар!!! Ужас! Билал Саматович! Билал Саматович!

**Файза кабинетҡа йүгереп инә. Гөлсара менән Низам ҡабул итеү бүлмәһенә инә. Гөлсара ирҙәр кейемендә, түрәләр кеүек кейенгән. Күҙлекле.**

**Гөлсара.** Бер кем дә юҡ.

**Низам.** Ҡалыныраҡ, уҫалыраҡ тауыш менән, ашыҡмай һөйләшергә тырыш, Гөлсара апай.

**Гөлсара.** Һау-мы-һы-ғыҙ!

**Низам.** Ана шулайыраҡ!

**Гөлсара.** Был күҙлеге бәлә. Танауҙан төшөп бара. Әллә сисәйем дә ырғытайыммы?

**Низам.** Юҡ, юҡ! Танып ҡалыр! Ҡыҙҙар уны взятка алыуы хаҡында һөйләткән, диктофонға яҙып алған. Хәҙер ҡарарҙарға ҡул ҡуйҙыраһы ҡалды!

**Гөлсара.** Һәм Мәликә алдында ғәфү үтендерәһе!

**Кабинеттан Файза сыға.**

**Файза.** Һаумыһығыҙ.

**Гөлсара.** Мин – Өфөнән. Назар Хазарович булам.

**Файза.** Наз... На-зар... Хаз... зарович? Йә, Хоҙай!.. Билал Саматович! Билал Саматович!

**Файза йүгереп кабинетҡа килеп инә.**

Унда! Унда!

**Билал.** Ни булды?

**Файза.** Унда! *(Соҡолдай башлай.)* Ыҡ!

**Билал.** Мә, һыу эс! Нимә – унда?

**Файза.** Наз... ыҡ!.. зар... Хаз... ыҡ!.. зарович килде!

**Билал.** Ниндәй Назых Хазыҡ?

**Файза.** Наз... зарович!

**Билал.** Назар Хазаровичмы?

**Файза.** Эйе... ыҡ!

**Билал.** Ә?!?! Ысынмы? Яңылышмайһыңмы?

**Файза.** Ысын! Үҙе әйтте! Тотто ла, мин – Назар Хазарович, тине.

**Билал.** Йә, Алла! Тиҙ генә алығыҙ! Вино, араҡыларҙы алығыҙ! Ә һеҙ? Йырсы бисә, журналист бисә! Күҙемдән юғалығыҙ! Күҙемдән юғалығыҙ, тием! Файза, бар, тот! Индермәй тор! Бар, тием, нимә ҡарап тораһың! Килеп инә бит!

**Файза ҡабул итеү бүлмәһенә китә.**

Атағыҙҙың башын ҡарап тораһығыҙмы? Йәшенегеҙ теге бүлмәгә! О! Портрет!

**Стенанан Резеданың портретын алып, шкафҡа йәшерә.**

**Ансаф.** Ни булды? Билалчик? Ниңә шулай ҡотоғоҙ осто?

**Билал.** Түрә килде, палач! Төпкә! Төпкә! Тиҙ булығыҙ!

**Ансаф.** Этмә мине! Инмәйем!

**Мәликә.** Алығыҙ ҡулығыҙҙы! Юҡ! Китегеҙ бынан!

**Билал.** Йә, Хоҙай!

**Ҡабул итеү бүлмәһендә.**

**Гөлсара.** Ниңә ҡаршы алмай?

**Файза.** Хәҙер үҙе сыға, Назар Хазарович! Саҡ ҡына көтөгөҙ инде, зинһар, саҡ ҡына!

**Низам.** Һин нимә, Файза? Назар Хазаровичты көттөрөү гонаһ! Әйҙәгеҙ!

**Кабинетҡа Гөлсара**
**һәм Низам инәләр.**

**Гөлсара.** Һаумыһығыҙ. Мин – министр булам! Ниңә мине ҡаршы алмайҙар?

**Мәликә.** Һаумыһығыҙ. Түргә үтегеҙ!

**Ансаф.** Һаумыһығыҙ! Беҙҙең табынға рәхим итегеҙ!

**Билал улар һаулыҡ һорашҡан арала улай-былай йүгерә, бөршәйеп төшә, меҫкен хәлгә ҡала. Ул әкрен генә өҫтәле артына барып ултыра. Бик бәләкәсәйеп киткәс, өҫтәл артында күренмәй ҙә.**

**Гөлсара.** Һеҙ кем булаһығыҙ?

**Ансаф.** Мин – йырсы бисә!

**Мәликә.** Мин – бисә журналист! Беҙҙе Билал Саматович саҡырҙы.

**Ансаф.** Эйе, Билалчик саҡырҙы. Беҙ уның кабинетында араҡы эсеп ултырабыҙ!

**Гөлсара.** Ә һеҙ беләһегеҙме, мин бисә журналист менән бисә йырсыны күрә алмайым! Неужели Билал Саматович ошолар менән араҡы эсеп!.. Эсеп ултыра?!

**Был һүҙҙәрҙе ишеткән һайын Билал өҫтәл артына ныҕыраҡ сүгә.**

**Ансаф.** Эстек! Эстек! Һеҙ ҙур түрәме? Әйҙә, беҙҙең менән араҡы эсергә! Билалчик менән! Вот ул эсә! Һемерә! Билалчик! Һин ҡайҙа? Ҡайҙа йәшендең? Әйҙә, араҡы әсәбеҙ! Билалчик!

**Эҙләйҙәр.**
**Шкафтарҙы асып ҡарайҙар.**

**Ансаф.** Тәҙрә асыҡ! Әллә ырғынымы икән?

**Гөлсара.** Ырғыған!

**Мәликә.** Юҡ! Ундай әҙәм тәҙрәнән ырғымаҫ. Эҙләгеҙ!

**Низам Билалды күреп ҡала.**

**Низам.** Бына ултыра бит! Билал Саматович! Ниңә өндәшмәйһегеҙ? Һеҙҙе эҙләйбеҙ бит!

**Билал.** Һеҙ мине эҙләйһегеҙме ни? Ә мин аптырайым, былар нимә эҙләй икән, тип.

**Гөлсара.** Һине эҙләмәй, атаңдың башын эҙләй тиһеңме? Был ниндәй табын?

**Билал.** Төшкө аш, Назар Хазарович, төшкө аш!

**Гөлсара.** Араҡы менәнме?

**Билал.** Дошмандар ҡуйған, Назар Хазарович, дошмандар!

**Гөлсара.** Ә былар кемдәр?

**Билал.** Белгән кешеләрем түгел. Тәүгә күрәм.

**Ансаф.** Билалчик! Нимә һөйләйһең? Беҙ әле генә ошонда бергәләп араҡы эстек!

**Билал.** Юҡ, юҡ! Башыма бәлә яҡмағыҙ! Мин һеҙҙе белмәйем дә, күрмәнем дә!

**Гөлсара.** Алдашаһың бит!

**Билал.** Юҡ, алдашмайым, Назар Хазарович! Антым-шинтем!

**Мәликә.** Хәҙер алдашҡанды иҫбат итәм бит. Бир әле диктофонынды! *(Тоҡандыра.)*

**Ансафтың тауышы.** Билалчик! Һин шәп егет!

**Ансаф.** Минең тауыш!

**Билалдың тауышы.** Резеда ханым! Әйҙә, берҙе эсәйек тә йырлашып алайыҡ!

**Гөлсара.** Быныһы кемдең тауышы? Кемдеке, тием?

**Мәликә.** Билалдыҡы!

**Билал.** Минеке.

**Ике милиционер килеп инә.**

**1-се милиционер.** Ҡайҙа хулигандар? Кем хулиган?

**Билал.** Һеҙгә кем кәрәк?

**1-се милиционер.** Хулигандар!

**2-се милиционер.** Беҙгә һеҙҙән шылтыратҡандар. Иҫерек хулигандар һөжүм иткән икән һеҙгә. Ҡайҙа улар?

**1-се милиционер.** Ошолармы? Фамилияларығыҙ?

**Билал.** Былар – беҙҙең кешеләр!

**Низам.** Ә хулигандар китте! Килгәнегеҙ өсөн рәхмәт! Хушығыҙ.

**Билал.** Эйе, китегеҙ!

**1-се милиционер.** Туҡтағыҙ! Бик шикле әҙәмдәр. Документтарығыҙ!

**2-се милиционер.** Районда артист булып кейенгән бандиттар йөрөй, һаҡ булығыҙ. Шуға беҙ таныш түгел кешеләрҙе тикшерергә тейеш. Документтарығыҙҙы бирегеҙ әле?

**Билал.** Ниндәй бандит? Был – беҙҙең министр!

**Низам.** Был – танылған йырсы Резеда Надирова! Был – билдәле журналистка Лариса Байгилдина.

**1-се милиционер.** Ошо – министр?! Был ниндәй министр булһын! Был бит!.. Был...

**Гөлсара.** Яҡын килмә!

**2-се милиционер.** Һеҙ йырсымы, һеңлем? Зинһар, гастроль удостоверениеғыҙҙы күрһәтегеҙ!

**Ансаф.** Кит әле бынан!

**Низам.** Бәйләнмәгеҙ! Улар – беҙҙең ҡунаҡ! Китегеҙ!

**1-се милиционер.** Тауышы бисәнеке! Был бит – бисә!

**2-се милиционер.** Һеңлем, ғәфү итегеҙ, һеҙҙең тауыш – ирҙәрҙеке! Ниңә улай?

**Низам.** Түгел! Түгел! Улар…

**1-се милиционер.** Улар кейемдәрен алмаштырған. Улар – бандит!

**2-се милиционер.** Ғәфү итегеҙ, ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ!

**Гөлсара. Ансаф. Мәликә.** Юҡ, юҡ! *(Китә башлайҙар.)*

**1-се милиционер.** Ҡасалар! Тотоғоҙ!

**1-се милиционер уларға барып йәбешә, Ансафтың паригын, Гөлсараның күҙлеге менән мыйығын, Мәликәнең күҙлеген йолҡоп ала.**

**2-се милиционер.** Бисә!

**1-се милиционер.** Ир!

**Билал.** Һин?! Һин бит Резеда түгел! Ә һин!.. Һин... Хәҙер кәрәгегеҙҙе бирәм! Үлтерәм өсөгөҙҙө лә!

**1-се кеше инә.**

**1-се кеше.** Нимә, йәнә ҡаршы алабыҙмы ни? Кире барып торорғамы ни ҡала ситенә?

**Билал.** Вон!

**1-се кеше.** Аңланым.

**1-се кеше сыға.**

**Гөлсара.** Бик үлтерә алмаҫһың! Беҙ һине фашлайбыҙ! Бында бөтәһе лә яҙылған!

**Билал.** Нимә яҙылған? Взятка алам, тип яҙылғанмы? Шунан? Алам мин взятка! Алам! Бына милицияға әйтәм! Алам. Улар ҙа белә. Сөнки улар үҙҙәре лә, түрәләре лә ала. Рәсәйҙә бөтә түрәләр ала! Ә һеҙ? Фашлайбыҙ, имеш! Нимәгә фашларға итәһегеҙ? Взяткаһыҙ ҡултамға алыу өсөнмө? Мә, ҡуям мин һеҙгә бушлай ҡултамға! Ҡуям, ҡайҙа ҡарарығыҙ, мә! Тик хәҙер ни бирермен хужаларға? Улар бының өсөн һеҙҙе ғәфү итмәйәсәк! Һеҙ шуны аңлайһығыҙмы? Юҡ, һеҙ үҙегеҙҙе генә уйлайһығыҙ, һеҙгә ҡултамға ғына кәрәк. Тик барыһын да фашлап, эштән ҡыуҙырып бөтә алмаҫһығыҙ! Тирә-йүндә, Рәсәйҙә нимә эшләнә? Һеҙгә барыбер! Ә Рәсәйҙе бит талайҙар. Рәсәй аҫҡа тәгәрәй. Шул борсомаймы ни һеҙҙе? Мине ҡыуҙырырһығыҙ. Шунан? Донъя үҙгәрер тиһегеҙме? Икенсе килер, тик белегеҙ: ул да аласаҡ. Өсөнсө килер, ул да аласаҡ. Нисек ҡотолорға был хәлдән? Бына шул хаҡта ҡайғырырға кәрәк! Ә һеҙ!..

**Файза йүгереп инә.**

**Файза.** Билал Саматович! Билал Саматович! Унда... Унда!.. Килде!.. Ысын Назар Хазарович!

**Гөлсара.** Күптән көтәбеҙ! Рәхим итһен!

**Билал.** Бөттөм!

**Билал, хәлһеҙләнеп, тубығына төшә. Ике милиционер, ҡолап китмәһен тип, уның ике беләгенән тота.**

**Шаршау.**



Линиза
ШАКИРОВА

# АҒА ҺЫУҘАР ҠИБЛАҒА…

ХИКӘЙӘ

Бишенсе ҡаттан ауыр келәмде Әклимә саҡ-саҡ һөйрәп төшөрҙө. «Ларс» итеп ергә төшкән келәмдән һуң «уф» тигән ауаз да ишетелде. Келәмен йәйеп, борхолдоғон сығарып ҡарға ҡуша тапаны. Инде күтәреп элергә ҡала. «Уф, ҡайһылай ауыр! Был хәтлем дә ауыр әйберҙе нисек һөйрәтмәк тә нисек элмәк кәрәк»? – тип үҙ алдына һөйләнә-һөйләнә, ҡарға бата-бата, көс-хәл менән тимер бағаналар яғына килтереп еткерҙе, ә элгәнендә аҙапланыуҙарын күрһәң! Бер яғын элһә, икенсе яғы шыуып төшә, икенсе яғын элһә, был яғы...

– Һаумыһығыҙ! Ҡайҙа, ярҙам итешәйем! – тигәнгә ҡапыл тертләп башын күтәрҙе. Боролоп ҡараһа, алдында буйһыу, ҡаҡса егет йылмайып тора. Матур, төпһөҙ, осҡон уйнаған ҡара күҙҙәр уға төбәлгән. Әклимә, мәшәҡәтләнеп йөрөп, егеттең алдына килеп баҫҡанын аңғармай ҙа ҡалған. Шунлыҡтан ҡапыл ҡаушап төштө.

– Баянан бирле һеҙҙе тәҙрәнән күҙәтеп торҙом да сығып ярҙам итергә булдым. Бер үҙегеҙгә ҡыйын бит, – тип келәмде йәтешләп элеп тә ҡуйҙы егет.

– Рәхмәт, – тиеүҙән башҡа сара ҡалманы Әклимәгә.

– Ауыр икән дә, нисек кенә күтәреп сығарҙығыҙ? – Егет келәмдәрҙе ҡағыша башланы. Юғалып ҡалған Әклимәгә ҡарап: – Гел шулай бер үҙегеҙ ҡағаһығыҙмы? – тип тә ныҡышты.

Ҡаушап ҡалыуҙан ҡыҙарған йөҙөн йәшерергә теләгәндәй, ҡыҙ башын аҫҡа эйҙе.

– Э-э-э, йә әсәйем үҙе генә, йә бергәләп... Бөгөн ҡайтҡанын көтмәгәйнем шул.

– Хәҙер беҙ уны «һә» тигәнсе ҡағып, таҙартып ҡуябыҙ... Бына шулай... – Ят егет һүҙ ҡушып ҡараны, ә Әклимә, бөтөнләй ҡаушап, һөйләшмәне лә.

---

*Линиза Шакирова (1970) Белорет районының Ҡаһарман ауылында тыуған. Мәктәп йылдарында тәүге шиғырҙары райондың «Урал» гәзитендә, «Пионер» журналында баҫыла. Белорет педагогия училищеһын, БДУ-ны тамамлай. Оҙаҡ йылдар тыуған яғында уҡытыусы булып эшләй. Әлеге көндә Хәйбулла районы Мәмбәт ауылында тормошта, мәктәптә рус теле һәм әҙәбиәтенән уҡыта.*

Ярҙамсыл егет келәмде ҡағышып, килешле генә бөкләп, күтәреп фатирға индереп ҡуйҙы. Ҡыҙға, алдан йүгереп йөрөп, ишек кенә асырға ҡалды...

Бынан һуң Әклимәгә итәғәтле егет тураһындағы уйҙары тынғы бирмәне. «Һөйләшһәм ни булған? Исмаһам, исемен дә һораманым, әллә ниңә быуындарым бушап, ебенем дә төштөмсө... Шуны уйлап тик йөрөйөм? Уйламайым башҡаса... » – тип үҙен битәрләне. Уй теҙгенен тотоп буламы һуң? «Тәҙрәнән ҡарап торҙом», – тине, тимәк, бер йортта йәшәйҙәр. Ниңә быҒаса уны күргәне булманы һуң?

Ыжғыр бурандары менән ҡыш та үтеп китте. Әклимә яҙғы еләҫкә иркәләнеп йорт алдындағы эскәмйәлә ултыра ине, ҡапыл яңғырап киткән таныш тауышҡа тертләп ҡуйҙы.

– Һаумыһығыҙ!

Үтә лә яҡын, таныш тауыш! Әклимә башын күтәреп ҡараһа, алдында – теге мәлдәге серле егет күҙҙәренән осҡондар сәсрәтеп, йылмайып тора.

– Һаубыҙ! – тине Әклимә, осрашыу ҡыуанысын йәшерә алмайынса.

– Ял итәһегеҙме? Эргәгеҙгә ултырайыммы? – Егет, яуап та көтмәйсә, ҡыҙ эргәһенә ултырып алды.

– Эйе, саҡ ваҡыт табып, бөгөн генә сығып ултырҙым әле.

– Күпме йүгерһәң дә, ваҡыт еткереп булмай шул.

– Һеҙ бөгөн дә мине тәҙрәнән күргәс килеп сыҡтығыҙмы? – тине Әклимә уйынлы-ысынлы.

– Эйе, күреп ҡалып, һинең янына сыҡтым. – Егет аңғармаҫтан ғына «һин»гә күсте. – Таныш булайыҡ: исемем – Хөснидин.

– Мин Әклимә булам.

– Бына танышып та алдыҡ! Уҡыйһыңмы, әллә эшләйһеңме?

– Уҡыйым, тегенсегә, – тине лә Әклимә, үҙен борсоған һорауҙы бирә һалды. – Тәҙрәнән күреп сыҡтым, тинең. Мин был йортта бала саҡтан йәшәйем, бер ҙә һине күргәнем юҡ ул.

– Ә-ә-ә, – Хөснидин һүҙен йылмайып дауам итте. – Беҙ был яҡтың кешеләре түгел. Был фатирҙа ла ваҡытлыса йәшәйбеҙ.

– Ниндәй кешеләр һуң? – Әклимә ҡыҙыҡһыныуын йәшермәне.

– Беҙ Урта Азиянан. Милләтем – тажиҡ.

– Мин һине башҡорт икәнһең тип уйлағайным.

– Беҙ ни бер мосолман инде, динебеҙ бер. Хатта телдәребеҙ ҙә яҡын.

– Эйе шул, бер-береңде аңларға була, тик һеҙҙең телегеҙ беҙҙекенән ныҡ айырыла шикелле... – тип һүҙҙе эләктереп алырға тырышты ҡыҙ. – Йә, әйтәм, бер ҙә күренгәнең юҡ таһа?

– Теге мәлдән һуң, тиһеңме?.. Унан һуң үҙебеҙгә ҡайтып килдем...

Шул саҡ тәҙрә аша саҡырыу ишетелде:

– Әклимә-ә-әү, тиҙ генә ҡайт әле!

Әклимә ырғып торҙо ла подъезына йомолдо.

– Әсәйем нимәгәлер саҡырасы. Ярай, пока...

Артынан: «Осрашҡанға тиклем! » – тигән һүҙҙәр ишетелеп ҡалды.

Бынан һуң осрашыуҙар йышайҙы. Иғтибарлылығы, ихласлылығы, итәғәтлелеге менән Хөснидин Әклимәнең күңел түренә ныҡлап инде. Айырыуса яғымлы ҡарашы йөрәгенә үтеп, күңелен иркәләне. Бөтә ерҙе йәнләндереп, сафлыҡҡа күмеп килгән яҙ Әклимәнең дә күңелен елкендереп, уға саф мөхәббәт алып килде. Ә мөхәббәте уның яҙғы ташҡын кеүек ярһыу ҙа, эскерһеҙ ҙә ине. Ғашиҡ уты ялмаған ике йәш йөрәк хәҙер айырым тибә алмаҫ та кеүек.

Бер көндө Хөснидин күңелһеҙ генә:

– Һөйөклөм, миңә атайым үҙебеҙгә кире ҡайтырға ҡушып хат ебәргән, – тип һүҙ башланы. – Олоғайған атайыма баҡсаны ҡарауы ҡыйын. Үҙҙәрен дә ҡарарға кәрәк. Башҡаса был яҡтарға кире әллә киләм, әллә юҡ. Һөйгән йәрем, миңә кейәүгә сыҡ! – Хөснидин Әҡлимәне ныҕыраҡ ҡосаҡлап, күҙҙәренә ҡараны. – Мин һинһеҙ йәшәй алмайым. Ҡалдырмайым мин һине! Үҙем менән алып китәм!

– Туҡта... Нисек инде?!

– Никах уҡытабыҙ. Бөтәһе лә беҙҙеңсә, мосолманса булыр. Һин генә ҡаршы булма! – Хөснидин Әҡлимәгә үтенесле ҡарашын төбәне.

– Ҡалай еңел хәл итәһең ул!? – Ҡыҙ егеттең ҡосағынан ысҡынды ла фатирына йүгереп инеп китте. Хәлдең былдай боролош алырын көтмәгәйне Әҡлимә. Эйе, мөхәббәтен көтөп, буласаҡ йәрен күҙ алдына килтерергә тырышып хыялланғанда, тажиҡ егетенә ғашиҡ булырмын, тип кем уйлаһын?! Хәҙер ул Хөснидинһеҙ йәшәй ҙә алмаҫ һымаҡ. Үҙем менән алып китәм, ти бит. Һөйгәне менән ер сигенә китергә әҙер ҙә ул, тик бына әсәһе? Ул яңғыҙы ни эшләр?

Әҡлимә ике ут уртаһында ҡалды.

Хөснидин ғаиләләрендәге ун бер бала араһында – иң бәләкәйе. Шуға ла олоғайған ата-әсәһен ҡарау – туранан-тура уның бурысы. Ҙур емеш-еләк баҡсаһына ла ул яуаплы. Ваҡытында һыу һибеп, утап, ашлама һибеп, ҡоротҡостарҙан һаҡлап тормаһаң, баҡсаның һулырын көт тә тор. Ә бит ошо баҡсанан алған килемгә бөтә ғаилә ҡарап тора. Ана шул баҡсала үҫтергән емеш-еләкте был яҡтарға алып килеп һаталар ҙа инде.

...Ун һигеҙе тулмаған Хөснидин дә был тарафтарға юл алғанда, бөтә булмышым менән башҡорт ҡыҙына ғашиҡ булырмын, тип уйламағайны. Бында ул һөйгән йәрен осратыу ғына түгел, хатта был яҡтарҙы үҙһенеп, өйрәнеп тә китте. Хәҙер Әҡлимәне үҙе менән бергә алмаһа, ошо яҡтарҙа йөрәгенең яртыһын ҡалдырыр һымаҡ. Юҡ, нисек булһа ла уны кәләш итеп алып ҡайтыу фарыз. Тик бына әсәһенең ризалығын нисек яуларға? Бер бөртөк балаһын уның менән ситят ерҙәргә ебәрергә риза булырмы?

Әҡлимә тәүҙә әсәһе менән һөйләшеп ҡарамаҡсы булғайны, тегенеһе, ишеткеһе лә килмәй, сәсрәтә баҫып икенсе бүлмәгә сығып китте. Бер аҙҙан нисек сығып киткән – шулай ҡыҙыу баҫып кире килеп тә инде.

– Әсә күңеле – балала, бала күңеле – далала, тип тикмәгә әйтмәйҙәр икән. Кәңәш-төңәш итмәй, мине ташлап китмәксе булаңмы? Һинән башҡа минең кемем бар!? Бында, ней, үҙебеҙҙең егеттәр бөткәнме!? – тип бер-бер артлы һорауҙар бирә-бирә, ҡыҙының иларға етешкән йөҙөн күргәс, йомшара төштө. – Балам, ныҡлап уйла. Бынамын тигән егеттәр үҙебеҙҙә лә күп. Нужәли берәйһен тапманың?!

– Әсәй, ныҡ һәйбәт бит ул!

– Балам, ете ят ерҙә нисек йәшәрһең? Шуны уйланыңмы?

– Мин бер үҙем булмайым бит.

– Ә мине уйлайһыңмы? Егет һәйбәттер ҙә ул. Тик күңелем ятмай, бына күңелемә әллә нисек булып тик тора!

– Әсәй, бөтәһе лә һәйбәт булыр. Алда нимә булырын кем белә? Бәлки, кире үҙебеҙҙең яҡҡа ҡайтырбыҙ, бәлки, үҙеңде килеп алып китербеҙ, – тип әсәһен йыуатып, ҡосаҡлап, яурынына башын һалды ҡыҙ.

– Ә-ә-әй, балаҡайым, был тормошта бөтә нәмә лә һин уйлағанса булһа ине лә ул.

– Ҡурҡма, әсәй, бөтәһе лә яҡшы булыр! Бөтә нәмәне лә яҡшыға юра. Нисек юрайһың, шулай була, тип үҙең әйтәң дәһә. Юҡҡа бошонма, әсәй. Хөснидин насар кеше түгел, тинем дә инде. Иртәгә беҙгә киләм, ти. Һинең менән һөйләшергә уйлай. Килһенме, әсәй?

– Ярай, килһен, – тип әйтеүҙән башҡа сара ҡалманы әсәгә. Тотошлайы менән ғишыҡ уты ялмаған ҡыҙын туҡтата алмаясағын аңлай Шәмсиямал, тик йән киҫәген ете ят менән ебәргеһе килмәй шул. Етди аҙым эшләгәнендә кире һуғып, ҡаршылашып тороу ҡыҙының артабанғы яҙмышында уңышһыҙлыҡтар килтермәһен. Баштан ыңғай булмаһа, булмай, тиҙәр. Шуға ла бер бөртөк балаһына Хоҙайҙан бәхет, ғүмер һорап, фатихаһын бирҙе.

Йәштәр мәсеткә барып никах уҡытты. Туйҙы ла матур ғына үткәреп ебәрҙеләр. Хөснидин бында булған барса туғандарын, дуҫ-иштәрен йыйҙы. Үҙҙәре бик күмәк, бер-береһе өсөн иғтибарлы, ярҙамсыл халыҡ та икән. Әклимә яғынан да бик күп кенә яҡындары йыйылды. Кейәүенең ҡыҙын өрмәгән ергә ултыртмағанын күргәс, Шәмсиямалдың күңеле тынысланғандай булды. Шулай ҙа кейәү тейеш кешеһенә нотоҡ уҡып алырға ла онотманы әсә:

– Балаҡайымды йәһәннәм сигенә алып китәһең. Уның унда һаҡлаусыһы ла, яҡлаусыһы ла һин булаһың. Һиңә ышанып тапшырам. Күҙ ҡараһылай һаҡла...

Туй үтеү менән йәштәр оҙон юлға йыйына башланы...

Юл алдынан да кейәүе менән ҡыҙына Шәмсиямал, төрлөһөн күҙаллап, кәңәштөңәш бирҙе:

– Ҡыҙым, тәҡдирең шулайҙыр. Кеше күрәһеләрен күрә торған. Бәхетең генә булһын. Булған бәхет, ҡайҙа булһа ла, тау-ташты ярып сыға, тиҙәр. – Һүҙен кейәүенә ҡарап дауам итте. – Кейәү балаҡайым! Бар ышанысым, бар өмөтөм – һиндә. Бисәне ир ҡаҡһа, мир ҡағыр, тиҙәр. Берүк балаҡайымды үҙең әбижәт итеп, башҡаларҙан әбижәт иттереп ҡуйма.

Вагонға күтәрелеп, артына боролоп ҡарағанда, әсәһенең таш кеүек ҡатҡан йөҙө буйлап йәш аҡҡанын күреп, Әклимәнең бәғере өҙөлөп киткәндәй булды. Быуындары ҡалтыраны, ҡолап та китер ине, тик һөйгәне, беләгенән аймап, алға атлатты. Поезд яй ғына гөрһөлдәп ҡуҙғалды. Әклимә, поезд тәҙрәһен өңөп сығырҙай булып, тыуған ҡалаһына ҡараны. Йәнтөйәге алыҫайғандан-алыҫайып, бәләкәйләнгәндән-бәләкәйләнеп, артта ҡалды, күп тә үтмәй, бөтөнләй күҙҙән юғалды. Бына шунда ғына ул тотошлай тамырҙары менән ғәзиз еренән, яҡындарынан айырылғанын аңланы. Ҡыйын ине Әклимәгә. Түҙә алмай, һөйгәненең ҡуйынына һыйынып иланы ла иланы.

– Бәғеркәйем, илама, бөтәһе лә һәйбәт булыр. Һәйбәт йәшәрбеҙ. Балаларыбыҙ ҙа күп булыр, – тип йыуата Хөснидин, ә үҙендә уның өсөн ҙур яуаплылыҡ ятҡанын аңлай. Сөнки бөгөн, уға ышанып, йәр генәһе сит ерҙәргә тәүәккәлләне. Һыңҡылдаған кәләшенең күңелен күтәрергә тырышып, һүҙҙе шаяртыуға борҙо. – Ана улар, беҙҙең балаларыбыҙ, йүгерешеп йөрөй. Берәү, икәү, өсәү, дүртәү, бишәү, алтау, етәү, һигеҙ...

– Етәр, ҡайһылай күп һананың. – Әклимә еүешләнеп бөткән ҡулъяулығы менән күҙ йәштәрен һөртә-һөртә көлдө.

– Һиңә иптәшкә ҡыҙҙар ҙа бар, малайҙар ҙа етерлек, Алла бирһә, матур итеп йәшәрбеҙ, – тип хыялланып, һөйгәненең илауҙан ҡабарған күҙ ҡабаҡтарынан үбеп, ҡыҫыбыраҡ ҡосаҡланы йәш ир. – Ысын, өлкән улыбыҙ кәләш тә алған, ейән-ейәнсәребеҙ йүгерешеп йөрөй, ә беҙ шул көйө, йәп-йәшбеҙ, бәхетлебеҙ!

– Һы, ҡара әле, үҙебеҙ ҙә йәш, малайыбыҙ ҙа беҙҙең һымаҡ булһа, нисек инде ул? Ҡыҙыҡ буламы һуң? – Илауҙан тамам тынысланған Әклимә юрамал аптыраған булды.

– Юҡ, юҡ, беҙ ҡартайғанбыҙ, олатай менән өләсәй булғанбыҙ, ә йөрәгебеҙ һаман да йәш. Мөхәббәтебеҙ шул көйө ҡалған, бер ҙә һүрелмәгән! Ысын! – Хөснидин, татлы хыялдарға бирелеп, күҙҙәрен йомдо.

– Амин! – тип күтәреп алды йәш кәләш. – Ана, ҡартайышып, биттәребеҙ ҙә

сырышып бөткән, тик үҙебеҙ шул көйө, күҙҙәребеҙ тулы мөхәббәт менән балҡыйҙар, эйеме?!

... Поезд тауҙарҙың ҡайһыһын урап, ҡайһыһын уртаға ярып алға елгән һайын, яңы күренештәр, яңы донъя асыла. Әклимә йоҡламай, тигеҙ туҡылдаған поезд тауышын тыңлап, күп араны тәҙрә аша күҙәтеп бара. Офоҡ артынан офоҡ алышынып ҡына тора.

Көнө-төнө, алһыҙ-ялһыҙ елдереп, Дүшәнбе ҡалаһына килеп төштөләр. Был ҡала шундай матур – йәшеллеккә күмелеп, күпереп ултыра. Сәскәләрҙең ниндәйе генә үҫмәй!? Күҙ яуын алып торған ят-ят сәскәләр араһында беҙҙең яҡта махсус сәскә газондары өсөн үҫтерелгән таныш сәскәләр ҙә бар. Әклимәне иң һоҡландырғаны – таҙалыҡ. Бер ерҙә ҡый, бысраҡ күрмәҫһең. Йорттар ҙа биҙәкле, семәрле. Ҡояш нурҙарына күмелеп, йәйғор төҫөн сәсеп, фонтандар емелдәшә. Урамдарға түшәлгән асфальт көҙгөмө ни: тип-тигеҙ, ялтырап ята. Ағас төптәрендә, күләгәлә хәл йыйып, ял итеп ятыусылар күп. Ә беҙҙә булһа, уларға иҫ-аҡылдары китеп, берәҙәктәр тип танау сирып ҡарарҙар ине. Хөснидин: «Юл ризыҡтары ялҡытты, әйҙә, шәп итеп тамаҡ ялғап алайыҡ», – тип ашханаға әйҙәне. Бында ла Әклимәнең күҙҙәренә бөтөнләй ят күренештәр ташланды. Бер нисә вентиляция аппараты ҡуйылғанлыҡтан, ашханала еләҫ кенә. Туҡланыусыларҙы ап-аҡтан кейенгән ир-егет ашнаҡсылар, официанттар хеҙмәтләндерә, ә эргәләге өҫтәл артында ултырыусыларҙың ҡулдары менән нисектер килешле генә бармаҡтарына эләктереп ашағандарын күреп, бөтөнләй аптырап ҡалды Әклимә.

– Беҙҙә төп ризыҡ – былау. Уны өс бармаҡ менән ашайҙар, теләһәң, ҡалаҡ менән аша, һиңә бер ни әйтмәҫтәр, – тип ипле генә аңлатты ире ҡатынына.

Ашханан сыҡҡас, Хөснидин уны умарта күсендәй геүләгән кибеткә алып китте.

– Һөйөклөм, тиҙҙән үҙебеҙгә ҡайтып етәбеҙ, беҙҙә ҡатын-ҡыҙға яулыҡ ябынмайса йөрөргә ярамай. Үҙеңә оҡшаған бер нисә яулыҡ һатып алайыҡ.

Әклимә күп һайланып йөрөмәне, сөнки ниндәй әйбергә ҡағылма – шундай ҡупшы, шундай сағыу, һәр береһе үҙенсә хас зауыҡ менән эшләнгән. Бер-ике яулыҡты яҙып, һоҡлана-һоҡлана ҡараны ла ситләтеп биҙәк төшкән бер ап-аҡ яулыҡ, бер алһыуыраҡ, бер асыҡ йәшел яулыҡ алды.

Шунда уҡ береһен иңбашына һалып, көҙгө алдында өйрөлдө.

– Һы, ҡыҙыҡ. Дөрөҫ ябындыммы? Килешәме, әллә килешмәйме? – тип һораны Әклимә, көҙгөнән күҙен алмайынса, башын әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа бороп.

– Ни эшләп килешмәһен? Һәләк килешә. Әллә ҡасандан ябынған кеүек дөп-дөрөҫ ябындың. Башҡаса яулығыңды сисмәһәң дә була. Шулай йөрө! – Хөснидин кәләшенә һоҡланып ҡарап, ҡәнәғәт йылмайҙы. Ул мәсьәләнең бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ хәл ителеүенә эстән генә шат. Сөнки, ҡатыным яулыҡ ябынғыһы килмәй, ҡарыулашып торор, тип борсолғайны.

– Беҙҙәге эҫелек сыҙағыһыҙ – алтмыш градусҡа етә, хатта ҡайһы ваҡыт уҙып китә. Нисек өйрәнерһең икән?

– Аптырама-а-а! Өйрәнермен, ҡайҙа килгәнемде белеп килдем дә!

Был һүҙҙәрҙән һуң Хөснидингә уғата еңел булып ҡалды. Юл буйына ла, әле лә бер ҙә зарланып һүҙ әйтмәгән Әклимә менән рәхәт ине уға.

Әклимә, ҡалаға һоҡланып, автобус вокзалына еткәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалған. Бында ла уның иғтибарын таҙалыҡ, бөхтәлек, йәшеллек йәлеп итте. Тағы ла уны урамда бер иҫерек әҙәмдең йә берәҙәктең күренмәүе аптыратты.

Автобус елә генә. Алда бер-бер артлы яланғас тауҙар ҡалҡып сыға. Һирәк-һаяҡ ваҡ-ваҡ ҡыуаҡлыҡтар күренгеләп ҡуя. Асфальт юлды шоссе алыштырҙы. Юл

ситенән һуҙылған, ярты айға оҡшаш арыҡтар ҡыҙыҡһындырҙы Әҡлимәне. Хөснидин уларға ҡарап көләмһерәне:

– Беҙҙә, һеҙҙәге һымаҡ, мул һыулы йылғалар юҡ. Шуға күрә һыу ҙур йылғаларҙан арыҡтар буйлап килә. Яландарға, ауылдарға ошо арыҡтарҙан һуҙылған торбалар буйлап бара. Ана, буй-буй һуҙылып ятҡан яландарға ҡара әле. Күпереп үҫеп ултырған үҫемлектәр – мамыҡ ул. Бындағы халыҡтың төп кәсебе – мамыҡсылыҡ, – тип аңлатты. – Шуның менән көн күрәләр, тиһәң дә була.

Бер сәғәттәй шулай барғандарҙыр. Хөснидиндең тыуған ауылына еттеләр. Автобустан төшкәс, Хөснидин, ҡоласын йәйеп, бер урында саң борҡотоп әйләнергә тотондо, әйләнгән ыңғайы Әҡлимәне лә күтәреп өйрөлтә. Һөйгәне ҡулынан төшөрөү менән, Әҡлимә, теге буй-буй булып һуҙылған арыҡты ҡыҙыҡ күреп, яҡындан барып ҡарарға ашыҡты. Киңлеге лә, тәрәнлеге лә ике метрлыҡ, юл буйлап һуҙылған бетон арыҡтан көслө ағым булып һыу аға. Ысынлап та, бындағы бөтә йәшеллек, йәнлелек ошо арыҡ буйлап килгән һыуға ғына ҡарап тора. Ҡайҙа инде ул башҡорттоҡолай уңдырышлы ҡара ерҙәр – торғаны менән һоро балсыҡ ҡатыш ҡомлоҡ. Өйҙәре лә балсыҡтан. Ер төҫлө булғанға ҡотһоҙ күренәләр. Бәшмәк һымаҡ бер-береһенә терәп эшләнгән өйҙәрҙе кеше генә йөрөмәле һуҡмаҡтар айыра. Ошолай итеп һалынған бер нисә өйҙө тар ғына, бер генә машина үтеп йөрөмәле юл икегә бүлә. Хөснидин һөйгәнен етәкләп алға атланы.

– Һөйөклөм, ана, күрәһеңме? Ана-а-уында... беҙҙең өй.

Һелкетә баҫып атлап барған Хөснидин артынан йүгерә-атлай саҡ өлгөрә Әҡлимә. Өйҙәре эргәһенә еткәс, бер аҙ тирә-яғына ҡаранып туҡтап торҙо ла, ҡатынын етәкләгән килеш, әкрен генә атлап ихатаға инде ир. Ингәс, ҡосаҡлашыуҙар башланды. Ҡапыл Хөснидин артына боролоп, юғалып ҡалған Әҡлимәгә күрһәтеп, ихлас йылмайҙы:

– Таныш булығыҙ: Әҡлимә, минең кәләшем...

Йәш кәләш үҙенә баштан аяҡ һөҙөп ҡараған оло ҡарттың (күрәһең, нәҫел атаһы) йөҙөнә бәреп сыҡҡан ризаһыҙлыҡты күрҙе. Килен кеше, уңайһыҙланыуынан нимә эшләрен белмәй, бешкән еләктәй ҡыҙарып, башын түбән эйҙе. Туғандар үҙ-ара тауыш күтәреп, ғауғалаша башланы. Бер-береһенә екереп әллә нимә һөйләшәләр. Уларҙың телдәрен аңламаған йәш ҡатын тағы ла ныҡ уңайһыҙланыуҙан бөршәйеп ҡатып ҡалды. Хөснидин, ҡулдарын болғап, ниҙер аңлатырға тырыша. Шул ваҡыт бер ҡатын килеп, ымлап ҡына Әҡлимәне саҡырып, икенсе бүлемгә алып китте. Был яҡта тик ҡатын-ҡыҙҙар ғына ине. Әҡлимә өйҙө түңәрәтеп ҡарап сыҡты. Өйҙә карауат, өҫтәл, ултырғыс әҫәре күренмәй. Мөйөштә – ҡаралты, икенсе яҡта һауыт-һаба өйөлгән. Башҡа бер нәмә лә юҡ. Уны иң ныҡ аптыратҡан – ҡаҡ ер-иҙән, өй түбәһендәге ҡыйыҡ итеп ябылған һаламға оҡшаш үҫемлектән үрелгән япма булды. Уға нимәләр тип өндәштеләр, буғай, ләкин Әҡлимә бер ни ҙә аңламаны. Ымлап сәй эсергә ултырырға кәрәклеген аңғарталар икән. Иҙәнгә йәйелгән ашъяулыҡ тирәләп сәй эсергә ултырҙылар. Көлсәгә оҡшаған икмәкте һындырғылап уртаға һалдылар ҙа, былауҙы бармаҡтары менән йәтеш кенә итеп эләктереп алып, ашай башланылар. Аптырап ултырған Әҡлимәгә ниҙер әйтеп, ымлап, ашарға ҡыҫтанылар. Ахырҙа ул икмәккә ҡушып бер сынаяҡ сәй эсә алды.

Был ваҡытта ирҙәр яғында етди һөйләшеү бара ине. Тамаҡ ялғап алғас, Хөснидиндең атаһы ҡаты ғына итеп һүҙ башланы:

– Улым, беҙҙең баштан ашаҡлап, кәңәш-төңәш итмәйсә кәләш алғанһың. Һин атаһыҙ, затһыҙ берәҙәк кешеме ни?

– Атай, бәйләнеш булманы бит. – Хөснидин аҡланып маташты.

– Сәбәп шунда ғына булдымы!?

– Эй, атай, рөхсәт һораһам да, риза булмаç инегеҙ...

– Ә бала саҡта ҡолағығыҙ тешләтелгән, йәрәшелгән Марьямоны ни эшләтәһең?

– Уны алмайым, минең кәләшем бар.

– Нимә тиһең?! – Атаһы ашап ултырған еренән һикереп тороуҙан саҡ тыйылып ҡалды. – Һинең башың бармы? Ир һүҙең юҡмы?! Үҙ һүҙендә тормаған, үҙ һүҙе булмаған нәсел, тигән яманат һатырға итәһңме?!

– Бала саҡта, мин бер нәмә лә аңламаған саҡта, йәрәшелгән... Хәҙер кире һуғып булмаймы?! Мин кәләшемде яратып алдым. Унһыҙ йәшәй алмайым! – тип ныҡышты был тиклем ҡаршылашыуҙарын көтмәгән Хөснидин.

– Нәçелебеҙҙә былдай хәлдең булғаны юҡ. Ғаиләгә тел-теш тейҙерәһеңме? Өçтәүенә, ҡалымдың да яртыһы түләнгән. Марьямоны ла уйла. Ир түшәгенә ятмайынса ла ташланған ҡатын булһын әле! Хәҙер уны кем алыр?! Халыҡ ни әйтер?!

– Атай, мин бәләкәй бала түгел, миңә үҙемсә йәшәргә рөхсәт бирегеҙ!

– Ситтә йөрөп, миңә ҡаршылашырға өйрәнеп ҡайттыңмы?! Хәҙер атай – һүҙ, йолабыҙ йола түгелме?!

– Юҡ, атай, мин унан әйтмәйем, тик бына...

– Беренсе ҡатын итеп алаһың! Икеһен дә бер тигеҙ итеп ҡарайһың! – Башын түбән эйеп ултырған Хөснидингә ҡарап, ҡаты әйтеп, һүҙен дауам итте ҡартлас. – Тағы бер өй һалырға тура килер.

Хөснидин атаһына башҡаса ҡаршылашыуҙан фәтүә булмағанлығын аңланы. Унын башында икенсе уйҙар ҡайнай. Нисек кәләшенә әйтер? Аңлармы ул уны? Һөйгәне бөтөнләй икенсе тәрбиә алған кеше бит! Ике, өс ҡатын менән йәшәү – башҡорт өсөн хәҙер бөтөнләй ят күренеш! «Мине алдатып алып килдең», – тип рәнйемәсме? Ҡатын өçтөнән ҡатын алыуҙы хатта ошо мөхиттә тәрбиә алып үçкән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ауыр кисерә. Ҡапыл ирҙең күҙ алдына Әклимәһенең илаған, ҡайғырған, үпкәләгән йөҙө килеп басты. Эх, кәләшенең күҙ йәшен күреү уға ғазап буласаҡ.

Иренең ағарынған йөҙөн күреп, Әклимә ҡурҡып китте, һис шикһеҙ, һүҙ унын тураһында булған. Моғайын, Хөснидиндең уны алып ҡайтыуына ҡаршы булғанлыҡтарын әйткәндәрҙер. Быны килеп инеү менән һиҙенгәйне Әклимә. Һуңынан да үҙенә әллә нисек, арҡыс-торҡос ҡарағандарын тойомлай ине. Уйға ҡалған иренә ҡарап, Әклимә һүҙ башларға баҙнат итмәне.

– Мин тағы бер кәләш алырға тейешмен. – Хөснидин башын күтәрмәйенсә, ауыр көрһөнөп, һүҙ башланы.

– Нисек инде... тейеш?! – Әклимә ҡапыл шулай тип һорағанын һиҙмәй ҙә ҡалды.

– Эй, беҙҙә диндә ныҡ тоталар, ғөрөф-ғәҙәт буйынса йәшәйбеҙ. Тағы атайға ҡаршы сығып, ҡарыулашып булмай. Көсләп алдырырҙар, тигән уй башыма ла инеп сыҡманы. Ә Марьямоны башыма индереү түгел, күҙ алдыма ла килтергәнем булманы. Бына нисек килеп сыҡты...

Хөснидин ләм-мим өндәшмәй, шымып ултырған ҡатынына аптырап ҡараны, аҡланды:

– Атайыма ҡаршы тороу ҡыйын. Беҙҙә шундай йола. Мин... мин... ҡаршы булып ҡараным!..

– Шулай икән, тимәк, шулай! – Әклимәнең тыныс ҡына яуап биргәненә Хөснидин, асҡан ауыҙын ябырға ла онотоп, аптырап ҡалды. Сөнки ул унын икенсе төрлө ҡабул итерен көткәйне. Ә бөгөн ул тоноҡ күл ише тыныс, исмаһам, бер ҡаршы һүҙ әйтһәсе! Юҡ, юҡ, Әклимәһе улай түгел, уны һүҙһеҙ ҙә аңлап тора. Шуның өсөн ул уны тағы ла ныгыраҡ ярата, йәнендәй яҡын күрә.

– Нимә? Нимә, һин... – Хөснидин ырғып тороп, ҡатынын зыр әйләндерергә тотондо. Ошо минутта уға һөйгәне Әклимәнән дә ҡәҙерлерәк, яҡынырак кеше юҡ ине. – Һин һылыуҙарҙан-һылыу ғына түгел, аҡыллыларҙан да аҡыллыһың! Минең берҙән-берем!

Хөснидин менән Әклимә йәшәгән өй беренсе ҡатынға тәғәйенләп һалынған, ә Хөснидиндең беренсе ҡатыны булып Марьямо иҫәпләнә. Шуға ла эште өй төҙөүҙән башланылар.

Әклимә өй төҙөгәндәрен ҡыҙыҡһынып күҙәтте. Балсыҡты иҙеп, мамыҡ һабаҡтарын ҡырҡҡылап, ҡатыштырып плитәләр ҡатыралар. Яҫылығы ярты метрҙан ашыу, оҙонлоғо бер метрлап ҡатырылған плитәләрҙе йәтешләп һалып, өй ҡалҡыттылар. Мамыҡ һабаҡтарынан һыу үтмәҫлек итеп япма ишеп, ҡыйыҡ итеп ябып та ҡуйҙылар. Артыҡ ҡыйынлыҡһыҙ ғына уларға бына тигән өй ҙә әҙер булды.

Тағы ла Әклимә йоҡлау урынына оҙаҡ өйрәнә алманы. Был яҡтарҙа карауат булмағанлыҡтан, мамыҡтан яһалған ҡабарынҡы түшәктәрҙе йәйеп, мендәр һалып, ер иҙәндә йоҡлайҙар, һөйгәнең янында булғанда ҡыуыш та ожмах, тик саяндарҙан ҡурҡты. Төнөн тишектәрҙән инеп тешләрҙәр кеүек. Ярыҡтарҙан ингән ҡурҡыныс һары оҙон себендәр йөҙәтте. Өйҙө төҙөгән саҡта ҡалдырылған тишек-ярыҡтарҙы бөтәйтеп һыланы, өй эсен үҙенсә биҙәп, шаршауҙар элде.

Шаулап-гөрләп туй үтеп китте. Марьямоны килен итеп, оҙатып алып ҡайттылар. Туй ваҡытында ирҙәр бер өйҙә, ҡатын-ҡыҙ икенсе өйҙә айырым байрам итте. Бөтөнләй иҫерткес эсемлектәр эсмәй, матур итеп йырлап-бейеп күңел асалар. Марьямо, килен булып төшкәс тә, күҙ ҡарашы менән генә көндәшен эҙләй башланы. Ана, бер ситтә – мөйөштә торған ҡатын, моғайын, шулдыр. Ап-аҡ йөҙ, ҡара ҡыйғас ҡаш, оҙон керпектәр араһынан һирпелеп кенә ҡараған ҡара күҙҙәр. Ә кәүҙәһе, әйтерһең дә, һылап-һыйпап эшләп ҡуйылған. Хур ҡыҙҙары ары торһон, иҫ китмәле матур!.. Туҫтаҡ битле, һалбыр иренле, тәпәш буйлы Марьямоның эсендә көнсөллөк уты ҡабынды. «Анау хәтле ерҙән тикмәгә эйәртеп алып ҡайтмаған икән. Етмәһә, Әклимәнән күҙен дә алмай бит әле», – тип эстән генә ҡара янды көндәш. Хөснидин үҙ өҫтөнән икенсе ҡатын алыуына һис тә риза түгел Марьямо.

Әклимә иһә Марьямоның килен булып төшөүенә битараф, ләкин... Исмаһам, Хөснидин көндәр буйы эш артынан сапҡанда, ә ҡайһы ваҡытта ҡалала йоҡлап ҡалырға тура килгәнендә, уға иптәш булыр, бергәләп көңгөр-ҡаңғыр килерҙәр. Көндәш булмаҫ, апай булыр уға Марьямо...

Тажиҡ телен белеп етмәй әле Әклимә. Әҙерәк аңлай башланы ла ул, тик бына һөйләшеүе ауырыраҡ. Хөснидиндең ағаһы Сәйеттең ҡыҙы Диларабо мәктәпкә йөрөй. Урыҫ телен өйрәнәләр. Шуға әлегә уның менән генә аралаша. Хөснидин менән Диларабо уға тажиҡ телен өйрәтә. Хөснидиндең Әклимәне алып ҡайтыуына ике ай булып бара. Һаман да Әклимә был яҡтарға өйрәнә алмай. Ҡом ҡатыш балсыҡ ер менән тыуған яҡтарын сағыштырғанда, тыуған яҡтары – ожмахтың үҙе. Ҡоршайып ҡатҡан тауҙарға ҡарап, ҡайҙа һуң беҙҙең ғорур ҡаялы күккә олғашҡан тауҙар, тип эстән һыҙа.. Ҡалын урмандарҙы, хәтфә үләндәрҙе, хуш еҫле ялан сәскәләрен, туҡтауһыҙ моң һуҙған ҡоштарҙы, сылтырап аҡҡан шишмәләрҙе, мул һыулы йылғаларҙы һағынып, төштәрендә күрә.

«Эх, тыуған яҡтарыма ҡайтыр инем, аяҡтарым талһа, имгәкләп!» – тип «Ғилмияза» йырының һүҙҙәрен иҫенә төшөргөләй.

Яңғыҙ ҡалған әсәһе лә күңеленән сыҡмай, әленән-әле уны иҫләп илап ала. Ярай әле, Хөснидине уны аңлап тора, буш ваҡытында уның эргәһенән китмәй.

...Шәмсиямал, поезд ҡуҙғалып киткәс, күңелендәге ниндәйҙер бер ҡылдың өҙөлгәнен һиҙҙе. Әйтерһең дә, поезд һауа ярып, үҙәк өҙгөс итеп ҡысҡырып уға нимәлер әйтергә теләне. Ошо тауыш Шәмсиямалдың йөрәгенә үтеп инеп, йөрәген өҙгөләне. Алыҫая барған поезд туҡылдауы аҫтында йөрәге дарҫлап типте. Ҡапыл: «Балам!» – тип ҡысҡырып поезд артынан йүгергәндәй итте. Ҡарт әсәнең күҙ алды ҡараңғыланып, башы әйләнде, аяғы аҫтында ер убылды... Иҫенә килгәндә, дауаханала ине инде, башы зыңҡып ауырта. Ҡуҙғалырға итте, ләкин ҡыл да ҡыбырҙата алманы. Шәфҡәт туташы: «Иҫенә килде! Табипҡа әйтергә кәрәк!» – тип ҡыуанып йүгереп сығып китте. Бер аҙҙан табип шәп-шәп атлап килеп тә инде.

– Иҫегеҙгә килдегеҙме, апай? Бына һәйбәт булған. – Ул Шәмсиямал апайҙың күҙҙәренә текләне. – Һеҙгә ҡуҙғалырға ярамай, еңелсә инфаркт үткәргәнһегеҙ. Тыныслыҡ кәрәк. Ҡараусы кеше кәрәк буласаҡ. Бармы ҡараусығыҙ?

Шәмсиямал, «юҡ» тигәнде белдереп, башын һелкте. Шул саҡ эргәһендәге карауатта ултырған урта йәштәге ҡатын, урынынан тороп, эргәләренә килеп баҫты:

– Үҙем ҡарармын, кисәнән бирле мин ҡараным инде...

– Ярай, улай булғас, үҙегеҙҙең хәлегеҙ нисек? – Табип уға йылмайып ҡараны.

– Мин хәҙер арыуланып бөттөм инде, ҡасанан бирле ятам...

Табип шәфҡәт туташына ниҙер әйтте лә шәп-шәп атлап сығып китте. Уның артынан шәфҡәт туташы ла юҡ булды. Шәмсиямал эргәһендәге ҡатынға рәхмәт әйтергә ауыҙын асҡайны, теле әйләнмәне. Тик ыңғырашҡа оҡшаш ауаздар ғына сыҡты.

– Тыныс ҡына ятырға ҡуштылар. Торорға ла, һөйләшергә лә ярамай, – тип һөйләнә-һөйләнә, Шәмсиямалдың мендәрен төҙәйтеп, юрғанын тартып япты теге ҡатын. – Эй Аллам, ауырыу ҡартын да, йәшен дә ҡарамай, һинән дә минән дә һорамай шул. Әле йәшбеҙ. Алла бойорһа, бергә-бергә йәшәрбеҙ.

Шәмсиямал бөтәһен дә ишетеп ята, тик ҡыбырларлыҡ та хәле юҡ. Аяҡ-ҡулдары тыңламай.

– Һыу ҙа эсермәй китеп барҙым даһа. Һыуһап яталыр әле. Әйҙә, Шәмсиямал, иптәп кенә эс әле, – ҡатын, Шәмсиямалдың башын күтәреп, һыу эсерҙе. Ысынлап та, ул сарсап ята ине, һыу эскәс, еңел булып ҡалды. Исемен дә белеп алған. Ошо ваҡытта был ҡатын Шәмсиямалға фәрештә кеүек күренде. Күҙҙәренә йәштәр тулды яңғыҙ әсәнең...

Ике аҙналай ваҡыт үткәс, ымлап ҡына булһа ла һөйләшә, ҡул-аяҡтарын ҡуҙғата башланы. Ә теге ҡатын эргәһенән китмәй ҡараны. Шәмсиямалға ҡарап-ҡарап һөйләшеп ала. Үҙе һорау бирә. Биргән һорауына үҙе үк яуап биреп, көңгөрҡаңғыр килә. Шәмсиямал был ярҙамсыл, алсаҡ ҡатынға Хоҙайҙан һаулыҡ, ғүмер теләп ятты. Аңына килгәндән башында бер төрлө уйҙар, һорауҙар ҡайнай. Йөрәк майы – Әҡлимәһе ни эш бөтөрә икән? Хат-маҙар юҡ микән? Кейәүенең дуҫиштәре лә күренмәй. Икенсе ҡалаға олаҡтылармы, әллә үҙҙәренә ҡайтып киттеләрме?

...Марьямо, Әҡлимә, килендәштәре һәм балалар эргәләге ғаилә баҡсаһында эшләй. Ярты метр яҫылыҡтағы, ике метр бейеклектәге балсыҡ стена менән уратып алынған баҡсала нимә генә үҫмәй! Ҡарбуз, ҡауын туп кеүек тәгәрәшеп ята, эре-эре помидорҙар, ҡыярҙар, лимондар, йөҙөм, алма, сәтләүектәр өлгөргән. Уларҙы ашлап, ҡортҡостарға ҡаршы дарыу һибеп, ҡыйҙарын утап, ваҡытында ғына ҡарап һыу һибәләр. Уңыш өлгөргәс, йыйып, ҡумталарға тултырып, һатыуға оҙаталар.

Яланда мамыҡ өлгөрһә, һәр ғаиләгә гектарлап бүлеп бирәләр. Бөтә ғаилә менән сығып мамыҡ йыялар. Аяғына баҫып йөрөй алған бәләкәйенән алып олоһона тиклем яланда ҡумаҡ эштә була. Алдарына ҙур алъяпҡысҡа оҡшатып тоҡсай тағып алалар ҙа мамыҡ йыялар. Көс еткеһеҙ булып тулғас, алып барып, үлсәтеп тапшыралар.

Әклимәгә тәүҙә мамыҡ йыйыуы ҡыйын булды, өйрәнеп алғас, башҡаларҙан уҙҙырып, күп итеп тапшыра башланы. Һылыу ҙа, эшкә лә сос башҡорт ҡыҙына һоҡланмаған кеше ҡалманы, ә ҡайһы бер ир-егеттәр Хөснидиндең шундай ҡатыны булыуына көнләшә биреп тә ҡуйҙы. Ҡара таңдан ялан шау-шыу килә. Көн эҫеһендә ете-һигеҙ сәғәткә ялға туҡтайҙар. Кис ялан ҡабат йәнләнә. Ваҡыт-ваҡыт мамыҡҡа, мамыҡ үҫентеләренә зыян килмәһен өсөн, тау башында торған ҡоролмаларҙан аттырып, ямғыр болоттарын таратып торалар. Шуға ла Әклимәнең килгәне бирле ямғыр әҫәрен күргәне юҡ. Бөтә үҫтерелгән йәшеллек теге юл буйлап килгән арыҡтан – шәп ағымлы улаҡтарҙан һуғарыла.

Хөснидин Әклимәнең күңелен нисек кенә күрергә теләмәһен, ҡатыны күбеһенсә бойоғоп, моңһоуланып йөрөй. «Тыуған ерен, әсәһен һағыналыр, һуңғы арала, ваҡыты булмағанлыҡтан, иғтибар ҙа әҙ шул», – тип уйланы ир. Бөгөн ул һөйгәнен машинаға ултыртып, үҙҙәренән арыуыҡ ҡына алыҫта йәшеллеккә төрөнөп аҡҡан мул һыулы йылғаны күрһәтеп алып килмәксе булды.

– Һөйөклөм, Нил буйҙарын күрһәтеп алып киләйем, ризаһыңмы?

– Әлбиттә, барам! – Йәш ҡатын ҡыуанып китте, әйтерһең дә, уға йәмле АҒиҙелен күрһәтәләр. – Алыҫмы?!

– Йөҙ саҡрым булыр. Унда яр тулы кеше була торған. Алыҫҡараҡ китербеҙ.

– Эх, һыу буйҙарын, исмаһам, бер күреп ҡайтырмын. Беҙҙең яҡтарға оҡшағанмы? – тип, шатлығынан түҙә алмай, Хөснидиндең муйынынан ҡосаҡлап алды. – Улай булғас, мин һине лә ҡыуандырам!

– Нимә?!

– Беҙҙең бәпәйебеҙ була!

– Уйлағайным да! – Ире Әклимәне күтәреп өйрөлтә башланы. – Башҡаса улай һикерәндәмә! Ҡара уны!

Быларҙың барыһын да ярыҡтан, ҡара яныуҙан тышылдығын сығып, Марьямо күҙәтте...

Машинала бер сәғәттәй барҙылар. Барған һайын шыр-яланғас ҡомло урындарҙы ҡылған үләнле яландар алмаштырҙы. Яҡынлашҡан һайын донъя йәшелләнә барҙы.

Ана, йылға ла күренде. Ҙур, тоноҡ йылға тын ғына ағып ята. Яр ситләтеп таныш булмаған ағастар үҫә. Башҡортостан талдарына оҡшаған да һымаҡ. Был яҡтарҙың үләндәре лә әллә ниндәй: ҡаты, һуттары ла юҡ. Ҡайһылары ултырған урындарында уҡ ҡыуарып кипкән. Ҡош һайраған тауышты ишеткәс, күңеле тулды. Ошо һайрау аҫтында, күҙен йомоп, тыуған яҡтарында һымаҡ хис итте үҙен. «Их, тыуған яғыма, йәшәгән ҡалама, әсәйемә ҡайтһаң ине, исмаһам, ситтән генә, күҙ ҡырыйы менән генә күҙ һалһаң ине!» Рәхәтләнеп битен-ҡулын йыуҙы, аяҡтарын һыуға тығып, сәпелдеген сығарып ултырҙы. Йәш ғаилә ял итеп, кисләтеп кенә ҡайтып инде.

Марьямо йөклө Әклимәгә ашарҙай булып ҡарап йөрөй. Уның өйөнән көндәшенең ишек алды ла, өйө лә яҡшы күренә. Көн-төн тиһәң дә яңылышмаҫһың – көндәш ярыҡтан Әклимәне күҙәтә. «Ана, эсен кәпәйтеп әллә ҡайҙа китте. Ен алғыры нәмә, бәхетемә арҡыры төштө. Шуның арҡаһында Хөснидин миңә иғтибарҙы әҙ бүлә. Шуның эргәһендә өйөрөлә. Ә хәҙер, тегеһе йөккә ҡалғандан бирле, бөтөнләй ҡарамай. Исмаһам, балаға ла уҙмайым бит. Йыш ҡына төндәрен

бер үҙемә һыуыҡ мендәр ҡосаҡларға тура килә. Хәҙер Әклимәһен мамыҡ йыйырға ла йөрөтмәй. Уның өсөн йәнен бирергә әҙер. Ҡәһәрең, үҙе сибәр бит әле. Нисек унан һыуындырырға? Берәй әмәлен табырға кәрәк! Минең өҫтөмдән килеп, ҡайһылай йөрөй. Кистәрен шуның арҡаһында ҡараңғы мөйөш һаҡлайым... »

Әклимә нисек кенә Марьямо менән уртаҡ тел табырға тырышмаһын, бер нисек тә килеп сыҡмай. Ни эшләптер гел генә һөмһөрө ҡойолоп тик йөрөй көндәшенең. Һуңғы ваҡытта бөтөнләй ҡыланыштарын аңламай башланы. Һөйләшергә тип һүҙ башлаһа, арҡыс-торҡос яуап бирә. Әклимәнең эшен бер ваҡытта ла оҡшатмай. Уның Хөснидингә тип әҙерләгән былауы бер нисә тапҡыр үтә тоҙло, бешергән икмәге сейле-бешле булып сыҡты.

Таҙа итеп йыуып элгән керҙәре лә ҡомло, бысраҡ була. Ә бер тапҡыр гел үтеп йөрөгән юлда эләгеп ҡолай яҙғас, аптырауға ҡалһа ла, үҙен иғтибарһыҙлыҡта ғәйепләп, тынысланды. Хәҙер ул Хөснидингә ашарға әҙерләһә, ут эргәһенән китмәй, һөйгәненең алдына ултыртҡансы ҡат-ҡат тәмләп ҡарай. Шул саҡ ишектән Диларабоның башы күренде.

– Еңгә! Беҙгә урыҫ теленән диалог төҙөргә бирҙеләр. Төҙөш әле. Тағы... ошо һүрәт буйынса һөйләм төҙөргә ҡуштылар, – тип инер-инмәҫтән хәбәрен һөйләй башланы.

– Диалогыңдың темаһы бармы?

– «Магазинда» темаһы.

– Аҙыҡ-түлек магазинымы, әллә кейем-һалым магазинымы?

– Әллә, белмәйемсе.

– Улай булғас, икеһенә лә төҙөйбөҙ.

– Ой, еңгә, ярай әле, һин бар. Урыҫ телен мин хәҙер бөтәһенән дә һәйбәт беләм! – тип ҡыуанды бикәсе Диларабо.

– Алла бирһә, үҙебеҙгә, Башҡортостанға, ҡайтһаҡ, мин һине үҙем менән алып ҡайтырмын, йәме. Беҙҙә урыҫса ла, башҡортса ла һөйләшәләр. – Ҡыҙыҡай менән бергә Әклимә лә ҡыуанды.

***

Хөснидин, ҡалалағы хәбәрҙәрҙе ишетеп, аптырауға ҡалды. Советтар Союзының тарҡалыуын, Тажикстан һәм башҡа бәләкәй республикалар айырылып, үҙ аллы ил буласаҡтарын ишетеп йөрөнө. Ләкин был хәбәрҙәргә ышанмай ине. Ә бөгөн бөтөн ҡала шул турала геү килә.

Хәҙер паспорттарҙы алыштырып, документтарҙы ла үҙгәртергә кәрәк.

Советтар Союзы хәҙер Рәсәй тип аталасаҡ. Сик аша үтеү ҙә ҡатмарлашҡан. Әклимәләргә ҡайтыу өсөн ҡағыҙ эштәре күп буласаҡ. Хатта хат алышыу ҙа күпкә ҡыйынға төшәсәк, ә, бәлки, ундай мөмкинлек бөтөнләй булмаҫ та. «Әйтһәм, бәғеркәйем илар инде. Яйлап, ипләберәк аңлатырмын инде. Тыуған көнө яҡынлаша, берәй бүләк алайым әле», – тип Хөснидин магазин яғына ыңғайланы.

...Бөгөн Әклимәнең күңеле болоҡһоп, бер нәмәгә лә күңеле төшмәй. Үҙәге өҙөлә яҙып тыуған яғын, әсәһен һағына, һағыныуҙарына түҙә алмай, «Ғилмияза»ны һуҙып йырлап ебәрҙе.

*Һаҡмар һыуы ағa ҡибла табан,*
*Урал тауы буйлап, көн битләп.*
*Илкәйемә лә шул ҡайтыр инем,*
*Аяҡтарым талһа, имгәкләп...*

– О-о-о, еңгә, ҡайһылай матур йырлайһың! – тигән тауышҡа Әклимә һиҫкәнеп боролоп ҡараны. Йәш ҡатын, моңайып йырлап ултырып, Диларабоның ингәнен дә аңғармаған.

– Эй, әллә ниңә күңелем тулып, йырлағы килеп тик тора.

– Матур йыр. Ә нимә тураһында ул?

– Был – башҡорт халыҡ йыры «Ғилмияза». Элекке заманда йәп-йәш, быуындары ла ҡатып бөтмәгән ҡыҙҙарҙы ҡарт бабайҙарға, йә булмаһа сит ерҙәргә – алыҫҡа кейәүгә биргәндәр. Ҡыҙҙар, үҙҙәренең әсе яҙмыштарына риза булмай, туғандарын, тыуған ерҙәрен һағынып, ошондай йырҙар сығарып йырлағандар.

– Һы, ҡыҙыҡ! Беҙҙә лә һеҙҙең йырҙарға оҡшаш көйҙәр күп. Балаларҙы бәләкәй саҡта йәрәштереп ҡуялар ҙа... аҙаҡ, теләйме-теләмәйме, кейәүгә сығырға тура килә. Шунан башлана зар-интизар булып йәшәүҙәр...

– Ә мин был яҡтарға ағайынды яратып, үҙ теләгем менән килдем. Тик барыбер тыуған яҡтарымды, әсәйемде һағынам. Был йырҙы мәктәптә уҡыған саҡта тыңлай торғайным. Аҙаҡ радионан да, былай ҙа ишеткәнем булды, бер ҙә йырлағаным юҡ ине. Хәҙер үҙенән-үҙе күңелгә инеп, йырлағы килеп тик тора.

Башҡорт йырҙары бөтәһе лә шулай моңломо?

Әклимә ирекһеҙҙән йылмайып ебәрҙе:

– Эйе, бөтәһе лә матур ҙа, моңло ла. Башҡорт халҡын моңло халыҡ тип әйтәләр. Беҙҙең халыҡтың йырҙары күп. Һәр береһенең үҙ тарихы, үҙәккә үтеп ингән үҙ моңо. Тағы ла ҡурайы бар. Ул беҙҙең милли музыка ҡоралы, башҡа халыҡта ул юҡ.

– Ул ниндәйерәк була?

– Беҙҙең халыҡ мал көтөп, йәйләүҙәрҙә йәшәгән. Урманда ябай ғына үләндән ҡурай яһап, бөтә күкрәк моңон һалып уйнаған.

– Нисек инде... үләндән? – Ихласлап ҡыҙыҡһынды Диларабо.

– Мамыҡ һымаҡ бейек. Тик уны эсе ҡыуыш була һәм ул наҙлыраҡ та. – Еңгә, һин миңә башҡорт йырҙарын өйрәтерһеңме?

– Өйрәтермен, өйрәтермен! – Әклимә бикәсен ҡосаҡлап, арҡаһынан һөйҙө. – Ә һин миңә тажиҡ йырҙарын өйрәтерһең.

Шул саҡ тышта янъял ишетелде. Күп тә үтмәй, Әклимә йәшәгән өйгә зыулап Марьямо килеп инде.

– Ул ғына урлаған! Ул ғына... – Көндәше өйҙөң аҫтын-өҫкә әйләндереп ниҙер эҙләй, аҡтарына башланы ла, мөйөштә ятҡан түшәкте күтәреп ебәреп, көмөш йөҙөк табып сығарҙы.

– Бына ул! Бына ҡайҙа ятҡан минең балдаҡ! Бур, уғры... – Марьямо бер нәмә лә аңламай аптырап ҡарап торған Әклимәгә ағыуын сәсә башланы. Йыртыла яҙып ҡысҡырыуына хатта өй емерелер кеүек. Тайшанлап, эре-эре итеп баҫып тышҡа сығып та китте. Нимә булғаны саҡ башына барып еткән Әклимә артынан эйәреп сыҡты, тышта тауышҡа килендәштәре, бала-саға йыйылған.

– Мин түгел! Күргән нәмәм түгел! – Әклимә балдаҡҡа оронмағанын аңлатырға тырышты. Тик ярһыған Марьямо, тағы ла ныҒыраҡ ҡотороп, нахаҡ сәсә бирҙе:

– Нисек инде һин алмағаның? Һинең өйөңдә, һинең түшәгең аҫтынан таптым бит мин уны? Был өләсәйемдең өләсәһенән ҡалған мираҫ! Нисә быуын хәҙер беҙҙә һаҡлана! Ә һин шуны урлағанһың! Бур!

– Мин кеше әйберенә ғүмеремдә лә тейгәнем юҡ!

– Тағы ла әрепләшеп маташаһыңмы, фәхишә? Ышанмай инегеҙ! Күрҙегеҙме?! Әле һеҙ уны белмәйһегеҙ, фәхишә бит ул...

Әклимә ҡалтыранған тауыш менән:

– Мин түгел! Дөрөҫ түгел! – тип илап өйөнә йүгереп инеп китте. Артынан Диларабоның: «Дөрөҫ түгел! Был дөрөҫ түгел! Ялған!» – тип ҡысҡырғаны ишетелде. Күп тә үтмәй, үҙе лә килеп инде.

– Еңгә! Илама, тыныслан! Уға береһе лә ышанманы. – Ҡыҙыҡай Әҡлимәне ҡосаҡлап, йыуата башланы. – Еңгә, ҡара әле! Ул йөҙөк нисек һинең өйөңә, түшәгең аҫтына килеп эләккән?

– Белмәйем, бер нәмә лә аңламайым, – тип тыныслана алмай һыңҡылданы Әҡлимә.

– Һы, ҡыҙыҡ хәл! – Диларобо төрлөһөн уйлап баш ватты.

Ҡаланан Хөснидин һуң ғына ҡайтты. Ҡаршыһына тәҙрәнән күҙен дә алмай уны көткән, ярһыуҙан күҙе аҡшайған Марьямо туйтаңлап килеп сыҡты.

– Хөснидин, беләһеңме ниндәй хәлдәр булды бында! – Күҙенә һыу алып, төкөрөгөн сәсә-сәсә һөйләп алып китте өлкән ҡатын. – Борондан, быуындан-быуынға тапшырылып килгән йөҙөгөмдө Әҡлимә урлаған... Ысын әйтәм, күҙ ҡараһындай һаҡлап тотҡан көмөш йөҙөгөмдө һинең бисәңдең түшәге аҫтынан таптым!

Тауышҡа Әҡлимә лә йүгереп сыҡты, ә Марьямо, йәлләтергә тырышҡандай, тағы ла нығыраҡ сәрелдәне:

– Ысын, бына бөтәһе лә күрҙе: йөҙөктө Әҡлимәнең өйөндә таптым! Ә һин ышанмай инең, ҡулы тик тормаған – уғры бит ул!

– Алдай, Хөснидин, ышанма. Ул йөҙөктө күргәнем дә юҡ...

– Мин алдайыммы? Ана, бөтә кеше күрҙе, оятһыҙ! Тағы ла әрепләшәһеңме, фәхишә!? ...

– Етәр! Хәҙер үк таралығыҙ! – Хөснидин ҡапыл уҫал тауыш менән ҡысҡырып ебәрмәһә, Марьямо тағы ла нимә һөйләр ине, билдәһеҙ... Бер үҙе ҡалғас, Хөснидин күтәрмәгә барып ултырҙы. Был Марьямоның сираттағы этлеге, мәкерле эше икәнлеген яҡшы аңлай. Тәүге ҡатынының әйләнгән һайын ошаҡлашыуы, һөйләнеүе ялҡытып бөттө ирҙе. «Быға нөктә ҡуйырға кәрәк...» – Урынынан ҡапыл ырғып торған Хөснидин Марьямоның өйөнә инеп китте...

Күптә үтмәй, беренсе ҡатынының өйөнән сығып, ҡәнәғәт Хөснидин һеңдерә баҫып аш өйөнә ыңғайланы. Ә унда уны аш әҙерләгән Әҡлимә ҡаршыланы.

– Бөтәһе лә яҡшы булыр! – Ир кеҫәһенән көмөш йөҙөк сығарып, ҡәҙерләп ҡатынының бармағына кейҙерҙе. – Тыуған көнөң менән, берҙән-берем!

– Рәхмәт, йәнем, – Әҡлимә, бала кеүек ҡыуанып, йөҙөгөнә ҡараны. – Һин эргәмдә саҡта, миңә бер ваҡытта ла ҡыйын булмаҫ.

– Ҡара, беҙҙең бәпәй ни эшләй?

– Уның ни, тибешеүҙән башҡа эше юҡ.

– Ҡара, һаҡла уны. – Етди төҫ алған Хөснидин ҡабат иҫкәртте.

– Һүҙгә әүрәнек тә киттексе. Әйҙә, ашарға ултыр. Аш һыуынып бөттө. Ниңә Марьямо һаман да инмәй икән?

Күп тә үтмәй, илауҙан шешенеп бөткән Марьямо инде. Эскерһеҙ Әҡлимә уны йәлләп тә ҡуйҙы. Беренсе тапҡыр киске аш һөйләшмәйенсә ашалды.

Бынан һуң Марьямо Әҡлимәгә йомшарып, йөҙө асылып ҡалды. Шуныһы ҡыҙыҡ: икенсе ҡатын бешергән аштың тоҙо артыҡ булыуы ла, йыуылған кейемдең бысрауы ла бөттө. Теге мәл ире ҡаты итеп һөйләшкәндән һуң, Марьямо бик ныҡ ҡурҡты. Хөснидин бөтә ҡылған яман эштәрен белеп йөрөгән бит. Кеше алдына сығып өс тапҡыр «Талаҡ!» тип ҡысҡырһа, ни эшләр ине Марьямо? Көнсөллөк тамам күҙен томалап, был хаҡта уйламаған да.

Әҡлимәнең бала табыр ваҡыты етте. Бер көндө, түҙемһеҙләнеп көткән Хөснидинде ҡыуандырып, малайҙары тыуҙы. Шатлығынан башы күккә тейгән атай, бәпесе эргәһенән китешмәй, ата ҡаҙ кеүек, бала эргәһендә уралды. Бәләкәйгә Мөхәмәтдин тип исем ҡушып, бәпес туйы уҙғарҙылар.

Әҡлимә хәҙер көндәрен бала менән үткәрә. Хөснидин уны баҡсаға эшкә сығармай. Улына әүрәпме, ире лә улар өсөн өҙөлөп торғанғамы, йәш әсә сит

яҡтарға тамам өйрәнеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Сыҙағыһыҙ селлә эҫеһе лә уға хәҙер бер ни түгел. «Ҡыҙҙың тыуған ере түгел, килен булып төшкән ере – тыуған ер», – тип тикмәгә әйтмәгәндәрҙер инде. Бала ла бәләкәй булғас, ҡайтыу хәҙер уның хыялында ғына ҡала.

Ваҡыт шулай үтә торҙо. Әҡлимә хәҙер был яҡтарға өйрәнеү генә түгел, тажиҡ телендә һупалаҡлап һөйләшә лә башланы. Ә һөйөклө улы туп кеүек тәкмәс атып, йүгереп йөрөй. Ире менән уға ҡарап һоҡланып туя алмайҙар. Теремек, таҙа итеп һөйләшеп йөрөгән малайға ике йәш тип уйламаҫың. Бөтәһе лә Мөхәмәтдингә һоҡланып ҡарағанда, Марьямоның һөмһөрө ҡойолдо. Уның да хыял донъяһына сумып, шашып бала ҡосаҡлап һөйгөһө, яратҡыһы килә. Ҡатын-ҡыҙҙың донъялыҡтағы тәғәйенләнеше, изге бурысы – әсәлектә икәнлеген Марьямо яҡшы аңлай. Әсә булыу теләге көслө лә, тик, ниңәлер, ул  был шатлыҡтан мәхрүм. Дәрт-дарман менән эшкә тотоноп, әллә нимәләр ҡыйратыр ҙа ине, тик эшкә күңеле төшмәй, төшөнкөлөккә бирелә. Әйләнгән һайын, Хоҙайға ялбарҙы ҡатын: «Хоҙайым, йәлләмә минән бер сабыйыңды! Зинһар, бала шатлығынан мине мәхрүм итмә! Ғәйебем дә юҡ һинең алдыңда. Ни өсөн мине язалайһың?» Был донъяла уға күп нәмә лә кәрәкмәй, бары бала һөйөү наҙынан ғына мәхрүм итмәһен. Әлбиттә, Мөхәмәтдинде үҙ балаһындай яратып ҡарай ҙа ала, әммә ләкин эсендәге әллә ниндәй ҡара уйҙар уны кире этәрә. Әллә Хөснидиндең шул баланы күрһә, ауыҙы ҡолағына етеп, күҙенән осҡондар сәсрәтеп шатланыуы уның мин-минлегенә тейәме – үҙе лә аңламай. Хөснидин Әҡлимәне яратып кәләш итеп алып, уны һөйөү утында солғап йәшәгәненә, ә уны бары тик алдан йәрәшелеп, алырға тейеш булған өсөн уға өйләнгәненә йөрәге әрнене. Бәхеткә сорналған Әҡлимәгә ҡарап көнләште. «Шул уйнашсы эйәреп килеп, ырыҫһыҙ итте, бәхетемә арҡыры төштө. Хөснидинемде уртаҡлаша, улай ғынамы һуң әле, урланы. Етмәһә, муйырылып, эсен кәпәйтеп, әллә кем булып йөрөй», – тип Әҡлимәне, күрә алмай, үҙ алдына битәрләне. Ә ул бөтәһенән дә мәхрүм, бисә ишараты ғына булып йөрөй. Исмаһам, тыптырлап йүгереп йөрөгән бер балаһы булһа ла, былар һиҙелмәҫ ине. Тағы ла бына...

– Марьямо, Марьямо! Мөхәмәтдин ауырый! Ҡоса, эсе китә, – тип ҡобараһы осоп ағарынған Әҡлимә, уның уйҙарын бүлеп, йүгереп килеп инде.

– Нимә булһын! Бушҡа яу күтәрәһеңсе... Бала ни, ауырыр инде. Бер бөгөн ауырыймы, йүнәлер әле. – Марьямо һалҡын ҡанлылыҡ һаҡларға тырышты.

– Нисек бушҡа булһын!? Балаҡайым ныҡ ауырый, ут кеүек яна!? Нимә эшләйем икән!? Марьямо, әйҙә, ҡара әле, зинһар, ярҙам ит! Һин ауырыуҙарҙы беләһең бит!

– Мин нимә беләйем? Бөтә нәмәне лә ҡайҙан белеп бөтәйем?!

– Алла хаҡына ярҙам итсе!? Зинһар өсөн, сығып ҡара... Кемгә барайым һуң мин?! – Инәлә-инәлә илай башлаған Әҡлимә Марьямо алдында тубыҡланды. – Алла хаҡына, зинһар...

– Ҡайһылай бер һырыш булдың әле!..

Ҡылы ла ҡыбырламай, суйын кеүек ныҡ ултырған Марьямоның ҡуҙғалмаҫын аңлаған Әҡлимә, ҡайҙа һуғылырын белмәй, аңҡы-тиңке булып тағы сығып йүгерҙе. Тышта уның: «Сәғитдин, Хөснидингә йүгереп барып кил әле! Мөхәмәтдин ныҡ ауырый, тиҙерәк ҡайтһын!» – тип илай-ярһый ҡысҡырған тауышы ишетелде.

...Бер сәғәттәй элгәре аш өйөнә Мөхәмәтдин һыу һорап инде. Марьямо балаға иҫкергән һут тоттороп сығарғайны. Ҡапыл уның йөрәге сәнсеп ҡуйҙы. «Әллә шуғамы? Кит, шуға ғына ауырымаҫ. Бына-бына, бала ауырымай үҫмәҫ, йүнәлер әле!» – Марьямо, күңелен тырнаған уйҙарынан арыныр өсөн, үҙ алдына һөйләнеп алды.

Хөснидин эштән йүгереп ҡайтып инде. Ығы-зығы башланды. Аҡтарып ҡоҫа-ҡоҫа аңын юғалтҡан баланы ашыҡтырып дауаханаға алып киттеләр. Табиптар Мөхәметдинде ҡотҡара алманы. Улар: «Ярамаған нәмә ашаған йә эскән. Эске ағзалары ағыуланған», – тигән һығымтаға килделәр.

Мөхәметдинде ерләгәс, Әҡлимә ҡайғынан аяҡтан яҙҙы, иҫен юғалтты. Баҙлаған тимер кеүек янған ҡатын һаташып йә иланы, йә көлдө. Бер туҡтауһыҙ ҡалтырана-ҡалтырана, үҙәк өҙгөс итеп ҡысҡырып улын эҙләне йә ҡулын сатаҡ-ботаҡ болғап, һөрәнләп туҡтауһыҙ сабыйын саҡырҙы... Бер аҙналай ауырып ятып, саҡ аяғына баҫты.

Ҡайғынан шаңҡыған Хөснидин дә күҙгә күренеп шиңеп, һурыҡты. Гел йылмайыу уйнаған йөҙөндә хәҙер шатлыҡ әҫәре күренмәй. Бөгөлөп төшкән хужа менән бойоғоп, донъя йәмен юғалтҡан Әҡлимәгә артабан йәшәргә бары тик ҡатындың йөрәге аҫтында яралған йән эйәһе генә көс бирҙе.

Дүрт айҙан, Хөснидин менән Әҡлимәне ҡыуандырып, улдары – Бәҙретдин тыуҙы. Был шатлыҡтан Хөснидин ни ҡылырға белмәне. Бар ҡайғыларын баҫып, улына әүрәне, буш ваҡытын Әҡлимәнең өйөндә бала менән үткәрҙе ир.

Марьямоға быны күреү ҡыйын булһа ла, һыр бирмәҫкә тырышты. Үҙһенмәй шул килмешәкте, үҙһенмәй... Тәүҙән үк күңеленә төйнәлгән төйөр иремәй, киреһенсә, нығыраҡ ҙурая бара. Ул һаман да булған уңышһыҙлыҡтарында Әҡлимәне ғәйепләне. Аяғы ергә теймәй һикереп, ялан аяҡ йүгереп йөрөгән балаға ҡарап йөрәге янды.

Марьямоның уйҙарын бүлеп, ишектән Бәҙретдиндең ялтыратып ҡырылған башы күренде. «Нимә әйтер? » – тигәндәй, уға ҙур ҡара төймәләй күҙҙәре менән вайымһыҙ ғына тултырып ҡарап торҙо ла, ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына ваҡ-ваҡ баҫып, түргә уҙҙы.

– Нимә, улым, нимә кәрәк? – Бала һөйөү наҙына сарсаған Марьямо, үҙе лә аңғармаҫтан йомшарып, иркә өндәште.

– Инәй, мин маҫинамды алам! – Бала йүгереп барып, мөйөштә ултырған үҙе ҙурлығындай машинаны һөйрәтеп алды.

– Ал, балам, ал һуң! Кил әле! Мәмәй бирәйем әле үҙеңә! – тип, түргә туйтаңлап барып, балаға бер ус печенье һондо. Тегенеһе, һәр ваҡыт ҡырыҫ булған инәйҙән оялыпмы, тартыныпмы, иңбаштарын күтәреп йылмайған булды. Ә тупаҫ инәй, ҡапыл шашып, башын эйеп, ихлас ҡарап торған сабыйҙың бит алмаларынан үпте, арҡаһынан тупылдатып яратты. Танауына килеп бәрелгән бала еҫе һушынан яҙҙырҙы ҡатынды... Бер ваҡытта ла асыҡ йөҙ күрһәтмәгән инәһенә бала күҙҙәрен ҙур итеп асып, ятһынып ҡараны ла, ҡыпһыуырҙай ҡулдарҙан тартылып, көскә ишеккә йомолдо.

Уның артынан ялан аяҡлап төйә баҫылған эҙҙәр генә ятып ҡалды. Шул саҡ ҡапыл аңына килгән Марьямо йән асыуынан башындағы яулығын атып бәрҙе:

– Ҡорсаңғы, әпсәһенә оҡшап, ҡәҙер белмәгән! Емтек!

Кискә табан ҡаланан Хөснидин ҡайтты. Ҡулындағы ауыр сумкаһын Әҡлимәгә һуҙып:

– Ҡара әле, быуна, һарыҡ ите алып ҡайттым. Үҙегеҙҙә тәмле итеп аш бешерәһегеҙ бит, шулай итеп бешер, йәме?

– Бишбармаҡты әйтәһеңме? Ярай, һалма ҡырҡып, бишбармаҡ бешерермен.

– Ысынлап та, бармаҡ менән ашайҙар, ибет?

– Беҙҙә лә бар ул бармаҡ менән ашай торған ризыҡтар. Шуға ла бишбармаҡ тигәндәр. Әйҙә, беҙҙең яҡтың ризығын ашап ҡараһындар, бөтәһен дә һыйларбыҙ, эйеме! – Әҡлимә көтөлмәгән тәҡдимгә ҡыуанды ғына.

– Әлбиттә, бөтәһен дә һыйларбыҙ. Эйе, башҡорт ашын ашап ҡараһындар

әйҙә. Айырыуса миңә шул бишбармаҡ тигәне оҡшай ҙа инде. Ҡоротло һурпаһы теленде йоторлоҡ! Ҡәйнәм бешереп ашатҡайны – шуны һаман онотоп булмай.

– Ә-ә-ә, ул ваҡытта әсәйем һинең өсөн бешергәйне шул. Һөйләй торғас, минең дә бишбармаҡ ашағы килеп китте әле, – тип иттәрҙе тотоп ҡарай-ҡарай һөйләнде Әҡлимә. – Һимеҙ генә һарыҡ булған, ҡарап ала белгәнһең.

– Аш тәмле булһын өсөн һимеҙ генәһен, йәшен ҡарап алдым инде, – Хөснидин эше буйынса сығып китте. Әҡлимә, еңдәрен беләгенә тиклем төрөп, эшкә тотондо: тәүҙә итте уртаса ҙурлыҡтағы алдырҙа йыуып алды, һуңынан уны ҡаҙанға төшөрҙө, мамыҡ һабаҡтарынан әҙерләнгән утынды өйөп һалып, ҡаҙан аҫтына ут яҡты, һалма ҡырҡты. Аштың әҙер булғанын һағалап торғандай, өйрәк һымаҡ лап-лоп баҫып Марьямо килеп инде. Ят ризыҡты күргәс, аптырауҙан күҙе саҡ маңлайына менмәне көндәштең, хәле бөтөп, күкле-йәшелле тауыштар менән ҡысҡырып ебәрҙе:

– Был нимә ул?! Быньдай нәмәне ҡайҙан уйлап таптың?!

– Был – беҙҙең яҡ ризығы. Беҙҙә ашты ошолай әҙерләйҙәр, – тип Әҡлимәнең тыныс ҡына яуап биреүе көндәшен тамам сығырынан сығарҙы.

– Беҙҙә түгел, ә һеҙҙә тиген! Башҡаларға, Хөснидингә был ашың оҡшармы, шуны уйланыңмы?!

– Хөснидин үҙе бишбармаҡ бешереүемде һораны, – тип һис бер борсолоуһыҙ яуап бирҙе Әҡлимә. Үҙе эргәһендә йөрөгән улына боролдо: – Бар, балаҡайым, барыһын да ашарға саҡыр!

Әҡлимә аш эргәһендә Марьямоның бер үҙен ҡалдырманы, сөнки теге мәлдәге артыҡ тоҙло аштары өсөн тәүге ҡатынға шиге төшкәйне.

– Бөгөн бөтөнләй икенсе аш бешерелергә тейеш ине! Бер нәмә лә һорашмайһың да, әйтмәйһең дә, үҙең баш, үҙең түш. Беренсе бисә – мин нимә әйтәм – шуны тыңла!

– Бөгөн Хөснидин һорағанға ғына бешерҙем, – тине Әҡлимә һәм, Марьямоның туҙыныуына иғтибар итмәй, күтәренке күңел менән ҙур туҫтаҡҡа итте ваҡлап тураны, өҫтөнән һуған менән һалма һалып, майлы һөҙлөк ҡойҙо, һурпа өсөн кәсәләр әҙерләне.

Әҡлимәнең тыныслығы Марьямоны сығырынан сығарҙы. Ишектән ашарға инеүселәрҙе күргәс, йөҙөн ҡырҡа үҙгәртеп, үҙе әҙерләгәндәй әйҙүкләп:

– Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ, бөгөн һеҙгә ят аш әҙерләнек. Төрләндереп бешерһәң, һәйбәт була бит ул, – тип татлы телләнеп, теле-телгә йоҡмай ҡаршы алды.

Әҡлимәнең әҙерләгән бишбармағы бөтәһенә лә оҡшаны. Һурпаһын да борослап, ҡабат-ҡабат ҡойҙороп эстеләр.

– Килен, беҙгә был ашты йышыраҡ бешер. Бик тәмле булды! – тип рәхмәттәрен әйтә-әйтә, маҡтап ашаны йыйылған туған-тыумаса. Тик Марьямо ғына, һиҙҙермәһә лә, быларҙың бараһын да оҡшатмай, эсенән ҡара көйҙө.

***

Мамыҡ йыйыу ваҡыты етте. Хөснидин эшенән бушамай, көн дә ҡала тип саба. Бөгөн иртүк тороп, Әҡлимәләр ҙә мамыҡ яланына юлландылар. Марьямо, һис ҡыланмағанды ҡыланып, һәр береһенә айырым участок бүлеп бирҙе. Әлбиттә, мамыҡтың йоҡа, насар үҫкән ере Әҡлимәгә эләкте. «Әйҙә, хәҙер алдынғы булып ҡараһын!» – тип эстән генә үҙенең мәкерлегенә, хаслығына ҡыуанды ҡатын.

Әҡлимә мамыҡты башҡаларҙан уҙҙырып йыя алмаһа ла, уларҙан ҡалышмаҫҡа тырышты. Эргәһендә Бәҙретдине геүелдәп уйнап йөрөй: балсыҡ ҡатыш ҡом ерҙе уйынсыҡ машинаһында бер урындан икенсе урынға ташып өйә.

Мамыҡ һабаҡтарын йәтешләп теҙеп һалып, юл да эшләгән. Әклимә үҙ алдына уйын ҡороп уйнап йөрөгән сабыйын күҙәтеп, бер аҙ йылмайып ҡарап торҙо ла тағы ла шәберәк итеп мамыҡ йыйырға тотондо.

Эше менән мауығып киткән ҡатын шау-шыуға башын күтәреп ҡараны. Һыу аҡҡан арыҡтар яғына ҡарай кешеләр эркелешеп йүгерәсе... Йөрәге жыу итеп ҡалған Әклимә, уҡтай атылып, Бәҙретдине янына ынтылды. Улы урынында юҡ, һыу эсеп йөрөгән һауыты ла күренмәй. Тимәк, һыуға киткән! Күрмәй ҡалған... Йәнтәслимгә кешеләр йүгергән яҡҡа ынтылды бисара ҡатын. Йөрәге сығырҙай булып дарҫлап тибә. Яҡынлашҡан һайын кешеләрҙең ҡыҫҡырышҡан тауыштары асығыраҡ ишетелә барҙы. Был ваҡытта улаҡтағы көслө, шәп ағым Бәҙретдинде уйынсыҡ һымаҡ өлпәндәтеп, өйрөлтөп-сөйрөлтөп түбәнгә ҡарай ағыҙа ине.

– Бәҙретдин аҡты, тотоғоҙ!

– Тиҙерәк ҡаршы сығығыҙ! Тотоғоҙ!

Әклимә, әсе итеп ҡыҫҡырып йүгерә-йүгерә, быуындары тотмай, һөрлөгөп барып төштө. Мамыҡ йыйып йөрөгән алъяпҡысына буталып, ерҙән тора алмай аҙапланды. «Балам, балам, балаҡайым!» – тип илай-илай, бар көсөн йыйып тағы йүгерҙе, тағы һөрлөгөп ҡолап барып төштө. Хәҙер аяҡ быуындары ғына түгел, тотошлай тәне ҡалтырап, быуынһыҙ булды. Шул саҡ башы, аяҡ-ҡулдары һәлберәп төшкән йәнһеҙ Бәҙретдинде һыуҙан сығарҙылар. Әклимә: «Балаҡайы-ы-м-м!» – тип үҙәк өҙгөс итеп ҡыҫҡырып ебәрҙе лә, иҫен юғалтып, ергә ауҙы. Әсәнең күҙ йәше менән бергә уҡмашып йәбешкән ҡом ҡатыш балсыҡлы йөҙө ап-аҡ үлек төҫө алғайны.

Хөснидин яландағы өймәкләшеп торған кешеләрҙе әллә ҡайҙан уҡ күрҙе. «Беҙҙең... ер биләмәһенән аҫтараҡ йыйылғандарсы, нимә булды икән»? – тигән уй башынан йүгереп үтте ҡапыл шомланып киткән ирҙең. Ҡыҙып-ҡыҙып ниҙер һөйләшкән халыҡ, машинала уларға табан килә ятҡан Хөснитдинде күргәс, шымып ҡалды. Туҡта, ерҙә нимәлер ята түгелме? Машинаһын улаҡтар аша сығып йөрөгән баҫма тапҡырына шыулатып алып килеп туҡтатты Хөснидин. Туҡтар-туҡтамаҫ, машинаһының ишеген асты, ишеген шапылдатҡансы ябып, кешеләр торған яҡҡа йомолдо. Ни эшләп баштарын эйеп, ғәйепле төҫ менән уға ҡарайҙар икән улар? Нимә булған? Ерҙә икеһе ике урында ҡатыны менән улы ята бит! Хөснидин килеп етте лә... берсә күм-күк булған сабыйын, берсә һушһыҙ ятҡан Әклимәһен ҡосаҡлап, берсә тупраҡты услап, ерҙе төйгөсләй-төйгөсләй тәгәрәп иланы.

– Нимә ҡатып тораһығыҙ! Әклимәгә тиҙ ярҙам күрһәтергә кәрәк. Уның иҫе киткән! Ярҙамлашығыҙ!

– Хөснидин, сабыр бул! – Сәйет һаман да тәгәрәп, ер тырнап илаған Хөснидинде иҙеүенән һелкетеп торғоҙҙо. – Хәҙер тынысылан, тим! Ишетәһеңме?! Ярамай! Алла бирҙе – Алла алды! Түҙергә кәрәк!

Аҡырып илаған Хөснидин аңына килгәндәй булды. Сәйет, ҡулдары һәленеп, ҡанаттары ҡайырылып төшкән ҡошто хәтерләткән Әклимәне күтәреп, шәп-шәп аҙымдар менән машина яғына атланы. Кемдер Бәҙретдиндең һыуына башлаған кәүҙәһен ҡулына алды. Арттарынан, тәнтерәкләй-тәнтерәкләй, Хөснидин эйәрҙе...

Уттай ҡыҙыу Әклимә бер аңына килде, бер юғалтты. Үҙе туҡтауһыҙ ҡалтыранды, һаташып йә Бәҙретдинен, йә Мөхәмәтдинен саҡырып ҡыҫҡырҙы. Ниндәйҙер аңлашылмаған өндәр сығарып һөйләнгән, йә һыны ҡатып көлгән, йә һеңкелдәп иланған ҡатыны эргәһенән Хөснидин көнө-төнө китешмәй. Төшөнкөлөккә бирелгән йөҙөнә ҡараһаң, башҡаса йәшәргә көс таба алмаҫ кеүек

тойола. Доғалар уҡып, Әҡлимәне өшкөрөп, имләп эргәһендә ултырған әбейҙәрҙә генә өмөт итә ир кеше. Улар ғына берҙән-берен ҡотҡарыр, уның яҙмышын хәл итер һымаҡ. Иҫһеҙ ятҡан ҡатындың баш осонда ултырған йыуантыҡ әбей бер нөктәгә ҡарап оҙаҡ ҡына уҡына, ниндәйҙер үҫемлекте яндырып, Әҡлимәнең баш осонда өйрөлтә-өйрөлтә, йөрәк тапҡырына алып килеп төтөнөн өрә, ҡаҙан төбөндәге ҡоромдо һыуға болғатып, оҙаҡ ҡына ҡояшҡа тотоп тора ла шуны Әҡлимәгә бөркә... Үҙе эстән тын ғына уҡынып, һаҡ ҡына баҫып йөрөй. Әбей-һәбейҙәр бөтөп киткән Хөснидинде йәлләне:

– Әҙерәк ял итеп алһаңсы, килен янында былай ҙа ултырабыҙ бит. Һурпаһын да, һыуын да ҡалаҡлап эсереп, еңелерәк аштарын да ашатып торабыҙ.

– Ысынлап та, Хөснидин, һин ял итеп ал әле. Эргәһенән китмәҫбеҙ. Бар, ял ит. Алла бойорһа, һауығыр. Түҙемле булырға кәрәк.

Йонсоған, ошо көндәрҙә олғайып киткән Хөснидингә сығып китеүҙән башҡа сара ҡалманы. Әбейҙәр, ауыр көрһөнөп, тағы сурыта башланы:

– Эй, Аллаҡайым, Әҡлимәһе һауығып ҡына китһен инде. Аҡылына еңeләймәһә ярай ҙа ул.

– Мин дә шуны уйлайым. Ҡуй инде, әллә нимәһе тыныс йәшәй алмайҙар. Алмалай ике баланы ер ҡуйынына һал әле.

– Ризаһыҙлыҡ менән килде бит ул. Ололарҙан фатиха алмайынса, көсләшеп килгәнгә шулайҙыр. – Марьямо һөйләшеүҙе үҙ юҫығына бороп әләктереп алып китмәксе булғайны ла, араларында бөкрәйеп ултырған оҙон танаулы әбей:

– Ни эшләп ризалыҡһыҙ килһен, ул бит – Хөснидиндең икенсе ҡатыны. Ә ирҙәргә икенсе ҡатын алыуҙы Ҡөрьән үҙе рөхсәт итә. Үҙ ҡарамағында, алғас алған инде.

– Эйе шул, уның ни ғәйебе бар? Бер ул ғына икенсе ҡатын алып йәшәйме? Хәленән килеп, аҫырай алһа, әйҙә, дүртәүҙе алһын. Дин быға ҡаршы түгел. – Яулыҡтарын ҡайыра бөрөп бәйләгән ҡураныс ҡына кәүҙәле әбекәй ҡыҙып уҡ китте. Үҙенең артыҡ ысҡындырғанын һиҙгән Марьямо, йылан һымаҡ борғоланып, әңгәмәне икенсегә борҙо:

– Хөснидинде әйтәм, бигерәк бөтөрөнә. Бөлөп китмәһә ярар ине. Бер нәмә лә ашамай... – тип һөйләнеп, сығып китеү яғын ҡараны. Әлбиттә, уға әбейҙәрҙең Әҡлимәнең эргәһенән китмәй, өҙөлөп ҡарауҙары оҡшамай, тик ҡатын һыр бирмәҫкә тырышты.

Әҡлимә өсөнсө көнөнә генә аңына килде. Ауыҙ асып, һүҙ ҙә өндәшмәй бер нөктәгә төбәлеп ятҡан ҡатынға: «Әллә аҡылынан яҙҙымы икән?» – тип аптырап ҡаранылар. Шыбырлашып үҙ-ара һөйләшеп алдылар:

– Бәҙретдинде әйтергә микән?

– Нисек итеп әйтәһең инде. Ҡуй, хәл алһын әле.

– Барыбер балаһын һорар. Әллә инде, аптыралған....

Ҡапыл Әҡлимә моңһоу күҙҙәрен асты:

– Мин бөтәһен дә беләм.

Эйе, һаташа-һаташа аңына килгән саҡтарында, уға ҡарата мәрхәмәтһеҙ булған донъяға күҙен асып та ҡарағыһы килмәй, шул килеш ятты ла ятты Әҡлимә. Уның йәшәгеһе килмәй ине. Күҙ алдына бер-бер артлы балалары килеп баҫты. Хәлһеҙ ҡулдарын һуҙып, улар янына барырға итте, ҡысҡырып, һаташып тағы аңын юғалтты.

Күләгә һымаҡ ҡалған Әҡлимә яйлап һауыға башланы. Моңһоуланып, эскә батҡан күҙҙәрендә йәшәү саҡҡылары барлыҡҡа килде. Һурыҡҡан йөҙөн күрһәтергә теләмәгәндәй, йәш ҡатын хәҙер башын аҫҡа эйеп, яулығын маңлайынан түбәнерәк төшөрә биреберәк бәйләп йөрөй. Яулыҡ аҫтындағы сәстәре... утыҙ йәшендә генә ап-аҡ булып ағарғанын үҙе генә белде.

Мосолман дине буйынса, үлгәндәр өсөн ныҡ ҡайғырырға ярамай. Алла бирә – Алла ала, тип, бөтәһен дә Хоҙайға тапшырырға ҡуша. Тик Әҡлимә генә бының менән килешмәне. Балалары иҫенән сыҡмай, һағынып-һарғайып уларҙы күргеһе килде. Бигерәк тә уларға тиңдәш балаларҙы күреү ҡыйын уға. Бер үҙе ҡалһа, илағыһы килеп тик торҙо.

Бер көндө, мендәрен ҡосаҡлап илап ултырғанда, йәш ҡатындың ҡулына ҡаты нәмә бәрелгән кеүек булды. Аптырап, ныҡлап ҡапшап ҡараһа, мендәр эсендә ысынлап та ниҙер бар. Илауҙан туҡтап, мендәрҙе һүтеп ҡарамаҡсы булды. Үҙ күҙенә үҙе ышанманы Әҡлимә: мендәр эсендә ҡара сепрәккә төрөлгән, йоҙроҡ ҙурлығындай һөйәк ята. Тәне аша электр уты үткәндәй булды, ҡулынан һөйәк шаҡылдап төшөп, тәгәрәп китте. Был нимә? Сихырмы? Әллә мендәр эшләгәндә, мамыҡ менән бергә, яңылыш килеп эләктеме? Улайһа, ни эшләп ҡара сеперәккә төрөлгән? Әҡлимә сәйер табышын Хөснидингә күрһәтеп ҡарарға булды.

– Хөснидин, ҡара әле! Бер нәмә күрһәтәм... – Киске аштан һуң Әҡлимә теге хикмәтле һөйәк тураһында ипләп кенә һүҙ башланы.

– Ҡайҙан таптың? –Хөснидин ҡапыл ҡурҡып китте.

– Беҙ йоҡлап йөрөгән мендәр эсенән.

– Һы, ҡыҙыҡ... Эй, шуға иҫең китмәһен! – Ир шөбһәләнеүен йәшерергә маташты.

– Нисек иҫең китмәһен!? Беҙҙең бәхетһеҙлектәр ҙә ошонан киләлер әле! – тип ҡыҙып киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды ҡатыны.

– Мин ҡара көстәргә лә, сихырға ла ышанмайым. Ышанмаһаң, бер нәмә лә булмай, тиҙәр. Сихыр менән әллә кемдәр әллә нимә эшләп бөтөр ине. Ҡайҙа, утҡа яғайым, көлө күккә осһон, – тип Әҡлимәне тынысландырыу яғын ҡараны ир. Әлбиттә, Хөснидинде мендәр эсендә ҡара сепрәккә төрөлгән һөйәк ятыуы хафаға һалды. Эйе, бында ырым, сихыр һәм башҡа шуның кеүек нәмәләр бик көслө. Әҡлимә юҡ-бар уйҙар уйламаһын өсөн, һыр бирмәһә лә, йоҡлап йөрөгән мендәрҙәре эсендә һөйәк ятыуы Хөснидинде борсой ине. Кем эше, тип баш ҡатыраһы ла түгел, был – тик Марьямоның ғына эше. Бөгөн үк һөйләшергә кәрәк. Бына ҡалаға барып, ереле-ваҡлы эштәрҙе генә теүәлләй һалырға ла...

Көн һайын ҡояш нурҙарына иркәләнеп уянған Әҡлимә бөгөн ҡояштан да иртәрәк тороп, аш өйөнә йүгерҙе. Хөснидине эше буйынса ҡалаға китә. Эштәрҙе ҡалала теүәл үтәр өсөн иртәрәк барыр кәрәк. Мамыҡ яланында эшләп һуң ғына ҡайтҡан Марьямоны Әҡлимәнең борсоғоһо килмәне. Еңел йөрөп иртәнге ашты әҙерләне. Хәҙер уның күҙҙәрендә йәшәү саҡҡылары уйнай, йөҙө лә йомроланып, матурайып киткән. Сөнки йөрәк аҫтындағы сабыйы Хөснидин менән икеһенә лә йәшәү дәрте өҫтәй. Хәҙер улар, көн артынан көн һанап, бәпәйҙәренең тыуыуын көтә.

Марьямо таңғы һил һауаны тирбәлтеп һөйләшкән тауышҡа уянып китте. Әҡлимә менән Хөснидиндең тауыштары бит. Ҡара таңдан торғандар, – күрәһең, Хөснидин алыҫ юлға сығалыр. Нимәлер һөйләшеп, хихылдашып көлөшкән булып алдылар. Тауыштары ла асыҡ ишетелә:

– Ярай, эштәрең уң булһын, – ти теге ҡорсаңғыһы.

– Һин өйҙә генә ултыр. Эшкә сығып йөрөмә.

– Бында ни, өй араһындағы эште эшләйһең инде. Нисек көн оҙонона тик ултырмаҡ кәрәк.

– Хәҙер эш тип ауыҙыңды ла асаһы булма. Ҡара уны, һаҡланырға кәрәк.

– Ярай, ярай, көйәләнмә, шулай итермен.

– Эштәрем килеп сыҡһа, һуңға уҡ ҡалмаҫмын, иртәрәк ҡайтырмын.

Хөснидин машинаға нимәлер тултыра, ахыры, эш араһында һөйләшәләр.

«Нимә эшләйҙәр икән? – Марьямо, түҙмәй, һикереп тороп, ярыктан ҡараны. – Юрамал эргәләренә сығырға микән... Мин бисәһе түгелме әллә? Сығайым әле! Йоҡлап ята тимәһендәр. Теге хәсисте әллә кем итеп ҡуймайыҡ әле», – тип ашыҡ-бошоҡ халатын кейеп, яулығын бәйләне лә килеп тә сыҡты. Сығыу менән, ҡояштай ялтырап, хәбәренә кереште:

– Хөснидин, һөйөклөм! Ҡайҙа йыйынаһың?

– Ҡалаға. Башҡа бер нәмә лә онотманым шикелле. Ҡағыҙҙар, документтар, аҡса ла урынынында, – тип Хөснидин бөтәһен дә барлап ҡарап сыҡты.

– Мин һине, кисә яланда эшләп ҡайтҡас арығанһыңдыр тип, уятмағайным, – тине Әҡлимә, бер үҙе уртаҡ ирҙе оҙатып торғанына уңайһыҙланып.

– Ир оҙатырлыҡ ҡына хәлем бар әле, – тип яуап бирҙе тегеһе эре генә.

– Мә, һыуыңды онотма! – тип өтәләнде Әҡлимә, Марьямоға иғтибар итмәйенсә.

– Һыуҙы онотоу юҡ, йә ярай, иҫән-һау тор, йән киҫәгем, әйткәнде тыңла! – тине Хөснидин.

–Нимә, нимә тағы? – тип шаяртыуға борҙо Әҡлимә.

– Үҙеңде һаҡла, баҡсаға эшкә сығырға уйлама ла, тим, – тип бер нәмәне ҡат-ҡат тыҡып, машинаға ултырып китеп тә барҙы. Хөснидин артынан саң борҡоп ятып ҡалды.

Әҡлимә, ни эшләптер, өйгә ашыҡманы. Машина күҙҙән юғалып, саң баҫылғансы ҡарап торҙо. Күңеле моңһоуланып, илағыһы килде. Хөснидин дә әллә нисек, бер үк нәмәне ҡат-ҡат әйтеп хушлашты. Әйтерһең, ул бәләкәй бала. «Иртә торорға кәрәк булғанлыҡтанмы, төнөн йоҡлап та булманы. Әҙерәк ятып алайым әле» – тип уйлап өй яғына ыңғайлағайны. Шул саҡ Марьямоның мыҫҡыллы сыйылдаҡ тауышы ишетелде:

– Ашарға әҙерләр кәрәк...

– Әҙерәк ятып торайым тигәйнем. Иртә бит. Ярай, хәҙер. – Әҡлимә, кире боролоп, һөйләнә-һөйләнә аш өйөнә ыңғайланы. – Ашарға әҙер ул былай.

Әҡлимә иртәнге ашты хәстәрләргә тотондо, ә Марьямо, ярҙам итешеү түгел, инеп тә күренмәне. Күңелендәге моңһоулыҡты баҫа алмай, йырлап ебәрҙе Әҡлимә.

*Тыуған яҡтарыма ҡайтыр инем,*
*Аяҡтарым талһа, имгәкләп...*

Һуңғы мәлдәрҙә әллә ниңә ошо йыр йыш ҡына иҫенә килә лә төшә. Был яҡтарға өйрәнде лә инде. Ә шулай ҙа тыуған төйәк һағындыра. «Их, әсәйем нимә эшләй икән? Йәшлек аҡылым менән бер нәмә лә уйламай, япа-яңғыҙын ҡалдырҙа китсе. Ҡайһылай йөрәкһеҙ булғанмын. Эй-й-й Аллам, заманаһы ла үҙгәрҙе лә китте, хат-хәбәр ҙә алышып булмай, исмаһам. Ул минең турала бер нәмә лә белмәй, ярай, белмәүе лә һәйбәт. Белһә, йөрәге ярылыр ине...» – Ошо уйҙарҙы башынан үткәреп, моңланып йырланы ла йырланы Әҡлимә.

Кешеләр йоҡоларынан уянып йөрөй башланы, һөмһөрө ҡойолоп Марьямо килеп инде. Нимәлер мыңғырлап, Әҡлимәгә:

– Нимә, һөйләшкең дә килмәйме? – тип бәйләнде.

– Нимә тип әйткәнеңде аңғармай ҙа ҡалдым.

– Аяҡ өҫтө йоҡлап йөрөгәс, шулай инде. Ашарға әҙерме?

– Марьямо, сирләп киттеңме әллә? Төҫөң юҡ.

– Ни эшләп ауырыйым, ти, мин? Башҡалар һымаҡ, мине ауырыу тип уйлайһыңмы?

Әҡлимә тағы нимәлер әйтергә ауыҙын асҡайны ла, төртмә һүҙҙәр ишеткәс, шымды. Ашарға инә башланылар. Марьямоның йөҙө шунда уҡ үҙгәреп, балҡып китте.

Иртәнге аштан һуң һәр кем үҙ эше буйынса тарала башланы. Диларабо ла мәктәпкә сыҡҡан еренән боролоп килеп:

– Еңгә, мәктәптән килгәс, һинең яныңа инермен, йәме. Теге йырҙы өйрәнеп бөтөп ҡуйырбыҙ, – тине.

– Ярай, һәйбәт уҡып кил!

– Ярар, ярар. Пока-пока! – Тажик теленә урыҫса ҡатыштырып, һаубулашып сығып китте ҡыҙыҡай.

– Пока-пока! – тип артынан көлөп ҡарап тороп ҡалды Әклимә.

Ҡатын һаман да Марьямо тураһында уйланды. Ҡыҙыҡ кеше лә инде. Аңлап та булмай үҙен. Бер ҡараһаң, унан да һәйбәт кеше юҡ. Инде йылмайып-көлөп, матур итеп гәпләшә. Бер ҡараһаң, һөмһөрө ҡойолоп, ҡырын-мырын ҡарап, арҡыс-торҡос һөйләшеп, өҙә баҫып йөрөй. Ә инде юҡ-барға уға бәйләнеп, ризаһыҙлыҡ белдереп йөрөгәненә ул өйрәнеп тә бөткән. «Инде әҙерәк ятып алғанда ла була, әллә ниңә йоҡо баҫа ла баҫа. Бер уйлаһаң, бер бөгөн иртә торолмай», – тип үҙенең өйөнә инеп китте.

Әклимәнең инеп ятыуына оҙаҡ та булманы, Марьямоның тағы ла сыйылдаған тауышы ишетелде:

– Эй Алла-а-ам! Йоҡо яраттың инде.

– Ятып ҡына торғайным, йоҡлап киткәнмен. Яланға барманыңмы ни? Мин һине, яланға киткәнһең, тип уйлағайным, – тип аҡлана-аҡлана, Әклимә урынынан торҙо, башынан шыуып төшкән яулығын яҙып бәйләне.

– Шуға рәхәтләнеп йоҡларға ятҡайныңмы?

– Бөгөн әллә ниңә йоҡо баҫа ла йоҡо баҫа. Беҙҙә, йоҡо баҫһа, ҡунаҡ килә, тиҙәр, бында нисек булалыр?

– Әллә, уныһын ишеткәнем юҡ. Күрмәйһеңме ни, баҡсаны ҡорттар, ҡый үләндәре ялмай. Баҡсаға сығырға кәрәк. Хөснидиндән һиңә түгел, миңә эләгер. – Көндәше, алпан-толпан баҫып, күҙҙән юғалды.

Әклимә эсергә һыу ҡойоп алды ла уның артынан эйәрҙе, һөйләшмәй йөрөп, хәтһеҙ эш эшләп ташланылар. Ҡояш та ҡыҙҙыра башлағайны.

...Бөгөн Марьямоның иртәнән бирле һарыуы ҡайнай. Әклимәнең, өндәшмәйнитмәй, иртә таң менән Хөснидинде оҙатып йөрөүенә йөрәге янды. Ә ул бер нәмә лә белмәй йоҡлап ятасы, әйтерһең, ул уның ҡатыны түгел. Хатта иҫтәренә лә алманылар, һанламауҙары бер бөгөнмө? Хөснидин дә уға әллә иғтибар ҙа итмәй, бөтөнләй уны күрмәй ҙә. Ә бит улар һәйбәт йәшәрҙәр ине. Бары тик ошо ҡорсаңғы арҡаһында ситкә тибелә. Хөснидин дә, ауыҙын асып, гел Әклимә эргәһендә өйөрөлә.

Бөгөн иртәнге һөйләшеүҙәрен иҫләп, күҙҙәренә йәш тулды. Ҡайһылай уның өсөн йәнен бирерҙәй булып хафалана. Их, кеше бәхетенә ҡарап ғүмере зая уҙырмы!? Ҡапыл Марьямо үҙен бөтөнләй был донъяла кәрәкмәгән кеше итеп тойҙо. Яңағы буйлап субырлап аҡҡан мул йәштәрен ҡул һырты менән һөрттө ҡатын. Ә улары, тыйылыу белмәй, уның һайын шашып, эркелеп аҡтылар ҙа аҡтылар... Шул саҡ ағастар араһынан Әклимәнең һынын шәйләп ҡалды. Көндәше үрелеп-үрелеп лимон ҡыуаҡлығынан нимәлер сүпләй ине. Иркенлекте тойоп, билбауын бушатып, яулығын артҡа ҡайырып бәйләгән. Ух, йылан, бигерәк матур шул... Әрнеүҙәре көнләшеү менән бергә ҡушылып, йөрәген өттө ҡатындың. Әйтерһең, күңеленә йыртҡыс инеп ояланы: ҡан тамырҙары бүртеп, тишеп сығарҙай булып тулышты, тын юлдары быуылды. Күҙ алды ҡараңғыланып, нимә эшләгәнен үҙе лә аңламаны Марьямо...

Аңына килгәндә, баҡсаның икенсе яғында ята ине. Яулығы шыуып төшкән, сәстәре туҙған, күҙ йәштәре менән балсыҡ ҡатыш ҡом битенә ҡатып йәбешкән. «Нимә эшләнем мин? Нимә эшләнем мин?...» – Марьямо урынынан ҡалҡынды ла, шул һорауын ҡабатлай-ҡабатлай, баҡсаның икенсе яғына йүгерҙе. Ә Әҡлимә башын һәлендереп, сайҡала-сайҡала өйгә табан атлай ине.

А-а, ни эшләнем мин, ни эшләнем...

Марьямоны бер кем дә, хатта Әҡлимә лә ишетмәне. Кире баҡсаға йүгереп китеп барған ҡатын, нимәгәлер эләгеп, һөрләгеп барып төштө лә ҡапыл тынып ҡалды.

... Марьямоның көнләшеүҙән үҙен аңламаҫ хәлгә етеп ҡылған ҡылыҡтары өсөн Хоҙай алдында тәүбәгә килеүеме әллә был? Ике гонаһһыҙ баланың өҙөлгән ғүмерҙәре өсөн ғазапланып һыҙланыуҙары йөрәгенә тәрән эҙ ҡалдырып телгеләгәндә, аҡылынан яҙыр хәлгә етә ине бит. Мөхәметдингә боҙолған һутты биргәндә лә, Бәҙретдинде һыуға төртөп төшөргәндә лә, бөгөн Әҡлимәнең эскән һыуына ағыу һипкәндә лә үҙен аңларлыҡ хәлдә түгел ине Марьямо. Ҡылған ҡылыҡтары өсөн аҙаҡ Алланан ярлыҡлау һорап, сәстәрен йолҡа-йолҡа илағанын береһе лә күреү түгел, һиҙмәне лә, әммә ләкин былар береһе лә эҙһеҙ үтмәне: ҡатындың көн яҡтыһы күрмәгән сәстәре юлаҡ-юлаҡ булып ағарып сыҡты. «Эх, Марьямо, ни эшләнең һин...» – Әллә тын ғына леберләшкән япраҡтар әйтте быны, әллә ҡатын үҙе, ҡатҡан ирендәрен саҡ ҡыймылдатып, шыбырлап өлгөрҙө...

Әҡлимә көндәше һуҙған һыуҙы бер уртлауы булды, күҙ алдары ҡараңғыланып, аяҡ аҫтындағы ер менән бергә, гүйә, бөтә донъя әйләнә башланы. Көс-хәл менән өй яғына ыңғайланы бисара. Тик өй ниңәлер яҡынлашмай, киреһенсә, алыҫайғандан-алыҫайҙы. Марьямоның сәрелдәп-сәрелдәп ҡысҡырғаны ҡолағына салындымы, әллә... Әҡлимә бар көсөн йыйып бер-ике аҙым атланы ла, тал сыбығындай, ергә бөгөлөп төштө. Шул саҡ ҡапыл әсәһенең таш булып ҡатҡан йөҙө, күҙҙәрен тултырып ҡараған Хөснидине, бер-бер артлы ике сабыйы күҙ алдына килеп баҫты. Эйе, эйе, йән киҫәккәйҙәре яҡында ғына икән дә баһа! Ана, һикерешеп уйнап йөрөйҙәр. Хәҙер, хәҙер эргәләренә барып етәсәк. Әҡлимә, хәлһеҙ генә ынтылып, балаларына ҡулдарын һуҙғандай итте лә йылмайып күҙен йомдо. Керпек остарындағы саф та, шул уҡ ваҡытта әсе лә бөрсөк-бөрсөк йәштәре, бар донъяға йәм таратырға теләгәндәй, төрлө төҫкә инеп йымылданы ла бит алмалары буйлап тәгәрәп төштө.

...Хөснидин ҡаланан ҡайтып төштө. Ҡалалағы эштәрен «һә» тигәнсе бөтөрҙө ир бөгөн: ҡатмарлы ла, мөһим дә йомоштары бер ыңғайҙа хәл ителде лә ҡуйҙы. «Инде ҡалаға бындай эштәр менән иртүк барырға кәрәк икән», – тигән һығымтаға килде ул. Машинаһынан ашыҡмай ғына сығып, һуҙа баҫып өй яғына ыңғайланы ла... ерҙә быуынһыҙ булып һуҙылып ятҡан Әҡлимәһен күреп, йөрәге ярылғандай, бар көсөнә ҡысҡырып, эргәһенә йүгерҙе.

Йоҙроҡтарын шатырлата төйнәп тубыҡланып төшкән ирҙең, сабыйҙарса йылмайып, хәрәкәтһеҙ ҡалған һынды ҡосаҡлап үбә-үбә үҙәк өҙгөс итеп үкереп илағанын өҫтән ҡыҙарып-бүртенгән ҡояш ҡына күҙәтте.

...Ә баҡсала, салҡан төшөп, хәрәкәтһеҙ Марьямо ята. Килешле итеп ябынып йөрөгән сағыу биҙәкле яулығы бер яҡ яурынына һыпырылып төшкән. Һөрләгәһөрләгә, имгәкләп йөрөп ерҙе туҡмап илағанында беләк, тубыҡ тәңгәленән күлдәге йыртылып, ҡарағыһыҙ төҫкә ингән. Уның бысраҡҡа уҡмашып ҡатҡан сал сәстәре араһынан яртылаш асыҡ күҙҙәре ҡояшҡа ҡарап ҡатҡан. Әйтерһең дә,

улар: «Ҡояшҡайым, ҡылған гонаһтарымды һин генә күрҙең, бөтәһенә лә һин генә шаһит. Кисер инде мине, кисер», – тип ялбарып баҡҡан кеүек... Ә уң ҡулының тупраҡ тулған тырнаҡтары осонда ағыу шешәһе ҡояшҡа ялтырап ята ине.

***

Шәмсиямалдар көн дә бер-береһенең хәлдәрен белешеп, ҡунаҡҡа йөрөшә. Юҡлыҡ талаштыра, байлыҡ яраштыра, ә уларҙы баштарына төшкән ауыр яҙмыш берләштерҙе. Теге мәл Рәхилә, армия сафында улы үлеп ҡалғас, бала ҡайғыһынан йөрәк менән дауаханала ятҡан икән... Бөгөн дә һөйләшә-һөйләшә сәй эсеп ултыралар.

– Мин әйтәм, килеп шәп иттең әле. Ике көн булып китте инмәгәнеңә, үҙем йома сәйенә саҡырырға тора инем. – Шәмсиямал, ҡыуанып, табын әҙерләй башланы.

– Ошо арала бушаманым шул. Әллә нимәһе менән көн үтә. Ә-й-й, анаһы шул инде... Бына, Шәмсиямал, төштәрем боларып тора. Бөгөн һаташып уяндым да бүтән йоҡлай алманым. Шуға эсем дә боша.

– Эй Аллам, ни эшләп икән? – тине Шәмсиямал, хафаланып.

– Әллә инде.

– Ҡуй инде, мин дә төштәремдә Әклимәмде йыш күрәм. Бөгөн дә төшөмә инде. Имеш, оҙон ап-аҡ күлдәктә, һауала, ҡош кеүек, ҡулдарын йәйеп оса. Ике ҡулы урынында – пар ҡанат. Ҡанат-ҡулдарҙан ап-аҡ йондоҙҙар ҡойола. Йәнәшәһендә үҙе һымаҡ ап-аҡ ҡош балалары өйөрөлөп-өйөрөлөп оса... Нимә тип юрарға ла белмәйем. Әклимәм генә имен-аман йәшәһен. Көн дә Хоҙайҙан шуны ғына һорайым.

– Бошонма, әхирәткәйем, матур ғына итеп йәшәп яталыр. Төштө нимә тип юраһаң, шул була, тиҙәр. Аҡ кейемдә булғас, һәйбәттер. Ярай, яҡшыға юрайыҡ.

– Эйе, моғайын да, һәйбәт йәшәйҙер. Шулай ҙа эсем бошоп тик тора. – Шәмсиямал тәҙрә эргәһенә килде. – Әклимәм бынау гөлдө үҙ ҡулы менән ултыртып киткәйне... Ни эшләптер мандымай башланы.

– Ҡыш ҡояш яҡтыһы етмәйҙер, март ҡояшы йылыта башлаһа, китер әле шәбәйеп.

– Нисәмә йылдар күҙ ҡараһылай һаҡлаған гөлөмә әллә нимә булды ла ҡуйҙы.

– Бәлки, ашлама кәрәктер.

– Сәскә магазининан барыһын да алып, кәрәгенсә ашлап торам да ул. Тупрағын да алыштырам. Ҡыш та сәскә атып ултырған гөлөмә нимә булды икән? Бына, ҡара әле..

Рәхилә урынан тороп, гөл үҫкән тәҙрә эргәһенә яҡынланы.

– Ысынлап та, һулый башлаған, әллә һыуҙы күп ҡойҙоңмо икән? – тип аптырана әхирәте, ҡыуара башлаған гөлдө күреп.

– Юу-у-у-к, һыуҙы ла артыҡ ҡоймайым. Ҡара әле, хат ташыусы килә! Сығайыҡ әле, баламдан хат юҡмы икән?!

Шәмсиямал, өҫтөнә кейергә лә онотоп, әллә ҡайҙан килгән хат ташыусыға ҡаршы йүгереп сыҡты, һалмаҡ ҡына баҫып килгән хат ташыусыны көтөп, зарығып моңһоуланған күҙҙәре, ҡош осоп етмәҫ тарафтарҙан ҡош телендәй генә хәбәр өмөт итеп, юлға баҡтылар. Еләҫ елдәр, үҙ йәшенән күпкә оло күренгән ҡатынды йәлләп, иңбашына таралып төшкән йоҡа сәстәрен иркәләп елпелдәттеләр ҙә елпелдәттеләр...

## *Тәржемәсенән кәлимә*

*Лео Яковлевтың Ғүмәр Хәйәм (Аллаһ миһырбанлы булһын үҙенә) тураһындағы повесының (Омар Хаям. «Сад истин», Москва, 2009) аҙағын тәҡдим итәбеҙ. Был әҫәр мәшһүр шәхесте, үҙенсәлекле аҡыл эйәһен һәр кемгә тулыраҡ күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә.*

*F.Хәйәм беренсе нәүбәттә заманының бөйөк ғалимы — математик, астроном, философ. Уның математикала асыштары шул тиклем юғары баһалы, хатта бер тарихсы үҙенең китабын «Хәйәмгә тиклем ғәрәп алгебраһы» һәм «Хәйәм алгебраһы» бүлектәренә айыра. Математикаға арналған рисәләләрендә алгебраик тигеҙләмәләрҙе сисеү юлдарын иҫбатлай. Европа ғалимдарынан күптән алда параллель һыҙыҡтарҙың үҙенсәлеген аса. Хәйәм бөтөн һандарҙан тамыр табыу мәсьәләһен ентекләп башҡара һәм формула сығара, ә хәҙер уны Ньютон биномы тиҙәр.*

*Ул, солтан астрономы булараҡ, Ҡояш календары төҙөй, һәм ул әле беҙ ҡулланған календарҙан анығыраҡ ине.*

*Беҙҙең өсөн ул — шағир, бөйөк шағир. Был тынғыһыҙ зат донъя төҙөлөшө, заманалар үҙгәреше, ҡартлығы, ил хакимдары менән дә килешмәй. Ул ғүмере буйы яҙмыш асылын, ваҡыт ағышын, хәҡиҡәт сағылышын аңларға һәм әҙәм балаһына еткерергә тырышҡан һәм былар бөтәһе лә робағиҙарында сағыла.*

*XIX быуат аҙағынан бөтә донъя уның ижады менән ныҡ ҡыҙыҡһына. Урыҫтар иһә XX быуат башынан уны инглизсәнән тәржемәләй. 1938 йылда 300 робағийы айырым китап булып сыға. Бер шәреҡ ғалимы фекеренсә, 1940 йылда Америкала F. Хәйәм китабы бөтә шағирҙар китаптарынан да күберәк тарала. Бөгөн дә фарсы шағирҙары араһында ул иң абруйлы һанала.*

*Уҙған быуаттың 60-сы йылдар аҙағында урыҫ теленә Хәйәмде тәржемәләү буйынса конкурс ойошторола. Беҙҙә лә ундай бәйге булыр, иншаллаһ.*

**Дамир КУСКИЛДИН.**

Лео
ЯКОВЛЕВ

# Тормошо тураһында Ғүмәр Хәйәм үҙе һөйләгән бәйән*

## Низам Әлмөлөк заманында Исфаған

Дөйәнең һалмаҡ ҡына һелкенеп барғанында Исфаған хаҡында нимә ишеттем йә уҡыным икән тип иҫемә төшөрә башланым. Беҙҙең тарихсылар бәйән итеүенсә, әүәл Әспәдәнә исеме менән билдәле һәм уға йәһүдиҙәр нигеҙ һалған, ә улар бик боронғо замандарҙа Аллаһ халҡы иҫәпләнгән. Шуға яуыз батша Навуходоносор (б.э. тиклем VI быуат) көн күрһәтмәгәс, улар Ханаанға (һуңынан Палестина, Сирия ерҙәре – **Д. К.**) ҡайтып киткән. Б.э. тиклем IV быуатта был ҡаланы Зөлҡәрнәй оҡшатҡан, үҫтергән, төҙөкләндергән. Артабан ҡалаға Иран солтандары күҙ һала.

Бер нисә көндән һөҙәк тауҙар ышығында, йәшеллеккә күмелгән Исфаған күренде. Матур һарайҙар, мәсеттәр, манаралар, күперҙәр күҙҙең яуын алып тора. Бер нисә генә көн элек мин күргән, әҙәми зат һ.б. йән эйәләре йәшәмәгән ҡоба сүллектән һуң хатта бәләкәй генә йылғаның кеше тормошонда ниндәй ҙур әһәмиәткә эйә булыуы хаҡында уйландым. Йылғалар, шишмәләр, каналдар, ҡан тамырҙары кеүек, Аллаһ еренең йәшәү сығанағы шул.

Тиҙҙән бөйөк вәзир үҙенә саҡырып, солтандың миңә ер бүләк итеүен, шунда йорт төҙөп, баҡса үҫтерергә фарман биреүен әйтте. Ә хәҙергә Низам Әлмөлөк ваҡытлыса көн иткән урынымдан үҙ һарайындағы айырым бүлмәгә күсергә тәҡдим итте.

Һижрә буйынса 465 йыл ине, миңә 27 йәш тулды, ә мин әле һаман башҡалар һарайында һыйынып йәшәйем. Бер айҙан Малик шаһ үҙенә саҡырҙы. Солтан һарайы һөйгәнем Төркәндең зинданы ине, һәм мин унда булғанда икебеҙҙең йөрәк тибеше бик яҡынлашыуын һиҙҙем.

Солтан Малик хуш күңелле һәм аралашыуҙа ябай кеше ине. Шуға мин башта сикләнгән холоҡлолор тип тә һананым. Әммә артабанғы гәпләшеү иртә һығымта яһауымды күрһәтте. Хикмәте бына ниҙә: ҡунаҡ бүлмәһендә ултырғанда шаһ ғаиләһенән бик сибәр малай беҙгә сәй әҙерләне, һәм ул быны ҙур нәфислек менән башҡарҙы. Ул сыҡҡас мин уның эште бик камил башҡарыуына һоҡланыуымды хужаға әйттем. Ә солтан:

– Аптырама. Һин беләһеңдер – яңы ғына йомортҡанан сыҡҡан сепей өйрәтмәйенсә ем сүпләй, ә инде уны ҡырға сығарып ебәрһәм, әйләнеп ҡайта алмай. Күгәрсен балаһы ем сүпләй алмай, суҡышын асып, әсәһе аҙыҡ һалғанын көтөп ултыра; осорға өйрәнгәс, күгәрсен көтөүен Мәккәнән Бағдатҡа килтерә ала. Был малай ҙа шулай: ул әҙәп-тәртипкә, әхлаҡҡа өлгөлө, абруйлы ғаиләлә тәрбиәләнә, ә кешеләр әҙәпкә әсә һөтө менән өйрәнгәндер, тыумыштан әҙәплелер тип уйлай.

---

*Аҙағы. Башы 2011 йылдың 6-сы һанында.*

Мин ул килтергән миҫалдарҙы, һығымтаһын һоҡланып тыңланым. Аллаһ етәкселеккә тәғәйенләгән бәндәһен кешеләр менән идара итергә ҡушһа, күрәһең, тасуири фекерләү, аныҡ, аңлайышлы һөйләү һәләте лә бирәлер.

Минең йорт тиҙҙән төҙөлөп бөтә, эргәһендә обсерваторияға ла нигеҙ һалына, башҡа ғалимдарға ла йорт булыр, тип ышандырҙы солтан. Ысынлап та беҙ бер нисә айҙан дәррәү эшкә тотондоҡ. Һиҙелмәй генә көндәр, айҙар, йылдар үтте.

Солтан һарайына барған бер мәлде мин туғанлашҡан Хәсән Саббаһ менән осраштым. Ул һарайҙа һаҡ төркөмө башлығы вазифаһын башҡара. Хәсән вәзир Низам Әлмөлөктө әрләргә тотондо. Мин бөйөк вәзирҙе яҡлап, ул дәүләткә һәм кешеләргә бик файҙалы эш башҡарыуын әйттем, әммә уны ышандырып булманы. Саббаһ миңә исмаилиттар (VIII быуатта Ғәрәп хәлифәтендә барлыҡҡа килгән шиғыр ойошмаһы ағзалары. Улар, башҡа шиғиҙарҙан айырмалы, алтынсы имамдың оло улы Исмаил етенсе имам булырға хаҡлы тип иҫәпләгән – **Тәрж.**) тураһында күп һөйләне һәм уның шул хәрәкәт менән ныҡ бәйләнгәнен аңланым. Беҙҙең туғанлыҡты иҫемә төшөрөп, ул дини берегеү мәсьәләләре буйынса минең фекеремде аныҡларға маташты. Ә мин ситләтеп яуапланым. Сөнки мин каландарҙар һәм бөйөк суфый остаздарының береһе шәйх Абу Сәйет юлында ныҡлы торғас, һәр төрлө сектантлыҡ сикләнгәнлеге миңә ят ине. Унан һуң Аллаһ менән минең шәхси мөнәсәбәтемә әҙәми заттарҙан ҡыҫылыусы булырға тейеш түгел, тип иҫәпләйем. Артығын һөйләргә тырышманым, сөнки солтан эргәһендә белдекһеҙ, шикле дин әһелдәре менән бергә талантлы ғалимдарҙы күп осратырға мөмкин ине.

Шулар араһында иң танылыҡлыһы минән ун йәшкә кесе Әбүхәмит Әлғәзәли ине. Әммә ул Остазымдың фәлсәфәүи ҡараштарын яратманы һәм дини бәхәстәрҙә уларҙы еретик, хатта яуыз ниәтле тип атай торғайны. Уның фанатизмы, обсерваторияға һәм беҙҙең тикшеренеүҙәргә артыҡ иғтибары мине һағайта төштө.

Бер мәл беҙҙең астрономик приборҙарҙың күбеһе эшләй башлағас, ул беҙгә килеп инде лә, минән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе тураһында ентекләп һорашырға тотондо.

Мин оҙон һүҙгә төшөп, ҡатмарлы астрономик төшөнсәләр менән йыһандың төҙөлөшөн аңлатырға тотондом. Тиҙҙән уның һөйләшеү айышын тамам юғалтҡанын һиҙҙем. Ә ул алдан һөйләүҙе аңлағандай, әңгәмәне туҡтатырға маташты. Шул ваҡыт асыҡ тәҙрәнән мәзиндең өйлә намаҙына саҡырыуы ишетелде. Әлғәзәли урынынан тороп:

– Бына, ниһайәт, Хәҡиҡәт килде һәм мәғәнәһеҙлек артҡа сикте, – тине.

Тағы нәмәлер тип мығырҙанды ла шәп-шәп атлап сығып китте.

Һуңынан уның Абу Али ибн Синаға ҡаршы сығыштары хаҡында күптәр һөйләне миңә. Был эште ул еңел башҡарҙы, сөнки илдә ғәрәп телен белеүселәр кәмей барҙы, ә Остазым хеҙмәттәрен, ғәҙәттә, ғәрәпсә яҙҙы. Быны мин Әлғәзәли Исфаханға килмәҫ борон белә инем. Шуға 470 йылда уҡ (хәҙерге йыл иҫәбе менән 1077 й. – **Тәрж.**) Остазымдың «Вәғәз»ен фарсыға тәржемәләнем, һәм ул өгөт-нәсихәт тиҙҙән байтаҡ күп аҡыллы баштарға барып етте.

Обсерватория эше билдәле бер тәртиптә барҙы. Минең күҙәтеүҙәр һәм иҫәпләүҙәр эшенән һуң буш ваҡытым ҡала килде. Астроном хеҙмәте геометрия фәне менән тығыҙ бәйләнештә булғас, ул ғилемдең нигеҙен ентекләп өйрәнеү бурысын ҡуйҙым үҙемә. Евклидтың мин яттан белгән иҫбатлауҙарына билдәле бер яҫылыҡта ышанырлыҡ ине. Әммә ғалимдың тәғлимәтен осһоҙ-ҡырыйһыҙ йыһан киңлегенә ҡулайлап ҡарағанда... икеләнеү уятыуын шәйләнем. Бигерәк тә бишенсе фекере (постулаты) шикле күренә, сөнки салшайған икһеҙ-сикһеҙ

ғаләм киңлегендә параллель һыҙыҡтарҙың ҡылыға үҙгәрмәүен күҙ алдыма килтерә алманым. Постулаттың төп һорауына – мәңгелек ғаләм арауығында шул һыҙаттарҙың параллеллеге һаҡланырмы – быға яуап бирә алманым. (Ғ. Хәйәм вафатынан 800 йыл үткәс, ҡәберендә, бөтә донъялағы уны хөрмәтләүселәр тарафынан йыйылған аҡсаға Иран архитекторы проекты буйынса, йыһанда параллель һыҙыҡтарҙың тоташыуын сағылдырған обелиск төҙөлдө. – **Тәрж.**)

Шул турала күп уйландым, хатта Евклид китабының постулаттары яҙылған инеш бүлегенә рисәлә төҙөү өсөн билдәләр һалып сыҡтым. Әммә геометрияны ситкә ҡуйып, фәлсәфәгә тотонорға тура килде, сөнки ибн Синаның шәкерте Бохаралағы танышым имам ан-Нәсәүиҙән хат килеп төштө. Ғалимдар падишаһын белгән ғалим кешелек йәшәйешенең фәлсәфәүи вә әхлаҡи бурыс мәсьәләләре буйынса фекер әйтеүемде теләгән. Күрәһең, Остазымдың «Вәғәз»е күсереп яҙыусылар ҡулы аша күп юлдар үтеп, хөрмәтле имам һәм Фарыс улусы ҡазыйы Абунасир ан-Нәсәүигә барып еткән. Аллаһ ерендәге аҡыл торошон һәр ваҡыт иғтибар менән күҙәтеп барған ҡарт төлкө ан-Нәсәүи юҡҡа ғына минән ундай әҫәр көтмәгәндер. 1200 йыл элек вафат булған Евклидтың тәғлимәте тағы бер аҙ көтөр, ә оло йәштәге имам һәм ҡазый алдында һуҙмаңламайса фани донъяла яуап тоторға ине.

Йәшәйештең нигеҙе һәм әхлаҡи бурыс хаҡындағы рисәләмде ҡыҫҡа итеп, тиҙ арала яҙып бөттөм. Тик ҡайһы бер әһәмиәтле мәсьәләләрҙе әйтеп еткермәгәнмен икән. (Һуңынан, ғүмеренең аҙағына етәрәк, Ғ. Хәйәм әхлаҡи мәсьәләләргә ҡағылған рисәләләрен «О всеобщности бытия» – Йәшәйештең ғөмүмилеге хаҡында» исеме менән дөйөм китапҡа туплай – **Тәрж.**). Был кәмселектәрҙе үҙемдең ҡулъяҙмамды тағы бер тапҡыр уҡығас, яҡшы каллиграф менән күсерелгәне имамға оҙатылғас ҡына һиҙҙем.

Етешһеҙлек шунда: беҙҙең донъяла ҡаршылыҡтың булыуы зарур, ә уның аныҡлығы һәм оҙаҡлығы Аллаһ ҡулында. Ул беҙгә, бәндәләргә, ҡарағанда, бөтәһен дә яҡшы белә.

Фәлсәфәүи яҙмаларымдың артабанғы яҙмышы менән ҡыҙыҡһынманым. Шулай ҙа юғары дәрәжәләге дин әһелдәренең мине ихтирам итеүҙәре буйынса имам ан-Нәсәүи рисәләмә тура йүнәлеш биргәнен аңланым.

Исфахандағы тәүге тиҫтә йылдағы көсөргәнешле хеҙмәтем, аҡ ҡағыҙ, ҡәләм менән дә эш итеү күп рухи көс талап итһә лә, хеҙмәттәштәр менән тығыҙ бәйләнештә булғас, йәрһеҙ яңғыҙлығым ауыр тойолманы. Төркәнгә булған мөхәббәтем күңел төпкөлөндә ҡалды һәм бик һирәк кенә һыҙландырып иҫемә төшкөләне. Ҡайһы берҙә япа-яңғыҙ булғанымда, башым ял иткәндә йәнем торғон ниәттән, көс һалыуҙан йыһанға, ғөмүми Хәҡиҡәткә, Иң юғарылығы Йәзитҡаа, ғәләмде төҙөүсегә, бөтә тереклек Хужаһына ынтыла. Шул мәлдәрҙә мин, зиһенемде туплап, тулыһынса Хәҡиҡәткә бирелеп, тормошомдағы иң мөһим уңыштарға өлгәшә инем. Һәм шул саҡтарҙа ваҡыттың үҙгәреүенә ышандым: йыһанда бер нисә йыл булған һымаҡмын һәм йондоҙҙар араһындағы сәйәхәттән фани донъяға ҡайтһам, гонаһлы ерҙә бер-ике сәғәт үткән һымаҡ.

Ваҡиғалар ерҙә үҙ сираты менән уҙа барҙы. 472 йыл обсерваториябыҙҙа астрономик таблицалар төҙөлөп бөттө, һәм яңы календарь индерергә мөмкинлек асылды. 473 йыл Малик шаһҡа һәм Низам Әлмөлөккә таблицаның һәм календарь реформаһының ҡулъяҙмаһын тантаналы шарттарҙа тапшырҙыҡ. Ә мин тағы үҙемдең ҙур күләмле геометрия буйынса рисәләмде өҫтәнем. Солтан Маликшаһ беҙҙең тырышлыҡты ҙур баһаланы: бөтәбеҙ ҙә ҡиммәтле бүләктәр һәм эште дауам итеү теләге алдыҡ. Быларҙан башҡа миңә тағы «аш-шәйх ар-рәйес» – «ғалимдар падишаһы» дәрәжәһе тәҡдим ителде, ә мин әлегә бөйөк Әбүғәлисинә (Абу Али

ибн Сина) менән бер үк дәрәжәлә була алмайым, тип баш тарттым. Ғалимдар йәмғиәте биргән «Хәҡиҡәтте иҫбатлау» имамы дәрәжәһе менән ҡәнәғәт булыуымды белдерҙем. Ә солтан, уның өсөн мин хәҙерге заман ғалимдарының батшаһы икәнемде әйтте һәм шуға күрә йыртҡыстар батшаһы юлбарыҫ тиреһен бүләк итергә теләүен белдерҙе лә ус ҡаҡты – залға димгелле тире алып сыҡтылар. Күрәһең, тирене иләүсе үҙ эшенең оҫтаһы булғандыр, ул януарҙың тырнаҡтарын, ыржайған томшоғон да һаҡлаған, күҙҙәре урынына төҫлө быяла ҡуйған. Был һары морон Аму-Даръя буйында Төркән менән булған татлы уйындарҙы хәтерләтте. Ҡамыштар араһынан беҙҙе күҙәткән шул юлбарыҫтың тиреһе түгелме икән, тип уйландым. Һәм тағы Малик шаһҡа ул тирене миңә бүләк итергә ханбикә әйтмәнеме икән, тип тә уйлап ҡуйҙым. Ул тире бәхетле көндәремде иҫемә төшөрҙө, һәм мин Исфаханда тәү тапҡыр йәшлегемдең үткәнен, ә үткәнде кире ҡайтарып булмағанлығын аңланым. Күңелһеҙ фекерҙәрем һүҙҙәргә әүерелде, ә һүҙҙәр – һағышлы шиғырға:

*Мин бойоҡмон,*
*йәшлегемдең*
*китабын инде ябам.*
*Тормош яҙы, ҡар һыуылай, юғала күҙҙән тамам.*
*Бәхет ҡошо ҡанатының бер ҡауырыйын алып,*
*Һағыш кәсәһенә мансып, яҙмыш – алғышты яҙам*.*

Төп эшем тамамланғас, буш ваҡытым күберәк ҡалды. Күк йөҙөн күҙәтеү билдәле бер тәртиптә башҡарылды, ә ул эште минһеҙ ҙә үтәргә мөмкин. Ваҡытымды Низам Әлмөлөк һарайы эргәһендә урынлашҡан китапханала үткәрҙем. Унда Арп-Арыҫлан һуғыштан алып ҡайтҡан бик күп ҡулъяҙмалар һаҡланды. Байтағы бер бүлмәлә өйөлөп ятты, мин иһә китапханасыға шуларҙы тәртипкә һалырға ихлас ярҙам иттем. Ҡайһы бер әҫәрҙәрҙе өйгә алып ҡайтып, аулаҡта уҡыным. Бер тапҡыр миңә грекса яҙылған «Вәғәз таратыусы китабы» тип аталған төргәк осраны. Быға тиклем дә грек яҙмалары менән эш итергә тура килгәйне – Аристотелде, Платонды, Евклидты уҡыным – тик барыһы ла фәнгә нигеҙләнгән. Ә бында шатлығы менән ҡайғыһы, өмөтләнеү менән күңел ҡайтыуҙы сағылдырған инсан ғүмере һүрәтләнә. Бер мәғлүмәтле кеше, ул әйбер йәһүдиҙәрҙең һәм христиандарҙың Изге яҙмаларынан, тине. Быны тикшереү өсөн йәһүдиҙәр торған кварталға йүнәлдем. Ребе тип аталған уларҙың руханийы китаптың Тора менән бәйле булыуын дөрөҫләне һәм иҫкәртте: уны бик һирәктәрҙең уҡыуы хәйерле, сөнки ул китап ҡайғы, хәсрәтте һәм ихтыярһыҙлыҡты тарата. Йәһүди тағы, уның уйынса, китап беҙҙең әфәндебеҙ Сөләймән ибн Дауыт тарафынан яҙылған, әммә быны менән һәр кем килешмәй, тине.

Килештем. Минеңсә, Аллаһ ихтыяры менән бик ҡеүәтле һәм иң көсһөҙ хәлен, һанап бөткөһөҙ байлыҡта һәм бик тә фәҡирлектә, шатлыҡлы өмөттәр һәм күңеле ҡайтыуҙарҙы кисергән Сөләймән ибн Дауыттан башҡа – Аллаһ икеһенә лә ризалығын бирһен – берәү ҙә ундай китапты яҙа алмаҫ ине.

Әфәндебеҙ Сөләймән ибн Дауыттың миңә, фекерен ҡыҫҡа һәм асыҡ итеп әйтеүсе ғалимға, әҙәми заттың йәшәү мәғәнәһен аныҡларға һәм йәнемдең азат булыу юлын дөрөҫләүемә ярҙам итте. Бәғзе берәүҙәр йәндең азатлығына күп юлдар алып бара, тип яңылыша. Ул юлдар барыһы ла миғаж, сағым. Ысынында иһә уға бер генә юл бар. Хатта ул юл да түгел, ә тар ғына һуҡмаҡ, ә уның ике яғында ла күңел аҙҙырыусылар: хакимлыҡ, байлыҡ, хозурлыҡ, ләззәт, шөһрәт.

---

* *Робағиҙар артабан да шағир Фәнил Күзбәков тәржемәһендә бирелә.*

Уларға тағы көнсөллөк, нәфрәт ҡушыла. Шул тар һуҡмаҡтан уңға вә һулға бер аҙым ситләш – кире ҡайтыу юҡ. Был юлдың йәнә үҙенсәлеге шунда: уны ауыр юл тип һанарға ярамай, маҡсатҡа табан атлаған һәр аҙымыңдан кинәнес табырға! Кем шул тар һуҡмаҡтан тормошҡа ашмаған хыялдарына һис үкенмәй, еңел атлай, ғүмеренең һәр яңы сәғәтенә, көнөнә һөйөнә, ҡыуана, донъя аҙҙырғыстарына вайымһыҙ ҡарай, кем ерҙәге һәр төрлө уңыштарын һәм уңышһыҙлыҡтарын һәүетемсә кисерә – ундай кеше изге маҡсатына – Иң Юғары Йәзидә аяғы алдында азатлыҡҡа ирешә. Аллаһ менән ант итәм, мин шул Юлда булдым.

Әфәндебеҙ Сөләймән ибн Дауыттың иҫ киткес шәп китабын уҡығас, күңелемдә тыуған фекерҙәр шиғри юлдарға суйындан ҡойоп яҙылды.

Бер көн шулай аҡшам намаҙынан һуң уйға сумып ултырғанда, бөйөк вәзирҙән сапҡын килеп етте. Низам Әлмөлөк йәсиғ сәғәттәрендә шәхси мәсьәлә буйынса һөйләшергә саҡырған. Ғәҙәттәге сәләмләүҙән һуң булған әңгәмәнең йөкмәткеһен көтмәгәйнем. Бөйөк вәзир тәүҙә ғаилә тормошоноң хозурлығы хаҡында дәртләнеп һөйләне лә асыҡтан-асыҡ минең буйҙаҡ хәлемә күсте. Ир-ат хеҙмәтселәре генә булған аулаҡ өй һәм уның хужаһы тураһында алама хәбәрҙәр йөрөй, ти вәзир. Ул, әлбиттә, ундай ғәйбәткә ышанмай, тик өйҙә, уның уйынса, мотлаҡ ҡыҙ йә ҡатын булырға тейеш.

– Ҡыҙ-ҡатын тән менән йәндең төҙөклөгөнә булышлыҡ итә. Һин, һөйкөмлө дуҫым Ғүмәр, баҙарҙан сибәр йәриә ҡатын ал. Хатта бер нисәһен һатып алһаң да байлығың етерлек. Шунан әйҙә гүзәл заттан ләззәтлән, был донъя рәхәтен ғаиләле тормошта кисер, зауыҡ табып йәшә, – тине тәҡсир.

Ул турала үҙем дә уйлап йөрөнөм. Шул уҡ ваҡытта бөйөк Остазым Абу Али ибн Синаның (икеһе менән дә Аллаһ риза булһын) ижадын ғына түгел, тормош юлын да яҡшы беләинем. Ғүмере ҡыҫҡа булыуының төп сәбәбе – ҡатын мәсьәләһендә тотанаҡһыҙлығы һәм аңлы рәүештә Аллаһ ваҡытлыса биргән ғүмерен шулай сарыф итеүендә. Был уның кешелек алдында енәйәте икәнен күптән яҙғайным. Ә мин кәрәгенән артығына бармам, тип уйлайым. Мин әҙәм балаһының иҫәр ғәҙәттәренән шарап һәм ҡалъянды әфиүн тотоноп үҙем теләгәнсә кәметә йә арттыра алам.

Беҙ шым ғына ҡайнар ҡәһүә эскән мәлдә шул фекерҙәр башымда йөрөнө. Вәзирҙең аҡыллы кәңәшен үтәрмен, тик минең әсирә һатып алыуҙа тәжрибәм юҡ, шуға тәжрибәле Хәсән Саббаһҡа өндәшермен, тинем.

Ул исемде ишеткәс вәзирҙең йөҙө үҙгәргәнен һиҙҙем. Бер аҙҙан Саббаһты етди ғәйебе өсөн хеҙмәттән бушатыуын һәм уның ҡайҙалыр олағыуын әйтте. Исмаилсылар араһында берҙәмлек булмауы, ә Саббаһ низариттәрҙән юлбаҫарҙар төркөмө ойоштороуы хаҡында хәбәр һуңынан Исфағанда таралды. Сәйәсәттән мин алыҫ торҙом һәм ундай хәбәргә артыҡ иғтибар итмәнем.

Ваҡыты еткәс әсирҙәр баҙарына йүнәлдем, ә мәшәҡәт һис тә ауыр түгел икән. Оҙаҡ һайланып торманым. Тиҙҙән күҙҙәре янып торған, асыҡ йөҙлө, зифа буйлы ҡыҙға иғтибар иттем. Тирә-яҡҡа шат ҡарауы менән башҡаларҙан айырыла ине. Һатыусы мин һайлаған ҡыҙҙы, Сәйҙәне, бурысын түләй алмағаны өсөн ғаиләһенән алыуын әйтте. Сығышы буйынса илдең төньяғынан.

Шул уҡ көндө йәриәнең шат тауышы минең йортта яңғыраны. Үҙенә бирелгән бүлмәне үҙе белгәнсә йыһазланы, йыйыштырҙы, ә мин ҡыҫылманым. Йәшлегемде иҫкә төшөрөп, Бохара яғының диалектында һөйләшкәнен ихлас тыңлап, эшем менән булыштым.

Хеҙмәтселәрем эңер төшөү менән өйҙәренә ҡайтып, иртәнсәк кенә килә ине, ә өйҙә Сәйҙә менән икәү ҡалабыҙ. Шуға бәғзе берәүҙәр кеүек мин йәриә бүлмәһенә кермәнем, үҙе миңә килә торғайны. Келәмдә нисек аунағаныбыҙ менән

һис тә ҡыҙыҡһынмай юлбарыҫтың ыржайған һары томшоғо беҙгә ҡарап ятты.

Сәйҙә менән Төркәнде йыш ҡына сағыштыра инем. Сәйҙәнең дә еҫе татлы, тик икенсе төрлө, мин теләгәнсә булманы. Төркән еҫе, күрәһең, йәшлегем еҫе булғандыр, ә ул алыҫта, беҙҙең мөхәббәтебеҙ сәскә атҡан яҡта, мәңгегә ҡалды. Әфәндебеҙ Сөләймән ибн Дауыттың бөйөк китабын уҡып та, заманаларҙың ҡабатланмаҫын танып, бәхеттең кире ҡайтмаҫын аңлаһам да, шул юғалтыуҙар менән тыныслана алманым. Әллә Рудаки дан йырлаған Мөльйән еле миңә бәхетемде ҡасан да булһа тауҙар, сүллектәр аша Мавераннахр сигендәге тыныс ҡамышлы тобанан кире ҡайтарыуын көттөммө?

Ошолай тыныс тип һанарлыҡ ғүмеремдең тағы бер нисә йылы үтте. Мин бик оҙаҡ ваҡытымдың һәр мәлен ҡәҙерләргә өйрәндем, ә Сәйҙәгә ул нәмә Хоҙайҙан бирелгәйне һәм мин, уға ҡарап, тормош шатлығын нисек кисергәнен күреп һоҡлана инем.

Мин уны ярата яҙҙым, сөнки ул йөрәгем төпкөлөндәге мөйөштәрҙең береһендә ныҡлы урын алды. Мин уны бер ҙә йәшерен күҙәтмәнем. Ул бер үҙе ҡалғанда шатлыҡлы, яғымлы йөҙөн кәрәкмәгән кейеме һымаҡ ташлар ҙа һис кем, хатта мин дә күрмәгән ҡиәфәтендә булыр, тип уйланым.

Шулай ҙа уның ҡайғылы йөҙөн күрергә насип итте. Бер саҡ ҡапҡамды оҙон юлдан йонсоған юлаусы шаҡыны. Өйгә инеп, сәй эсеп алғас каруан менән Хәмәҙән ҡалаһынан килгәнен, Сәйҙәнең ата-әсәһе үлем хәлендә булыуы еткереүҙе һорағандар. Бындай хәбәрҙән Сәйҙәнең йөҙө ҡарайҙы. Алдымда йәриә түгел, ярҙамыма мохтаж инсан балаһы торғанын аңланым. Исфағанда тиҫтә йыл һис бер яҡҡа сыҡмай йәшәнем, сүллектең ҡайнар елен тойорға, таныш булмаған ерҙәр матурлығын күрергә уҡталдым. Тағы Хәмәҙәндә Остазым ҡәберен күрергә теләнем, сөнки бөтә донъяла быға тиклем минең өсөн унан башҡа мөһим кеше булманы. Атай-әсәйем төрлө шикләнеүҙәр, икеләнеүҙәр, өҙгөләнеүҙәр аша миңә Аллаһ ихтыяры менән ғүмер бирҙе, ә Остазым күренекле кеше итте, тормоштоң юғары баҫҡыстарына күтәрелергә юл күрһәтте һәм күптәрҙең, ябай кешеләрҙең, дәүләт етәкселәренең дә миңә мохтаж булыуҙарын күрҙем, ҡулымдан килгәнсә, аҡыл көсөм еткәнсә уларға хеҙмәт иттем.

Бер нисә көндән бер хеҙмәтсем менән өсәүләп, ҙур каруанға эйәреп, илдең шималына ҡарай юл тоттоҡ. Сәйҙә менән беҙҙең дөйәләр бер рәттән барҙы, һәм мин ҡайһы берҙә уның рәхмәтле ҡарашын күрҙем.

Беҙ барып еткәндә ата-әсәһе мөшкөл хәлдә ине. Атаһы икенсе көнө вафат булды, ә әсәһе шәбәйҙе. Хужаһының улдарының береһе, Мәхмүт исемлеһе, уларҙы ҡараған. Сәйҙә менән Мәхмүт араһында мөхәббәт барлығын һиҙҙем.

Остазымдан айырмалы булараҡ, һаулыҡ һаҡлау эшен яратмаһам да, ауырыуҙы ҡараным: маңлайын һыйпаным, йөрәк тибешен, тын алыуын тыңланым һәм хәленең уртаса булыуын әйттем. Сәйҙә менән Мәхмүт эргәмдә торҙо. Әгәр ҙә бер-ике көндән беҙ Сәйҙә менән Исфағанға ҡайтып китһәк, Сәйҙәнең йөҙөндә Мәхмүттең сағылышын күрермен, тип уйланым.

Икенсе көнө Остазым ҡәберенә барҙым һәм күп нәмәләр тураһында, Сәйҙә хаҡында ла, кәңәшләштем. Йәсиғ ваҡытынараҡ Сәйҙәгә азатлыҡ бирҙем, минең менән бергә булған йылдар өсөн хаҡ түләнем. Уны әсәһе эргәһендә ҡалдырып, бер үҙем ҡайттым Исфағанға.

Өйҙә Сәйҙәнең юҡлығы миңә бик ауыр булды һәм яңы йәриә һатып алырға уйланым. Баҙар көнө хеҙмәтсемде эйәртеп, ҡыҙҙар күҙләргә киттем. Баҙарҙа бер сибәр йәриәгә күҙем төштө лә, яҡынараҡ барһам, минең кеүектәр бының тирәһендә урала. Улар үҙ-ара ярышып хаҡ өҫтәй, ә һатыусы быға шат. Мин дә шуларға ҡушылдым. Иң һуңынан бер сауҙагәр менән икебеҙ ярыша башланыҡ.

Аҙаҡтан ул үтә ҙур хаҡ ҡуйғас, мин еңелдем. Бик хафаланып, кәйефһеҙләнеп ситкәрәк киттем дә, ығы-зығылы донъяны ҡалдырып, Аллаһтан ярҙам һорап ялбарҙым.

Йәнем яңынан был донъяға ҡайтҡанда гонаһлы ерҙә көтөлмәгән ваҡиға булғанын күрҙем: теге сауҙагәр ерҙә ята, тирә-яғындағы кешеләр аптырап ҡалған, башҡалары шау-гөр килә, йүгерешә. Баҡтиһәң, һатыу менән артыҡ тәьҫирләнеүсе ҡарт сауҙагәр ҡояшта оҙағыраҡ булғанға башына эҫе ҡаба, вафат була, йәғни Йәзит уны үҙенә саҡырып, йәһәннәмгә оҙатҡандыр, сөнки ундай шөғөллө әҙәмдәр муйынына тиклем гонаһтарға бата. Йәриә һатыусы менән иҫәпләшеп, ҡыҙҙы өйгә алып ҡайттым. Әнисәнең еҫе миңә таныш түгел ине, әммә күңелгә ятырлыҡ.

Бер көн үтеүгә Әнисә өйөмдә күптән йәшәгән һымаҡ тойолдо. Ул көндөҙ ҙә, төндә лә һоҡланғыс, Иң юғары Йәзит бүләге. Быға тиклем зауыҡ табыуҙың төрлө юлдары барлығын белмәгәнмен.

Әммә йәннәтемә донъяуи мәшәҡәттәр ҡамасауланы. Низам Әлмөлөктөң шимали улуҫтарға юлланыуын ишеттем, ә унда Хәсән Саббаһ башкиҫәрҙәре – низариттәр хакимлыҡ иткәнен үҙем күреп ҡайттым. Шуның өсөн вәзиргә ҙур һаҡ менән йөрөүен үтендем. Ә ул:

– Эй, хөрмәтле әфәндем Ғүмәр! Әгәр ҙә бөйөк вәзир үҙ илендә берәй нәмәнән ҡурҡһа, был уның үҙе үҫтергән, һаҡлаған ҡөҙрәтле дәүләтенең аҙағы яҡынлашыуын күрһәтә. Шулай булғас, нимәгә ул минең файҙаһыҙ ғүмерем?!

Был уның миңә өндәшкән һуңғы һүҙҙәрендә ул хеҙмәтенең әһәмиәтле икәненә ышаныуын күрһәтте. Ә миндә ундай ышаныс булманы һәм, ул киткәс, көн дә алама хәбәр көттөм. Һәм ундай хәбәр килеп етте. Вәзирҙең хатаһы – кешеләрҙең уйлап эш итеүҙәренә артыҡ ышаныуы. Гәшишкә ныҡ бирелгән әҙәм аҡтығы тарафынан үлтерелә, ә яуыҙы һаҡсылар шунда уҡ ботарлап ташлай.

## Низам Әлмөлөктән һуң Исфаған

Бөйөк вәзирҙең вафатынан һуң обсерватория яҙмышы мине ныҡ борсоно. Әгәр ҙә обсерваториям ябылһа, тормошом нисек үҙгәрере лә хафаландырҙы, сөнки ул ҡоролма тик Малик шаһ ихтыяры менән генә эшләй, ә Низам Әлмөлөк батшаны көн дә күреп торғас, беҙҙең эш һөҙөмтәләре, әжер, мохтажыбыҙ тураһында мәғлүмәт бирә ине. Батша эргәһендә беҙҙе яҡлаусы, хәстәрлек күреүсе тағы шундай кеше булырмы – был ҡайғылы көндәрҙә ошо һорауҙар һыҙландырҙы мине.

Бер нисә көндән Малик шаһ мине һарайға саҡырҙы. Уны күреп аптыраным: 37 йәшлек шаһ йонсоған, күҙ нуры бөткән ҡартҡа оҡшаған. Уның яҡындары араһында бер нисә йыл буйы мираҫ алыу, тәхет өсөн көрәш барыуы хаҡында ишеткәйнем. Төрлө ҡатындарынан уның биш улы булды. Низам Әлмөлөк, боронғо йола буйынса, тәхет оло улына күсергә тейеш, башҡа улдары ла, йәштәренә ҡарап, тәхеткә ултыра ала, әгәр ҙә тәхеттәге шаһтың балығы улы булмаһа, тип иҫәпләне. Шаһтың яратҡан ҡатыны батшабикә Төркән был йола менән килешмәне, сөнки уның улы Насретдин Мәхмүт иң кесе ханзада ине, һәм ул тәхет өсөн аҫтыртын ғына көрәш башланы, әммә бөйөк вәзирҙең абруйы һәр ваҡыт туҡтатып торҙо.

Вәзир үлгәс, Малик шаһ бөтә ил хәсрәтен иңенә йөкмәй, ә вазифаһы уның өсөн бик ауыр ине. Шулай ҙа аудиенцияла миңә ул мәрхәмәтле булып ҡалды, ләкин оҙаҡ һөйләшергә кәйефһеҙләнде. Обсерватория мәсьәләһендә «үлгәнсә ниәте үҙгәрмәүен» әйтте лә, ҡаҙнасыға беҙҙең өсөн сираттағы эш хаҡын бирергә ҡушты.

Шаһтың «үлгәнсә» тигәне күңелемә борсоу һалды. Бөйөк вәзир ҙә һуңғы осрашыуымда шундай һүҙ әйткәйне. Бер ай үткәс минең шик-шөбһә аҡланды: шаһтың ҡапыл үлеүен һөрәнләнеләр. Был хәлгә аптыраным, сөнки солтан ауырығас та иң тәүҙә миңә, уның эргәһендәге дауалаусыға, хәбәр итергә тейештәр ине – шуға миндә етди шик уянды, һәм мин батша һарайына киттем. Ә унда шаһты ашығыс рәүештә ерләргә йыйыналар. Мине Малик шаһ мәйете эргәһенә килтерҙеләр. Солтандың йөҙө тыныс, ә шулай ҙа ике нәмәгә хайран ҡалдым: тәне ҡарайған һәм ауыҙынан аҡ күбек сыҡҡан. Бер табип шунда уҡ солтандың иренен һөртөп алды, тик беҙ һөйләшкән арала күбек тағы сыҡты. Ағыулағандарҙыр тип уйланым, ләкин берәүгә лә өндәшмәнем, сөнки ағыулаусылар эргәмдә тороуы ихтимал. Бер ниндәй ҙә тикшереү башҡара алмаҫ инем. Малик шаһ үлемендә минең Төркәндең ҡатнашы булыуы фекерен үҙемдән ситкә ҡыуып маташтым. «Кемгә файҙалы – шуны эҙлә» тигән уйҙы Көнбайыш әҙәбиәтендә осратҡайным. Бер нәмәгә шигем юҡ: минең обсерватория башҡаса эшләмәҫ.

Иртәгеһен бергә эшләгән дуҫтарым, хеҙмәттәштәрем менән һыу буйында мәжлес ойоштороп, килеп тыуған хәл-ваҡиғаларға һығымта яһап, һәр кемгә вәзир асҡан мәҙрәсәләрҙә мөғәллимлек урынын эҙләргә тәҡдим иттем.

Дауалаусы булғас, мин ҡайһы берҙә батша һарайына барып, һаулыҡ мәсьәләләренән башҡа яңылыҡтар белеп, хәл-ваҡиғалар барышын күҙаллап ҡайта инем. Низам Әлмөлөк менән Малик шаһ булмағас (икеһенә лә Аллаһ шәфҡәтле булһын) унда теләр-теләмәҫ кенә йөрөнөм, сөнки һарайҙың нуры һүнгән, ул ҡотһоҙ, яйһыҙ ине.

Ваҡиғалар барышын да оҡшатманым. Низам Әлмөлөк ғаиләһенең йоғонтоһо һаман һаҡланды һәм бөйөк вәзирҙең улы Мөһәйет Әлмөлөк тиҙ генә атаһының урынын алды. Малик шаһтың ҡапыл үлеүе Мөәид фирҡәһен ныҡ ҡаушатты, бының менән иһә батшабикә Төркән файҙаланды. Ул һарай һаҡсылары һәм ғәскәр башлығы Әйүп Әлкәзүинигә таянып хакимиәтте үҙ ҡулына алды ла йәше етмәгән Мәхмүтте – солтан, ә үҙен регент тип иғлан итте. Малик шаһтың башҡа улдарына ҡағылырға батырсылыҡ итмәне, шулай ҙа мәрхүм солтандың оло улы Барк-Йаруҡты һәм уның яҡлы Мөһәйет Әлмөлөктө дәүләт эшенән бушатты.

Хәйер, Исфағанға Мысыр хакимы килгәндә, сәлйүктәр дәүләтендә эске ҡаршылыҡтар юҡлығын күрһәтергә тырышып, солтан һарайындағы тантанаға батша һәм һарай кешеләренең бөтөнөһөн дә саҡырҙылар. Ғалимдар етәксеһе булараҡ, мин дә ҡатнаштым. Бәләкәс солтанды йоҡларға ебәреп, ҡабул итеү һәм һөйләшеүҙе батшабикә Төркән алып барҙы, һәм мин йәшерен генә уның шиңмәҫ матурлығы, был тантанаға ышаныслы, дәрәжәле етәкселек итеүенә һоҡланып ултырҙым. Хөрмәтле ҡунаҡтарҙың да һоҡланыуына иғтибар иттем. Күҙ алдымда йәшел үләнгә йәйелгән еләнемдә ояһыҙ рәүештә яланғас ятҡан ҡыйыу ҡыҙ һыны күренә. Юҡ, хәҙер минең алдымда ҡыҙыҡай түгел, Аллаһ ихтыяры менән Күккә ашҡан, хакимиәт йөгөн еңел күтәргән сибәр, аҡыллы солтанбикә ине.

Өйгә ҡайтҡас тәьҫирләнеп, иҫтәлектәргә бирелеп оҙаҡ йоҡлай алманым. Бер ваҡытта, бер кемгә лә күрһәтмәҫемде белһәм дә, тороп, шиғыр яҙмайынса тынысланманым. Робағийымды Ҡытайҙан Мағрипкә тиклем аралыҡтағы бөтә ҡыҙ-ҡатындарҙың иң сибәренә, бер генә күҙ ҡарашы менән сит ил хакимдарын дә үҙенә ғашиҡ иттереүсе исемһеҙ гүзәл затҡа өндәштем. Ул төнө Әнисәне эргәмә саҡырманым, сөнки минең уй-фекерҙәрем башҡаға төбәлгәйне.

Хакимиәттә көрәш барғанда кешеләр фән торошо менән ҡыҙыҡһынмай. Хакимдар ҙа, бигерәк тә алдау, енәйәтсел юл менән килгәндәре, тик үҙенең

көсөн нығытырға, хакимлығын законлаштырырға тырыша. Ике ай буйы бер түрәнән икенсеһенә, өсөнсөһөнә обсерватория өсөн хеҙмәт хаҡы юллап йөрөнөм. Барып сыҡмағас, ғәрләнеп, ҡайтып киттем.

Шулай ҙа ике көндән, миңә ярҙам итерлек берәй абруйлы кешене осратып булмаҫмы тип, тағы барҙым. Әммә ундай түрә табылманы. Ҡайһы берәүҙәр шыбырҙап ҡына Әлҡәҙүинигә мөрәжәғәт итергә кәңәш бирҙе. Ул ҡуҡырайған ишәк менән бөйөк вәзир бүлмәһендә бер нисә мәртәбә бәрелешеп, наҙанлығына, тупаҫлығына аптырағайным. Ундай түбән кешегә үтенес менән өндәшеп, үҙемде кәмһетмәҫкә тырыштым. Хәйер, ундай мәсьәлә көн тәртибендә бөтөнләй булманы, сөнки ул әһел тыныслыҡ мәшрик улусына киткән икән.

Һарайҙың ҡасандыр гөрләп торған, ә хәҙер кеше һирәк йөрөгән бер ҡанатынан китеп барғанымда еңемдән берәүҙең ҡыймай ғына тотҡанын һиҙҙем. Ҡараһам – бите ҡапланған ҡатын эргәмдән үтеп бара.

– Әфәндем, минең арттан барығыҙ` – тине лә ул алдымдан атланы.

Тиҙҙән элек мин булмаған яҡҡа боролоп, бер аҙ барғас, һарайҙың ҡыҙ-ҡатындар яғында булыуымды аңланым. Серле ҡатын беленмәҫлек ишекте асып, инергә ишараланы, ә үҙе урынында ҡалды. Мин ҙур булмаған, әммә матур йыһазланған, ҡояш нуры төшмәгән бүлмәгә юлыҡтым. Ҡайҙандыр саф һауа ағыла. Һауа еҫе көслө һәм тәбиғи, хатта битемә еңелсә ел иҫкән сәскәләр баҡсаһында һымаҡ. Һәр мөйөшкә ҡуйылған матур май шәмдәр бүлмәне тоноҡ ҡына яҡтырта.

– Мин бында, Ғүмәр, – тигән тауышты артымда ишеттем.

Алыҫта, Аму ярҙарында кисергән бәхетле минуттарымды хәтерләткән был тауыш йөрәгемдең тибешен тиҙләтте. Әйләнеп ҡараһам – солтанбикә кейемендә түгел, тик Венеция күлдәге генә кейгән Төркән; күрәһең, келәм менән генә ҡапланған, күҙгә күренмәгән ишектән ингән.

Башҡа ләм-мим өндәшмәй мине ҡоласына алды.

Артабан ни булғанын хыяллана ла алмағайным. Быға тиклем мин йәш ҡыҙҙар менән генә булдым, шул иҫәптән йәш Төркән менән, ә хәҙер эргәмдә... мөхәббәт мәсьәләһендә тәжрибәле ҡатын.

Һарайҙан сыҡҡас, тиҙерәк ҡайтып, бер нәмә тураһында ла уйламай, ял итергә тырыштым. Әммә аҡыллы башҡа төрлө уй-фекерҙәр тынғы бирмәне.

...Бер заман әфәндебеҙ Сөләймән ибн Дауыт (икеһенә лә – Аллаһ тыныслығы һәм ризалығы), Аллаһ уға биргән аҡылдың да сиге бар тигән. Мәҫәлән, өс нәмәне белә алмайым: һауала осоп барған ҡош эҙен, диңгеҙҙә йөҙгән балыҡ эҙен һәм ҡыҙ-ҡатында ҡалған ир-ат эҙен таба алмайым, тигән. Йоҡоһоҙ оҙаҡ уйланып ятҡанда, әле генә зауыҡланып ләззәт алған һәр мәлде һәр яҡтан ентекләп тикшереп ҡарағас, Бөйөк Аллаһ миңә бүләк иткән аҡыл сиген киңәйтергә мөмкинлек биргәнен аңланым һәм эске ҡарашым буйынса Төркән менән кемдеңдер, хатта кемдәрҙеңдер булғанын һиҙҙем һәм һуңынан төрлө уйҙар, шикләнеүҙәр яфаланы. Өс аҙнанан һуң һөйгәнем менән йәнә бер, һуңғы тапҡыр осрашыуымда ла шул көфөр фекерҙән арына алманым. Һарайҙа Төркәндең исемен Әлҡәҙүини һәм тағы ике ғәскәр башлығы менән бәйләүҙәре хаҡында ишеттем. Төркән ҡатындарға хас һиҙгерлек менән минең ундай хәбәрҙе ишетеүемде белгән, һәм был беҙҙең артабанғы ҡауышыуҙарға кәртә ҡуйҙы.

Бик моңһоуланып ҡайттым һәм ҡулым үҙе ҡәләмгә ынтылды. Юғалған мөхәббәтем иҫтәлегенә үҙемә үҙем робағи яҙҙым:

*Аҡ ҡаласты ғына ашай тома наҙан,*
*Ә уғрыға вәзир булыу яҙған.*
*Һөйгәнемдең серле керпек ҡағыуы ла*
*Шаҡшыларҙың алтынынан ялатылған.*



*Ғүмәр Хәйәм (1048 – 1131)*

Күпмелер ваҡыт үткәс тормошом үҙ айына төштө. Әнисәм – минең менән. Төркән менән булған ҡыҙыу төндәрҙән һуң уға мөләйем, яғымлыраҡ ҡарай башланым. Ул да миңә яуап итеп һөйкөмлө ҡараны.

Шулай тыныс бер көндө батша һарайына саҡырҙылар. Һарайға ингәс, мәрхүм солтандың бөтә балалары сәсәк ауырыуы менән яфаланғанын ишеттем. Мине вәзир Мүджир Алдаула ҡаршы алды ла малайҙар яғына оҙатты. Өс малайҙың хәле арыулана, тән ҡыҙыуы кәмегән, йәрәхәте ҡутырлаған. Малайҙарға тырнанмаҫҡа, тип әйтергә генә ҡалды.

Һуңынан Мәхмүт бүлмәһенә барҙыҡ. Уның эргәһендә Төркән үҙе ултыра ине. Вәзиргә бүлмәнән сығырға ишараланы ла, ул минең аяғыма ташланып, ҡосаҡлап алды.

– Уны ҡотҡара күр, Ғүмәр! – тине лә илаулы күҙҙәрен миңә төбәне.

Уға ҡараным да йөрәкте йәлләү тойғоһо әрнетте: матур ҡара сәстәренә сал төшкән. Уны күтәреп аяғына баҫтырҙым, ысын күңелдән тынысландырҙым, сөнки баланың тән ҡыҙыуы кәмегән, йөҙө ағайҙарыныҡына ҡарағанда таҙа ине. Аллаһ ибн Синаға кеүек миңә мөғжизәле һауыҡтырыу һәләтен бирмәне һәм шуға күрә Остазымдың хәтеремдә ҡалған кәңәштәрен генә бирә алдым.

Әммә тиҙҙән һөйгәнемдең тағы хафаланыуын күрҙем, сөнки был бала уның берҙән-бер улы ғына түгел, ә хакимлык һәм ҡөҙрәт символы ине. Тағы бер нисә кәңәш биреп, вәзир эргәһенә сыҡтым. Шаһтың тағы бер улы Санъяр эргәһенә барҙыҡ. Ул ныҡ ауырый ине: тәне ҡыҙыу, һаташа, бите ҡып-ҡыҙыл.

– Ни әйтерһең? – тип һораны Мүджир.

– Малайҙың хәле хәүефле, – тип дөрөҫөн яуапланым.

Нишапурҙағы бик шәп дауалаусы Әбүсаһла Әлниланан үҫмер сағымда ишеткән һүҙҙәрен һәр ваҡыт иҫтә тотам:

– Дауалаусы бер ваҡытта ла алдашмай, сөнки ялғанлыҡ – хыянат итеү, ә дауалаусы хыянатҡа бармай. Тоғролоҡ – иҫ-аҡыл нигеҙе, ә ихласлыҡ – Аллаһ биргән талант, маһирлыҡ.

Был хәҡиҡәттәрҙе һәм уның «Ҡыйыулыҡ менән йәнемде йүгәнләнем» тигән үткер шиғри юлдарын һәр саҡ күңелемдә һаҡлайым. Бына хәҙер ҙә улар иҫемдә.

Санъярҙы ҡараған хеҙмәтсе эфиопҡа малайҙың интегеүен еңеләйтеү өсөн бер нисә кәңәш бирҙем.

Мүджирҙән Әлҡәзүининең һәм тағы бер нисә ғәскәр етәкселәренең сирләгәнен ишеттем. Улар, күрәһең, сирҙе походтан алып ҡайтҡан. Бөтә сирлеләрҙе бынан алып сығып, ҡала ситендәге йорттарҙа дауаларға кәңәш бирҙем.

Күргәнемдән әлһерәп ҡайтып барғанымда Аллаһтың миңә ауырыуҙан өҫтөн булыу һәләтен бирмәгәненә тағы бер үкендем. Ҡайтыр алдынан Мүджирҙән, миңә һарайҙа ҡалырғамы, тип һораным, ә ул ауырыуҙарҙы бер нисә дауасы ҡарай, ашығыс консилиум кәрәкһә, саҡырырҙар, тине.

Икенсе көнө, саҡырыуҙы көтмәй, барһам, кисә мин ҡайтып киткәс бала солтан Мәхмүттең вафат булыуын, ҡанунға ярашлы ҡояш байығанса ерләнеүен, ә Төркәндең бөгөн таң менән Бохараға, туғандары янына, киткәнен ишетеп, шаҡ ҡаттым.

Кисә Мәхмүт эргәһендә булған һәр минутымды бер нисә тапҡыр иҫемә төшөрөп, үлемдең малай түшәгенән бик алыҫ булыуына ныҡ инандым. Әммә хәҡиҡәтте дөрөҫләй алмауыма һәм ундай мөмкинлегем бер ҡасан да булмауын аңланым. Һөйгәнемдең, сибәр батшабикәнең, аяғымды ҡосаҡлау иҫтәлеге,

үҙемдең аныҡһыҙ ғәйепле булыу тойғоһо ғүмерем аҙағына тиклем йөрәгемә ҡаҙалған уҡ һымаҡ күңелемдә һаҡланыр.

Былдай ваҡиғалар барышы Низам Әлмөлөк фирҡәһенең өҫтөнлөк алыуына килтерҙе, ә ғәскәр башлыҡтарын Исфағандан ситтә дауалауҙы кәңәш итеүем был хәлде еңеләйтте. Баҙарҙан ҡайтҡан хеҙмәтсем һуңғы хәбәр еткерҙе: Барыҡ – Йаруҡ солтан тип, ә Низам Әлмөлөк улы Муаид Әлмөлөк бөйөк вәзир тип иғлан ителгән.

Бер нисә көндән бөйөк вәзиргә саҡыртыу ҡағыҙы алдым. Ғәҙәттәге сәләмләүҙән һуң ул Сәлйөктәр йорто нәҫеленең ҡабаттан хакимиәткә ҡайтыуына күрһәткән ярҙамымды онотмаҫ, тине. Мин ипле генә маҡтауын ҡабул итмәнем, сәйәсмән булып түгел, тик дауалаусы булып ҡына бөйөк Ибн Сина ҡушыуын үтәп эш иттем, тинем. Кешеләрҙең иҫендә минең һарай хеҙмәткәрҙәре менән бергә йәшерен эш итеүҙә ҡатнашыуым тураһында хата фекер ҡалмауын теләнем.

Шунан һүҙҙе обсерватория һәм уның эшендә тиҫтәләгән йылдар буйы ҡатнашҡан ғалимдар яҙмышына күсерҙем. Эште тергеҙеү өсөн кәрәкле аҡса күләмен әйттем. Ә ул Низам Әлмөлөк үлтерелгәндән һуң үткән ике йыл эсендә ил хужалығы тамам бөлгөнлөккә төшөүе, уға ташландыҡ хәлгә килтерелгән эштең айышына төшөнөргә ваҡыт кәрәклеген, шунан һуң ғына мәсьәлә асыҡланасағын әйтте. Һөйләшеүҙе Мөһәйет былай тамамланы:

– Мин шуны ғына әйтергә теләйем: һин, хөрмәтле имам, һәр ваҡыт батша һарайының, хөкүмәт шураһының да биҙәге булырһың, һәм һинең хеҙмәт хаҡың бер дирһәмгә лә кәмемәҫ. Бынан башҡа миңә, балаларыма ла беҙҙең ғаиләнең һиңә ҡарата булған вәғәҙәһе мәғлүм.

Бәлки, ҡеүәте ҙур вәзирҙең яғымлы һүҙҙәре кемделер шатландырыр ҙа ине, ә миндә улар яманһыу көйөнөс уятты, сөнки ундай һүҙҙәр артында обсерваторияға хөкөм сығарыуын аңланым. Ул обсерватория яҙмышын минең яҙмыштан айырырға маташты. Алдағы айҙа әңгәмәне дауам итергә һүҙ бирҙе, әммә мин әңгәмәнең һөҙөмтәһен бөгөн үк белдем.

Беҙҙең икенсе осрашыуҙа артабан һарайға инеү еңел булмаҫын аңлап, Нишапурға ҡайтып китеү теләген белдерҙем вәзиргә. Минең үтенесте ул аңланы. Ҡайҙа булһам да йыллыҡ хеҙмәт хаҡын Мөһәйеттең атаһы тәғәйенләгән 10 мең динар булыуын вәзир тағы ҡабатланы ла, беҙ хушлаштыҡ.

Бына Аллаһ ерендә ҡабул ителгән йыл иҫәбе буйынса оло донъяла 487 йыл (хәҙерге йыл иҫәбе менән 1095 – **Тәрж.**), ә минең бәләкәй донъямда тереләр араһында йәшәүемә 47 йыл тулды. Һәм мин ирекле, бай инем.

Юлға сығыр алдынан дуҫтарымды йәсиғ ашына саҡырҙым. Улар барыһы ла етеш тормошло, һәр береһенең Малик шаһ фарманы буйынса, Аллаһ уға ризалығын бирһен, мәңгелеккә бүләк ителгән йорто, баҡсаһы бар. Барыһын да Низам Әлмөлөк (әхирәт тыныслығы уға) тарафынан эре ҡалаларҙа асылған университеттарға эшкә саҡырҙылар. Шуның өсөн аш мәжлесе һис тә күңелһеҙ, ҡайғылы булманы, бөтәбеҙ ҙә килеп тыуған хәл-ваҡиғалар менән килештек, яңы тормош алдында инек. Һөйләшеп, көлөшөп төн үткәне һиҙелмәне һәм таң атып килгәндә генә баҡсамдағы дуҫтарым таралышты.

Нишапурға барыусы каруан ҡуҙғалырға бер нисә көн ҡалған, ә миңә йортом яҙмышын хәл итергә кәрәк. Исфағанға ҡабат килеп булмаҫ, тип уйланым. Ул ғына ла түгел, һиҙемләүемсә, миңә артабан тыуған Нишапурымда йәшәргә һәм үлергә яҙған. Әнисә хаҡында ла уйланым. Унан 27 йәшкә оломон! 27 йәш – үҙе бер ғүмер бит! Мин 27 йәшемдә атаҡлы математик инем, рисәләмде башҡалар уҡып ғилем алды. Килер бер заман, иншалла, шул 27 йыл мине һәм Әнисәне

мәңгегә айырыр, ә уға ерҙәге тормошон дауам итергә кәрәгер. Бына шул ваҡытта ул хужабикә булып, күнеккән йортомда йәшәүен дауам итер, тип ҡарар иттем дә йортом ерен һатманым.

Йортомдо хеҙмәтсемә ҡалдырҙым, өйләнергә рөхсәт иттем, ҡалымға һәм йортто йүнәтеп торорға аҡса бирҙем. Бының өсөн тағы Мөһәйет офисындағы хеҙмәткәрҙәре менән осрашып, миңә түләнәсәк аҡсаның бер аҙын йәшәү сығанағы һәм хужалыҡ сығымдары өсөн хеҙмәтсемә түләргә кәрәклеге хаҡында килештем. Шуның менән Исфағандағы эшемде тамамлап, бер нисә көндән Әнисә менән ике дөйә өҫтөндә таңды ҡаршылап, мәшриҡҡә ҡарай оҙон юлға сыҡтыҡ.

## Нишапурға ҡайтыуым һәм Бохараға һуңғы сәйәхәт

*Кем генә гонаһ ҡылмаған? – Әйтсе, Тәңрем!*
*Гонаһһыҙҙы табалдыңмы? – Әйтсе, Тәңрем!*
*Гонаһлымын – золом менән яуаплайһың...*
*Минән ниндәй айырмаң бар? – Әйтсе, Тәңрем!*

Минең Хөрәсәнгә ҡайтыуым 23 йыл әүәл Исфағанға барыу һымаҡ булманы: Әнисә менән мин ултырған ике көслө йәш дөйә ғәҙәти сауҙа каруанына ҡушылып барҙы; ҡоралды ғәскәри төркөм беҙҙе оҙатып барманы. Сауҙагәрҙәр ғазаплана, юлбаҫар талауынан ҡурҡа, ә минең тыныс халәтем уларҙы аптырата. Ысын суфый Үлем ҡурҡыныcын белмәй, сөнки уның йәнендә һәр саҡ Аллаһ, Унан һис тә айырылмай һәм Уның ихтыярына үҙен тулыһынса биреп, еңелсә йәшәүен, елкенеп сәфәр сығыуын улар аңламай.

Элекке сәфәрҙәремдә лә мал әйҙәүселәрҙең һөрәнләшеүе, сыбыртҡы шартлатыуы, ат тояғы тапылдауы, сауҙагәрҙәр һөйләшеүе, көлөшөүе, йырлашыуы, ишәк ҡысҡырыуы, эт өрөүе, йәғни кешеләр һәм хайуандар тупланған ерҙә сыҡҡан һәр төрлө тауышҡа ҡарамай, Юл миңә юғары кимәлдәге айырымланыу мөмкинлеге биргәнен һиҙҙем.

Был осраҡта ла шулай: Исфаған түш артында ҡалғас та, фекерҙе туплап, яҙмыш ҡушҡан Юлды аҡрынлап үтә башланым. Бер нисә сәғәттән йәнем һәм йөрәгем менән алдымда асылған ғаләмдең төҙөк, килешле үҙәнен күҙ йөрөтөп сыҡтым. Гонаһлы, бик тә мәшәҡәтле Ерҙән юғарыға күтәрелеп, әҙәми заттың шатлыҡтарынан һәм ҡайғыларынан бик алыҫта икәнемде берәү ҙә, хатта Әнисә лә белмәне.

Шулай көн артынан көн үтеп, киске шәфәҡтән таңға тиклем ҡыҫҡа ваҡытҡа юлаусылар йортонда ҡунып барҙыҡ, ә бер тапҡыр карауанға сүллектә төнәргә тура килде. Йондоҙҙар бигерәк тә яҡты ине, һәм мин төнө буйы Исфағанда танышҡан йондоҙлоҡтар араһында сәйәхәт иттем.

Бер көнө йәмле Джебаруда үҙәне күренде. Быны һиҙгән артмаҡлы малдарыбыҙ тиҙлеген арттырҙы. Кискеһен беҙҙең каруан Нишапурҙың мәғриб биҫтәһендәге юлаусылар йортонда туҡталды. Ҡараңғы төшкәнсе Әнисә менән, ял иткән ишәктәргә атланып, Анбарудуста биҫтәһендә йәшәгән Ғәйшә һеңлемдең өйөнә барып еттек.

Исфағандағы йортомда бер йыл элек ҡунаҡ булып киткән кейәүем Мөхәммәт Әлбағдади һәм һеңлем Ғәйшә беҙҙе шатланып ҡаршы алды.

Әнисә менән һеңлем йорттоң ҡатын-ҡыҙҙар яғына үтте, ә Мөхәммәт миңә тәғәйенләнгән бүлмәне күрһәтте. Бер аҙ һөйләшеп ултырҙыҡ, ә минең ҡайҙа йәшәүем хаҡындағы һүҙҙе иртәгә ҡалдырҙыҡ.

Ғәҙәттәгесә иртә уяндым да ҡояш ҡалҡҡанын күҙәттем, баҡсала һалҡын үләндә, сылтырап аҡҡан шишмә ярында ултырып ял иттем. Һеңлем баҡсаһын

яҡшы ҡарап үҫтергән. Тәпәш ҡойма артындағы күрше баҡса ташландыҡ хәлдә, мәгәр ни яғы менәндер оҡшаны. Йорто ла булған – нигеҙе беленеп тора.

Кейәү уянып тышҡа сыҡҡас, унан әлеге баҡса тураһында һораштым.

– Күршеләр уны «көршәксе Нияз ере» тиҙәр. Хәҙер ул бер сауҙагәр ере, залогҡа алған, үҙе ҡаланың икенсе осонда тора, – тине ул.

– Ошо ерҙе һатып алып, йорт төҙөп, шунда ғүмерҙең һуңғы йылдарын үткәрергә ине, – тинем.

Беҙҙе ҡыҙыҡһындырған сауҙагәрҙе шул уҡ көндө баҙарҙа эҙләп таптыҡ. Ерҙе күптән һатырға теләгән, тик һата алмаған, сөнки сәсергә ер бәләкәй. Бер нәмә лә сәсергә йыйынмайым, ә ер миңә етә, тинем.

Сауҙагәр һатыулашманы һәм көршәксе ерен 30 динарға һатты. Бер аҙнанан унда ҡыҙыу эш башланды. Ялланмыш төҙөүселәр тиҙ арала соланы менән дүрт бүлмәле йорт һалып бирҙе. Иң төпкө бүлмә Әнисәгә, усағы булған иң ҙурыһы, залға оҡшағаны – ҡунаҡ бүлмәһе, шәкерттәремә дәрес биреү урыны. Ҡалған ике бүлмә үҙем өсөн: береһендә – китапхана, икенсеһе – йоҡо бүлмәһе. Хеҙмәтсегә мөйөш төҙөтмәнем, сөнки ундай кеше кәрәкмәҫтер, тип уйланым.

Төҙөлөш тамамланғас, ялсылар көршәксе йортоноң нигеҙ урынын тигеҙләргә рөхсәт һораны. Мин рөхсәт бирмәнем. Тик нигеҙ эргәһендә шишмә буйында түбәлек эшләргә ҡуштым. Йәй көндәре түбәлек аҫтында, күләгәлә ял итергә, мәжлес ҡорорға мөмкин булыр. Баҡсамды ҡараусы хеҙмәтсем килә башлағас уға тәүҙә бер нисә һуҡмаҡ һалырға, һуҡмаҡ тирәләй үлән үҫтерергә; үләндең башы емеш ағастарының түбәнге ботаҡтарына тейеп торорға тейеш. Шул һуҡмаҡтарға көршәк ярсыҡтарын һалып сығырға ҡуштым, ә улар өй урынында күп ине. Күрәһең, көршәксе үҙ хеҙмәтенең һөҙөмтәһе менән риза булмағандыр ҙа Иң Юғарылағы Көршәксе – Йәзит кеүек, уларҙы ватып ташлағандыр. (Бында Ғүмәр Хәйәм, дөрөҫө, был бәйәндең авторы Лео Яковлев Йәзит, йәғни Көршәксе тип беҙҙе Яралтыусыны, Хоҙайҙы атай. Күрәһең, Хоҙай кешене түгел, тәүҙә ябай төҙөлөшлө маймылды, көршәксе кеүек балсыҡтан яһаған, һәм һуңынан миллион йыл буйы эволюция һөҙөмтәһендә шул маймылды хеҙмәткә өйрәтеп, мейеһен камиллаштырып, аҡыл, тел, әҙәп-выждан, һөйөү һ.б. тойғолар биреп, кешене барлыҡҡа килтергәндер, тигән көфөр фекерҙәребеҙ. Дөрөҫөн Аллаһ белә. – **Тәрж.**)

Миңә килгән кешеләр шул һуҡмаҡтан барғанда ярсыҡтар һәр аҙымға шығырҙау, ярылыу, ыңғырашыу менән яуаплар. Был тереләргә алдағы яҙмыш хаҡында иҫкәртеү ине.

Йортом төҙөлөп, баҡсам тәртипкә килтерелгәс, ҡунаҡтар килде: Нишапур академияһы мөғәллимдәренең аҡһаҡалы Абдулҡасим Аррәғиб һәм уның ике ярҙамсыһы. Сығышы буйынса ул Исфағандан ине, һәм беҙ уның менән әүәл бер нисә мәртәбә осраштыҡ. Ул ислам тарихсыһы булғас, беҙҙең уртаҡлыҡ бик аҙ кимәлдә булды.

Артыҡ ихтирамлы, нескәле ҡыланыуы мине хафаға һалды: Низамия мөғәллимдәре араһында булыуым уны борсоған, сөнки, уның уйынса урынына ултырыу ниәте менән ҡайтҡанмын.

Быны белеү өсөн һүҙҙе ситләтеп алып барҙым. Шунан ул минән тура һораны: бында мөғәллимлек эшенә йыйынмайыммы. Даими хеҙмәт менән булышмамын, шәкерттәрем булһа, улар менән дәресте өйҙә үткәрермен, тинем. Быларҙы ишеткәс Аррәғиб мине маҡтай башланы, һәр өлкәләге уңыштарымды һанап сыҡты, ғалимдар падишаһы, тип атаны һәм сығып тайҙы.

Шул ваҡиғанан һуң бер йыл буйы бер ҡайҙа сыҡманым. Уҙған ғүмеремә байҡау яһаным. Илле йәшлек ғүмерем иң ҡыҫҡа йәйге төндә күргән төш кеүек шул

тиклем тиҙ үтте һәм шул уҡ ваҡытта ғүмерем мин белмәгән һәр төрлө сәбәптәрҙең һөҙөмтәһенән торған һымаҡ. Һәм мин арымай-талмай фекеремде туплап, шул сәбәптәрҙе эҙләнем. Тағы Юғары Ҡөҙрәттең тормош юлымдағы Билдәһен эҙләнем һәм ерҙәге тормош юлдарым, йыһандағы йәнем сәфәрҙәре шул Билдәләр менән һибелгән. Тик улар ғына һөҙөмтәләр бирә. Ғүмерем ана шул һөҙөмтәләрҙән ғибәрәт. Тимәк, Сәбәптәрҙең хужаһы – Ул, Юғары Ҡөҙрәт, ә беҙ Уның бөйөк ниәттәрен ғәҙәттәге, ябай, юҡ-бар эшкә әүерелдерәбеҙ.

Хатта ғүмерем Билдә менән башлана. Ә теге дәрүиштәр Кем тарафынан ебәрелгән – уларҙың кәңәше менән яралдым бит. Ибраһим хаҡанды мин һатыу иткән урын эргәһенән үтергә Кем этәргән? Бала һәм үҫмер сағымда Кем миңә мөләйем ҡиәфәт биргән? Ни өсөн миңә башҡаларҙан айырылып торған аҡыл һәм яҡшы хәтер бирелгән? Һәм башҡалар: яҙмышымдың һәр бер боролошонда мин белмәгән әллә ниндәй серле Сәбәпсе барлығын беләм.

Сәбәбен белгәс, һөҙөмтәһен дә алдан күрә белергә мөмкинлек бар, әммә аҡыллы ҡарашыма нигеҙләнеп был мәсьәләне сисә алманым.

Бер шулай уйға сумып ултырғанда ҡайҙандыр ата бесәй килеп сыҡты ла мине үҙенең хужаһы итеп һайланы. Уны Юғары Ҡөҙрәт ебәргәндер, тип уйланым. Уның ҡыланышын күҙәтеп, үҙемде ыҙалаған күп һорауҙарға яуап таптым. Моғайын, бесәй күркәм холоҡло йәнлектер, сөнки бер тапҡыр Мөхәммәт пәйғәмбәр, с.ғ. с. – Аллаһ уға ризалығын бирһен һәм сәләмләһен – ҡомғанынан бесәйҙең һыу эскәнен күргән, ә тыныс һәм сабырлы пәйғәмбәр уның эсеп туйғанын көтөп торған. Әммә был йәнлек яуап урынына миңә күп сер килтерҙе. Наурыздан ике аҙна элек унда дәрт уянғанын нисек аңларға? Көслө теләгенән ул ашамай, башын ҡәнәғәтләнеүгә һалып ябыға, хәлһеҙләнә, тик күҙе генә Мәжнүндеке һымаҡ янып тора.

Бесәйемдең бер сифаты ғына файҙа бирҙе. Минән 150 йыл алда йәшәгән күренекле Бағдат суфыйы Әбүбәкер Асшибли медитацияла булған ваҡытында һис тә ҡуҙғалмауға... бесәйҙең ҡошто йә сысҡанды күҙәткән сағындағы торошонан өйрәндем, тигән. Мин дә аҡылым менән түгел, йәнем менән хәрәкәтһеҙлеккә сумып, Юл буйлап барып ғәләмдең иң алыҫ, мөһабәт, гүзәл туҡталышына еткәс, борсоған һорауҙарға яуап алдым.

Ләкин шул ялт итеп торған ул донъянан кешеләрҙең меҫкен донъяһына ҡайтҡас, хәҡиҡәттең миңә асылыуын белдем, тик аңлата алманым. Ул хәҡиҡәттең янымдағы мине уратып алған Тәбиғәт тарафынан йәшеренгәнлеген генә белә алдым.

*Һиңә ярамаһам да, эй, Илаһым!*
*Гонаһымды йыуымаһам да, эй, Илаһым!*
*Кисерерһең тигән һәр саҡ өмөттәмен, –*
*Һин – Берҙән-бер инанысым, эй, Илаһым!*

Бер йылдан һуң миңә шәкерттәр килде. Улар икәү ине: Әбүабдаллаһ Балхи – Хөрәсәндән, икенсеһе Әбүлмали Альмайаниджи минән ғилем алыу өсөн Хәмәҙән ҡалаһынан килгән. Дәрес түбәлек аҫтында, күләгәлә, барҙы. Беҙҙән башҡа ашъяулыҡ, шарап һалынған оҙон муйынлы һауыт, өс кәсә, Әнисә бешергән йылы лаваш.

Башта фәнде ентекләп өйрәнмәйенсә, уның асылына иғтибар итергә өйрәттем. Дәрес әңгәмә һымаҡ барҙы, күп осраҡта уларҙы ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап бирҙем, һәм был, минеңсә, уҡытыуҙың иң яҡшы ысулы.

Ҡайһы берҙә беҙҙең эргәгә шарап һалынған һауыт, йылы ғына көлсә, баҡсабыҙ биргән емеш менән Әнисә килә. Ғәҙәттә ул битен ҡапламай торғайны. Асыҡ

йөҙө, йылмайып килеүе уны тағы ла гүзәлерәк итә. Ә йәш егеттәр һиҙҙермәй генә ҡаш аҫтынан ҡарап ала. Минеңсә, оҙон нотоҡ уҡыуға ҡарағанда көтмәгәндә, ҡапыл Матурлыҡ менән шәкерттәрҙе һынау ғалим шәхесе үҫеү өсөн бик файҙалы булырға тейеш. Әңгәмәбеҙҙә һәр төрлө мәсьәләләрҙе тикшерәбеҙ. Ҡөрьәнгә аңлатма, грек фәлсәфәһе, тарих, ислам хоҡуҡиәте тураһында фекер алышабыҙ.

Хөрәсән егетенең һорауҙары һәм фекере сәйәси һәм дини бәхәскә этәреүен башта уҡ аңланым. Хәҡиҡәткә юл эҙләүсе фәндә ундай бәхәскә барманым. Ә Хәмәҙаниҙе фекер алышыуға йүнәлгән фән ҡыҙыҡһындыра ине.

Ваҡыт үтеү менән Төркәнде онотормон тип тә уйлағайным, әммә ул күҙемә салына башланы. Сибәр, гонаһһыҙ булып күренә. Тәңренең миңә уны эҙләргә ҡушыуы, тип аңланым. Ҡайһы берҙә ул үҙе миңә серле саҡырыу ебәрәлер, тип уйлайым. Тик ул саҡырыу мөхәббәтебеҙҙең шаһиты булған Аму-Даръяһы яғынан киләме, әллә йән тыныслығы алып Аллаһ хөкөмөнә саҡырғанын көтөп (мин дә ундай мөмкинлектән тороп ҡалмам) йондоҙҙар донъяһынанмы – быны белә алманым.

Бындай билдәһеҙлек түҙеп торғоһоҙ хәлгә еткәс, шәкерттәремә ике айлыҡ ял биреп, Бохараға һәм Сәмәрҡәндкә йыйына башланым, ә баҡсалағы хеҙмәтсемә шул яҡҡа сәфәр ҡыласаҡ каруанды белешергә ҡуштым.

Тиҙҙән ундай мөмкинлек табылды. Каруан иртә таңдан юлға сыға, ә был миңә ауыр түгел, сөнки ғүмерем буйы иртә тороп өйрәнгәнмен. Юлсыларҙы һәр төрлө хәүефле хәлдәр һағалай – көтөлмәгән ҡом бураны, тау ишелеп төшөүе йә юлбаҫарҙар талауы. Әммә ундай хәл-ваҡиғаларҙы күңелем тойманы, һәм мин көйшәп барыусы дөйәләрҙе иҫәпләмәгәндә, тәүгеләрҙән булып тынyслана инем. Өйҙә саҡта бесәйгә ҡарап фекерҙе тупларға өйрәнергә булһа, юлда дөйә ҡылығынан өйрәнергә мөмкин.

Аҡрынлап уй-фекерҙәрем юл ығы-зығыһынан ҡотолдо, йәнем хәрәкәтһеҙ ҡалған тәнемде, йәшәүен дауам иткән был донъяла ҡалдырып, йыһан буйлап бер туҡталыштан икенсеһенә күсеп, үҙем һайлаған Юлдан Хәҡиҡәткә табан күтәрелде. Көн кискә ауышып тиҙҙән йондоҙло төн башланды, ә мин ике донъяла – бында кейеҙ сатырҙа йә дөйә өҫтөндә, һәм тегендә – айһыҙ күктәге йондоҙҙар араһында булыуымды дауам иттем.

Юлбаҫарҙар һөжүм итеү ҡурҡынысы булған урындарҙа каруанда ғауға, бәхәс күтәрелә. Бындай осраҡта Ергә ҡайтып каруанға бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс янамауын ышаныс менән иғлан итәм. Минең ғалим булыу абруйым юғары булғас, шау-шыу тыма, каруан ҡуҙғала башлай һәм хәүефле урынды йәһәтерәк үтергә тырыша. Алдан шуны әйтәйем: Бохараға барып ҡайтҡас минең күрәҙәселек һәләтем хаҡындағы хәбәр бөтә Хөрәсәнгә таралды һәм мине артабан уңышлы юлдаш, бәхетле юлаусы, тип атанылар.

Бына беҙҙең каруан Амуны юғалтыуһыҙ кисеп, гүзәл Бохараға килеп етте. 25 йыл эсендә ҡалала миңә оҡшамаған үҙгәрештәргә ҡарап аптыраным. Төрөктәрҙең ҡараханидтар династияһы «Афрасийаб йортон» Сәмәрҡәндкә күсергәс, Бохара баш ҡала булмай. Был хәл бөйөк Фирҙәүсиҙың «Шаһнамә» поэмаһында ла сағыла. 25 йыл элек иҫән-һау, шат күңелле йәшәгән, рухыма тап килгән кешеләрҙең береһен дә осратманым. Ваҡыттың сағыштырмаса булыуы ныҡ һиҙелде: Исфаған обсерваторияһында үткәргән йылдарым бер нисә ай үткән һымаҡ, ә бында оҙон ғүмер кисергән ваҡытҡа оҡшаш.

Шаһристан урамдары һәм биҫтәләре буйлап йөрөп элекке таныштарымды осратмай зыяратҡа барып сыҡтым. Ҡәберлектәрҙе йәш сағымдан яраттым, ул кешеләрҙең өмөттәре селпәрәмә килеп ватылып, ярсыҡҡа әүерелгән майҙан, яңғыҙлыҡта булыу һәм уйланыуҙар өсөн бик тә яйлы урын.

Бохараның төп зыяраты мин булмаған осорҙа ҙурайған. Әүәл мин йөрөгән һуҡмаҡтарҙы үлән баҫҡан. Күрәһең, кистәрен илаҡ сүл бүреһенән башҡа бер йән эйәһе лә бында йөрөмәйҙер.

Күп ҡәберҙәр исемһеҙ һәм, моғайын, ҡараусыһыҙ. Бында мин бер үҙемдер тип уйлаһам, бер төрбә эргәһендә дәрүиште күрҙем. Ул ташҡа ултырып, алдына ашъяулыҡ урынына туҡыма билбауын йәйеп, шунан ашыҡмай ғына ниҙер ашай ине.

– Әйҙәгеҙ, бергәләп ашайыҡ, – тине мосафир. Рәхмәт әйтеп баш тарттым да бында кем ерләнеүен һораным.

– Мөхәмәт ибн Исмәғил Әлбохари, Аллаһ үҙенә тынғы һәм ризалығын бирһен, – тине лә – Бик шәп ғалим ине, – тип өҫтәне.

Миңә уның аңлатмаһы кәрәкмәне, сөнки «Дөрөҫлөк йыйынтығы» авторын яҡшы беләинем, тапҡыр һүҙле, фәлсәфәүи әңгәмәләре хәтеремдә. Хөрмәтле Мөхәмәт бик күп хәҙистәрҙе, суфыйҙарҙың фәһемле, ғибрәтле хикәйәләрен, мәсәлдәрҙе белә ине. Әлбохари менән осрашҡас, суфыйлыҡты тамам ҡабул итеп, зиһенгә алып, донъяға ҡарашым формалашты. Ул ғилем мине тура Юлға алып сыҡты һәм артабан үҫеүгә йүнәлеш бирҙе.

(Әлбохари фекеренсә, әгәр ҙә башҡа дин кешеһе мосолман алдына ашарға ит ҡуйһа, ул ҡайҙан, ниндәй ит тип төпсөнөргә тейеш түгел. Бисмиллаһ тип тыныс күңел менән ниндәй ит булһа ла ашарға ярай, һәм кеше гонаһһыҙ. Хәҙерге заманда электр тогы йә суҡмар, балта төйҙәһе менән һуғып йәне алынған малды ғына ашарға ярамай, тиҙәр. Хәйер, ул осраҡта ла бисмиллаһ тип, Ҡиблаға ҡарап салып, ҡанын сығарып өлгөрһәң, ул да хәләл ризыҡ – **Тәрж.**)

Был уй-фекерҙәр, иҫтәлектәр бик ҡыҫҡа ваҡытлы булып үтте, әммә күңелемде көйөнөс биләп алды. Үлем хаҡында күп әйберҙәр яҙһам да, бында, Бохара зыяратында, уның ҡотолғоһоҙ икәнен тәү тапҡыр асыҡ аңланым. Хәҙер үк урынымдан ҡуҙғалмай Уға өндәшергә, ялбарырға кәрәклеген аңланым һәм һүҙҙәрем шиғри юлдарға һалынды.

Иртәгеһенә көнө буйы Төркән ханымды һорашып йөрөнөм. Берәү ҙә уны күрмәгән, ул хатта Мавереннахрға ҡайтмаған. Быны ышаныслы кешеләр әйтте һәм Сәмәрҡәндкә барыу ҙа файҙаһыҙ булыр ине. Ике аҙнанан Нишапурға каруан барасаҡ.

Уға тиклем ғүмеремдә тәү тапҡыр ерҙәге бәхетле мөхәббәтемде тулыһынса кисергән ерҙә булырға ҡарар иттем. Яҙмышым Төркән менән ҡауыштырған утар ташландыҡ хәлдә икәнен миңә әйткәйнеләр. Яңы таныштарыма ҡайҙа барыуымдың маҡсатын йәшерҙем: сәхрәләүгә сығып, уй-фекерҙәремде туплау өсөн, тинем.

Дуҫтарым миңә йыуаш ат бирҙе һәм таң менән Бохаранан мәғрибкә юлландым. Кискә 20 йыл элек сәскә атып торған утарға барып еттем. Йылҡылар өйөрө лә, хатта эттәр ҙә күренмәй, ә Аму-Даръя, йырҙаһын алыштырып, йорттарға яҡынлаша бара. Яр буйына барып ағым һыуға ҡарап оҙаҡ торҙом. Греция ғалимының, бер үк йылға һыуына ике мәртәбә кереп булмай, тигән һүҙе иҫемә төштө. Был аҡыллы һүҙ йылғаның бер үк ташлы үҙәненән меңәр йыл буйы аҡҡанын күреп әйтелгән, һәм ул һыуҙың алмашыуына ҡағыла. Әгәр ҙә шул боронғо аҡыл эйәһе бындағы йүнәлешен үҙгәртеп ағыусы даръяны күрһә, хикмәтле һүҙен тиҙ уйлап сығарыр ине. Алдымда бүтән һыу ғына түгел, бүтән Аму аға.

Ташландыҡ өйҙә йоҡларға булдым да, төн йылы булғас, кире уйланым һәм болдорҙа урын таптым. Баш осомда Исфағанда һәм Нишапурҙағы ише йондоҙло күк, һәм мин бер йондоҙлоҡтан икенсеһенә сәйәхәт итеп, һиҙмәҫтән йоҡоға талдым. Ә йылға туҡтауһыҙ шашынып ярҙарын ашай.

Иртәнсәк Төркән менән икебеҙҙең аҡланға киттем. Ул аҡланды, бәхеткә, һыу

емермәгән. Тыныс тоба ғына юҡ. Шуға йылға беҙ ятҡан урынға яҡыная. Еләнемде сисеп түшәнем дә яттым. Атым элекке беҙҙең аттар утлаған ерҙә йөрөй, ә мин бөтә күңелем менән батшабикәне саҡырҙым, әммә саҡырыуым яуапһыҙ ҡалды.

Йәшел үләнгә яттым да күҙемде йомдом, асһам, миңә эйелгән Төркәнде күрермен, тип хыялландым. Әммә мөғжизә булманы, зәңгәр күктәге минең йәп-йәш батшабикәм кеүек һылыу айҙы ғына күрҙем. Һуңғы йәшерен осрашыуыбыҙҙы иҫемә төшөрҙөм һәм шул саҡта унан шикләнеүем хәтеремдән юйылғанына үҙем аптыраным, тик уның нур сәсеп торған йөҙө һаман иҫтә.

Атым үҙен тыныс тота, тимәк, тирә-яҡтағы ҡыуаҡлыҡтарҙа бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс юҡ. Күрәһең, теге ваҡыттағы беҙҙең мөхәббәттең шаһиты булған һары буйлы йыртҡыстың нәҫелдәре бөгөн бүтән яҡтарҙалыр. Сүллектең сигенә барып сыҡтым. Унда һыу менән үлән һәр бер ҡарыш ер өсөн алыша, йәшәү менән юҡлыҡ араһында көрәш бара. Был беҙгә, кешеләргә, тырышлыҡ һәм түҙемлек үрнәге.

Нишапурға тынысланып һәм көйөнөп ҡайттым. Әфәндебеҙ Сөләймән ибн Дауыт (икеһенә лә Аллаһ тыныслығы һәм фатихаһы) аҡыл эйәһенең йөрәге Хәсрәт йортонда булыр, тигән, имеш. Был һүҙҙәрҙе кем башта әйтһә лә, хаҡ әйткән.

## Йорт һәм Юл

Минең хаҡта ҡалала ғәйбәт таралғанын белдем. Йәнәһе, шәриғәттән ситләшеп, грек мәжүсиҙәренең ҡануны менән йәшәй булам, Әнисә ирҙәр алдында йөҙөн ҡапламай йөрөй, робағиҙарым исламға ҡаршы йүнәлгән һ.б. Был һүҙҙәрҙә аҙыраҡ дөрөҫлөк бар, тик һәр өлкә Мәккәнән изгерәк булырға тырыша. Минең ундай иркенлектәргә Исфағанда күләп ҡараһалар, бында етди ғәйепкә алалар. Ғәйбәт таратыусы шәкертем Әбүабдулла икәнен тиҙ аңланым һәм ул хыянатсыны ҡыуҙым. Ул шул көндә үк Нишапурҙан китте.

Бохаранан ғәмләнеп ҡайтыу, Әбүабдулланың хаинлығы күп тә үтмәй ваҡыт төпкөлөндә ҡалды. Алтынсы тиҫтәне башланым, ә күптән түгел генә ул йәшкә етеүем ғүмеремдең аҙағы булыр кеүек ине, ләкин миндә бер нәмә лә китеүем яҡынлашҡанын иҫкәртмәй.

Хәмәҙәни тәҡдиме менән Мәккәгә барып ҡайтырға булдым. Әлбиттә, һигеҙ айлыҡ юл еңел булмаҫ, әммә Нишапурҙағы ғәйбәт һүрелер. Иң әһәмиәтлеһе – изге ерҙәрҙә булыу тәҡүәлек мәсьәләһен нығытыр.

Беҙ сәфәргә йыйына башланыҡ. Юлға сығыр алдынан берҙән-бер йәриәмә ирек тәҡдим иттем. Беҙҙең менән Исфағанға тиклем барып, ундағы йортҡа, ергә хужабикә булырға тәҡдим яһаным, ләкин ул ризалашманы, ә мин ныҡышманым.

Беҙҙең каруан Рей ҡалаһына тиклем бара ине. Бер-ике көндән икенсеһе Басраға юлланды, һәм беҙ ял иткән дөйәләрҙе һатып, шул каруанға ҡушылдыҡ. Мин Ширазда туҡталып, Остазымды яҡындан белгән имам Әбүнасир Әлнәсәүи ҡәберендә булып, уны иҫкә алырға теләгәйнем, тик ваҡыт етмәне.

Басрала күп уйлап тормай, дөйәләребеҙҙе һатып, диңгеҙ юлы менән барырға булдыҡ. Диңгеҙ буйында яңы, матур елкәнле карап күрҙек. Унда хажға барыусыларҙан бер нисә кеше генә, ә күпселеге – сауҙагәрҙәр, һәм уларҙың тауарҙары менән карап тулған. Шул сауҙагәрҙәр эше менән өс-дүрт диңгеҙ буйы ҡалаларында туҡталырға тура килде. Ул ҡалаларҙың урамдары буйлап йөрөргә, ҡәһүәханаларҙа яҙған ризыҡ менән туҡланырға, таныш һәм ят телдәрҙе ишетергә насип булды. Үҙемде мәңгелек һәм ҡыҫҡа мәл сигендә кеүек хис иттем, сөнки йөҙ йәки мең йылдан урамдағы кешеләр тауышы тыныр, ә ҡалалар юҡҡа сығыр

йә танымаҫлыҡ булып үҙгәрер, тик океан, һыу ҡалҡыуы һәм ҡайтыуы үҙгәрешһеҙ ҡалыр. Шундай уҡ хисте төндә обсерваторияла күҙәтеүҙәр ваҡытында, донъямда тик Тәңрем, Күк булғанда, кисерҙем. Хәҙер ҙә тулҡындар бер-бер артлы бәрелгән ҡаялы яр буйында ҡәһүә эсеп ултырғанда – донъямда Тәңрем, мин һәм осһоҙ-ҡырыйһыҙ диңгеҙ.

Сауҙагәрҙәр үҙ эштәре менән яр буйындағы шәһәрҙә ҡалды, карапта тик хажға барыусылар юлды дауам итте. Аҙна ла үтмәне беҙ кәрәкле портҡа (был порт хәҙер Джидда ҡалаһында – **Тәрж.**) барып еттек, ә Мәккәгә тағы ике көнлөк юл ҡалды.

Карап менән хушлашҡанда капитан миңә:

– Оҙон юлда беҙҙең карап хәүефле тулҡындар менән бәрелешмәне, елкәндәр тулы ҡабарҙы, ел ыңғай иҫте. Быңдай хәйерле юлыбыҙ һеҙҙең изгелек һөҙөмтәһе тип аңланым. Һеҙ – бөйөк Аллаһ бәндәһе!

– Мин ябай ғына хажға барыусы һәм Аллаһ юлындағы мосафир, – тинем.

Капитан беҙҙе хаж тамамланғансы көтә алмауына үкенде. Мин дә диңгеҙҙә тағы сәйәхәт ҡылырға теләгем бар ине, тик Хәмәҙәни менән башта уҡ Бағдад аша ҡайтырға килешкәйнек: ул Низамияла һ.б. иҫтәлекле урындарҙа булырға һәм миңә бөйөк Донъя Ҡалаһын күрһәтергә теләгәйне. Шуның өсөн беҙгә ҙур сүллекте үтергә кәрәк, ә ул дәһшәтле океандан да ҡурҡыныс.

Беҙ Мәккәгә үҙ ваҡытында еттек, хатта юл ғазабынан ял итергә лә өлгөрҙөк.

Хаж ҡылыу йолаларын һөйләп тормайым – улар һәр кемгә билдәле, тик шуны әйтәйем: улар миңә таныш һәм һис тә ауырлыҡ кисермәнем.

Медитациялар араһында, кешеләр донъяһына ҡайтҡас хажға килеүселәр йөҙөндә ҡурҡыу һәм өмөтләнеү, йәғни йәһәннәмдән ҡурҡыу һәм Хоҙайҙың ярлыҡауына өмөтләнеү тойғоһон ғына күрҙем. Был хажиҙәр, минеңсә, тиң булмаған, сағыштырғыһыҙ экстрасенс Рабийә «Ысын хеҙмәт итеү – ожмах теләү һәм тамуҡтан ҡурҡыу ғына түгел» тигән тормош ҡағиҙәһен белмәй. Ғибәҙәт ҡылыусы христиандар һәм йәһүдиҙәр араһында ла Хоҙайҙан ҡурҡыу күберәк, ә Уны яратыу аҙыраҡ икәнен күрҙем.

Мосолман һәм индуизм донъяһын айырып аҡкан Һинд йылғаһы аръяғында ла ныҡышмалы рәүештә хәҡиҡәткә Юл эҙләйҙәр һәм ул Юл мин барған Юлға яҡыныраҡ. Әммә индустар араһында Мөхәббәт уты яҡтыһында Хәҡиҡәт юлынан күптәр барамы, әллә айырым, арҙаҡлы кешеләр генәме, ә күпселегә беҙҙәге кеүек ҡурҡып йәшәйме – быныһы миңә билдәһеҙ. Беҙ азатлыҡ хаҡында күп һөйләйбеҙ, ләкин Мөхәббәтһеҙ һәм Изгелекһеҙ азатлыҡ булырмы? Быңдай изге сифаттары булмаған азатлыҡ ҡоллоҡтан да аламалыр.

Аллаһтан ҡурҡыуҙы Уға Мөхәббәт менән алыштырыу исламдың асылын үҙгәртмәй, һәм мин ысын күңелдән хаж ҡылыуымды ошо һүҙҙәр менән тамамлай алам: «Әй, Аллаһ, ошо хажға барыуымды бер ниндәй эскерһеҙлек һәм тәкәбберһеҙ башҡарҙым». Ҡасан да булһа дин белгестәре был алыштырыуҙы аңлап ҡабул итер. Ул саҡта быны яҡын булыуын белмәнем.

Ошо уй-фекерҙәрем башымда Мәккәнән Пәйғәмбәр Ҡалаһына барғанда буталды. Байрам тамамланғас, ике көндән һуң сауҙа каруанына ҡушылып, Хәмәҙәни менән юлға сыҡтыҡ. Хажға килеүселәр ҡайтып киткәс, Изге Ҡаланың күңел торошон күрергә теләгәйнем. Әммә артыҡ үҙгәреште күрмәнем, ғәҙәти тормош барҙы. Ҡәһүәханаларҙа яңылыҡтар менән уртаҡлаштылар, сауҙагәрҙәр килем иҫәпләне һәм тауар алыу өсөн каруан әҙерләнде. Әле генә шау-гөр килеп торған ҡаланың изге урындарында һәм Арафат үҙәнендә тыныс, хатта акведуктан аҡкан һыу сылтырауы ишетелә. Һәм мин был изге ерҙә Аллаһтың яҡын булыуын ап-асыҡ тойҙом.

Изге Мәҙинә ҡалаһына ла хажиҙәр китеп ике көн үткәс барып еттек, Пәйғәмбәр Мәсетендә тынлыҡта намаҙ уҡыныҡ. Был матур ҡалала бер нисә көн ял итеп, сауҙа каруаны менән Йәсриб оазисы буйлап барып ғәйәт ҙур сүллек аша Бағдадҡа юлландыҡ.

Юл ике айға һуҙылды. Быға тиклем тормошомда ул тиклем буш ваҡытымды уйланыуҙар, медитациялар өсөн файҙаланманым. Юлдаштарым, дөйә ҡыуыусылар беҙ юлда саҡта Йыһанда күпме сәйәхәт итеүемде күҙ алдына ла килтермәй. Улар дөйә өҫтөндәге һалмаҡ ҡына сайҡалып барған тәнемде күреп, тынысланып юлын дауам итә, ә был ваҡытта йәнем урынын ҡалдырып, йондоҙҙар араһында осоп, Берҙән-Берҙең бәләкәй генә бер өлөшөнә әүерелеп, Уның менән ҡушылып, Иң Юғары Белем алып, һуңынан үҙемә ҡайта.

Оҙон юл аҙағын яҡынайтып гүзәл Бағдадҡа килеп еттек. Хәмәҙәни мине тиҙерәк данлыҡлы Низамия ғалимдары менән таныштырырға ашыҡты, ә миңә тәүҙә Донъя Ҡалаһында бер нисә көн булырға, Йыһандан ҡайтҡас Ерҙәге тормошҡа күнегергә, Юл кешеһе булыуымды йәшерергә кәрәк ине. Был көндәрҙә ял итеп, күңел асып, кәйеф-сафа менән йәшәнек.

Низамияла беҙҙе хөрмәтләп ҡаршы алдылар. Төп иғтибар үҙәгендә мин булдым. Был юлы ла башҡа ваҡыттағы кеүек күптәрҙең Белемем серен асырға маташыуҙарына иғтибар иттем. Ҡунаҡсыл хужалар телемде асыр өсөн ҡәһүәнән һуң хөрмә шарабы менән һыйлай башланы. Әммә улар шарап мәсьәләһендә минең ҙур тәжрибәмде белмәне, һәм һөҙөмтә киреһенсә – уларҙың тел төбө асылды: үҙ-ара ыҙғыш, һуғыш, талаш-тартыш сыҡты. Мин һәр саҡ шарапта гонаһ барлығын әйтә килдем, тик аҡыллы әҙәм шараптағы гонаһ асылырлыҡ, һуңынан үкенерлек эсмәҫкә тейеш. Тағы шуныһын онотмайыҡ – биш кәсә шарап эскән бәндәнең асылы, эс сере, йәнендәге изгелеге һәм яуызлығы тышына сыға. Аҡыллы кеше тәжрибәһе менән үҙенең самаһын билдәләй һәм шул сиктән, гонаһ сигенән, ары эсмәй, мәжлес аҙағына тиклем яуызлыҡ, әҙәпһеҙлек ҡылмай һәм һөйләмәй, күңелендә тик изгелек, уйын, көлкө, кәйеф-сафа.

Ни булһа ла һәр кемдең киләсәге Аллаһ ихтыярында, һәр кем тәҡдиргә буйһонорға, уға яҙылғанын үтәргә тейеш.

Бер нисә көндән Бағдадтан сығып, юлыбыҙҙы дауам иттек. Исфағанға тиклем юл кеше йәшәгән ерҙән уҙа, һәм мин ауыл, ҡалалар төҙөклөгөн, сит кешеләр тормошон ҡарап барҙым.

Хәмәҙәни менән беҙҙең юл Нәһәүәндә ҡалаһында айырылышты, сөнки уға эш урынына ҡайтырға кәрәк. Уның каруаны иртә китә, шуға ул таң алдынан тороп, юлға йыйынды.

Беҙ ҡосаҡлаштыҡ. Ул дөйәгә ултырҙы, ә мин бер аҙ уйсан ҡиәфәттә уға ҡараным. Үҙемдең һуңғы ҡарашымдан ҡурҡам, сөнки миңә кеше йөҙөндә уның киләсәге күренә. Бына был юлы ла Хәмәҙәни йөҙөндә ғазапланыу билдәһен күрҙем. Уға тик исмаилиттарҙан ғына ҡурҡыныс янай ине. Нишапурға ҡайтҡас бер нисә айҙан унан хат алдым да тынысландым – күрәһең, мин яңылышҡанмын (F. Хәйәм яңылышмай: 525 йыл аҙағында Хәмәҙәни язалап үлтерелә, ә Хәйәм быны белмәй, сөнки 526 йылдың башында, хәҙерге ваҡыт менән 1131 йылда, Ерҙәге тормошо тамамлана **– Тәрж.**)

Юл йөрөүҙән ял иткәс, дуҫ-иштәр менән осрашып, Хөрәсән өлкәһендәге яңылыҡтарҙы ишеттем. Малик шаһтың – йән тыныслығы уға–, улы Санъяр, ағаһы солтан Барк-Йаруҡ тарафынан Хөрәсәндә башлыҡ итеп тәғәйенләнгән. Исфағандан ҡайтып киткәнемдә уға һигеҙ йәш ине, сәсәк ауырыуынан шәбәйеп, шөкөр, хәҙер илдең етәкселәренән һанала. Өлкәнең үҙәге итеп Мерв ҡалаһын һайлаған. Беҙҙең ҡалала яуаплы вазифаларҙы башҡарған кешеләр һөйләне: шул

ҡалаға китеп барышлай ханзада мине үҙенә саҡырған һәм, мин булмағас, кәйефһеҙләнгән.

Шул уҡ йылдың көҙөндә Мервта булдым. Ханзада Санъяр мине хөрмәт менән ҡаршыланы. Ниңә минең менән ҡыҙыҡһыныуын әйтте: ул Мервта төрлө фән ғалимдарын йыйып алырға һәм мине шул йыйылыштың етәксеһе итергә теләгән. Үҙемдең көсөмдө уға ҡарағанда яҡшы беләм, Исфағандағы кеүек ғалимдар етәксеһе була алмайым һәм уның тәҡдимен ҡабул итмәнем. Урыныма Исфағандағы минән күпкә йәш хеҙмәттәшем Фиҙарины тәҡдим иттем.

Ханзада тәҡдимем менән килеште лә, Исфағанға барып, обсерваториянан кәрәкле ҡоролмаларҙы Мервҡа алып килеүемде һораны. Миңә дөйәләр һәм ҡораллы һаҡсылар бирелә. Тәҡсирҙең был тәҡдименән дә баш тартһам, беҙҙең мөнәсәбәт боҙолор тип, быныһы менән килештем.

Ул һарайынан бүлмә бирҙе, каруан әҙерләнгәнсе ҡала буйлап йөрөнөм. Ханзада бында күскәс, боронғо ҡаланың йөҙө матурайған, иҫке йорттар төҙөклөнгән; уларҙың береһенә дәүләт шураһы урынлашҡан.

Мәҙрәсәгә лә инеп сыҡтым. Минең бында эшкә күсмәҫемде ишеткәндәр икән һәм шуға шатланыуҙарын белдем. Күрәһең, ҡаты холоҡло икәнемде ишеткәндәр, ҡурҡаларҙыр... Мөҙәристәрҙең күбеһе бер-береһенән көнләшеп, ғилемле булып ҡылана, Хәҡиҡәтте ялғанлыҡ менән ҡаплай. Мөхәмәт пәйғәмбәр, с.ғ.с., Ҡиәмәт көнөнә тиклем бер йыл эсендә тамуҡлы булған алты кешенең береһе көнсөл ғалим булыр, тигәнен баштараҡ яҙғайным. Әгәр ҙә ундайҙар Хәҡиҡәтте эҙләгән, дөрөҫтө һөйләгән, ялғанды, ике йөҙлөлөктө яратмаған кешене күрһә, уны көлкөгә ҡалдырасаҡ, һыйҙырмаясаҡ. Быны мин үҫмер сағымда күп татыным, хәҙер ҙә ундайҙар эргәмдә урала. Әммә тыйнаҡлыҡ, тыныс ҡына әңгәмәләшеү, киҫкенлеккә бармау хәйерле. Ибн Синаның «Ҡотолоу китабы»н һорағайнылар – Исфағандан алып килергә һүҙ бирҙем.

Исфағанға Мервтан юлландым һәм тик бер көнгә генә Нишапурҙа туҡталдым. Әнисәгә йәнә бер мәртәбә ирек тәҡдим иттем, ләкин ул ризалашманы. Шуға күрә Исфағандағы йортомдо һатырға булдым. Тағы ла ул ҡалаға барырға тура килмәҫ, сөнки үҙем өсөн ҡуйған ғүмер аҙағы – 60 йәш етеп килә.

Обсерваторияла Мервҡа ташырлыҡ ҡоролмалар күп түгел икән. Шулай ҙа приборҙар исемлеген төҙөнөм һәм шуның менән миңә ҡушылған эштең рәсми өлөшө тамам.

Миңә йорт урынын һатырға, ҡала етәкселәрендә булырға, «Ҡотолоу китабы»н табырға ҡалды. Зыяратҡа барып, вафат булған таныштарым ҡәберендә уларҙы иҫкә алып был донъяның фанилығын әле яңыраҡ бергә күңел асып, гәпләшеп, тиргәшеп тә йөрөгән кешеләрҙең тәне сереп, тупраҡҡа әүерелгәненә тағы бер тапҡыр ышанырға мөмкинлек алдым. Хәҙер бында, ошо көндәрҙә ҡартлығыма тамам күнектем, сөнки быйыл Остазымдан бер йәшкә оломон, ә минең кешеләргә ҡалдырған нәҫел уныҡынан аҙ.

Солтан Барк – Йаруҡ 498 й. фани донъянан китте. Уның урынына ҡалған солтан Мөхәмәт мине яҡшы ҡаршыланы. Күрәһең, Малик шаһ – донъя тыныслығы уға – уландарының балалыҡ иҫтәлегендә мин уларҙы үлемдән ҡотҡарған кеше һымаҡ ҡалғанмын. Ә мин ундай фекерҙән тиҙерәк арынырға тырышам, сөнки улар мине тәрән ҡайғыға һала. Аяғымды ҡосаҡлаған гүзәл батшабикә Төркәнде, бәләкәй Мәхмүттең тыныс ҡарашын, нисектер минән йәшереп уны Үлем урлап китеүен һис тә онота алмайым.

Икенсе көнө мәрхүм Низам Әлмөлөк һарайына барҙым. Уның улы бөйөк вәзир Мөһәйет, дәүләт эштәре күп булһа ла минең менән осрашып, атаһы һымаҡ тәмле ҡәһүә менән һыйланы.

Мин унан китапханала бер аҙ эшләргә рөхсәт һорап, тиҙҙән таныш бүлмәләр эргәһенән үтеп, кәрәкле китапты таптым. Әммә ундағы хужа Мервҡа алып барып шунда күсереп алырға бирмәне. Ошо ваҡ мәсьәлә менән тағы вәзирҙе борсорға теләмәнем һәм, иғтибар менән уҡып, иҫтә ҡалдырып, Мервта яҙҙырырға уйланым. Ғәҙәттә китапты иҫтә ҡалдырыу өсөн миңә өс тапҡыр уҡыу етә ине, ә хәҙер алты тапҡыр уҡып, һәр бер нескәлеген иҫтә һаҡларға тырыштым.

Был юлы башҡаларҙың каруанына бәйле түгел инем һәм каруан ҡуҙғалырға минең ҡушҡанды ғына көтә. Шуға бында тағы бер көн үҙ мәнфәғәтем өсөн ҡалдым. Ҡала буйлап йөрөнөм, баҙарҙа булдым, мәрхүм Малик шаһ һарайына индем. Унда тик хеҙмәтселәр тәртип, таҙалыҡ һаҡлай.

Икенсе көн таң менән юлға сыҡтыҡ. Мервҡа барып, ханзада Санъярға башҡарған эш хаҡында яуап бирҙем. Мәҙрәсәлә китапһыҙ килгәнемде белгәс бик хафаландылар. Миңә бер яҙыусы биреүҙәрен һораным һәм уға бер аҙнала китапты яттан һөйләп яҙҙырҙым. Бер аҙҙан уларға бер ғалим килгән. Уның һандығында Абу Ғәлиҙең «Ҡотҡарыу китабы» бар икән. Ике мөғәллим йыбанмай мин яҙҙырғанды шул китап менән сағыштырып, бер ниндәй ҙә айырма тапмауы тураһында миңә һөйләнеләр һуңынан.

Ауыр юл йөрөүҙән һуң Нишапурға ҡайттым да, бер нисә ай бер ҡайҙа сыҡмай йәшәрмен, тип уйланым. Тыуған ҡаламда мине шатлыҡлы хәбәр көткән – Хәмәҙәниҙең «Иң яҡшы хәҡиҡәт» китабын һәм хатын бер сауҙагәр ҡалдырып киткән. Ғәҙәттәгесә китаптан башланым һәм бик тә ғәжәпләндем: унда арҙаҡлы мосолмандарҙың күңелемә ятырлыҡ әйткән һүҙҙәре менән бергә билдәле суфыйҙарҙың да фекерҙәре йыйылған.

Хәмәҙәни хатын ҡулыма алғас иҫкә төштө: яңыраҡ уның менән хушлашҡанда һаулығы хаҡында бик борсолғайным, ә ул, шөкөр, иҫән-һау, ижади эштә, мине лә онотмауына шатландым. Хатында әле беҙгә килеп етмәгән яңылыҡ бар: күренекле суфый, Исфағанда обсерватория эше менән ҡыҙыҡһынған Әлғәзәли «суфизм – исламдың бер тармағы» икәнен иҫбатлаған «Дин хаҡындағы фәндең ҡабаттан күтәрелеүе» китабын тамамлаған. Бер нисә иң абруйлы теолог китап менән танышып уны һаҡларлыҡ фәтүә, тәҡриз биргән. Ошо хәл менән рухланып Хәмәҙәни китап яҙған. Мин дә шатландым: хәҙер беҙ, суфыйҙар, донъяға ҡарашыбыҙ тураһында уратып түгел, асыҡтан-асыҡ яҙа алабыҙ.

Бер ваҡыт Мервтан кейәү ҡайтты. Яҙмыш Хөрәсән өлкәһенең үҙәген был юлы Нишапурҙа һәм уның сәскә атҡан үҙәнендә түгел, ә сүллек менән уратып алынған Мервта һайлағанына Әлбағдадиҙың күңеле ҡайтҡан. Уның әсенеүенең төп сәбәбе – һауа торошонда түгел, ғалимдарға бит аралашыу, фекер алышыу фарыз. Ундай аралашыу миңә, инанған индивидуалистҡа ла, кәрәк. Башымда күптән бер ниәт йөрөй ине – шуны кейәүгә асырға булдым: Исфағандағы йортомдо һатҡан аҡсаға Мервта ҙур булмаған баҡсалы йорт алһаҡ, һәр ваҡыт шунда үҙебеҙҙең өйгә ҡайтҡан һымаҡ барып, башҡаларҙың ҡунаҡсыллығы менән файҙаланмай, ғалимдар һәм түрәләр менән аралашырға мөмкинлек табырбыҙ.

Әлбағдадиға ниәтем оҡшаны, һәм уны ғәмәлгә ашырыуҙы үҙ өҫтөнә алды. Мин ризалаштым, тик ул йортта донъя ҡаралтыһынан башҡа беҙҙең килгәнде көткән кешеләр йәшәргә тейеш.

## Нишапур менән Мерв араһында

Бер йыл да үтмәне, Әлбағдади ике тапҡыр Мервта булып, беҙҙең ниәтте бойомға ашырҙы. 500 йылдың көҙөндә Мервҡа барғанымда ул, мине ҡаршылап, беҙҙең йортҡа оҙатты. Ҡала биҫтәһендә, әммә үҙәккә яҡын ерҙә урынлашҡан йорт,

баҡса, Мөргәп йылғаһынан айырылып ағып ятҡан һыу – бөтәһе лә оҡшаны. Яр буйында оҙаҡ ултырҙым да үҙемде йортомда һымаҡ тойҙом: һыуҙың сылтырап ағыуы, ағас күләгәһе, ҡоштар һайрауы – кеше күңеленә тағы нимә кәрәк!

Кейәү мине ашыҡтырманы. Ул Ерҙән йыһанға ашыу һәләтемде, унда оҙаҡ сәйәхәт итеүемде белә. Кире ҡайтҡанымда ул һаман да шул уҡ урында ҡуҙғалмай ултыра, тик нимәгәлер серле йылмая – тимәк, тағы бер мин көтмәгән ҡыуаныс бар.

Беҙ йортҡа ингәс, ул бүлмәләрҙе күрһәтергә булды, һәм мин береһен һайларға тейешмен. Аяҡ кейемемде сисеп, келәм түшәлгән тәүге бүлмәгә йүнәлдем – ул миңә оҡшаны. Бүлмәлә ҙур оҫталыҡ менән семәрләп эшләнгән бәләкәйерәк өҫтәл тора. Уны һәр яҡтан ҡараған саҡта аяҡ беләҙеге тауышын ишеттем дә, боролоп ҡараһам, бер-береһенә оҡшаған ике сибәр төрки ҡыҙ – ишек төбөндә, ә улар артында йылмайып кейәү тора. Мин өндәшмәй аптырап, һоҡланып ҡарап торғанда, ул әйтте:

– Һеҙ үҙегеҙ өйҙә беҙҙе көткән кешеләр йәшәргә тейеш, тинегеҙ.

Мин уның менән ризалаштым. Ул мине йорттоң «баш хужаһы» тип таныштырҙы, мин Гөлнурға һәм Гөлсараға сәләм биргәс, улар үҙ бүлмәһенә китте.

Миңә 60 йәш тулды, тормошома ихтыярымдан башҡа йәш ҡатын килде. Был, күрәһең, Хоҙайҙың миңә кешеләр араһында тағы күпмелер ваҡыт йәшәргә рөхсәтелер, тип аңланым. Тик Ул ғына ни ғүмерле булыуымды белә.

Өй тирәһен, ҡаланы һәм тирә-яғын байҡап сыҡҡас, ғалимдар йәмғиәтендә булдым. Ханзада Санъяр Мервты һәлйоттар баш ҡалаһы итеүҙә апаруҡ уңыштарға ирешкән: аҡса һуғыу ойошторолған, дәүләт шураһы эшләй, ә уны мәҙрәсәлә минең менән бергә уҡыған һәм туғанлашҡан Абдразаҡ етәкләй. Уны ла барып күрҙем, оҙаҡ әңгәмәләшеп, сәй эсеп ултырҙыҡ. Тик Абдразаҡ ағаһы бөйөк Низам Әлмөлөк һымаҡ ҡәһүә эсергә өйрәнмәгән.

Ғөмүмән, ханзада тирәһендә күп аҡыл эйәләре, эшмәкәрҙәр йыйылған. Был мине шатландырҙы һәм ғәмләндерҙе, сөнки Мервтың күтәрелеүе сәлйөктәр империяһының тарҡалыуына алып бара. Ике көслө рухлы бөйөк батшалар төҙөгән ҡеүәтле ил күҙ алдымда көсөн юғалта бара.

485 йылда Малик шаһ үлгәндән һуң уның улдары араһында талаш-тартыш башланды. Был ыҙғышта батшабикәм Төркән хәбәрһеҙ юғалды. Мәҙрәсәлә туғанлашҡан Хәсән Саббаһ дини талаш һәм ватандаштар һуғышы иблистәрен ҡулында тота һәм ҡайғылы халҡыбыҙ өҫтөнә ябырылыу өсөн уңайлы мәл көтә. Ә хәҙер Санъяр ағаһы солтан Мөхәмәттән һуң тәхеткә ултырыуына ышанмай, дәүләт эсендә үҙ дәүләтен төҙөй һәм илдең ҡеүәтен кәметә.

Шундай күңелһеҙ, сәйәси уй-фекерҙәрем менән Нишапурға ҡайтып киттем. Мервтан тиҙерәк ҡасырға тырышыуым Әлбағдады һатып алған ҡыҙҙар менән дә бәйле, сөнки шул ике сибәр төрки ҡыҙ йөрәгем менән туп һымаҡ уйнай башланы, күңелемдә хис-тойғолар буталды. Аҙыраҡ эштәремде хәл иткәс, тағы килермен дә шул гүзәлдәрҙең йөрәге менән үҙем уйнармын.

Ҡайтҡас Әнисә миндә төрки ҡыҙҙарының булғанын һиҙенде һәм ундай хәлдең мөмкинлеген, әммә уның тормош тәртибенә, көнкүрешенә ҡағылмауын аңлап, йылмайҙы ғына.

Бер йылға яҡын тыуған ҡалала Нишапурҙа бер ҡайҙа ла сыҡмай йәшәгәндән һуң күңелемдә Мервҡа барыу теләге артты. Ә унда бәхет өләшеүсе һәм рәхимле Аллаһ ихтыяры менән тормош үҙ яйы менән бара. Принц Санъяр обсерватория эшен Абдрахман Хазиниға йөкмәткән, ә Фиҙари, минән ун йәшкә кесе булһа ла, олоғайған, хәлбүки уның йәшендә беҙ аҡыл зирәклеген, тәүәккәллекте, ҡатғилекте

юғалта барабыҙ. Бынан алда килгәнемдә Хазина менән күп тапҡыр һөйләшкәйнем, астрономияға ҡарашыбыҙҙы сағыштырҙыҡ, һәм ул мине остазы итеп таныны.

Ханзада Санъяр миңә Фиҙари менән Хөрәсән өлкәһенең иң мәшриғендә урынлашҡан Балх (хәҙер Афғанстанда – **Тәрж.**) ҡалаһына барып, ғалимдар менән осрашып, уларҙың көнкүрешен, фәндең һәм мәғрифәттең торошон белеп ҡайтырға ҡушты. Оҙон юл буйы дөйәләребеҙ бер рәттән барҙы, һәм Фиҙари нисек һыу ярҙамында алтын, көмөш әйберҙәрҙең ауырлығын, ундағы металл күләмен үлсәргә мөмкинлеген аңлатырға маташты, миңә фекер тупларға ҡамасауланы. Мин ғалимдың бурысы фекер биреү, тикшереү, ә бизмән төҙөү уның эше түгел икәнлеген аңлатырға тырыштым.

Балх ҡалаһында беҙ һәр бер күренекле ғалим менән айырым осраштыҡ. Һуңынан башҡа ғалимдар менән әмир Сәғәҙи һарайына йыйылып һөйләштек. Сәғәҙи Мервтағы төҙөлөш менән ҡыҙыҡһынды, ә Физали Мөхәмәт ибн Зәйд, (Аллаһ уға тынғы һәм ризалығын бирһен) ҡәбере өҫтөнә мөһабәт мавзолей төҙөлөүен һөйләне.

Ул һөйләгән арала йортома яҡын булған Хәйрә зыяратында булғаным иҫемә төштө. Шунда, диуар буйындағы, һиллектә, буш урын күрҙем. Ул ер ағастар күләгәһендә, армыт һәм өрөк сәскәләренең тажы менән тулыһынса ҡапланған. Аллаһ мине үҙенә саҡырғас, тәнем бына ошонда тупраҡҡа әйләнгәнсә ятыр, тип уйланым да, шунда уҡ зыярат хеҙмәтсеһен табып, буласаҡ ҡәберем урынын күрһәттем.

Фиҙаринан һуң мин һөйләнем:

– Миңә лә мавзолей бик оҡшаны. Ибн Зәйд уға лайыҡлы. Мин ҡупшы мавзолей теләмәйем, кешеләр хәтерендә генә ҡалһам ярар. Ҡәберем тыныс урында, мөйөштә генә, яҙ көндәре емеш сәскәләре түгелгән ерҙә булыр.

## Мәңгелеккә күсеү алдынан

Өсөнсө йыл инде хәтирәләр яҙам, кисектерәм дә тағы тотонам. Ҡәләмем аҡ ҡағыҙ буйлап йүгерә, ә күҙ алдымда уҙған тормош һүрәттәре ағыла. Ҡайһы берҙә яҙмышымды эскерһеҙ, ихлас күңелдән яҙам, әммә ғәҙел сағылдырыу еңел түгел. Шулай ҙа тырышам, сөнки ғүмер юлымды белгән Иң Юғарылағы уҡыусы – бер, ә Унан яҡшыны ла, яманды ла йәшереп булмай.

Ҙур аҡыл эйәһе Ҡасим Аррәғиб, (Аллаһ мәрхәмәте һәм тынғыһы булһын үҙенә) әйтә торғайны: «Кеше ике донъяла йәшәй ала. Аллаһ ул турала әйтте: Беҙ, һеҙҙе ирмәк өсөн яратты, тип, Беҙгә тағы ҡайтмаҫбыҙ, тип уйланығыҙмы ни?»

Шунан ул пәйғәмбәр, с.ғ. с., һүҙен ярата ине: «Был донъя тупраҡҡа әүерелеүсе фани донъя, ваҡытлыса торған урын. Һеҙ мәңгелеккә тыуғанһығыҙ, әлегә, мәңгелеккә күскәнсе, ерҙә бер урындан икенсеһенә күсеп йөрөйһөгөҙ».

Нисә тапҡыр инде, ҡәләмем күңелемдә тыуған робағиҙы яҙғанда, Ҡасимдың тыныс һәм яғымлы тауышын эргәмдә ишетәм.

...Етмеш йәшемә етәрәк кешеләр менән күп аралашыуҙан йонсоуымды һиҙҙем, Ҡайһы берҙә әңгәмәсенең иҫәрлеге асыуландыра, шуға мине дошман күрәләр. Түрәләрҙең асыуы аҫтына ҡуйырға маташалар, ә бының сәбәбе ғалим һәм башҡаларҙың аҡылы етмәҫлек ғилемле булыуымда.

Мервҡа теге юлы килгәнемдә империяның солтаны Мөхәммәт тә Хөрәсән баш ҡалаһында ине. Миңә һунарға сығыуҙың уңайлы көнөн һайларға ҡуштылар. Әйткәйнем, солтан мине лә һунарға саҡырҙы. Һуңынан мин Нишапурға ашыҡтым. Солтан да Исфағанға ҡайтырға йыйынды һәм мине үҙе менән алды.

Юлда һөйкөмлө йәш вәзир Мөәйидтың улы һәм Низам Әлмөлөктөң, Аллаһтың мәрхәмәте үҙенә, ейәне Фәхри Әлмөлөк йәнәш барҙы. Беҙ уның менән ғилми әңгәмә алып барҙыҡ, әммә тау юлында һөйләшеү ауыр ине, шуға мин фарси телендә уны ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап яҙырға һүҙ бирҙем.

Нишапурға ҡайтҡас шул эшкә тотондом һәм «Тереклектең дөйөмлөгө хаҡында рисәлә» тигән хеҙмәт яҙҙым. Рисәләмдә һуңғы ваҡыттағы фәлсәфәүи фекерҙәремде һәм бөйөк Абү Ғәлиҙең, үҙенә Аллаһ мәрхәмәте, төп фекерҙәрен ҡағыҙҙа яҙып ҡалдырырға форсат таптым. Әгәр ҙә вәзиргә һүҙ бирмәһәм, ул фекерҙәр яҙылмайса ҡалыр ине.

Шунан тағы Ғәзәлиҙең Аллаһҡа яраҡлы эштәренә таянып, рисәләмдә суфыйлыҡ хеҙмәтем хаҡында фекерҙәремде тәү тапҡыр асыҡтан-асыҡ, ситләшмәй яҙырға булдым.

Ҡәләмем ошо юлдарҙы яҙғанда йәнем Аллаһ тәхете янында ине: «Суфый – фекер йөрөтөп, уйлап хәҡиҡәтте белергә тырышмай, ә тәненең бысраҡ булмышынан әхлаҡи камиллыҡҡа таянып, йәнен сафландырыусы кеше. Сафланыу кимәле етһә, суфыйҙың йәне Йыһанға күтәрелә ала һәм фәрештә сифатына эйә була.

Был юл башҡаларға ҡарағанда иң яҡшыһы икәнен мин беләм. Йәндең камиллығына ирешергә Аллаһ берәүҙе лә тыймай, кәртә ҡуймай. Кәртәләр тик әҙәми заттың үҙендә, күңелендә, уның әшәке булмышында. Әгәр ҙә кеше йәнендә ундай кәртәләр булмаһа, аңында һәр әйберҙең ысын асылы беленер ине. Пәйғәмбәр Мөхәммәт, с. ғ. с., уның хаҡта әйтә: «Һеҙ йәшәгән көндәрҙә Хоҙайығыҙ илһам бирә, тик һеҙ уны белергә тейешһегеҙ».

*(Был рисәләне фарсиҙан урыҫсаға дөрөҫ, оригиналына яҡын итеп Б. А. Розенфельд әйләндергән, һәм беҙ уны «Омар Хайям. Рубайат. «Трактаты. М., 2011» китабынан ҡыҫҡартып алдыҡ – **Тәрж.**)*

Рисәләне вәзиргә ебәреп, башҡалар менән ҡатнашмай, өйҙәге миңә һөйкөмлө кешеләр менән генә аралаштым. Хатта Гөлнурҙың һөйгәнем Төркәндең ҡарашын хәтерләткән күҙҙәре мине Мервҡа саҡыра алманы. Әммә миңә 70 йәш тулғанда солтан Мәхмүт ҡапыл вафат булды. Ә ханзада Санъяр төркмән һәлйөктәре ырыуы башлыҡтарының юғары солтаны дәрәжәһен алды.

Бер аҙҙан солтан Санъяр Исфағанға күсенмәүен, Мерв бынан ары империяның баш ҡалаһы булыуын иғлан итте: шунда тәхеткә ултырыу тантанаһы үтергә тейеш. Ул байрамға көтмәгәндә мин дә саҡырыу алдым. Өлкә башлыҡтары вазифаһын башҡарған Ялалетдин Малик шаһтың, Аллаһ ризалығы булһын үҙенә, ейәндәре һ.б. туғандары йыйылды. Ханзадалар менән шаһ һарайында аралаша инем, ә хәҙер улар миңә яҡшы тәьҫир ҡалдырманы.

Мин күҙгә салынырға тырышманым, сөнки хакимдар менән уртаҡлығым бик аҙ ине. Әммә ундай тәкәбберҙәрҙең береһе менән сәкәләшергә тура килде, тик оҙон бәхәскә барманым.

Икенсе көнө, башҡа бында аяҡ баҫмам, тип Нишапурға ҡайтып киттем. Һуңынан солтан Санъяр бер нисә мәртәбә саҡырыу ҡағыҙы ебәрҙе, мин иһә, һаулығыма һылтанып, барманым. Биш йылдан һуң, исемемде йәшереп, Мервҡа барҙым. Гөлнурға азатлыҡ бирҙем, ул һеңлеһе менән беҙҙең йортта ҡалды. Һәм уның күҙенә һуңғы тапҡыр ҡараным да ҡайтып киттем.

Ҡартлыҡ үҙенекен ала. Шулай ҙа һирәкләп фәлсәфәүи рисәләләр яҙам, тик улар күңелем баҡсаларын ғына биҙәй һәм, күрәһең, улар менән үҙем генә һаҡланырмын. Йөҙәр йылдан һуң был донъяға һөйөү һәм өмөт менән килгәндәргә эске кисерештәремде, уй-фекерҙәремде яңы робағиҙарым еткерер, һәм улар минең яратҡан кешеләрем ҡарашын тойор.

Әфәндебеҙ Сөләймән ибн Дауыт – Аллаһ икеһенә лә мәрхәмәтле булһын – китабынан тағы бер ғибрәтле һүҙ килтерәм: осраҡлы рәүештә үлмәгән һәр кемгә йәшерәк сағында тауҙарға менеп, ҡартайған көнөндә тәпәш түңдән ҡурҡһа, тәҡдир ҡушыуы менән уға тағы ла оҙаҡ йылдар йәшәргә яҙһа, «Мин башҡа теләмәйем!» тип әйтер.

Аллаһ ғүмеремде оҙон, тәбиғи сиккә еткеререн беләм, һәм мине лә ауыр йылдар көтә, әммә мин башҡа йәшәргә теләмәйем, тип әйтмәм, сөнки һәр төрлө ғүмер – хаҡлы, Аллаһы Тәғәләнең беҙгә, гонаһлы, фани донъя әҙәмдәренә, биргән иң ҡиммәтле бүләге.

Аллаһҡа шөкөр, яҙмаларым Уның ярҙамы менән тамам. Әфәндебеҙ һәм пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәткә һәм уның саф нәҫеленә Аллаһ ризалығын бирһен.

## Һүҙ аҙағы

Ғүмәр Хәйәм бөтә вәғәҙәләрен үтәне. Яҙмаларын тамамлағас, тағы һигеҙ йыл тыуған ҡалаһы Нишапурҙа бер нәмә лә яҙмай, ғалимдар менән осрашмай йәшәне.

Урамға сығып йөрөмәне, баҡсаһында, һыу буйында булды. Күп ваҡытын китаптары менән үткәрҙе, бигерәк тә Ибн Сина менән бик оҙаҡ һөйләште һәм, күрәһең, хәҙер ҙә теге донъяла, мәңгелектә һаман икеһе әңгәмәне дауам итәләр.

Ғүмәр Хәйәм 526 йылдың 12 мөхәррәмендә (1131 йылдың 4 декабре), йома көнө был донъянан китте. Бөтәбеҙ ҙә Аллаһ ҡолдары, һәм беҙ Аллаһҡа ҡайтырбыҙ. Уның вафаты хаҡында замандашы Байһаҡы мемуарында былай яҙа:

*«Кейәүе имам Мөхәммәт Әлбағдади миңә һөйләне: Ғүмәр ҡайнағам теш араһын алтын таҙартҡыс менән соҡоп Абу Ғәли ибн Синаның «Китаб аш-Шифа»һын («Шифалау китабын») ҡарай ине. «Берлек һәм күплек хаҡында» бүлегенә еткәс, теш таҙартҡысын һалды ла, әйтте: «Таҙа ҡағыҙ бирегеҙ, васыятнамә яҙам». Васыятын яҙҙы ла торҙо, намаҙ уҡыны, ашаманы, эсмәне. Йәстеү намаҙында баш эйеп өндәште: «Йә Аллаһ! Мин хәлемдән килгәнсә Һине аңларға тырышыуымды беләһең. Гонаһтарымды ярлыҡа.*

*Шунан һуң ул мәңгегә тынды».*

Низами ас-Сәмәрҡәнди исемле үҫмер Балх ҡалаһында Ғ. Хәйәмдән ҡайҙа ерләнәсәге хаҡында һөйләгәнен ишеткәйне. Шунан һуң егерме йыл үткәс, Низами Нишапурға килә һәм остазының дүрт йыл алдан вафатын белгәс, ҡәберенә барып баш эйергә теләй.

Ул үҙе бына нисек яҙа: *«530 йылда Нишапурға барҙым. Был бөйөк кеше дүрт йыл элек күҙен мәңгегә йомған, һәм донъябыҙ йәтим ҡалды. Ул минең остазым ине. Йома көнө зыярат хеҙмәтсеһе менән уның ҡәберенә барҙым. Зыярат ҡапҡаһынан һулға боролғас, диуар буйында, ағастар артында уның ҡәберен күрҙем. Армыт һәм өрөк сәскәләре остазым ҡәберен бик йомарт ҡаплаған. Шул саҡ Балхта әйткән һүҙҙәрен иҫемә төшөрҙөм дә иланым».*

Хәйәм вафат булды, мәгәр кешелек рухының көмбәҙендә мең йыл самаһы уның йондоҙо яна. Унан һуң үткән быуаттарҙа шул көмбәҙҙә күп яңы йондоҙҙар ҡабынды, әммә Хәйәмдең албырғатҡыс һәм серле йондоҙо тағы ла яҡтыраҡ балҡый.

**Дамир КУСКИЛДИН тәржемәһе.**

# БӘСЛЕ ӘҘИП, ӘҘЛЕ ҒАЛИМ

*(Күренекле әҙип, ғалим, педагог Кирәй Мәргәндең тыуыуына 100 йыл)*

*«Сәйәхәттән йөрөп ҡайтҡандан һуң, йыш ҡына фекер таралып китә. Юлда осраған бай һәм күп төрлө тормош картиналары күҙ алдынан бер-бер артлы теҙелеп үтә. Күңел дәфтәренең бөтә мөйөштәренән дә иҫтәлектәр ҡойола. Материал күп, тәьҫир ҙур. Ҡайһыһын алырға, ниҙән башлап китергә белмәй, аптырап ҡалаһың». Үҙенең сәйәхәтнамәләренең береһен Кирәй Мәргән шулай тип башлаған. Мәҡәлә яҙырға тип ҡулға ҡәләм алғас, мин дә ирекһеҙҙән ошо һүҙҙәрҙе ҡабатларға мәжбүр булдым. Әле генә уның тормош һәм ижад юлы буйлап күңелемдән сәйәхәттә йөрөп әйләнгәйнем. Был «сәфәрем»дә элекке таныштарым менән яңынан осрашып, уларҙың яңы һыҙаттарын асҡандай, яңы таныштар тапҡандай булдым. Авторҙың үҙе хаҡында ла, шулар тураһында ла яҙырға ине. Әхнәф Нури улы үҙе әйтмешләй, «материал күп, тәьҫир ҙур...» Әһә, бына ни өсөн хәтергә килгән икән теге юлдар! Мин дә «Ниҙән башлап китергә?» һорауы алдында тороп ҡалдым. Уйынмы ни, бер кеше йөҙөндә публицист, хикәйәсе, повестар оҫтаһы, романсы, драматург, сәйәхәтсе, әҙәбиәт һәм фольклор белгесе – ғалимдың, педагогтың эшмәкәрлеге хаҡында һүҙ алып барырға тура киләсәк бит! Ни булһа шул булыр, ошо исемлектең башынан төшәйемсе. Ҡалғанын күҙ күрер.*

## Кирәй Мәргән – публицист

Әхнәф Кирәй, һуңғараҡ Кирәй Мәргән атлы яҙыусы булып танылырҙан күп дәүерҙәр алда, мәктәптә уҡыған осоронда уҡ, район гәзитендә хәбәрҙәр, шиғырҙар баҫтыра башлай. Тәтешле районындағы Аҡсәйет ауылында бер йыл уҡытып, аҙмы-күпме тормош тәжрибәһе туплаған әүҙем хәбәрсене Аҫҡында әле генә ойошторолған «Колхозсы» гәзитенә эшкә тәғәйенләүселәр, йәш егеткә оло тормош юлының башы ошо булыр, тип уйламағандыр ҙа, бәлки.

Әхнәф Кирәев үҙенең яңы вазифаһын кинәнеп башҡара. Хәбәрнамә, репортаж, очерк жанрҙарының серенә төшөнөргә тырыша. Ошо жанрҙар оҫталарының үҙәк матбуғатта баҫылған материалдарын, ҡулына ҡәләм алып, ентекләп өйрәнә. Үҙе лә уларға оҡшатып яҙырға тырыша. Ул шуға ла төшөнә: хыялдарҙы

бойомға ашырыу өсөн, теләктән тыш тормош тигән университет һабаҡтарын үҙләштереү шарт, имеш. Әмәлгә ярағандай, беренсе биш йыллыҡ башланыуға, 1932 йылда, Өфөлә моторҙар төҙөү заводына нигеҙ һалына.

Яңы төҙөлөшкә ул тәүге «меңселәр» иҫәбендә Аҫҡын районы йәштәре менән бергә комсомол путевкаһы менән килә.

Уҡытыусылыҡ иткәнендә, район гәзитендә эшләгәнендә, кеше менән еңел аралашырға өйрәнгән Әхнәф яңы шарттарҙа ла юғалып ҡалмай. Башта ташсы һөнәрен үҙләштереп ала. Бирелгән планды еренә еткереп үтәүе өҫтөнә, белемле булыуы йәһәтенән иптәштәренән ныҡ айырылып торған, әммә ябайлығы, яңы таныштары, хеҙмәттәштәре менән уртаҡ тел табыусанлығы менән абруй ҡаҙанған йәш ташсы шунда уҡ төҙөлөш етәкселәренең күҙенә салына, һәм ул тиҙҙән бригадир итеп үрләтелә, комсомол ойошмаһы етәксеһе булып та эшләп ала. Йәш етәксе йәмәғәт эштәре артынан да саба, башҡорт, татар эшселәренә тәғәйенләп сығарылған «Удар төҙөлөш» гәзитендә мәҡәләләр, шиғырҙар баҫтырырға ла өлгөрә. Артабан ул башкөлләй матбуғатҡа бирелә: «Ленинсы», «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзиттәрендә, «Октябрь» (Өфө) журналында эшләй. Шулай итеп, журналистикаға тормош тигән университет аша килергә яҙа уға.

Донъялар имен саҡта туплаған журналислыҡ тәжрибәһе Кирәй Мәргәнгә Бөйөк Ватан һуғышында яу ҡоралы һымаҡ ярап ҡала. Әйткәндәй, һуғышҡа нисек юлығыуы хаҡында ул үҙе шулай тип яҙған: «һуғыш башланған йылды партияға индем. «Комсомольская правда» гәзитенең Башҡортостан буйынса үҙ хәбәрсеһе булып эшләй инем. Тегендә-бында йөрөүҙәр, кешеләр менән осрашыуҙар, әңгәмәләр йышайҙы. Йыш ҡына «Комсомольская правда»ның күсмә редакцияһы менән бергә сафҡа индерелә торған объекттарҙа эшләргә тура килде. Фронтҡа командировкалар яһаған саҡтар ҙа булды. Торараҡ, 1942 йылдың көҙөндә, Ҡыҙыл Армияның Баш сәйәси идаралығы ярҙамында Башҡорт атлы дивизияһына юлыҡтым. Унда 1943 йылдың июленә тиклем хәрби хәбәрсе вазифаһын атҡарҙым. Яңы очерктарҙы, хикәйәләрҙе, һуғыш хәлдәре хаҡында... госпиталгә әүрелдерелгән Аксаков санаторияһында яҙырға тура килде...»[1]

«Тура килгән», әлбиттә. Сөнки туберкулез, контузия, ике аяғына ла әллә снаряд, әллә мина ярсыҡтары һалған «тамғалар»ҙан торған тотош бер «гөлләмә» яу «бүләге» арҡаһында демобилизацияланған. Ана шундай хәлендә лә яу ҡырында ҡалған атлыларыбыҙ күрһәткән батырлыҡтар хаҡында очерктар яҙыуы – үҙе батырлыҡҡа тиң. Ул әҫәрҙәр һуғышҡа тиклем, асылда, Али Карнай нигеҙ һалған тормошсан башҡорт публицистикаһын, документаль прозабыҙҙы үҫтереүгә тос өлөш булды.

Кирәй Мәргән документаль фактты тарихи контекста анализлай, уны художестволы факт кимәленә күтәреүгә өлгәшә. Шул арҡала уның геройҙарының һуғыш ҡырындағы батырлыҡтары – Салауат Юлаев, Ҡаһым Түрә, Шәһит Хоҙайбирҙин, Баһау Нуриманов кеүек халыҡ батырҙарының ҡаһарманлыҡ традицияларының яңы шарттарҙа үҫтерелеүе, яңы мәғәнә алыуы кеүек аңлашыла.

Үҙе ҡылған подвигҡа иҫе лә китмәй, яуҙа батырлыҡ күрһәткән, башҡа егеттәрҙе ҡымыҙ менән бүләкләргә тигән уйы менән үҙенең баҫалҡылығын асҡан Хәким Сыртланов («Ҡымыҙлы фляга»), ҡурайҙы ҡорал итеп тотонған Шәриф Әхмәтшин («Баймаҡ ҡурайы»), үлгәндә лә, дошмандан үҫте алып, үҙ бурыстарын намыҫ менән үтәү тойғоһо менән үлеүсе атаевсылар («Утыҙ батыр

[1]*Киреев Рушан. Фронтовой блокнот // Евразия. — 1997. — 28. 07—3. 08 (№ 30).*

ҡалҡыулығы»), элемтәсе Нәби Хәжиев («Батырлыҡ») ише яугирҙар шул күсәгилеште кәүҙәләндерәләр ҙә инде.

Кирәй Мәргәндең яу йылдарында башҡорт атлылары тураһында яҙған очерктары күренекле рус совет яҙыусылары Константин Симонов, Илья Эренбург, бер туған Турҙарҙың башҡорт һалдаттары хаҡындағы очерктары менән бик тә ауаздаш.

Һуғыштан һуң да Кирәй Мәргән журналислыҡ һөнәрен ташламаны. «Гөлһылыу һәм уның дуҫтары» (1945), «Ике егет» '(1947), «Аҫылбикә Дәүләтбирҙина» (1960) ише очерктарында үҙ эшен намыҫ ҡушыуынса башҡарыусы баҫалҡы замандаштарыбыҙҙың образдарын һынландырҙы.

## Кирәй Мәргән драмаларына публицистик башланғыс хас булғаны

Журналислыҡ стиле яҙыусының (1943 йылда, В. Кедров менән бергәләп яҙылған) «Минең ғаиләм» (1942), «Яу» һәм «Ҡала иртәһе» (1958) тигән пьесаларында ла ныҡ һиҙелә. «Минең ғаиләм»дә ваҡиғалар бер ғаилә яҙмышы тирәһендә үҫтерелә. Инженер Самат Килдейәровты фронтҡа ебәрмәйҙәр, ә ҡатыны Рәйсәне алалар, сөнки ул врач. Улының фронтҡа китмәүе Ярулла ҡартҡа аңлашылып етмәй. Быны ул ырыу исемен, фамилияны, ғаиләне кәмһетеү тип аңлай. Ләкин аңлашылмаусылыҡ булып тойолған ошо ситуацияла оло мәғәнә ята. Инженерҙың заводтағы эшенең әһәмиәте яугирҙыҡынан кәм түгел. Шулай булғас, уның заводта ҡалыуы – фронтта еңеүгә булышлыҡ итеү. Рәйсәнең һуғышҡа китеүе, Ярулла ҡарттың улын фронтта күрергә теләүе – һәммәһе лә оло тойғо, ватансылыҡ тойғоһо менән аңлатыла.

Берҙәмлек, ватансылыҡ идеяһы туранан-тура яу ҡырын һүрәтләү аша асылған «Яу» пьесаһы иһә художестволы очерк һымағыраҡ ҡабул ителә. Пьесала Башҡорт атлы дивизияһы тормошонан алынған ваҡиғалар һүрәтләнә. Самат Арсланов менән полковник Лобанов «Егеттәр» очеркының геройҙары Шайморатов менән Голеновка, Груня «Дуҫлыҡ» очеркындағы Оксанаға оҡшаш. «Ҡурайсының үлеме» очеркының геройы Мәхмүт һәм ул ҡатнашҡан ваҡиғалар пьесаға башытояғы менән тиерлек «килеп ингән».

«Егеттәр»ҙең үҙәк мотивы, ҡаһарманлыҡ традицияларының күсәгилешен раҫлаусы мотив та бар «Яу»ҙа. Концерт күрһәтеүсе артистар менән килгән бейеүсе ҡыҙ Мәрйәм дивизияла һөйгәне Булат Йәнтүрин янында ҡала. Үҙенең был тәүәккәллеген ул 1812 йылғы Ватан һуғышы ҡаһарманы Йәнтүрәнең яу ҡырында яраҡкан кәләше менән бергә булыуына һылтаныу ярҙамында ғына аңлата кеүек. Әммә был тәү ҡарашҡа ғына шулай тойола. Асылында иһә үҙен замана Йәнтүрәһенең яугир ҡатыны итеп тә таныта: уның менән һуғышҡа инә, кәрәкһә, разведкаға ла йөрөй.

Дивизия командиры Самат Арсланов иһә, аҙаҡ асыҡланыуынса, улы Шакир менән бергә-бергә һуғышҡан булып сыға. Бындай ғаилә-ғаилә булып һуғышта ҡатнашыу боронғо яу йолаһын хәтерләтә. Бындай миҫалдар ирле- ҡатынлының, аталы-уллының бер уй, бер теләк менән яныуын раҫлай.

«Ҡала иртәһе» пьесаһында Кирәй Мәргән «Минең ғаиләм» идеяһын һуғыштан һуңғы тыныс хеҙмәт шарттарын һүрәтләү аша асырға тырыша. Тәжрибәле төҙөүсе Василий Дубов – пьесала үҙәк фигура . Ул үҙ эшен белеп башҡарыусы ғына түгел, үҙенең бөтә булмышы, ҡиәфәте, ҡыланышы, эше, һүҙе менән дә эргә-тирәһендәгеләргә ыңғай йоғонто яһай торған кеше. Уның тырышлығы менән Сабит ҡына

түгел, юлдан яҙа яҙған Ҡайым да төҙөлөштә үҙ урындарын таба. Йәмилә төҙөүсе булып китә. Элекке колхоз председателе Ишморат һәм әле пьесала һүрәтләнгән ваҡиғаларға тиклем ҡаты шелтәләр алғылаған нефтсе Сәүбәнгә лә Дубовтың йоғонтоһо ҙур була. Әҫәр ауыл урынында индустриаль ҡала төҙөү йөҙөндә яҡты киләсәккә, шунда йәшәйәсәк быуынға нигеҙ һалыныуын күрһәтмәксе. Тик пьесала конфликт үтә йомшаҡ үҫтерелә. Ул шулай уҡ Д.Юлтый, А.Таһировтар дәүерендә әҙәбиәтебеҙгә трафарет булып ерегеп ҡалған «башҡортҡа аҡыл биреүсе, уны тәрбиәләп, кеше итеүсе өлкән ағай – урыҫ» мотивынан да азат түгел. Ҡыҫҡаһы, был пьесалар Кирәй Мәргәндең драматургия өлкәһендәге публицистыҡ тәжрибәһе әҙәби ижад тәжрибәһенән өҫтөнлөк итеүе тураһында һөйләй. Ә инде уның «Өҙөлгән моң» трагедияһы менән «Шомбай» комедияһы үҙенең художестволы камиллығы йәһәтенән уларҙан Ер менән Күк араһы кеүек айырылып тора.

«Өҙөлгән моң» 60-сы йылдар башында уҡ ижад ителгән. Ул мәлдәрҙә башҡорт поэзияһының классигы Аҡмулланың тормошо, ижады хаҡында мәғлүмәттәр самалы ғына ине әле. Булғаны ла төрлө белгестәр тарафынан ҡапма-ҡаршылыҡлы баһалана килә ине. Шундай шарттарҙа уҡ Кирәй Мәргәндең ошо бөйөк шәхес образына мөрәжәғәт итеүе башҡорт мәҙәниәте тормошонда тарихи яңылыҡ, әҙиптең гражданлыҡ подвигы тигән нарыҡлауға лайыҡ булды. Шул мәлдәрҙә һәм әле лә Аҡмулланы йә теге яҡҡа, йә был яҡҡа тартҡылап, үҙ еренә генә еректерергә тырышҡан авторҙар тарафынан яҙылған хеҙмәттәрҙән айырмалы рәүештә, Кирәй Мәрғән оло шағирҙың образын тарихи яҡтан дөрөҫ һынландырған. Драматург уны социаль ғәҙелһеҙлектәргә ҡаршы көрәштә поэзияны үткер ҡорал итеп файҙаланыусы интернациональ рухлы башҡорт шағиры, көрәшсе итеп кәүҙәләндереүгә ирешкән. Ул беҙҙең алға яттарға баш эймәҫ ғорур егет, ил ағаһы булып килеп баҫа. Пьесаның ошо билдәләре авторҙың милли, мәҙәни мираҫҡа һаҡсыл ҡарашлы, тарихты объектив баһалай белеүсе тикшеренеүсе-рәссам булыуы бәхәсләшмәҫлек икәнен йәнә бер иҫбатланы.

Аҡмулла пьесала яҡты көндәргә әйҙәүсе шағир-трибун булараҡ һынландырыла. Уның һүрәтләүенсә, шиғри рухлы егет халыҡ моңона һоҡланып ҡына ҡалмай, уны ҡуйын дәфтәренә лә теркәй бара. Стәрлебаш мәҙрәсәһендә лә шул шөғөлө менән мәшғүл. Был деталь драматургтың фольклорсы ғалим булыуынан, үҙ геройын шул күҙлектән баһаларға тырышыуынан ғына килмәй. Халыҡ шағиры, ысынлап та, туған моңдарға иғтибарлы булған. Юҡһа, уның шиғырҙары үтә лә халыҡсан булмаҫ ине лә, халыҡ хәтеренә күсеп, фольклорлашып бөтмәҫ ине. Ҡайһылай булғанда ла, пьесала уның туған фольклорҙы өйрәнеүенә тәрән мәғәнә һалынған. Ул Аҡмулланың халыҡ күңелен тәрәндән аңлаған кеше булыуын асыуға булыша.

Әҫәрҙәге ваҡиғалар шағирҙың хаиндар ҡулынан үлтерелеүе менән тамамлана. Бындай финал Аҡмулланың байҙар, муллалар, властар өсөн ни тиклем ҡурҡыныс зат булыуын асырға ярҙам итә.

Кирәй Мәргән бөйөк шағирҙың үлемен моң өҙөлөүенә тиңләй. Моң өҙөлһә лә, күңелдә уның өҙөлмәҫ сыңы ҡала. Пьесала был идея Аҡмулла яҙмаларын һаҡларға алған Гөлйөҙөмдөң илдән илгә йөрөп уның шиғырҙарын уҡыуын, ул шиғырҙарҙың башҡалар теленә күсеүен, күңелдәрен яулауын «күрһәтеү» аша образлаштырыла. Шул «башҡалар» араһынан етем малай образын «алғараҡ сығарыу» Аҡмулла поэзияһының үҙеген биләгән мәғрифәтселек идеяларының киләсәккә күсәсәген символлаштыра.

Трагедияһына ҡарағанда Кирәй Мәргәндең «Шомбай» комедияһы сағыштырмаса бәхетлерәк булды. Заманында ул академтеатрҙа ла барҙы, телевидение аша ла күрһәтелә килә. Был пьеса тулыһынса халыҡ ижадынан, атап әйткәндә, көләмәстәргә, юмористик әкиәттәргә хас сюжет һәм тематик мотивтарҙан туҡылған. Герой ҙа, исеме менән генә түгел, есеме менән дә мин төбөм-тамырым менән фольклорҙанмын, тип ҡысҡырып торғандай. Шомбай шул уҡ халыҡ ижадының юмористик әкиәт, көләмәс даирәһендә «тыуып үҫеп, ир еткән».

## Хикәйә оҫтаһы

Сәсмәүер өлкәһендәге тәүге тәжрибәләрендә үк Кирәй Мәргән үҙен яңылыҡҡа, кеше күңеленә һиҙгер яҙыусы итеп таныта. Яңы ҡоролош уның идеологтары тарафынан йәмғиәттең бөтә ҡатламдарының аңына идеал ҡоролош тип һеңдерелә. Шул йәмғиәттә кешеләр араһында яңы мөнәсәбәттәр, яңы әхлаҡ урынлашыуын талап итә. Уныһы иһә – матди байлыҡты тыуҙырыуға, иҡтисадты юлға һалыуға ҡарағанда, күп тапҡыр ауырыраҡ хәл ителә торған проблема. Шуға күрә лә яңылыҡты яҡлап сығыусы башҡа ҡәләмдәштәре кеүек үк, Кирәй Мәргән дә үҙенең хикәйәләрендә ошо етди проблемаға ныҡыраҡ иғтибар итә. Мәсьәләне ул ябайлаштырмай. Уға төрлө яҡлап килә. Шуның менән уның ҡатмарлы икәнлеген аса. «Секретарь», «Тәүге һөйөү» кеүек хикәйәләрендә ул, бар булмышың менән яңылыҡҡа ынтылыусы, башҡаларҙы ла шуға әйҙәүсе икәнһең, иң әүәл үҙең иҫке ҡараштарҙан арынырға бурыслыһың, тигәндәй була. Башҡаса булғанда, ундайҙарҙың дөйөм эшкә зыян килтереүе генә ихтимал икәнен иҫкәртә. Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, Әхмәҙи юғарынан яңы тормошҡа алып барыусы иң дөрөҫ юл тип тәҡдим ителгәнде бөтә күңеле менән хуплай. Әммә йәштәр етәксеһе, комсомол секретары булып алғас, мин-минлек сиренә юлыға. Коллективтан айырыла, башҡалар менән кәңәш-төңәш итмәйенсә, бөтәһен дә үҙе генә хәл итергә маташа, һөйләгән докладтары, үткәргән кисәләре – барыһы ла үҙен күрһәтеү өсөн башҡарылған булып сыға. «Секретарь» хикәйәһе менән Кирәй Мәргән, комсомол рухына, яңы етәксегә мин-минлек ят булырға тейеш, тигәндәй була.

«Тәүге һөйөү» хикәйәһе (1938) көнсөллөктөң, нигеҙһеҙ шөбһәләнеүҙәрҙең дә кешене яңылыш юлға баҫтырыусы, бәхетенән яҙырға мәжбүр итеүсе яман ҡылыҡ булыуын асыҡлауы менән фәһемле.

«Һәүбән менән Сәкинә» (1939), «Хәсәндең яҙмышы» (1939, 1958) хикәйәләрендә яңы әхлаҡ проблемаһына яҙыусы икенсе яҡлап килә: уның өҫтөнлөгөн иҫкелек ҡалдыҡтарын һынландырыу юлы менән, атап әйткәндә, ҡатын-ҡыҙға мөнәсәбәт аша аса. Һәүбән, үҙен тиңһенмәгән Сәкинәне боронғоса урлап алып ҡайтыу юлы менән кәләш итәм тигәнсе, әбей алып ҡайтып, әҙәм мәсхәрәһенә ҡала. Һәүбәнде комик планда һүрәтләүҙә үк авторҙың был иҫкелек ҡалдығына мөнәсәбәте асыҡ сағыла.

Яңы тормошто, яңы мөнәсәбәттәрҙе һанға һуҡмау – кешенең үҙ-үҙенә зыян ҡылыуы менән бер. «Хәсәндең яҙмышы» хикәйәһе менән яҙыусы шул фекерҙе үткәргән кеүек. Колхозға инергә теләмәй, коллективтан биҙеп, ил гиҙеп теләнселәп кәсеп итеп, аҙаҡ ауылдаштарының күмәкләп йыйған байлығына ҡул һалған Хәсән йөҙөндә иҫке донъя тарафынан ныҡ ҡыйырһытылып, үҙе хаҡында ғына ҡайғыртырға өйрәнгән, шул арҡала яңы осорҙа синыфташтарынан айырылыуға тиклем барып еткән ҡыҙғаныс бер тип кәүҙәләнә.

«Майгөл әбей» хикәйәһендәге яңғыҙаҡ әбейҙең ҡыланышын да, революцияға

тиклемге тормош шарттары тәрбиәләгән һыҙаттар яңы осор талап иткән мөнәсәбәттәр менән һыйыша алмай, тип баһалай яҙыусы. Майгөл ҡарсыҡ үтә һаран. Ошо яғын иҫкә алып, тәнҡитселәр уны Пушкиндың Һаран рыцары, Гоголдең Плюшкины, Бальзактың Гобсек тигән геройы менән сағыштырмаҡсы. Оҡшашлыҡ бар, әлбиттә, ләкин оҡшашлыҡ менән оҡшашлыҡ араһында ла айырма була. Бында беҙ тап шундай осраҡҡа тап булабыҙ. Оҡшашлыҡ хаҡында һүҙ алып барғанда, оппоненттарым һөҙөмтә оҡшашлығын ғына күҙ уңында тотҡандар. Ә шул һөҙөмтәнең сәбәбе иҫәпкә алынмаған. «Классик һарандар»ҙан Майгөл әбейҙең бер айырмаһы шунда: ул йыйнаҡ, һаҡсыл. Ҡырҡ йыл үткән, ә уның биш билле туны менән ҡартынан ҡалған быймаһы ла, ҡыҙ сағында атаһы алып биргән сәйнүге лә шул көйө. Ашағанда икмәгенең бер генә валсығын да ергә төшөрмәй һ. б. Иң мөһиме, ул кеше көсөн файҙаланып байыуҙы маҡсат итмәгән, юҡһа алты аршынлы йортта бер самауыр, бер пар сынаяҡ, бер пар биҙрә, үҙенә етерлек кенә түшәк-яҫтыҡ менән көн итмәҫ ине. Ундағы һаранлыҡтың сере капиталистик йәмғиәттең ысынбарлығында. Иртәгәге көнгә ышаныսһыҙ ҡарарға мәжбүр иткән шул ғәҙелһеҙ йәмғиәт Майгөл әбейҙә үҙ ауыҙынан өҙөп ҡара көнгә әҙерләнә йөрөүсәнлек тәрбиәләгән. Тора-бара шул уның ғәҙәтенә әүерелгән. Ә «ғәҙәт – ҡылыҡтың әнеһе», халыҡ шағиры әйтмешләй. Уның һаранлығының «классик һарандар»ҙыҡынан төп айырмаһы бына шунда. «Майгөл әбей» хикәйәһе менән йәш сәсмәүерсе кеше психологияһына тәрән үтеп инә белеү, тел төбө менән әйтеү һәләтенә эйә була барыуын иҫбатлаған.

«Зифа апай» (1938) хикәйәһе лә шуны ҡеүәтләй. Ете йәшенән ир-ат ҡына башҡарыр ауыр эштәрҙә йөрөп, ир фиғеллерәк булып киткән Зифаға элек кәмһетеү менән ҡараһалар, колхоз төҙөлгәс, ул хөрмәт ҡаҙанған кешегә әүерелә. Был хөрмәт уның хеҙмәтте яратыуы, дөйөм мәнфәғәт, колхоз мәнфәғәте, хаҡында ҡайғыртыусанлығы менән яулана. Майгөл әбейҙән айырмалы рәүештә, ул үҙ-үҙенә бикләнгес зат түгел. Зифа эскерһеҙ, һәр саҡ кешеләр араһында, уларға ҙур ышаныс менән ҡарай. Шул уға яңы тормошта үҙ урынын табырға ярҙам итә, шәхси бәхетен табырға ла булыша. Зифа алдынғы тракторсы Абдулла Аҡназаров менән ғаилә ҡороп ебәрә. Героиняның был өлгәше лә – уның кешелек күркәмлеген һаҡлап ҡалыуы өсөн яҙмыш бүләге кеүек аңлашыла.

Һуғыштан һуңғы дәүерҙәге хикәйәләрендә Кирәй Мәргән замандаштарының күңел күркәмлеген кәүҙәләндерҙе («Рәшиҙә әбей», «Фирүзә тауы», «Балыҡсылар», «Кәләшле йорт» һ. б.). «Фирүзә тауы» хикәйәһендә, мәҫәлән, ҡыҙ күңелен яулай алмаған бульдозерсы Биктимер, норматив буйынса бер аҙналыҡ эште – Сәүәнәкбаш ауылы төҙөлгәндән алып быуын-быуын кешеләрҙең теңкәһен ҡороҡҡан текә тауҙа юл һалыу эшен бер төн эсендә атҡара, һүҙ менән түгел, шул эше менән егет үҙ хистәренең сафлығын: ярата ла, нәфрәтләнә лә белеүен, ярһыу ҙа, ғорур ҙа, эшһөйәр ҙә булыуын аңлатыуға ирешә. Ошо һүҙһеҙ «өндәшеү» шул тиклем көслө яңғырай. Уның шаңы, йылдар үткәс тә, Фирүзә һылыуҙы шаңҡытмалы була.

Кирәй Мәргәндең хикәйәләре менән таныш кеше шуға иғтибар итмәй ҡалмайҙыр. Улар бәләкәй генә ыңғай башланғыста ла изгелек орлоғон күрә белгән, киң күңелле кеше ҡулдары менән яҙылған. Шуға ла ул әҫәрҙәр йылы ҡабул ителә. Уҡымлы. Нәсихәти. Уҡып сыҡҡас та, уларҙан ҡапыл ғына арына алмайһың, ҡайта-ҡайта уйланырға, хатта ҡабат-ҡабат битләргә мәжбүр булаһың. Сөнки Кирәй Мәргән хикәйәләренең нәсихәте ярылып ятмай, новеллистик «төргәккә төрөлгән» хәлдә бирелә. Быға уның нескә ирония менән эш итеү һәләте лә булыша.

## Аяҡтары юлда...

Халыҡ шағиры Мостай Кәримдең бер шиғыры:

*«Аяҡтарым юлда, күңелем йырҙа.*
*Ерҙә мин бер шундай юламан...»*

тигән юлдар менән башлана. Был һүҙҙәрҙе Кирәй Мәргән дә ҡабатлай алыр ине.

Кесе йәштән үк «аяҡтары юлда», «күңеле йырҙа» булған был юламанды һуғышҡа тиклем үк фольклор йыйыу шөғөлө мауыҡтыра. Шул юламанлығы уны хатта оло юлдан ситтә, төпкөлдә ятҡан Бөрйәнде йәйәүләп гиҙергә мәжбүр итә. Бер мәлде ошондағы Иҫке Монасип (Һарт) ауылында Хәйрулла Ишмурзин тигән 68 йәшлек сәсәнгә юлыға. Унан замана йырҙары, әкиәттәр һәм «Алпамыша» ҡобайырын яҙып ала. Асылда, фән өсөн был сәсәнде тәүләп Кирәй Мәргән аса.

Яу ҡырында ла Кирәй Мәргән яратҡан шөғөлөнән айырылмай. Һөҙөмтәлә 112-се Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙары ауыҙынан ишеткәндәренән «Һуғыш фольклоры» йыйынтығын төҙөй һәм уны 1944 йылда нәшер итеүгә ирешә. Үткән быуаттың 50 – 60 йылдары фольклорсы Кирәй Мәргән өсөн айырыуса емешле була. СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалындағы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор экспедициялары етәксеһе сифатында шәкерт-коллегалары Салауат Галин, Мөхтәр Сәғитов, Фәнүзә Нәҙершина, Ниғмәт Шоңҡаровтар менән ул Башҡортостанды ғына түгел, Ырымбур, Һамар (Куйбышев), Һарытау (Саратов), Свердловск, Пермь, Силәбе, Ҡорған өлкәләрендәге башҡорт ауылдарын да гиҙеп сыҡты. Шул экспедицияларҙа тупланған фольклорыбыҙ өлгөләре 70 – 80-се йылдарҙа нәшер ителгән ун һигеҙ томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» тупламаһының нигеҙен тәшкил итте.

Фольклорсы һуҡмаҡтары Союз, халыҡ-ара үткәрелгән форумдарға илтеүсе оло юлдарға ла барып тоташҡыланы. Антропология һәм этнография буйынса VII (Мәскәү, 1964), VIII (Токио, 1968) халыҡ-ара конгрестарҙа Кирәй Мәргәндең, башҡорт халыҡ ижады хаҡында докладтар уҡып, юғары баһа алып ҡайтҡаны хәтерҙә.

Фольклорсы сифатында ил гиҙеүҙәренән Кирәй Мәргән күстәнәскә «Ялан ҡатай башҡорттары араһында», «Туҡсоран дәфтәре», «Ырғыҙ дәфтәре», «Һаҡмар буйҙарында», «Арғаяш дәфтәренән», «Урта Урал дәфтәре», «Тайфундар илендә» сәйәхәтнамәләрен алып ҡайтты. Төпсөрлә тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе булып тыуған «Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары» (1961) айырыуса әһәмиәтле. Шул монография нигеҙендә Кирәй Мәргән 1963 йылда филология фәндәре докторы тигән ғилми исемгә диссертация яҡланы. Унда ғалим халҡыбыҙҙың милли ғорурлығы иҫәпләнер эпик ҡомартҡыларҙы барлап: уларға беренсе байҡау яһаны. Шулай итеп, филология өлкәһендә профессор Жәлил Кейекбаевтан ҡала тағы бер фән докторы яралды. Йәғни башҡорт фольклорсыларынан тәүге фән кандидаты һәм фән докторы дәрәжәһенә Кирәй Мәргән иреште.

«Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары» китабы Кирәй Мәргәндең ғилми хеҙмәттәре араһында ғына түгел, башҡорт, ғөмүмән, төрки фольклор ғилеме өсөн дә мөһим хеҙмәттәрҙән иҫәпләнә. Берҙән, ул башҡорт халыҡ ижадын тикшереү өлкәһендәге тәүге монографик хеҙмәт булды. Икенсенән, башҡорт халҡының милли ғорурлығы иҫәпләнер эпик ҡобайырҙарыбыҙға ғилми анализ яһаны. Уларҙың тыуыу, үҫеү, формалашыу үҙенсәлектәрен, идея-эстетик асылын, йәшәү хәлен, яҙмышын тикшерҙе. Беренсе булып эпик ҡомартҡыларҙың тарихи, милли

ерлеген иҫбатланы. Шуның менән донъя төркиәтенә үҙенең тос өлөшөн индерҙе.

«Мәңгелек шишмә» тигән икенсе монографияһы ла – фольклор ғилемебеҙҙең яңы битенең асылышы ине. Унда ғалим беҙҙә әлегәсә күтәрелмәгән сиҙәм булып ҡала килгән йола поэзияһына, көләмәстәргә байҡау яһаны.

Кирәй Мәргән үҙенең бер мәҡәләһендә фольклор өйрәнеүсе ғалимдарҙы ике төркөмгә, кабинет ғалимдары һәм халыҡ араһына сығып, фольклор ҡомартҡыларын үҙе йыйып, шуны төптән өйрәнеүсе ғалимдарға бүлер булды. Халыҡ ижадының йәнле йәшәү хәлен, йәнле башҡарылышын, шул башҡарылышта яҙып алмай, бары башҡалар йыйған материал менән генә сикләнеү – кеше хаҡында уның фотоһы буйынса ғына фекер йөрөтөү менән бер. Быға тиклем әйтелгәндәрҙән аңлашыла булһа кәрәк, Кирәй Мәргән үҙе һис һүҙһеҙ икенсе төркөм ғалимдарына ҡарай. Фольклор хаҡындағы уның бөтә хеҙмәттәре лә халыҡ ижадының йәнле репертуарҙағы йәшәү хәлен экспедициялар ваҡытында үҙе яҙып алған, үҙе яҡшы белгән жанрҙарға, төрҙәргә арналған. Шуға күрә уларҙы ла сәйәхәт күстәнәсе, юл күстәнәсе тип атап булыр ине.

«Беҙем нәҫелемез Кирәй атлы мәшһүр уҙаман ирҙән таралмыштыр. Уны Мәргән дею атар булғаннар...» Кирәевтар шәжәрәһе шулай башланған булған. «Үҙем тураһында» тигән автобиографик яҙмаһында әйтелеүенсә, ҡартатайы Шаһиарыҫлан ҡарт бәләкәй Әхнәфтән был шәжәрәне ятҡа белеүҙе талап итеп, йыш ҡына ҡабатлаттырыр булған. Боронғо йола буйынса, һәр кемсәнең ете быуынға тиклем үҙ затын, үҙ ырыуынан сыҡҡан күренекле шәхестәрҙе, улар ҡылған эштәрҙе белеүе фарыз иҫәпләнгән. Тимәк, Шаһиарыҫлан ҡарт ул йоланы еренә еткереп үтәүсе, шуны үҙенең яҡындарынан да талап итеүсе кеше булған. Мәлендә ул талапты үтәү еңелдән булмаһа ла, Әхнәф атлы ир бала исеме киң билдәле Кирәй Мәргән тигән ғалим булып етешкәс, ҡартатаһын йылы иҫкә алып, шулай тип яҙасаҡ: «Күрәһең, ҡартатайымдың был тырышыуы эҙһеҙ ҡалмаған. Мин үҙебеҙҙең нәҫел-ырыуға бик ихтирам менән ҡарарға өйрәндем...»[2].

Минеңсә, ҡартатаһы биргән һабаҡ буласаҡ яҙыусыла үҙ ырыуына ғына түгел, үҙ халҡының, илдең тарихына ихтирам тәрбиәләүгә булышып ҡына ҡалмаған, ейәненең башҡаларҙа ла ошондай бурыс тойғоһо тәрбиәләрлек булып етешеүенә лә ярҙам иткән. Шулай булмаһа, халыҡ рухы тыуҙырған гәүһәр үә яҡуттарҙы бөртөкләп йыйыуҙағы бөтмөрлөк, уларҙы ғилми яҡтан баһалап, халыҡҡа кире ҡайтарыуҙағы фәнни әйләнешкә индереү кеүек изгенән-изге эштәге егәрлелек ҡайҙан килһен дә ошо уҡ өлкәлә әүҙем эшләгән шәкерттәре ҡайҙан хасил булһын ти?

## «Ҡыҙыҡлы әҙәбиәт ғилеме»нә торошло

Кирәй Мәргән тәүҙә үҙенең көсөн поэзияла һынап ҡарай. Уның шиғриәткә ылығыуына тәбиғәт биргән һәләт тә, ғаиләләге Аҡмулла, Туҡай һәм, әсәһе яғынан ҡәрҙәштәре Бабич культынан тыш, атаһының сәсәнлеге лә сәбәпсе булғандыр.

Аҡмулла, Туҡай, Бабич шиғриәтен белмәгән, унан рухланмаған кеше юҡтыр, һәр хәлдә, күңеле – таш, йөрәге – туң булмағандар уға битараф түгел. Кем ул Нурмөхәмәт сәсән бин Арыҫлан әл-Йомрани? Ошо һорауға яуап биргәндәй, заманында «Шәхсемә даир» тигән әҫәрендә сәсән үҙе үк шулай тигән:

*Кем, тиһәгеҙ, ҡулъа алып еҙ ҡомъанын,*
*Ихлас итәр тәһәрәт вә истинжаны,*

---

[2]*Кирәй Мәргән. Һайланма әҫәрҙәр. I том. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте. 1962. 11—12-се б.*

*Онотолған бер ҡәрйәнең мосолманы?*
*Нурмөхәмәт бин Арыҫлан әл-Йомрани.*

*Кем, тиһәгеҙ, хаҡ мосолман булмаҡ өсөн,*
*Бәке илә таҡыр кдүб баш ҡырғаны,*
*Ҡибла таба баш борғаны, баш орғаны?*
*Нурмөхәмәт бин Арыҫлан әл-Йомрани.*

*Мәжлестәрҙә гәп һатып, күп эш ҡырғаны,*
*Муллаларса тубыҡ сәнсеп ултырғаны,*
*Нотоҡ һөйләп, ниғмәтләрҙән буш ҡалғаны?*
*Нурмөхәмәт бин Арыҫлан әл-Йомрани.*

Ысынлап та, Нурмөхәмәт сәсәндең, ихлас мосолмандарса, дин юлын ҡыуған сүрәттә лә, әле Әхнәф тигән улы тыуғанға тиклем күп замандар элек үк халыҡ араһында мәғрифәт нуры сәсеп, Аҡмулла идеяларын таратыу һәм ғәмәлгә ашырыу ниәтенән мәктәп-мәҙрәсәләрҙә уҡытыуы мәғлүм. Сәсән һүҙен ул наҙанлыҡҡа ҡаршы көрәштә оҫта файҙаланыр булған. Ғилем йәһәтенән алға киткән илдәрҙән өлгө алырға саҡырған.

Нурмөхәмәт сәсәндең ер һатыуға һәм башҡа социаль ғәҙелһеҙлектәргә ҡаршы сығарған бәйет, шиғри нәсихәттәре лә күп булған. Ни яҙһа ла, ни тип нотоҡ тотһа ла, ғәҙеллекте яҡлаған, аң-белемгә эйә булыуҙы ҙурлаған, наҙанлыҡты, рухһыҙлыҡты, бар нәмәгә битараф ҡылып, ғәфләттә ятыусанлыҡты тәнҡитләгән, ундайҙарҙы хурлаған.

Атанан күргән уҡ юнған, тигәндәй, үҫмер егет Әхнәф бин Нурмөхәмәт тә тирә-йүндә күргән кәмселектәргә мөнәсәбәтен шиғыр теле менән әйтеп бирергә тырышҡан.

30-сы йылдарҙың урталарында уҡ прозаға күсеүенә ҡарамаҫтан, шиғри оҫкон уның күңелендә ғүмер буйы һүрелмәй. Был әйтелгәндең һис тә шаштырыу түгеллегенә уның парсалары ла дәлил. Йылы лиризм менән һуғарылыуҙары, поэтик ассоциацияға ҡоролоуҙары менән улар, ысынлап та, лирик шиғырҙы хәтерләтә.

Шул уҡ ваҡытта был әҫәрҙәрҙә һүҙ, фекер, аҡыл, хис, көй, оҡшатыу һымаҡ абстракт төшөнсәләр йәнле образ кимәленә еткерелә. Улар, асылда, үҙәк фигура, үҙәк герой сифатында сығыш яһап, парсаларҙы композицион яҡтан ойоштороп, үҙенсәлекле сюжеттар хасил итә. Һөҙөмтәлә был парсалар, бер ҡараһаң, ғибрәтле әкиәт (хикмәт-притча, нәсихәт) менән сиктәш йә романтик пафослы хикәйә кеүек, икенсе ҡарауыңа, поэма һымаҡ ҡабул ителә. Уларға фәлсәфәүи һәм психологик тәрәнлек хас.

Әҙәм балаһына фекер көтмәгәндә килеүсән. Уны мәлендә эләктереп, хәтер төйөнөнә төйнәп ҡуймаһаң, ҡабат «ете ятып бер төшөңә кермәй», уйлап- уйлап та, башыңа килмәй, үкендереүсән. Кеше психологияһындағы бына шул үҙенсәлекте Кирәй Мәргән «Ял иткәндә» тигән парсаһында ғәжәп оҫта тасуирлаған. Фекер кинәттән килә, ә герой уны ҡабул итергә әҙер түгел, яҙып теркәр нәмәһе лә юҡ. Етмәһә, ваҡыты ла уңайһыҙ: үҙе ҡармаҡ һалып ултыра. Балыҡҡа алданып, үҙ артынан башҡаларын эйәртер фекерҙе юғалта, етмәһә, ҡармаҡҡа ҡапҡан балығы ла, әле юғалған фекер кеүек, ҡулынан шыуып төшөп ҡотола. Уҡыусыға үҙенә һығымта яһарға ғына ҡала: тимәк, фекер килгән икән, уны юғалтмау сараһын күреү фарыз!

«Бер һүҙ», «Мин тапҡан йыр», «Оҡшатыу» кеүек парсалары ла «Ял иткәндә» менән ауаздаш. Яҙыусы уларҙың тәүгеһендә, кәрәкле һүҙҙең юғалыуы арҡаһында, фекер тотҡарланыуы, икенсеһендә көйҙөң йыр һүҙҙәренән, йыр һүҙҙәренең көйҙән айырым йәшәй алмауы; өсөнсөһөндә оҡшатыу, сағыштырыуҙарға ла үҙ ваҡытында иғтибарлы булыу мөһим, юҡһа оло юғалтыу кисереүең ихтимал икәнен төшөндөрә.

«Муйыл сәскәһе» парсаһында тәүге мөхәббәте менән табыштырған Димгә килгән лирик герой, ҡыш өҫтө булыуына ҡарамаҫтан, муйыл сәскәһе еҫен тоя. Муйыл сәскәһенең хуш еҫе геройҙың һөйгәне менән муйыл сәскә атҡанда танышыуын да, ул кешегә булған тойғоларының, йылдар үтһә лә, саф ҡалыуын да төшөндөрә.

Кирәй Мәргән парсаларының фәлсәфәүи айышы әле әйтелгәндәрҙән киңерәк тә, тәрәнерәк тә, әлбиттә. Быға дөрөҫлөк хаҡына дөрөҫлөктән ситләшеү – абстракт төшөнсәләрҙе, йәнһеҙ әйберҙәрҙе йәнләндереү алымын ҡулланыу ҙа булыша.

Уларҙы хатта әҙиптең бүтән әҫәрҙәренең эске мәғәнәһенә төшөндөрөүсе асҡыс тип баһаларға ла була. «Тыңламаны» тигән парсала, мәҫәлән, «Машина көткәндә» хикәйәһенең геройы Дәүләт менән осрашабыҙ. Баҡтиһәң, хикәйә геройының, механик ҡушҡан йомошто үтәмәйенсә, машинаһында бер яры һалдырып сығып китеүе – «юл ҡағыҙында» күрһәтелгән 25 маршруттан сығыу ғына булып ҡалмаған, яҙыусы алдан билдәләгән йөрөш-схемаға буй бирмәй, «үҙ аллы» йөрөп ятыуы ла, имеш. Сөнки әле шоферлыҡ танытмаһы алырға ла өлгөрмәгән, шулай ҙа машина йөрөтөргә атлығып торған, беренсе тапҡыр руль артына ултырырға форсаты сыҡҡан үҫмерҙән шунан башҡаны көтөү ҙә ҡыйын. Йәғни, парсанан аңлашылыуынса, хикәйәнең сюжеты геройҙың йөрөш-хәрәкәте, уның характер логикаһы буйынса үҫтерелә.

Кирәй Мәргән парсаларының күптәрендә автор үҙе ижад иткән башҡа әҫәрҙәренең һәм, ғөмүмән, әҙәбиәттең яҙмышы өсөн борсолоу, яҙыусыны тулҡынландырған күренештәрҙең, ул тыуҙырған донъя, әйтергә теләгән фекерҙең уҡыусы тарафынан ҡабул ителеүен ҡайғыртыу тойғоһо менән һуғарылған. «Эҙҙәр» парсаһында үҙе тәүләп эҙ һалған урындан – һуҡмаҡ, унан оло юл барлыҡҡа килеүенә һөйөнөүе менән уртаҡлашҡанда, яҙыусы: «Йылдар үткән һайын, кеше күберәк аяҡ баҫҡан һайын, ул (йәғни үҙе башлап һалған юл. – **Ә. С.**) «минән» алыҫлаша бараса. Ләкин шуныһы ғәжәп: уның алыҫлашыуы «мине» тағы үҙенә яҡынайта», – ти һәм үҙенең фекерен шулай ослап ҡуя: «Әҫәрҙәребеҙ яҙмышы ла шулай түгелме һуң?».

«Мин тапҡан йыр»ҙа иһә яҙыусы тыуҙырған әҫәрҙәр ҙә «кеше күңеленә йыр булып инһәләр ине» тигән теләк белдерелә. «Йөк аты», «Мин һәм легенда» парсалары ла «тел төбө» менән шуны ҡабатлай. Кирәй Мәргәндең хикәйәләре кеүек үк, парсаларына ла новелла башланғысы хас. Ҡарамаҡҡа, жанр талабына ярашлы рәүештә, улар бик тә йыйнаҡ. Әммә «һыйҙырышлылар». Фекер йәһәтенән. Быға автор бер үк художестволы деталдең төрлө кеше тарафынан төрлөсә ҡабул ителеү, бер үк күренештең һәр кемдә уның үҙенә генә хас ассоциация тыуҙырыу ихтималын иҫәпкә ала белеүе менән өлгәшә.

Иң башта телгә алынған «Ял иткәндә» парсаһына йәнә әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Әйләнеп ҡайтайыҡ та, мәлендә теркәлмәүе арҡаһында, фекерҙең елгә осоуы менән, ҡармаҡҡа ҡапҡас иткәс, балыҡтың ҡулдан шыуып төшөп, ҡасып ҡотолоуын яңынан күҙ алдына килтерәйек. Бәй, тоттом тигәндә генә, балыҡтың ҡулдан шыуып төшөүе – фекерҙең юҡҡа сығыуына ни тиклем оҡшаш.

Бындай парсалар менән танышҡас, «Әҙәбиәт теорияһы» ла тылҡып еткерә алмаҫлыҡ мәғлүмәттәр алыуыңды тойоп, тағы бер ҡыуаныс кисерәһең. Мин бында «Ике тауыш», «Бер һүҙ», «Ял иткәндә», «Оҡшатыу», «Тыңламаны», «Ҡараламаларым» ише парсаларҙы күҙ уңында тотам. Уларҙа хис һәм аҡыл берҙәмлеге, кәрәкле һүҙ һәм фекерҙе үҙ ваҡытында табыу, урынын дөрөҫ билдәләү; тормошто, тәбиғәтте образлаштыра белеү, характер логикаһы һәм автор ихтыяры; ҡаралама өҫтөндә эшләүҙең әһәмиәте хаҡында фәһем алырлыҡ фекерҙәр бар. Улар яҙыусының ижад лабораторияһына күҙ һалырға, матурлыҡ закондарын тәрәнерәк аңларға булыша. Тимәк, Кирәй Мәргән, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Ғайса Хөсәйенов ише әҙиптәрҙең ижад хаҡындағы парсалары менән бергә «Ҡыҙыҡлы әҙәбиәт ғилеме» кеүегерәк бер йыйынтыҡ төҙөгәндә, әҙәбиәт һөйөүселәрҙең ҡыуанысы артыр ғына ине.

## Халыҡ ижады рухын үҙләштереп, эпик киңлектәргә сыҡҡанда

50-се йылдар башында башҡорт әҙәбиәтендә роман жанры, Ғәлимов Сәләмсә әйткәндә, «яңынан йәшәреп, яңынан тыуҙы». Сәғит Агиштың «Нигеҙ»е, Әкрәм Вәлиҙең «Беренсе аҙымдар»ы, Әнүәр Бикчәнтәевтың «Ҡарасәй юлы», Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ»ы... Шул хисапта Кирәй Мәргәндең «Нарыштау итәгендә» романы ла бар ине.

Башҡортостан менән Мәскәү дәүләтенең берләшеүенә 400 йыл тулған осорҙа иһә әҙип киң планлы эпик әҫәр яҙыуға рухланды. Дүрт китаптан торған «Бөркөт ҡанаты» романы (Өфө, 1981. I, II китаптар; 1985. III–IV китаптар) бына шулай тыуа. Уның һуңғы корректураһы нәшриәттән килгәндә, үкенескә ҡаршы, авторы, ҡаты ауырып, Тихорецкиҙағы хәстәханала ята ине. Уның хәлен яҡшы белгәнгә, үҙем кураторлыҡ иткән студенттар төркөмө (Рәйес Түләков, Юлай Мәҡсүтов, Минзәлә Байышевалар) менән шул корректураны уҡыуға өмә ойоштorҙоҡ. Әхнәф Нури улы йәштәрҙең тырышып-тырышып уҡыуына, төҙәтмәләр индереүенә һоҡланып, ара-тирә студенттарҙа тыуған һорауҙарға яуап биргеләп ҡәнәғәт төҫ менән ултырғаны әле лә күҙ алдында. Ә һорауҙар тыуырлығы бар ине. Сөнки студенттар хәреф хаталарын ғына тикшереп ултырманы, тасуирланған ваҡиғаларҙың осо осҡа ялғанышы менән дә ҡыҙыҡһынды.

Әгәр «Нарыштау» романы ул әҫәр яҙылған дәүергә хас «конфликтһыҙлыҡ» сиренән һаҡлана алмаһа, быныһында конфликт, шөкөр, бар. Бар ғына түгел, анығ, шул уҡ ваҡытта сюжетты ҡатмарлаштырмалы тотош бер системаны барлыҡҡа килтерә. Бей менән ырыу, ырыу менән ара, ырыуҙар менән хандар, Ҡазан ханлығы менән Рус дәүләте араһындағы ҡаршылыҡтарҙы ла, айырым шәхестәрҙең үҙ-ара бәрелештәрен дә һыйҙыра алған был романдың сюжеты. Шуларға бер кем тарафынан да яҙылмаған йола хоҡуғы ҡанундары, төрлө хөсөттәр, ырыуҙар яҙмышындағы һәм Шәғәлеләрҙең ғаиләләре яҙмышындағы көтөлмәгән боролоштар өҫтәлә. Дөрөҫөрәге, һуңғылары менән тәүгеләре бер-береһенән айырылғыһыҙ: һуңғылары – тәүгеләренең ҡатмарлылығын тәрәнерәк аңларға ла булыша.

Шәғәле юғалған кәләше артынан сығып китеп, күп мажараларҙан һуң, ирекһеҙҙән Ҡазан ханының рустарға яһаған Муром походында ҡатнаша. Әсиргә эләгеп, түрә балаһы булыуы арҡаһында, кем менән бит әле, яуыз Иван батша менән осраша. Унан башҡорт бейҙәренә тәғәйенләп: «Барча хәлайыҡлар, барча ыруғ вә ҡәбиләләр, тыңлаңызлар вә аңлаңызлар! Бән Мәскәүдән бөйөк кенәз вә батша Иван түртунчи Васильевич әғзәм хәзрәтләри сезләргә әйтүб әшкәртәмен...»

тип, Рус дәүләте менән иректе берләшкән сүрәттә, Башҡорт иленең ирке үҙ ҡулында буласағын вәғәҙә иткән «Хат-саҡырыунамә» алып ҡайта. Шуны ырыу башлыҡтарына тарата башлауы элекке конфликттар системаһында үҙгәреш тыуасағын вәғәҙә итә. Ә инде башҡорт егете Шәғәленең рус ҡыҙы Мәрйәм-Марияны иш итеүе башҡорттар менән рустарҙың туғанлашасағына ишара һымаҡ аңлашыла.

«Бөркөт ҡанаты»н яҙғанда, Кирәй Мәргәнгә һүрәтләнәсәк осорҙо, тарихи факттарҙы дөрөҫ биреү өсөн иҫәпһеҙ документтар, этнографик сығанаҡтар аҡтара-аҡтара быуаттар аръяғында ҡалған дәүерҙәргә тәрән үтеп инмәле сәйәхәт яһарға тура килгән.

Мәғлүм булыуынса, «Бөркөт ҡанаты» Кирәй Мәргәндең аҡҡош йыры булды. Ул – әҙиптең йылдарға һуҙылған көсөргәнешле ижади эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһе генә түгел, бөтә ижади тәжрибәһен дөйөмләштергән хеҙмәте лә.

Комсомол секретары булып алғас, Әхмәҙи тәжрибәле лекторҙарға оҡшарға тырышып докладтар уҡырға әүәҫләнә, хатта белер-белмәҫ көйө русса һөйләргә тырыша, тыңдаштәренән үҙен юғары тота («Секретарь»), Дәүләт тә ғүмерендә тәүге тапҡыр руль артына ултырып, автоинспекцияға эләгеп, машинаһыҙ ҡалыуына ҡарамаҫтан, йәш ҡыҙ алдында тәжрибәле шоферҙарса фәстерә («Машина көткәндә»). Бына шулай геройҙың тыштан әллә кем булып күренергә тырышыуы, ләкин ысын булмышының ундай кимәлгә етеүенә мөмкинлек бирмәүе йәки «Тәүге һөйөү» хикәйәһендәге кеүек геройҙың үҙ фантазияһын үҙе ысынға алып эш ҡылырға әҙер тороуы (һөйгән ҡыҙының хатын ике арала почтальон хеҙмәтен атҡарыусы Шәйхи ҡулы менән яҙылған хат тип уйлап, уларҙан үс алырға маташыуы) уны көлкөгә ҡалдыра.

«Уңған килен» хикәйәһендә бер персонаждан икенсеһе тураһында ни уйлағанды әйттереп, финалда унан шул һүҙ эйәһенән бөтөнләй киреһе булған һығымта яһатыу алымын оҫта файҙаланған. Миңлеғәле бабай килененең күп бала табыуын ек күреп, ҡыры сыҡһа – сыҡмаһа ла: «Әйттем мин уға (улы Хужағәлегә. – **Ә. С.**), әйттем. Шул Мәхүптәр нәҫеленә йоғонма, тинем. Уның әсәһе лә баланы күп тапҡайны, тинем. Юҡ, тыңламаны. Ана үҙенә үпкәләһен инде!..» – тип ҡабатлай. Күп балалы әсәләргә пособие биреү тураһында закон сыҡҡас иһә: «Әйткәйнем мин уға, тәүҙә үк, шуға өйлән дә ҡуй, тигәйнем. Бына күрәһегеҙ, хур булманы бит. Киленде әйтәм, бик шәпкә сыҡты!» – ти. «Һалдат хаты» хикәйәһендә был алымды яҙыусы йәнә камиллаштыра төштө. Унда персонаждар сиселештә бер-береһе хаҡында тәүҙә уйлаған уй-ҡараштарының киреһен раҫлай. Мөнирә апайға фатирға төшкән тәрбиәсе ҡыҙ Фәнүзә уның төпсөнөүҙәренән сығып: «Мыжығыраҡ, ахырыһы, ҡыйын була башлаһа, икенсе кешегә күсмәй тура килмәҫ», – тип уйлаһа, фатир хужаһы уның үҙе тураһында «Бешмәгәнерәк, ахырыһы, бик әрпеш күренә башлаһа, тотоп булмаҫ» тигән фекергә килә. Мөнирә апай шул фекерендә аҙаҡҡа тиклем ҡала. Улы армиянан ҡайтыр мәл еткәс, ҡыҙҙы өйөнән сығара. Улы шул Фәнүзәне кәләшлеккә алғас: «Үҙем димләп алдырҙым», – тип кенә ебәрә, ә Фәнүзә: «Улын ныҡлап белмәһәм дә, ҡәйнәмә була килдем», – ти.

Яҙыусының парсалары ла ирония менән һуғарылған. Улар, ғәҙәттә, мин исеменән бәйән ителеүгә ҡорола. Ошо алым юмор йә сатираның адресаты әҙип үҙе икән, тип уйларға мөмкинлек бирә, әммә әҫәрҙе уҡып сыҡҡас, үҙеңдең дә шул юмор объектына әйләнеүеңде һиҙмәй ҙә ҡалаһың.

Кирәй Мәргәндең әҫәрҙәренең юмор йә сатира башланғыслы комик пафослылығы халҡыбыҙ ижадынан килә. Драматургия өлкәһендә көс һынау ниәтенән яҙылған «Минең ғаиләм» пьесаһында ул көләмәстәргә, юмористик тормош-көнкүреш әкиәттәренә хас аймылыштырыу алымын ҡуллана: улын фронтҡа оҙатырға әҙерләнгән Ярулла ҡартҡа, көтмәгәндә, килене менән хушлашырға тура килә; өй йыйыштырырға килгән Ғәйшәнең тиҙҙән сәхнәгә сығарыласаҡ спектаклдә үҙе башҡарасаҡ роль талап иткән иркәләү һүҙҙәрен эш араһында ҡабатлауын Рәйсә үҙенең иренә төбәп әйтелгән һүҙҙәр тип белә. Әммә, төп пафосы, идеяһы менән комик башланғыстың ярашып етмәүе арҡаһында, был пьесалағы юмор аҡланманы: ул көлдөрөү өсөн көлдөрөүгә генә хеҙмәт итте. Уның ҡарауы комик башланғыс ни тиклем ныҡ ҡуйыртылмаһын, «Шомбай» комедияһында ул тулыһынса үҙ урынында булып сыҡты. Бында халыҡ ижадында бошонмаҫ оптимизм идеалын кәүҙәләндереүсе хәйләкәр егет социаль ғәҙелһеҙлекте фашлаусы булып сығыш яһай. Уның көрәшеү ҡоралы – көлөү. Әҫәрҙең тотошлайы менән комик пафослы булыуы шунан килә лә инде.

Кирәй Мәргән комиклыҡ алымдарын бер осраҡта айырым эпизодтың, персонаждың (кире генә түгел, ыңғайының да) уңайһыҙ яғын асыу өсөн генә, мәҫәлән, хикәйәләрендә, парсаларында, комедияларында туплаған комик пафос тыуҙырыу тәжрибәһенә Кирәй Мәргән «Бөркөт ҡанаты» романында тағы ла мөрәжәғәт итә. Аҡназар хан менән Йәдкәр баҫҡаҡ ханлыҡ именлеген ҡайғыртҡан кешеләй булып, тыныс ҡына һөйләшһәләр ҙә, эстән бер-береһенең тиҙерәк дөмөгөүен теләйҙәр, шул теләкте бойомға ашырыу өсөн, йәшерен саралар эҙләйҙәр.

Романдағы ҡайһы бер персонаждар баштан-аяҡ бары тик комик планда ғына һынландырыла. Улар араһында уҡымышлының-уҡымышлыһы булып күренергә тырышып, бар сараларҙан да баш тартмаҫ килмешәк Әпҡәдир мулла; үҙ самаһын үҙе белмәй, көслөнән-көслө ханмын, тип белеүсе Сафагәрәй хан, олораҡ ил башы булыуға ирешеү хаҡында хыялланыусы Шаҡман түрә; ябай халыҡтың һәр төрлө хөрәфәттәргә инаныуын мал йыйыуға оҫта файҙаланыусы күрәҙәсе ҡарсыҡ образы үҙҙәренә бер башҡа айырылып тора. Теләккә мөмкинлектең тура килмәүе арҡаһында, ундай персонаждар һәр саҡ уңышһыҙлыҡҡа юлыға. Шаҡман түрә, мәҫәлән, үҙ маҡсатына ирешеү өсөн ырыуын ныҒытырға тырыша. Һеңрән ырыуынан килен әйттерә: йәнәһе, ҡәрҙәшлек мөнәсәбәтенә инеү иҫәбенә берләшеүгә нигеҙ һаласаҡ. Әммә эш ул тигәнсә килеп сыҡмай. Киреһенсә, Һеңрән ырыуы менән ҡан-ҡәрҙәшлек мөнәсәбәтенә индем тигәндә генә, уны уңышһыҙлыҡ артынан уңышһыҙлыҡ эҙәрләй башлай: малы-ние менән килене юғала, уны эҙләргә киткән улы, Шәғәлеһе, ғәйеп була; йәнәй ырыуына барымта яһаһа, уныһы, көнәлгәре күсеп китеп, һемәйтә; баҫҡаҡты үлтергән Биктимер атлы егетте үҙенә һырындырып, аҙаҡ түрә алдында яҡшатланырға теләп, уны ҡамсылайым тигәнсә, үлтереүсене эйәләтеүе фаш ителә.

Роман, ғөмүмән, «үтәнән-үтә» күренеп торған фольклор башланғысының муллығы менән дә айырылып тора. Унда риүәйәттәр ҙә, инанмыштар ҙа (хөрәфәти хикәйәләр ҙә), йола поэзияһы өлгөләре лә, йыр, ҡобайыр, мәҡәл, әйтемдәр ҙә осрай. Уларҙың берәүҙәре сюжет хасил итешә, икенселәре милли этнографик колоритты күтәрә, осор төшөнсәһен көсәйтеүгә булыша, өсөнсөләре персонаждарҙың зирәклек кимәлен асыуға ярҙам итә. Бына беренсе китаптың ун беренсе бүлегенә генә иғтибар итәйек, Һеңрән иле Бүләкән түрәнең ҡыҙы Миңлебикәне Тамъян ырыуына, Шаҡман түрәнең улы Шәғәле йортона, оҙатырға әҙерләнә. Әле генә Йәнәй ырыуының яуы килеп, туйҙы өҙөп китһә лә, шул арҡала туй

тарҡала төшһә лә, ҡыҙ оҙатыу йолаһы еренә еткереп башҡарыла. Миңлебикә, әсәһенең, «кейәүең алдында кейемеңде йыш алыштырма, күңеле алмашына тип уйлар», тигәнен иҫтә тотоп, Шәғәлеһе менән тәүге осрашҡан саҡтағы кейемен, сәсмау-сәсҡаптарын кейә, ҡушъяулығын ябына. Йола буйынса, бындай саҡта еңгәләре ярҙамлашырға тейеш. Күсәһе ҡыҙ, уларҙы көтөп тормаҫтан, үҙе кейенә. Яҙыусы шуның менән ҡыҙҙың Тамъян егетенә теләп барыуына бер ишаралай. Артабан уның башҡалар сеңләү һүҙҙәрен әйтеп һыктағанда иламауын тасуирлап, был фекерҙе көсәйтә төшә.

Романдың артабанғы бүлектәренән ваҡиғаларҙың XVI быуаттың тәүге яртыһында барыуы мәғлүм була. Шуға ҡарамаҫтан, әле башҡорттарҙа тәңрелек диненә инаныу көслө булған, тимәксе яҙыусы. Үҙен башҡорт тип йөрөтәсәк ырыуҙар сүллектә аҙашҡан саҡта, бүре артынан килеп, Урал тигән илде табыуы тураһындағы мифологик легендалағы һымаҡ, Шаҡман түрәнең, саңҡылдаған бөркөт осҡан яҡҡа юл алып, яңы ергә килеп төбәкләнеүе лә мәжүсилек, тәңрелек идеяһынан айырылғыһыҙ. Ошо оло түрә вафат булғас, исламға тиклемге йола буйынса, мәйетте кейендереп, эргәһенә уҡ-һаҙаҡ, теге донъяла менер өсөн ат һалыу ҙа шул идеяны көсәйтә. Көсәйтеүен көсәйтә, әммә шуның менән ниндәй маҡсат ҡуйған яҙыусы? Әлбиттә, ырыуҙарҙың, Ислам йөҙөндә булһа ла, бер идеяға буйһонмауына, тарҡаулығына, шул уҡ ваҡытта буйһонмаусанлығына ишара яһау өсөндөр. Теге йә был ырыу хаҡында һүҙ алып барғанда, Кирәй Мәргән-әҙип үҙ урынын фольклор белгесе Кирәй Мәргәнгә тапшырғандай була. «Аманат» тип исемләнгән икенсе китапта Мең ҡәүеме тормошон тасуирлаған бүлектәр был йәһәттән айырыуса иғтибарҙы йәлеп итә.

Йәшерен-батырыны түгел, хәҙерге күп кенә тарихи романдарыбыҙҙа авторҙар ваҡиға, тарих артынан ҡыуып, шул ваҡиға, тарихты ижад итеүсенең, йәғни халыҡтың кемлеген – этник йөҙөн асыусы фольклор-этнографик күренештәрҙе иғтибарҙан ситтә ҡалдырыусан. Ә бит быуаттар ҡатламын ҡатлағанда, бороная барған һайын халыҡ аңында фольклорса фекерләү өҫтөнлөк ала барғаны бәхәс уятырға тейеш түгел. Кирәй Мәргән, киреһенсә, бәлки был моментҡа, махсус әҙерлекле белгес буларак, урыны менән үтә иғтибар итеп ебәрәлер, әммә беҙҙең өсөн уның шул хәкикәткә яҡшы төшөнөүе ҡиммәт. Автор объектив фекер йөрөтөргә күнеккән ғалим бөтмөрлөгө менән бөгөн инде йәнле репертуарҙа осрамаған йола күренештәрен дә төптән белеп тасуирлаған. «Ҡуҙғалаҡ ашы» байрамының үткәрелешен, йә «Мең йыйыны»ның тасуирланышы хәҙерге этнограф һәм фольклорсылар экспедицияларҙа осратмаҫ табыш тип ҡабул итмәле, ә үҙешмәкәр фольклор коллективтары өсөн әҙер сценарий итеп файҙаланмалы.

«Бөркөт ҡанаты» романында ырым, күрәҙәләү, кинәйәләү, афоризмдарҙы урынлы файҙаланыу иҫәбенә автор ваҡиғалар айышын тел төбө менән алдан иҫкәртеүгә өлгәшә. Кейәүгә барыр алдынан Миңлебикә төшөндә тәүҙә Шәғәле менән тотоноша алмай аҙаплана, тотоношҡас иһә, «бергә өйөрөлөп әйләнә башлайҙар». Автор шулай уларҙың айырылышыуын алдан иҫкәртә. Сөнки төштә күргәнең өндә, ғәҙәттә, киреһенсә юрала: илау – ҡыуаныс, ҡыуаныу – ҡайғы һ. б. Йәнәйҙәрҙең һөжүме арҡаһында туйҙың өҙөлә яҙыуы (әйткәндәй, был эпизод «Һуңғы һартай» эпосында Ялыҡ бейҙең өлкән улының туйы өҙөлөүен хәтерләтә) шомдо арттыра төшә. Сөнки Шаҡман түрә әйтмешләй, «Туйҙың алды нисек булһа, арты шулай булыр» тигән халыҡ. Етмәһә, сеңләү сеңләгән еңгәләрҙең тәңреләргә анығын әйтмәй, ике төрлө аңлашылмалы «яңы ергә ҡабул итеп

ал үҙен» тигән теләк менән ялбарыуҙары ла сюжеттың Миңлебикәгә бәйле өлөшөнөң драматик сиселешенә ишаралап ҡуйғандай.

Мәҡәл һәм әйтемдәр – әҙ әйтеп, күпте аңлатыу сараһы. Нәҡ ошо үҙенсәлеккә эйә булғаны өсөн, романда улар мул ҡулланылған. Мәкәлдәр шулай уҡ күренешкә, хәлгә халыҡ исеменән баһа вазифаһын да атҡара әҫәрҙә:

*«Бөлдөргән дә – баҫҡаҡ,*
*Үлтергән дә баҫҡаҡ»;*
*«Хан өлөшө тейә,*
*Баҫҡаҡ өлөшө елкәгә менә»;*
*«Ауырыуҙан ҡотолоп була,*
*Яһаҡтан – юҡ»;*
*«Ҡапыл һөжүм иткән баҫҡынсы*
*Аңғармаҫтан бөлдөрә,*
*Ә баҫҡаҡ килһә, күҙ алдында*
*Илдең аҫтын-өҫкә килтерә»;*
*«Табыш көттөрә кешене,*
*Бәхет көттөрә, баҫҡаҡ көттөрмәй»,*
*«Хан янына хансаһы кәрәк»,*
*«Хандың алаптай ауыҙын ябыр өсөн,*
*Мал еткереп булмаҫ,*
*Баҫкаҡтың ҡаптай ҡорһаѓын тултырыу өсөн,*
*Аш еткереп булмаҫ»;*
*«Түрә хөкөмө – үлем яѓында түгел,*
*Көслө яѓында».*

Романда ырыуҙар тарҡаулығын шелтәләү, уларҙы берҙәмлеккә саҡырыу идеяһына иң мөһим урын бирелгән. Ошо идеяны ла автор йыш ҡына мәкәлдәр аша еткерә:

*«Ишле ил тешле була,*
*Тешле ил көслө була»;*
*«Туҙѓан оя уҙѓын ҡарѓаѓа ем була,*
*Бөлгән ил аҙѓын илбаҫар өсөн ризыҡ була»;*
*«Айырылѓан туҙыр,*
*Берләшкән ил уҙыр» һ. б.*

«Заманға заман уралған», – ти башҡорт ҡобайыры. Әҫәрҙәре Кирәй Мәргәндең заман менән заманды, быуын менән быуынды, халыҡ менән халыҡты тоташтырыусы, «Егеттәр» очеркындағы һүҙҙәрен файҙаланыңкырап әйткәндә, «күҙгә күренмәй торған еп»тәрҙе оҫта таба белеүсе булыуы тураһында һөйләй. Уның ошо һәләтен күренекле үзбәк яҙыусыһы Әсҡәт Мөхтәр шулай тип билдәләгәне булыр: «Ҡайһы саҡта миңә башҡорт яҙыусыһының бөгөнгө әҫәрҙәренең геройҙары менән иртәктәр дәүере геройҙары араһында күҙгә салынып бармай торған оҡшашлыҡ бар кеүек тойола; улар минең яҡташтарымды – Үзбәкстан хеҙмәтсәндәрен дә хәтерләтә. Уларҙың барыһын да һәр саҡ һәр милләттә лә кешенең иң оло байлығы иҫәпләнер мәңгелек һәм гүҙәл сифаттар – халҡынды, иректе, Тыуған илде йәнең-тәнең менән һөйөү, юғары патриотизм туғанлаштыра»[3]. «Бөркөт ҡанаты» менән Кирәй Мәргән үзбәк яҙыусыһының хаҡлы

[3]*Литературная газета. — 1972. — 19. 07. — С. 6.*

булыуын йәнә бер иҫбатланы. Ә был иһә уның әҫәрҙәренең халыҡсанлығы тураһында һөйләй. Уға ирешеүҙә халыҡ ижадынан килгән башланғыстарҙың да роле ҙур.

Фольклорҙы файҙаланыу менән файҙаланыу араһында ла айырма бар, әлбиттә. Ошо хаҡта уйланып, В. Дементьев: «Бөтә хикмәт, төҫһөҙ стилизаторлыҡ менән мауыҡмайынса, баштан-аяҡ үткәндәргә инеп юғалмайынса, нисек итеп халыҡ ижады традицияларын тыуған халҡыңдың хәҙерге йәшәйешенең мәғәнәһенә төшөнөү менән бәйләүҙә, нисек итеп фольклорҙың хәрефен түгел, ә рухын аңлауҙа»[4],– тип яҙғайны. Алда әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, Кирәй Мәргәндең бөтә ижадын фольклорҙың ана шул рухын тәрәндән аңлап эш итеү өлгөһө тип баһаланырлыҡ.

## Оло әҙип

Оло әҙип, ғалим, педагог, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны һәм Кеше хаҡында бер мәҡәләлә барыһын да әйтеп бөтөрөү мөмкин түгел. Ундай маҡсат ҡуйылманы ла. Ләкин һүҙҙе йомғаҡлар алдынан ғүмере буйы башҡорт ғалимдарының хөрмәтле дуҫы, Кирәй Мәргәндең фекерҙәше булып ҡалған, башҡорттоң Ғәйнә ырыуынан сыҡҡан күренекле татар ғалимы Хәтип Усман әйткән бер һүҙгә һылтанмай булдыра алмайым. Ул бер саҡ шулай тип яҙғайны: «Кирәй Мәргән – хәҙерге башҡорт халыҡ ижадын өйрәнеүсе фәндең иң оло вәкиле. Уның был өлкәләге эшмәкәрлеге төп өс өлөштән тора: халыҡ ижадын илдең төрлө яҡтарына махсус йөрөп йыйыу, йыйғанды тәртипкә һалып, дөрөҫләп баҫтырып сығарыу һәм, ниһайәт, был хазинаны фәнни яҡтан тикшереү, анализлау. Айырым кеше үҙенең бөтә ғүмерен, бөтә көсөн ошо эш өлкәһенең береһенә генә бағышлағанда ла, ҙур эш эшләгән итеп һанала, хөрмәт ҡаҙана. Кирәй Мәргән иһә быларҙың һәр өсөһөндә лә тәрән эҙ ҡалдырған ғалим»[5] . Татар ғалимы бының менән Кирәй Мәргәндең башҡорт әҙәбиәтен үҫтереү менән бергә мөһим ғилми эш алып барыуына баҫым яһай. Әйтелгәндәргә шуны ла өҫтәргә кәрәк. Ул эштәрҙең бөтәһе лә уҡытыусы-педагог, йәмәғәт эшмәкәрлеге менән бергә алып барыла. Хеҙмәт юлын төпкөлдәге ауыл уҡытыусыһы сифатында башлаған Кирәй Мәргән байтаҡ йылдар Октябрҙең 40 йыллығы исемендәге Башҡорт дәүләт университеты профессоры булды, башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһын етәкләне. Лекциялар уҡыны, махсус курстар, ғәмәли дәрестәр алып барҙы. «Дружба народов», «Ағиҙел» журналдары мөхәрририәте, СССР Министрҙар Советы янындағы Юғары аттестация комиссияһы (ВАК) ағзаһы булды. Ун һигеҙ томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» туплама һы мөхәрририәтенең ағзаһы, бер нисә томдың яуаплы мөхәррире бурысын да күндәм атҡарҙы. БДУ-ла, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында филология фәндәре буйынса кандидатлыҡ диссертациялары яҡлана торған ғилми советтар эшендә лә ҡатнашты. Туранан-тура үҙе лә алмаш әҙерләү менән шөғөлләнде. Тәүге аспиранты Салауат Галин башлап шул ғилми дәрәжәгә өлгәшеп, остазын ҡыуандырғайны, ҡул арты еңел булды. Күп тә тормай, Фәнүзә Нәҙершина, бән фәҡирегеҙ, Риф Мөхәмәтйәнов, Миҙхәт Мәмбәтов, Сәлимйән Ғүмәров иреште ул дәрәжәгә. Шуларҙың тәүге өсәүһенең фән докторы булып китеүе лә күп нәмә тураһында һөйләй. Тимәк, кандидатлыҡ диссертацияһын әҙерләү дәүерендә ғилми етәксебеҙ артабанғы эҙләнеүҙәребеҙгә

---

[4]Литературная газета. — 1982. — 17. 03. — С. 3.
[5]Госман Х. Өлкән галим һәм язычы// Социалистик Татарстан. — 1972, 8 июль.

уңдырышлы ойотҡо һалған. Арабыҙҙан бик иртә киткән уҡытыусым Марат Минһажетдинов докторлыҡ диссертацияһын ғәмәлдә тамамлаған ине. Уның был мөһим эшен атҡарыуҙа ла профессор Кирәй Мәргәндең ҡыҫылышы бар. Үкенескә ҡаршы, эшен тамамлар саҡта ғына Марат ағайыбыҙ баҡый донъяға күсеп, беҙҙе ауыр ҡайғыға тарытты... Юҡһа, хәҙер: «Фольклорыбыҙ буйынса ике академигыбыҙ бар беҙҙең!» – тип маҡтана алыр инек. Ике, тинем. Сөнки, әгәр ҙә мәгәр Башҡортостан Фәндәр академияһы асылғанды күреү бәхетенә ирешкән булһалар, иманым камил, ике остазымды ла, аяҡ-ҡулдарын тигеҙмәй, академик итерҙәр ине.

...«Йөк аты тарта донъя ауырлығын, йөк аты йөрөтә юлсыны. Тормошта ла, әҙәбиәттә лә йөк аттары күберәк булһын ине!» Шулай тамамлана яҙыусының «Йөк аты» тигән парсаһы. Шул һүҙҙәрҙе әҙ генә үҙгәртә биреп: «Тормошта ла, әҙәбиәттә лә, фәндә лә Кирәй Мәргән кеүек йөк аттары күберәк булһа ине!» тип әйтке килә. Әйтке килә, әммә оло үкенес тойғоһо менән. Сөнки йөк аттары ҡәҙерһеҙ була. Кирәй Мәргән үҙе яҙып алған «Аҡһаҡ ҡола» эпосындағы юлдарҙы бер ни тиклем үҙгәртеп әйткәндә:

*Яҙ ҙа уны егәләр,*
*Көҙ ҙә уны егәләр,*
*Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләйҙәр,*
*Ҡабырғаһын һанайҙар...*

Ысынлап та, «Аҡһаҡ ҡола»лағы ат ҡәҙерен белмәгән бай улы һымаҡ, юғарылағы түрәләр Кирәй Мәргәндең ҡәҙерен белмәне, ҡаҡҡылаһа ҡаҡҡыланы. Ә остазым иһә ундайҙар алдында бил, баш эймәне, халыҡ таныған дан, шөһрәтенең рәсмиләштерелеүен һорап юхаланманы. Был тәңгәлдә лә ул «атанан күргән уҡ юнған» тигән мәҡәлгә, атаһының, Нурмөхәмәт сәсән бин Арыҫлан әл-Йомраниҙың, йәшәү принцибына тоғро ҡалды. Ә ул принципты мәшһүр сәсән, Кирәй Мәргән тигән ат алыр улына васыят иткәндәй, шулай тип кенә төшөндөргән:

*Беҙ, Йомрандар*[6]*, ниңә йомран?*
*Шуны беләһем килә.*
*Исемгә бит төрлө хайуан*
*Төрлө йәнлектәр килә:*
*Айыу ҙа бар донъяла,*
*Бүре лә бар донъяла,*
*Донъяһын хәйләгә ҡорған*
*Төлкө лә бар донъяла...*
*Айыу була алмағанбыҙ,*
*Бүре була алмағанбыҙ,*
*Хәйлә-мәкер нәҫелдә юҡ –*
*Төлкө була алмағанбыҙ.*

**Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ.**

[6]*Йомран — халкыбыҙға Кирәйҙәрҙе бүләк иткән ырыу атамаһы.*

# Повестар оҫтаһы

*(Рәйес Низамовтың тыуыуына 80 йыл)*



Уҙған быуаттың 60-70-се йылдарында әҙәбиәт һөйөүселәрҙе уҡымлы повестары менән ҡыуандырған Рәис Ғилметдин улы Низамов 1932 йылдың 1 июлендә Әлшәй районы Ташлы ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған.

Үҙ ауылында ете йыллыҡ мәктәпте, унан һуң Өфөләге Йылға флоты-һөнәрселек уҡыу йортон, Башҡорт интернат-мәктәбен тамамлай. Өфө – Ҡазан пароходствоһында машинист ярҙамсыһы булып эшләп алғас, Мәскәүҙәге А. М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында уҡый (1952 – 1957). Өфөгә ҡайтҡас, «Совет Башҡортостаны» гәзитенең үҙ хәбәрсеһе итеп тәғәйенләнә. 1966 йылдан – «Пионер» журналында бүлек мөдире, 1974 – 1978 йылдарҙа – «Ағиҙел»дә баш мөхәррир. Яуаплы вазифалар менән бер ҡатарҙан, әүҙем ижад итә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һәләтле прозаик иллеһен дә тултырып өлгөрмәйенсә баҡыйлыҡҡа күсте.

Әҙиптең «Һалдат улы» (1959) тигән тәүге повесы Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы башҡорт ауылы тормошон һүрәтләй. Ололар менән йәнәш үҫмерҙәр ҙә тылдағы бар ауырлыҡтарҙы күтәрә. «Мәрйәм» исемле икенсе күләмле әҫәре алтмышынсы йылдарҙағы колхозсы ғаиләһендәге ҡатмарлы мөнәсәбәттәрҙе сағылдыра. Бында авторҙың тел-стиль, сюжет ҡороу йәһәтенән камиллаша барыуы күҙәтелә. «Ят кешеләр» (1967), «Кейәү» (1968), «Атай эҙенән» (1980) повестарында ул тормошҡа художник булараҡ тағы ла тәрәнерәк үтеп инде.

Рәис Низамов әҫәрҙәре хикәйәләү тығыҙлығы, сюжетты мауыҡтырғыс ҡора белеү оҫталығы, теленең һығылмалылығы менән айырылып тора. Ул айырыуса башҡорт повесының нығынып, артабан үҫешенә һиҙелерлек өлөш индерҙе. Автор ваҡиғалар, характер логикаһын, кеше психологияһын һиҙгер тойғанға йәнле, иҫтә ҡалырлыҡ образдар тыуҙыра алды. Уның геройҙары хәҡиҡәт һәм ғәҙеллек, йәшәү мәғәнәһе, кешенең тормоштағы тәғәйенләнеше тураһында борсолоп уйланыуҙары, эҙләнеүҙәре менән бөгөнгө уҡыусыға ла бик яҡын.

**Таһир ҒӘБИТОВ.**

# ҒҮМЕР ШАҢДАҒЫ

*(Динә Талхинаның тыуыуына 60 йыл)*



Башҡортостан «Китап» нәшриәтенә эшкә килгәс, шағирә, балалар әҙәбиәте бүлеген етәкләгән Динә Азат ҡыҙы Талхина хаҡында хеҙмәттәштәремдең, авторҙарҙың шул хәтлем ихтирамлап иҫкә алыуын, уға рәхмәтле булыуҙарын ишетә, күрә йөрөнөм.

Балалар китабы ниндәй, нисек булырға тейеш? Темаһы, идеяһы, төҙөлөшө, биҙәлеше – барыһы ла алдан күҙаллана, Динә апайҙың һаҡ, һиҙгер күңеле аша үтә, иң мөһиме, авторға ҡанат ҡуйыла. «Һин булдыра алаһың уны, һинең ҡулыңдан килә торған эш», – тип ышандыра торған ҡеүәгә эйә ине бит ул Динә апай. Балалар әҙәбиәте бүлеге мөдире булып эшләгән осорҙа ул үҙен талапсан һәм хәстәрлекле мөхәррир итеп танытты. Ошо бүлекте ойоштороуҙа, уның эшен яйға һалыуҙа айырыуса тырышлыҡ күрһәтте.

Уны белә, исемен ишетә, таный, аралаша башлаған ваҡытта Динә апай, юҡтан ғына имгәнеп ҡуйып, дауахананан һуң өйҙә дауалана ине. Күрешкәндә йылы һүҙ әйтергә, ижад хаҡында һөйләшергә, күңелде үҫтереп ебәрергә мөмкинлек һәм ваҡыт таба ине шунда ла. Уның «Йөрәгемдә йырҙар йөрөтәм» йыйынтығының мөхәррире лә булыу яҙҙы миңә. Был 1995 йылда «Аҡ ҡауырһын» йәштәр ижады сыҡҡан йыйынтыҡтан һуң баҫылған айырым китабы ине шағирәнең.

1992 йылда Башҡортостан Яҙыусылар союзына ағзалыҡҡа ҡабул ителгәндә балалар яҙыусыһы булып танылған Динә Талхинаның «Күңелдәрем нескәргән мәл» тип исемләнгән тәүге шиғри тупланмаһы әҙәбиәткә башҡорт шиғриәтендә йәшәп килгән традицияларға таянып, үҙенә генә хас форма һәм стиль менән ижад иткән үҙенсәлекле ижадсы килеүен хәбәр иткәйне инде. Тамара Ғәниева йыйынтыҡҡа яҙған «Аҡ ҡауырһын» ҡанат нығыта» тип исемләнгән күҙәтеүендә шағирәнең «әллә ниндәй ҡатмарлы фәлсәфә ҡороуҙан алыҫ» булыуын, «шул уҡ ваҡытта йәтеш кенә, тос ҡына фекер-уйын ябай төшөнсәләр, күңел кисерештәре аша сағылдыра» белеүен билдәләгәйне. Уның артынса уҡ, 1997 йылда, донъя күргән «Йөрәгемдә йырҙар йөрөтәм» исемле, һәр бүлеге уйланылып, шиғырҙарҙың һәр ҡайһыныһы үҙ урынына урынлаштырылған арыуыҡ һәлмәк йыйынтыҡ шағирәнең әҙәбиәттә осраҡлы юлаусы түгел, етди уй-ниәт менән килгәнен раҫланы. Тәүге «Үҙ телемдә һөйләшәм»

бүлегендә тыуған ил, ер, тел, халыҡ, ауыл, атай йорто, мәктәп, әсәй, атай, ҡәртнәй төшөнсәләре үҙенә ҡәҙерле булған күренештәр, деталдәр ярҙамында халыҡсан һәм ябай итеп асып бирелә. Шиғырҙарында булмышы сағыла: «Алданғанмын» ти ул бер аҙ әсенеп, «кешеләрҙең күҙҙәренә йондоҙ булып баҡҡанмын», әммә алданғанмын, «күңелдәре төшкәнде ултыртҡанмын болотҡа, Өшөгәнде урағанмын Йылы, йомшаҡ толопҡа» ти ҙә үҙенең, сирле хәленә ҡалғас, ике бөртөк дуҫына ҡарап тороуын әйтә, нишләйһең, ысынбарлыҡ: зарланмай шағирә, әммә тетрәндертә. Кешегә бирелгән ғүмер тураһында уйлана: 365 көндән торған ғүмер, аҡтан йә ҡара шаршауҙан ҡоролған көндәр, ярты ғүмерен кеше йоҡлап үткәрә – ә ҡалғаны ап-аҡ сәскәләргә күмелерме? Һорауҙар, әсенеүҙәр, үкенестәр – йә улар ым-ишара менән аңлатыла, йә тос образ булып ойоша, әммә уларҙа шағирәнең тормош тәжрибәһе ята, уның һынсыл ҡарашы, һиҙгер йөрәк, үткер зиһен үлсәме аша үтә. «Хәбәр һөйләү яҙыҡ түгел, хәбәрҙе ташыу – яҙыҡ», «Был донъяға асыулы – үсле, Был донъяла мөлкәтле – көслө», «Минең йөктө кеше биле күтәрә алмаҫ. Минең генә аяғым мине йөрөтөүҙән талмаҫ» – был юлдарҙы тормош һурпаһын татыған, уны сабырлығы, аҡылы менән ҡабул итеп, уны нисек бар шулай ярата алған кеше генә әйтә алалыр.

«Һөйөү – ғүмерҙең саф алтыны, алмай уны йылдар ялҡыны» бүлегендә шағирә тағы ла тәрәнерәк күңел төпкөлдәрен аса. Һөйөү – уның өсөн бер ҡасан да үтмәй, һүрелмәй торған хис. Ул – һөйөү алдында бер ҡол, ул – һөйгәненән башҡа йәнһеҙ, ул – бер үлән, һөйгәненән үҙен тапамаҫҡа үтенә, йәнкиҫәге күңеленә йәйғор, үрмәгөл булып үрелә; ул – илар ерҙә иламаҫ, ҡолар ерҙә ҡоламаҫ сабыр ҡатын хәҙер, әммә Уны күрһә, йөрәге һаман тулай; һөйгәне булмағанда Ҡояшлы күк тә – тома һуҡыр; ул – һөйгәненең башҡаға бер күҙ атыуынан да араларына йылдар ятыуын һиҙенә, тимәк, һөйөүе шул хәтлем көслө, үҙе шул хәтлем ғорур; һөйгәненә ҡарата бер шик тә уны йәшәүҙән төңөлдөрә. Динә Талхинаның лирикаһы ла яҡты, аяҙ; һөйгәнен ул күктәргә күтәрә, ул тип йәшәй, ул тип өҙөлә.

Шиғырҙары үҙҙәре үк йырлап тора – байтаҡ композиторҙар уларға көй ҙә яҙҙы, шуның өсөн дә китабының һуңғы, өсөнсө, бүлеге китаптың исеме менән аталғандыр. Әммә бында ингән шиғырҙар бөтәһе лә йыр текстары тип тә аңларға ярамай. Был бүлектә шулай уҡ арнауҙар ҙа инеп киткән. Яңы атҡан алһыу таң да ауырыу кешегә сыбыртҡылы тойола, ауырыу үҙе – әрһеҙ кәзә менән сағыштырыла. Яҡты, тормошсан ауаздар һыҙланыу, үкенес, сараһыҙлыҡты сағылдырған образдарға алмашына. Баҫҡаҡлап килгән ямғырҙар шағирәнең йәнен ялмай, үрелеп алырға йәйғорға буйы етмәй – былар барыһы ла уйлап сығарылмаған, бер йөрәк ауазы, берәүҙең бер ғүмер шаңдағы булып яңғырай.

Динә Азат ҡыҙы Талхина 1952 йылдың 21 июлендә Силәбе өлкәһе Арғаяш районының Мәтәл ауылында тыуған. Үҙҙәренең ауылында башланғыс белем алғас, Өфөгә килеп, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында урта белем ала. Артабан Башҡорт

дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Учалы районының Миндәк урта мәктәбендә инглиз теле, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы була. Районды<ң> «Ураҡ һәм Сүкеш» гәзите редакцияһында эшләгән осоронда әҙәби ижадҡа ныҡлап тартыла.

Уның менән бергә генә түгел, бер кабинетта ултырып эшләүсе яҙыусы Таңсулпан Ғарипова хәтерләүенсә, Динә Талхина редакцияла хаттар бүлеген етәкләй. Матбуғатҡа яҙып көнкүреш мәсьәләрен хәл итеп була торған заманда редакцияға йөҙәрләгән хат килә. Барыһына ла яуап бирергә генә түгел, мәсьәләне хәл итеп, һөҙөмтәһе хаҡында гәзит аша уҡыусыларға аңлатма биреү – ошо ауыр, яуаплы йөктө тартыу журналист Динә Талхина иңдәренә төшә. «Динәне студент йылдарынан белдем, беҙҙең бүлмәгә инеп йөрөнө, Ринат менән дуҫлашып йөрөүҙәре, өйләнешеүҙәре – әле лә күҙ алдымда. «Ураҡ менән Сүкеш»тә эшләгәндә лә серҙәребеҙ беректе, йылы мөнәсәбәттә булдыҡ, уның менән ҡурҡмайынса проблемаларҙы уртаҡлашып була ине. Бер-беребеҙҙә терәктаяныс күрҙек. Яҙғандарымды йәһәт кенә руссаға тәржемә итеп ҡуя торғайны, – тип хәтерләй ул. – Күңеле бик нескә ине Динәнең. Асыу, үс һаҡлап йөрөмәне. Йәш аша йылмайыр ине. Мөхәрриребеҙ – Рәүеф Хәй улы Насировты һағынып йыш иҫкә алабыҙ. Мәғлүмәтле, төплө ине ул, беҙгә лә талапты юғары ҡуйҙы. Рәүеф Хәй улына, эшкә беҙҙе Һеҙ өйрәттегеҙ, тиеүебеҙҙә дөрөҫлөк бар. Динәгә Учалы мөхите тар тойолғандыр, шиғриәткә тартылыуы баш ҡалаға талпындырғандыр. Бер аҙҙан улар, фатирҙарын алыштырып, ғаиләһе менән Өфөгә күсенде. Әммә беҙҙең аралашыуҙар өҙөлөп ҡалманы. Мине ул балалар өсөн «Сысҡансыҡ менән Сысҡансыҡ» әкиәтен яҙырға дәртләндерҙе. Балалар яратты, дауамын яҙ, тип икенсе бүлеген һорап яҙҙырыусы ла – Динә. Шулай итеп мин «Сысҡансыҡ менән Сысҡансыҡ мажаралары» тигән алты бүлектән торған әкиәт яҙҙым. Үлгән кешене лә терелтерҙәй һүҙҙәр таба белә ине Динә. Яҙыусыларҙы балалар өсөн яҙырға өндәр, һорар ине. Нәшриәттә балалар секторын булдырыу, кескәйҙәргә яҙған авторҙарға тейешле гонорар түләү, башҡа китаптарына ҡамасау булмаһын тип яныуҙары әле һаман күҙ алдымда», – тип иҫтәлектәре менән уртаҡлаша Таңсулпан Хизбулла ҡыҙы. Әңгәмә барышында хәтирәләрем яңыра, шағирәнең яғымлы, йылы тауышын ишеткәндәй булам, яҙмышын уйлап бер янам, бер туңам…

Шағирә Әлфиә Әсәҙуллинаның: «Авторҙарыбыҙ араһында, мине Динә Азат ҡыҙы яҙыусы яһаны, тигән кешеләр бар. Динә апай, балалар әҙәбиәте секторын ойошторғас, танылған, йәш һәм башлап яҙыусыларҙы балалар өсөн яҙырға ылыҡтырыуҙы маҡсат итеп ҡуйғайны. Тематик заказдар бирҙе. Дәртләндерҙе. Яҙып алып килһәләр, шундуҡ төҙәтмәләр индереп, ҡайтанан эшләтә ине, маҡтап, хуплап эшкә егә, ижадҡа ҡанатландыра белә ине», – тигәнендә әүҙем, тынғыһыҙ, алсаҡ шағирәнең образы тере кеүек күҙ алдына килеп баҫа.

Дина Талхинаның ижад илһамы бәрәкәтле: ун биш йыл самаһы осорҙа ете китабы баҫылып сыға. «Тылсымлы күлдәктәр» (1989), «Бармаҡтарым

арыны» (1991), «Зәңгәргүҙ әкиәттәре» (1993), «Веселая азбука» (1993), «Йөрәгемдә йырҙар йөрөтәм» (1997) китаптары балаларҙың, әҙәбиәт һөйөүселәрҙең күңел кәштәһендә үҙ урынын тапты. Артабан донъя күргән «Йөрәгем – юнысҡы» (2001), «Йөрәгемә йылдар йомола» (2002) исемле китаптары унын ижад офоҡтарынын киңәйеүен, образдарынын баҙыҡланыуын, оҫталығынын арта төшөүен күреп һөйөнөргә мөмкинлек бирҙе. Тормошто нисек бар, шулай ҡабул иткән, үҙ ғүмеренә, яҙмышына ҡоштар бейеклегенән күҙ атҡан, Хоҙайға һыйынған, доғалы, бисмиллалы, сабыр лирик герой үҙ, яҡын, ҡәҙерле. Булғанына шөкөр итә белеү, тыйнаҡлыҡ, үҙеңә бирелгән ҡыҫҡа ғына ваҡыттың ҡәҙерен аңлау, йыһан үлсәмендә кеше кеүек мәңгелек төшөнсәләре ижадынын тәрәнлеген билдәләй. Рәхәтләнеп рухты һуғарырға мөмкинселек бирә. Ихлаҫлығы балҡыта, өмөтө ҡанатландыра. Ассоциациялар тыуҙырыу, символдар аша өндәшеү, ым-ишара, образдар ярҙамында кинәйәләү кеүек уңыштар китаптарҙың битенән битенә күсә, байый, баҙыҡлана бара. Кешенең эске халәтен тапҡыр, халыҡсан итеп әйтеү, бөтөн бер картина тыуҙырыу шиғырҙан шиғырға нығына.

Үҙе иҫән саҡта баҫылған һуңғы китабы – «Мин – аҡтамыр» (2006). Ҡайһы бер тәнҡитселәр унда ингән шиғырҙарҙың таҡмаҡ һымаҡ еңел аңлайышлы икәнлеген, фекер йөрөтөү философияһынын ҡатмарлы булмауын билдәләне. Ижад шишмәһенең башы һаналған «Күңелдәрем нескәргән мәл»дән үк тойолған Көнсығыш поэзияһынан һутланыуын, боронғо традицияларҙы дауам итеп, осошонда күңелде иреккә, фекер, рух иркенлегенә талпындырыуын да оноторға ярамай. Һүҙ булһын ул. Өндәшмәү – ҡурҡыныс. Динә Талхинанын шиғриәттә ҡабыҙған йондоҙоноң үҙенсәлекле балҡышы шиғриәтебеҙ күген яҡтыртыр. Сабырһыҙҙарға тәҡәт өҫтәр, өшөгәндәрҙе йылытыр. Тик онотолмаһын. Унын хаҡында иҫтәлектәрҙе тергеҙәйек. Рухы ҡыуаныр. Ҡыуаныслы: шағирәнең бик күп шиғырҙары мәктәп дәреслектәренә инеп киткән, йырсыларҙың репертуарын байытҡан. Унын нәшриәт өлкәһендәге фиҙакәр хеҙмәте юғары баһаланып, «Башҡортостан Республикаһы матбуғат һәм киң мәғлүмәт сараларынын атҡаҙанған хеҙмәткәре» исеме бирелгән. Ҙур байлыҡ, ижади мираҫ халҡына ҡалдырған шиғри йыйынтыҡтарҙа тупланған. Улар хаҡында ентекле, төплө һүҙ әйтелеүе лә кәрәк. Яҙмамда бөтә йыйынтыҡтарына ла анализ яһауҙы маҡсат итеп ҡуйманым. Шағирәнең тыуыуына 60 йыл тулғанда унын яҡты рухы алдында баш эйеү, иҫтәлеген тергеҙеү ине ниәтем.

Динә Талхинанын ижадын тын ғына аҡҡан йылғаға оҡшатам. Күңел күҙе күргәнгә тәрән, мул ул. Халҡына инселәнгән бай мираҫ онотолмаһын, йөрәктәрҙе йылытып, күңелдәрҙә мәңге һаҡланһын!

**Гөлназ ҠОТОЕВА.**

# ТУҒАН ТЕЛДӘ УҠЫТЫУ ПРОБЛЕМАЛАРЫ

Башҡорт балаларын туған телдә уҡытыуҙы тормошҡа ашырыу оҙаҡҡа һуҙылып, ҡапма-ҡаршылыҡлы һәм ауыр юл үткән. Башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙә тәүге мәктәптәрҙең асылыуы Х быуатта улар араһында ислам дине таралыуға бәйле. Мәсеттәр төҙөлә башлау менән, улар ҡарамағында башланғыс дини мәктәптәр асылған. Башта балаларҙы – ғәрәп, һуңыраҡ төрки халыҡтарының уртаҡ әҙәби теле – иҫке төрки телендә уҡытҡандар.

1557 йылда башҡорт ҡәбиләләре үҙ теләктәре менән Рәсәйгә ҡушылғас, батша Иван IV уларҙың еренә ҡағылмаҫҡа, теленә, диненә, идара итеү тәртибенә ҡыҫылмаҫҡа һүҙ бирә, ерҙәрен тышҡы дошмандан һаҡлау тураһында килешеү төҙөй. Бының өсөн башҡорттар Мәскәүгә яһаҡ түләргә, ул башҡа илдәр менән һуғыштар алып барғанда, Рәсәй армияһына ҡушылып, хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашырға тейеш була. Ләкин был килешеү йыш ҡына боҙола. Анна Иоанновна батшалыҡ иткән 1730–1740 йылдарҙа хәл бигерәк ауырлаша. Ил менән немецтар идара итә, ислам динен эҙәрлекләйҙәр, йөҙҙәрсә мәсет, мәктәптәр яндырыла. Ҡалғәләр, заводтар төҙөү өсөн башҡорт ерҙәре баҫып алына. Быға ҡаршы баш күтәргән башҡорттар аяуһыҙ баҫтырыла. Йөҙҙәрсә ауылдар яндырылып, юҡҡа сыға. Баш күтәреүселәрҙең ҡатындары, балалары үҙәк губерналарҙың алпауыттарына һатыла. Шунлыҡтан XVIII быуаттың аҙағында башланғыс дини мәктәптәрҙең иҫәбе йөҙ самаһы ғына тәшкил иткән. 1762 – 1796 йылдарҙа империя тәхетендә Екатерина II ултырғанда ғына ислам диненә, руханиҙарға ҡараш үҙгәрә. Әбей батша (башҡорттар уны шулай атаған – **С. Й.**) ил менән идара итеүҙе камиллаштырыу өсөн 1767 – 1768 йылдарҙа Уложенная комиссия ойоштора. Комиссияға яңы закондарҙың һәм указдарҙың проекттарын әҙерләргә ҡушылып, уға дворяндарҙан, ҡала кешеләренән, ирекле крәҫтиәндәрҙән, казактарҙан, башҡа дин кешеләренән 564 депутат һайлана. Ырымбур губернаһынан комиссияға 33 кеше инеп, уларҙың һигеҙе мосолмандарҙан була. Ул йылдарҙа был губернаға хәҙерге Башҡортостан, Силәбе һәм Свердловск өлкәләре, Татарстан һәм Пермь крайының байтаҡ өлөшө ҡараған.

Һәр ҡатлам депутаттары үҙ ихтыяждарынан сығып проекттар әҙерләгән. Улар нигеҙендә ҡабул ителгән закондар һәм указдар араһынан икеһе иғтибарға лайыҡ. 1782 йылғы халыҡ училищелары асыу хаҡындағы указ 1802 йылда Рәсәйҙең Халыҡ мәғарифы министрлығын булдырыуға нигеҙ булған. Икенсе указ – 1788 йылда Өфөлә Ырымбур мосолмандары йыйылышын ойоштороу тураһында. Ул ислам динен эҙәрләүҙе тыя, муллаларҙың хәлен яҡшырта. Муллалар мөфтөй указы менән генә тәғәйенләнә. Яңы мәсеттәр төҙөлә, ауылдарҙа – мәктәптәр, ҡалаларҙа һәм ҙур ауылдарҙа мәҙрәсәләр эш башлай. 1828 йылдан муллаларға яңы тыуған балаларға исем ҡушыу, уларҙы һәм никахҡа ингәндәрҙе, үлем осраҡтарын теркәү бурыстары ла йөкмәтелә. Муллаларҙың әхлаҡи ғөрөф-

ғәҙәттәрҙе һаҡлау, эскелеккә, тәмәке тартыуға ҡаршы эшмәкәрлектәрен дә иҫтән сығармаҫҡа кәрәк.

XVIII быуат аҙағында – XIX быуат башында башҡорт балаларын уҡытыу татар теленә күсерелә. Ошо йылдарҙа башҡорт яҙмаһын булдырыу буйынса ла беренсе аҙымдар яһала. Был изге юлда тәрән эҙ ҡалдырған кеше башҡорт ғалимы-лингвисы Мирсәлих Мирсәлим улы Биксурин була (1819 – 1877). Ул Ырымбур ҡалаһындағы Неплюев хәрби училищеһында көнсығыш телдәр уҡытыусыһы булып эшләгән. «Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с наречиями бухарцев, башкир, киргизов и жителей Туркестана» исемле китабында башҡорт телендә ҡайһы бер фольклор әҫәрҙәренең үрнәген күрһәткән. Был китап ике тапҡыр – 1859 һәм 1869 йылдарҙа нәшер ителгән.

Тәүге башҡорт әлифбаһы – «Букварь для башкир» рус алфавиты нигеҙендә Ырымбур губернаһының уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса округ инспекторы В.В. Катаринский (1846 – 1902 ) тарафынан 1892 йылда баҫтырыла. Шул уҡ йылда уның 2500 һүҙҙән торған рус-башҡорт һүҙлеге лә донъя күрә, ә 1898 йылда әлифбаның икенсе баҫмаһы сыға. Сермән рус-башҡорт мәктәбе уҡытыусыһы М.Э. Ҡыуатовтың (1873 – 1937) тырышлығы менән ҙурыраҡ күләмдәге һүҙлек баҫтырыла. Бында шуны ла әйтергә кәрәктер: Ҡыуатов Ырымбур гимназияһында белем алған, әлифба өҫтөндә эшләгәндә Катаринскийға ярҙам иткән. Шул әлифбаны файҙаланып, бер тиҫтә самаһы мәктәп асыуға өлгәшкән.

1907 йылда Орск өйәҙенең рус булмаған мәктәптәренең инспекторы А.Г. Бессоновтың (1848 – 1918) бер аҙ камиллаштырылған әлифбаһы («Букварь для башкир») донъя күрә. Ләкин был әсбаптарҙы ҡулланыу киң таралмай. Беренсенән, улар бик аҙ сығарылған; икенсенән, рус хәрефтәре менән баҫтырылған әлифбаларҙы ҡулланыуға дин әһелдәре, ата-әсәләр ҡаршы төшә. Өсөнсөнән, ул осорҙа ғына түгел, һуңынан да «башҡорт теле үҙ аллы тел түгел, ә татар теленең бер һөйләше, башҡорттар ҙа – татар халҡының бер өлөшө» тигән ҡараш көслө була.

Башҡорттар араһынан тәүге әлифба авторы табип Мстислав Александрович (Мөхәмәтхан Сәхипкирәй улы) Ҡулаев булған (1873 – 1959). Рус исеме йөрөтөүенең сәбәбе – Ҡазан университетында уҡыған йылдарында ул рус побы ғаиләһендә йәшәгән һәм уның ҡыҙына өйләнеп, христиан динен ҡабул иткән. Ҡулаев – 1919 йылда Башҡорт хөкүмәте башлығы булараҡ, киң билдәле шәхес. 1912 йылда ул рус-грек хәрефтәре нигеҙендә башҡорт әлифбаһын төҙөй. 1919, 1928 йылдарҙа әлифбаның яңы баҫмалары донъя күреүгә ҡарамаҫтан, уның тырышлығы ла уңышһыҙ бөтә.

1861 йылда урыҫ крәҫтиәндәре крепостнойлыҡтан азат ителгәс, илдә байтаҡ реформалар уҙғарыла. Мәғариф өлкәһендәге яңылыҡ мәктәптәр, юғары уҡыу йорттары тормошона байтаҡ үҙгәрештәр индерә. Гимназияларға халыҡтың бөтә ҡатлам кешеләренең балаларын ҡабул итеү рөхсәт ителә. 1870 йылдан дәүләт иҫәбенә рус-башҡорт, рус-татар, башҡа рус-милли (сыуаш, мари, удмурт, мордва) мәктәптәре асыла башлай. Ләкин ул мәктәптәр бик аҙ булып, олоҫ үҙәктәрендә генә эшләй. Ҡайһы бер баҫмаларҙа «был мәктәптәрҙә уҡытыу рус һәм туған телдәрҙә алып барылған» тип хата ебәрелгән. Белем биреү тик рус телендә генә алып барылып, башҡорт һәм татар балаларына ислам динен өйрәнеү өсөн берәр сәғәт ваҡыт бүленгән. Мәктәптәрҙең ике исем менән аталыуы ауылда ниндәй милләт кешеләренең йәшәүенә бәйле булған.

Был мәктәптәргә миссионерлыҡ ролен башҡарыу йөкмәтелә. Мәғариф министры Д.А. Толстой асыҡтан-асыҡ: «Конечной целью образования всех инородцев, живущих в пределах нашего Отечества, бесспорно должно быть обучение и их слияние с русским народом». Балаларҙы туған телдә уҡытыу мәсьәләһе Дәүләт думаһында бер нисә тапҡыр күтәрелеүгә ҡарамаҫтан, мәктәп реформаһы мосолман дини мәктәптәренә бөтөнләй ҡағылмай. Мосолман депутаттар араһында Борай рус-башҡорт мәктәбе уҡытыусыһы Кәлимулла Хәсәнов айырыуса әүҙемлек күрһәтә. Ул Синодтың обер-прокуроры К.Г. Победоносцевты һәм рус-милли мәктәптәре проекты авторы Н. И. Ильминскийҙы миссионерлыҡ сәйәсәте уҙғарыуҙа ғәйепләп, ҡаты тәнҡитләй. Депутат башҡорт ауылдарында балаларҙы туған телендә уҡытыуҙы талап итә. Балаларын рус телендә уҡытырға теләмәгән ата-әсәләрҙең өйҙәренә йөрөп уларҙы өгөтләүе тураһында һөйләй, дөйөм башланғыс белем индереү зарурлығын әйтә. Хәсәновтың тәҡдименә башҡа мосолман, украин һәм йәһүд депутаттары ла ҡушыла, әммә депутаттарҙың тырышлығы уңышһыҙ тамамлана. Беренсе Дәүләт Думаһы 72 көн генә эшләй, сөнки уның эшмәкәрлеге менән риза булмаған батша уны таратып ебәрә. Икенсе Дәүләт Думаһы ла 103 көндән һуң таратыла. 1910 йылда Өсөнсө Дума дөйөм башланғыс белем биреү тураһында закон проекты әҙерләй. Күпселек мосолман депутаттар башҡорт ауылдарында уҡытыуҙы татар телендә алып барыуҙы яҡлай, ләкин батша ҡарамағындағы Дәүләт Советы был проектты кире ҡаға.

Рәсәй империяһы мәғариф буйынса иң артта ҡалған илдәрҙең береһе була. Быны иҫбатлау өсөн 1914 йылғы Беренсе Донъя һуғышында ҡатнашҡан илдәр һалдаттарының белем кимәлен сағыштырыу ҙа етә. Немецтарҙың, мәҫәлән, бөтәһе лә белемле булған, сөнки дөйөм мәжбүри ете йыллыҡ уҡыу Германияла XIX быуаттың аҙағында индерелгән. Бөйөк Британия һалдаттарының – 99, Францияның – 96,6, Италияның 70 проценты грамоталы булһа, Рәсәй һалдаттарының 39 проценты ғына уҡый-яҙа белгән. Урта Азия халыҡтары, Төньяҡ һәм Алыҫ Көнсығыштың аҙ һанлы халыҡтары һуғышта ҡатнашһа, Рәсәй һалдаттарының белемен билдәләүсе күрһәткес күпкә түбәнерәк булыр ине.

Рәсәйҙә мәғарифтың артта ҡалыуы Өфө губернаһында ла сағылыш тапҡан. 1913–1914 уҡыу йылында гимназияларҙа һәм реаль училищеларҙа ни бары 4778 кеше уҡыған. Шуларҙың 12-һе башҡорт, 23-ө татар. 1914 йылда башҡорт һәм татар ауылдарындағы башланғыс дини мәктәптәрҙең иҫәбе 1578-гә етеп, уларҙа 72,7 мең ир бала уҡыған. Юғарыла күрһәтелгән мәктәптәрҙең 859-ы кешеләрҙең шәхси йорттарында берәр бүлмә биләгән. Күрше ауылдарҙан килеп уҡыған балалар өсөн улар ятаҡ итеп тә файҙаланылған. Ҡайһы берҙәрендә мөғәллимдәр ҙә йәшәгән. Күп мәктәптәрҙә уҡыусылар иҫәбе 10 – 50-нән артмаған.

Милли мәктәптәргә дәүләт бер ниндәй ярҙам күрһәтмәгән, улар ауыл кешеләре иҫәбенә йәшәгән. Өфө губернаһы идаралығының мәктәптәр бүлегендә статист булып эшләгән М. И. Обухов 1915 йылда мосолман мәктәптәренең ауыр хәле тураһында «Мектебы Уфимской губернии» тигән китап баҫтырып сығарып, мәғарифҡа тәғәйенләнгән ҡаҙна аҡсаһынан мосолман мәктәптәренә лә өлөш сығарыу мәсьәләһен күтәрә. Ләкин был ҡыйыу тәҡдим губернатор П. П. Башиловҡа оҡшамай, ул Обуховты эшенән ҡыуырға бойора. Февраль революцияһы ғына уны был бәләнән ҡотҡара.

Өфө һәм Ырымбур губерналарында байтаҡ мәҙрәсәләр эшләп, улар дин әһелдәре, уҡытыусылар, ғөмүмән, уҡымышлы кешеләр әҙерләүҙә билдәле роль

уйнаған. Уларҙың иң абруйлылары – Өфөләге «Ғәлиә», «Ғосманиә», Троицкиҙағы – «Рәсүлиә», Ырымбурҙағы – «Хөсәйениә», Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы, Стәрлебаш һәм Ҡарғалы ауылдарындағы мәҙрәсәләр. Уларҙа, дин дәрестәренән тыш, татар, рус, төрөк, ғәрәп, фарсы телдәре, математика, физика, биология, тарих, география, астрономия, педагогика, дидактика уҡытылған. Белем биреү ярайһы юғары кимәлдә булған. Мәҙрәсәләрҙә белем алып, совет осоронда уҡытыусы булып эшләгәндәрҙең белеме педогогия техникумдарында диплом алғандарҙың белеменә тиңләнде һәм хеҙмәт хаҡы ла ошонан сығып түләнде.

Октябрь революцияһынан һуң мәктәптәр РСФСР Мәғариф комиссариаты ҡарамағына күсеп, беренсе баҫҡыс – башланғыс, икенсе баҫҡыс – туғыҙ йыллыҡ урта мәктәптәргә бүлеп йөрөтөлә. Ләкин балаларҙы туған телдәрендә уҡытыу төрлө ҡаршылыҡтарға дусар ителә. ВКП(б)-ның VIII съезында (1919) В.И. Ленин, ошо мәсьәләгә ҡағылып, былай ти: «У нас есть, например, в Комиссариате просвещения или около него коммунисты, которые говорят, единая школа, поэтому не смейте учить на другом языке, кроме русского. По моему такой коммунист – это великорусский шовинист. Он сидит во многих из нас и с ним надо бороться».

Башҡортостанда совет хакимиәте 1919 йылда ғына урынлаша. 1921 йылда Бәләкәй Башҡортостандың Үҙәк Башҡарма Комитеты башҡорт теленең дәүләт статусын таный. Ләкин башҡорттарҙы татар телендә уҡытыу дауам итә, гәзит-журналдар ҙа шул телдә сыға. Башҡорт яҙмаһын булдырыу һәм уны ҡулланыу өсөн 1922 йылда Ш.Ә. Хоҙайбирҙин етәкселегендә комиссия ойошторолоп, башҡорт яҙмаһы яңыртылған (ябайлаштырылған) ғәрәп әлифбаһына нигеҙләнә. 1923 йылда бер нисә кешенән торған был төркөм, ошо яҙманы файҙаланып, әлифба баҫтырып сығара.

Башҡорт балаларын туған телдә уҡытыу 1924-1925 уҡыу йылында башлана. 1919 йылда уҡ республикала 54 урта мәктәп асылыу ҡаралһа ла, уларҙың яртыһынан ашыуы уҡыусылар ҙа уларға белем бирергә уҡытыусылар етешмәү арҡаһында асылмай. Сәбәбе – Башҡортостан Беренсе донъя, бигерәк тә Граждандар һуғыштарынан иң ҙур зыян күргән төбәктәрҙән иҫәпләнә. Шулай ҙа башланғыс мәктәптәр иҫәбенә 1927 йылда мәктәптәр 2671-гә еткерелә. Шул иҫәптән урта мәктәптәр –25, ете йыллыҡ – 70, башланғыс мәктәптәр – 2576. 1927 йылда урта мәктәпте 492 уҡыусы тамамлаһа, шуларҙың: бише – башҡорт, 22-һе – татар, 412-һе рус, 53-сө башҡа милләт йәштәренән була.

1930 – 1931 йылдарҙа СССР-ҙа тәү башлап дөйөм башланғыс белем биреү индерелеп, мәктәптәр, уҡыусылар иҫәбе күпкә арта. Мәғариф системаһының артабанғы үҫешен ҡалаларҙа, эшсе ҡасабаларҙа ете йыллыҡ (1937), бөтә илдә ете йыллыҡ (1948), һигеҙ йыллыҡ белем биреүҙе индереү (1958) һәм уларҙың уңышлы үтәлеүе тәьмин итте. 1929 – 1930 йылдарҙа башҡорт яҙмаһы латин алфавитына күсерелде. З. Айыуханов, А. Мостафина, Ғ. Сәғәҙи, Й. Гәрәй нәшер иткән әлифбалар 1940 йылға тиклем өйрәнелде.

1940 – 1941 йылдарҙа башҡорт яҙмаһы рус алфавитына күсерелде. С. Моратов, З. Айыуханов һәм А. Ә. Ғәлләмов авторлығында сығарылған беренсе әлифбаның сифаты күпкә юғары ине. Ул 1962 – 1966 йылдарҙа балаларҙы хәреф танырға, уҡырға, яҙырға өйрәтте. Башҡортостан Уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтының (БИУУ) милли телдәр кабинеты мөдире А. Ә. Ғәлләмов әлифба өҫтөндә эшләүен дауам итте һәм 1967 йылда Мәскәүҙә «Башҡорт

грамотаһына өйрәтеү» темаһына кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланы. Уның фәнни етәксеһе күренекле ғалим, БДУ профессоры Ж. Ғ. Кейекбаев булды. 1967 йылдан 1995 йылға тиклем Ғәлләмовтың әлифбаһы уңышлы файҙаланылды. 1974 йылда ул әлифба Лейпциг Халыҡ-ара китап йәрминкәһендә диплом менән дә бүләкләнде. А.Ә. Ғәлләмов мәктәптәр һәм училищелар өсөн Ж.Ғ. Кейекбаев, К.З. Әхмәҙиев, Ғ.Ғ. Сәйетбатталов, М.Г. Ғималова, Т.Х. Аслаев, Х.С. Фәритов менән бергә байтаҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслектәрен нәшер итеүҙә лә ҡатнашты.

1961 йылда КПСС-тың XXII съезында Н.С. Хрущев башланғысында партияның яңы программаһы ҡабул ителеп, уға ярашлы 1980 йылда СССР халҡы коммунизмға аяҡ баҫырға тейеш ине. Программала милләттәрҙең киләсәк яҙмышы ла ҡаралғайны. Уның беренсе йүнәлеше – милләттәрҙең үҫеше, сәскә атыуы булһа, икенсеһе бер-береһенә яҡынайыуы ине. Программаның икенсе йүнәлешен тормошҡа ашырыу башланып, 1963 йылда Өфөлә милли мәктәптәрҙә рус телен уҡытыуға арналған Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһы үтте. Унда автономиялы республикаларҙың мәғариф министрҙары, рус теле уҡытыусылары һәм методистары, шулай уҡ милли мәктәптәре булған край һәм өлкәләрҙән дә вәкилдәр ҡатнашты. Конференцияла РСФСР мәғариф министры урынбаҫары Кашин доклад менән сығыш яһаны. Милләттәрҙең бер-береһенә яҡынлашыу тенденцияһына баҫым яһап, ул милли мәктәптәрҙә уҡытыуҙы рус теленә күсереү мәсьәләһен күтәрҙе.

Шуны ла әйтергә кәрәктер: ул йылдарҙа Башҡортостанда һәм Татарстанда ғына башҡорт һәм татар урта мәктәптәрендә уҡытыу туған телдәрҙә алып барыла ине. Сыуаш һәм Яҡут АССР-ҙарында туған телдә уҡытыу I – VIII кластар, башҡа республикаларҙа башланғыс кластар менән сикләнде. Туған тел айырым предмет булараҡ уҡытылды. Конференциянан һуң мәғариф министры Ф.Х. Мостафина урынбаҫары Х. Х. Яубаҫаров менән мине үҙенә саҡырҙы. Мин ул саҡта БИУУ директоры булып эшләй инем.

– Нишләйбеҙ? – тине Фатима Хәмитовна. – Кашин милли мәктәптәрҙе бөтөрөү хаҡында һүҙ күтәрә бит.

Бер аҙ фекер алышҡас, министр КПСС Өлкә комитетының беренсе секретары З. Н. Нуриевҡа китте. Икенсе көн конференция төшкә тиклем секцияларға бүленеп эшләп, төштән һуң конференцияның эшенә йомғаҡ яһалды. Унда Мостай Кәрим тәрән йөкмәткеле, башҡалар әйтергә батырсылыҡ итмәгән фекерҙәрҙе сағылдырған телмәр менән сығыш яһаны. Һәр милләттең үҙ теле, йолалары, мәҙәниәте, әҙәбиәте, меңәр йыллыҡ тарихы бар, тине ул. Милли мәктәптәрҙә уҡытыу рус теленә күсерелһә, был халыҡтарҙың әйтеп бөтөргөһөҙ рухи байлыҡтарын юғалтыуға килтермәҫме? Милли мәктәптәрҙә рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыла бит. Дәрестәрҙең сифатын күтәреү тураһында һөйләшеү файҙалыраҡ булмаҫ инеме? Рус телен дәрестән тыш төрлө саралар уҙғарып та өйрәнеп була бит.

Ярты сәғәткә һуҙылған был сығышты зал көслө алҡыштар менән ҡаршыланы. Кашин үҙенең йомғаҡлау сығышында милли мәктәптәрҙә уҡытыуҙы рус теленә күсергәндә уйлабыраҡ, ата-әсәләр менән кәңәшләшеп эш итеү кәрәклеген әйтергә мәжбүр булды. Тиҙҙән Ырымбур, Силәбе, Курган өлкәләрендә башҡорт мәктәптәрендә уҡытыуҙың рус теленә күсерелеүе хаҡында ишеттек. 1965 йылда миңә Силәбе өлкәһе Арғаяш районының Мәүлит ауылында булып китергә тура килде. Башланғыс мәктәп мөдире өлкән йәштәге Ибраһимов ағай менән

осрашыу иҫтә ҡалған. «1964 йылда бер ниндәй әҙерлекһеҙ уҡыуҙы рус теленә күсерҙеләр, тигәйне ул. Почта арҡылы арифметиканан яҙма имтихан уҙғарыу тураһында конвертҡа һалынған текстар алдыҡ. Бер мәсьәлә, ике миҫал. Уҡыусылар миҫалдарҙы тиҙ генә башҡарҙы, ә мәсьәләгә бер кем дә тотонмай. Аңламайбыҙ, тиҙәр. Мәсьәләнең йөкмәткеһен башҡортсаға әйләндерергә мәжбүр булдым. Беҙҙең республикала ла ҡайһы бер мәктәптәрҙең беренсе кластарында уҡытыуҙы рус телендә алып барып ҡаранылар», әммә тәжрибә үҙен аҡламаны.

Алғараҡ китеп, шуны әйтергә кәрәк: 1969 йылда, КПСС Үҙәк Комитетының октябрь пленумы Н.С. Хрущевты, башбаштаҡлыҡта ғәйепләп, биләгән вазифаларынан бушатты. Аҡрынлап программа онотолдо. 1965 йылда башҡорт мәктәптәрендә туған телде уҡытыуға арналған республика фәнни-ғәмәли конференцияһы үткәрелде. Башҡорт әҙәби теленең формалашыуы хаҡында доклад менән күренекле ғалим, БДУ профессоры Ж.Ғ. Кейекбаев сығыш яһаны. Мәғариф министры урынбаҫары Х.Х. Яубаҫаров докладын башҡорт телен уҡытыуҙың торошо һәм уның сифатын күтәреү сараларына бағышланы. Секцияларҙа уҡытыусылар һәм методистар башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслектәренең авторҙары менән фекер алышты. Уҡытыусылар конференциянан бик ҡәнәғәт булып таралышты.

Өс ай самаһы уҙғас, яныма бик ҡабаланып, Ж.Ғ. Кейекбаев ағай килеп инде.

– Мырҙам, һине Өлкә комитетҡа саҡырманылармы әле? – тип һораны ул. Яҡын күргән кешеләренә Жәлил Ғиниәт улы «мырҙам» тип өндәшә торғайны.

– Юҡ, ни булды? – тип ҡыҙыҡһындым.

– КПСС Үҙәк Комитетына кемдәрҙер ялыу ебәргән икән. Бөтә совет кешеләре коммунизмға барғанда, халыҡтар бер-береһенә яҡынлашҡан заманда, башҡорт милләтселәре мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыуға бағышланған конференция уҙғарҙылар, тип яҙғандар. Һине саҡырһалар, Кейекбаев докладты ҡағыҙына ҡарап һөйләне, тиерһең.

– Ысынлап та, шулай булды бит. Профессор башы менән ни эшләп докладын ҡағыҙына ҡарап ҡына уҡый икән, тип аптырағайным.

– Башҡорт балаларын туған телдә уҡытыуға ҡаршы кешеләр бөгөн дә бар шул. Уларҙың ялыу яҙырын алдан һиҙҙем. Шуның өсөн докладты ла ҡағыҙға ҡарап һөйләнем, – тине ул.

1967 йылда мине КПСС-тың Өфө ҡала комитетының пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире урынбаҫары итеп күсерҙеләр. Ике йыл эшләгәс, кандидатлыҡ диссертацияһын тамамлау һәм яҡлау өсөн СССР Педагогия фәндәре академияһына бер йыллыҡ аспирантураға киттем. Унан ҡайтҡас, ярты йыл Өлкә комитеттың фән һәм уҡыу йорттары бүлеге мөдире урынбаҫары булып эшләп алдым. 1971 йылдың майында мине Башҡорт АССР-ы мәғариф министры итеп тәғәйенләнеләр. Бойороҡ алырға Мәскәүгә барғас, РСФСР мәғариф министры А. И. Данилов мине йылы ҡабул итте. Әңгәмә барышында Александр Иванович РСФСР мәктәптәренең эшен сағылдырған таблицаны күрһәтте.

– Башҡортостанда 4305 мәктәп эшләп, уларҙа 868 мең бала уҡый,– тине ул. – Мәктәптәр һәм уҡыусылар иҫәбе буйынса һеҙҙең республика – РСФСР-ҙа иң ҙуры. Ләкин ул 73 төбәк араһында 46-сы урынды биләй. Экономик яҡтан ныҡ үҫешкән республика өсөн был һис ҡәнәғәтләнерлек түгел. Һеҙҙең күрһәткестәр РСФСР-ҙы ла артҡа тарта. 15 союздаш республика араһында ул тик алтынсы ғына урында.

А. И. Данилов иғтибарымды түбәндәге етешһеҙлектәргә йүнәлтте: урта мәктәптәр бик аҙ, ауыл мәктәптәренең тейешле белеме булған уҡытыусылар менән тәьмин ителеүе буйынса – иң һуңғы урында; уҡыусыларҙың өлгәше түбән, күптәре икенсе йылға ҡалдырыла, уҡыуын ташлай. Биш мең ауыл уҡытыусыһы кешеләрҙең шәхси йорттарында йәшәй. Министр миңә бер нисә файҙалы кәңәш бирҙе.

Ҡайтҡас та КПСС Өлкә комитетының беренсе секретары М. З. Шакировҡа инеп, Мәскәү яңылыҡтарын еткерҙем. Уға республиканың артта ҡалыуын әйтеү оҡшаманы, идеология секретары Т. И. Ахунйәновты, фән һәм уҡыу йорттары бүлеге мөдире Д. Ш. Дәүләтбаевты саҡыртты. Беҙгә республика мәғариф системаһындағы етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса бер аҙна эсендә план әҙерләргә ҡушты. План ҡабул ителгәс, М. З. Шакиров миңә уның үтәлеше тураһында ай һайын белдереп торорға ҡушты. Ул йылдарҙа мәктәптәрҙең төп бурысы – бөтә йәштәргә урта белем биреү ине. Был бурысты үтәү өсөн мәктәптәрҙең матди базаһын нығытырға, уларҙы тейешле белеме булған уҡытыусылар менән тәьмин итергә кәрәк ине. Йәштәргә дөйөм урта белем биреү (1972), ауыл мәктәптәре (1973) тураһында ҡарарҙар һәм уларҙың уңышлы үтәлеше республикаға РСФСР-ҙа иң алдынғы урындарҙың береһен яуларға ярҙам итте.

Республика мәғарифының башҡа күрһәткестәре лә маҡтанырлыҡ түгел ине. СССР-ҙа 22 йәштән оло һәр мең кешенең 40-ы юғары белемле булһа, беҙҙә ул тик 24 кеше тәшкил итте. Уларҙы милләттәре буйынса сағыштырһаң, айырма бигерәк ҙур: йәһүдтәр – 307, украиндар – 41, рустар – 30, татарҙар – 21, башҡорттар – 17. Ф. Х. Мостафина министр булып эшләгән йылдарҙа уҡ йыл һайын 25 башҡорт һәм татар йәштәре Мәскәү, Ленинград һ. б. эре ҡалаларҙың юғары уҡыу йорттарына имтихандарҙы Өфөлә тапшырып, конкурсһыҙ ҡабул ителә ине. Уңышлы уҡығандары шунда уҡ аспирантураға инеп, диссертация яҡланы һәм билдәле фән эшмәкәрҙәре булып китте.

Имтихандарҙы рус телендә тапшырырға кәрәк булғанлыҡтан, республиканың юғары уҡыу йорттарында башҡорт студенттары бик аҙ ине. Уҡырға инергә еңелерәк булһын өсөн уларға имтихандарҙы туған телдә бирергә рөхсәт ителеп, ауыл мәктәптәренән уҡытыусылар саҡырылды. Уҡырға инеү – бер хәл, предметтарҙы рус телендә үҙләштерергә лә кәрәк бит. Өлгәшмәгән өсөн I – II курстарҙан һуң байтаҡтары уҡыуҙан сығарыла ине. Медицина институтында ундайҙар – 33, авиация, нефть институттарында 22 процент тәшкил итте. Уҡырға ингәндә имтихандарҙы туған телдә биреү үҙен аҡламаны. КПСС Өлкә комитеты башҡорт һәм татар мәктәптәрен тамамлаған йәштәрҙең юғары уҡыу йорттарында аҙ булыуының сәбәбен асыҡлау бурысын Өфө авиация институты профессоры Н. А. Айытов етәкселегендәге социология лабораторияһына йөкмәтте. Лаборатория күпселек башҡорттар һәм татарҙар йәшәгән бер нисә районда ата-әсәләрҙән түбәндәге һорауҙарға яуаптар алды:

– уҡытыу планын элеккесә ҡалдырырға, үҙгәртмәҫкә;

– уҡытыуҙы беренсе кластан рус теленә күсерергә туған телде айырым предмет итеп өйрәнергә;

– уны бишенсе кластан башларға;

– VIII – X кластарҙа математика, физика, химия, дәрестәрен уҡытыуҙы рус теленә күсерергә, башҡа предметтарҙы туған телдәрҙә уҡытыуҙы дауам итергә.

Ата-әсәләрҙең 94 проценты дүртенсе пунктты яҡланы. 1978 йылдан башлап VIII – X кластарҙа математика, физика, химия дәрестәрен уҡытыу рус теленә

күсерелде. Был мәктәптәрҙе тамамлағандар имтихандарҙы уңышлы тапшырып, республика юғары уҡыу йорттарына ғына түгел, Мәскәүҙә, Ленинградта, башҡа эре ҡалаларҙа белем алды. 1979 йылда республикала 22 йәштән оло һәр мең кешегә юғары белемлеләрҙең иҫәбе 44-кә етте.

Борсоған икенсе мәсьәлә – башҡорт мәктәптәренең аҙлығы. Улар – бөтәһе 715 (урта мәктәптәр – 81, һигеҙ йыллыҡтары – 171, ә башланғыстары – 513 кенә) ине. Республикала йәшәгән башҡорттарҙың иҫәбе буйынса башҡорт мәктәптәре ике тапҡыр күберәк булырға тейеш. ВКП (б)-ның XII съезында (1937) сығыш яһаған Башҡортостан өлкә комитетының беренсе секретары Я. Б. Быкин (1929 – 1937) милли кадрҙар әҙерләү мәсьәләһенә ҡағылып, былай тигән: «Башҡорт уҡытыусылары етешмәгәнлектән, башҡорт балаларын татар телендә уҡытырға мәжбүр булдыҡ. Хәҙер пединститутҡа башҡорт йәштәрен күберәк ҡабул итәбеҙ». Секретарь республикала ни бары туғыҙ башҡорт урта мәктәбе булыуын әйтергә уңайһыҙланғандыр, моғайын. Уның сығышына таяныптыр, гәзиттәрҙә бер нисә мәҡәлә баҫылып, уларҙа уҡытыусылар һәм дәреслектәр етешмәгәнлектән, көнбайыш райондарҙағы башҡорт ауылдарында уҡытыу татар теленә күсерелде, тип яҙылған.

Башҡорт мәктәптәренең аҙ булыуының тағы бер сәбәбе – мәғариф халыҡ комиссарҙарының йыш алмаштырылыуында. 1919 – 1940 йылдарҙа 14 нарком алыштырылып, күптәре золомға дусар ителгән. 1977 йылдың октябрендә М. З. Шакиров миңә башҡорт мәктәптәренең исемлеген килтерергә ҡушты. Күҙ йүгертеп сыҡҡас:

– Ни өсөн көнбайыш райондарҙа бер башҡорт мәктәбе лә юҡ? – тип һораны.
– Төньяҡ райондарҙа ла бик аҙҙар. Был райондарҙа башҡорт ауылдары күп бит. Илеш райкомының беренсе секретары Рахманов, районда йәшәгән кешеләрҙең 71 проценты башҡорттар, тип раҫлай.

Мин секретарға белгәндәремде һөйләнем. Тыңлап бөткәс, Миҙхәт Закир улы былай тине:

– Хәҙер заман икенсе. Бының кире яғы шунда: татар телендә белем алған башҡорттар милләтен дә уҡыған теле менән күрһәтә. Шунлыҡтан халыҡтарҙың иҫәбен алған һайын башҡорттар артмай, республикалағы башҡа халыҡтар менән сағыштырғанда, кәмей. Бындай хәл республиканың киләсәге өсөн хәүефле. Был райондарҙағы башҡорт ауылдарында уҡыуҙы туған телгә күсереүгә нисек ҡарайһың?

– Бик дөрөҫ булыр, – тинем. – Пенсияға сыҡҡан уҡытыусыларҙан бер нисә хат килде. «Ниңә беҙҙең балаларҙы туған телдә уҡытмайҙар? 1924 йылда башҡорт телендә уҡыттыра башлағайнылар бит»,– тип яҙалар.

– Был райондарҙа балаларҙы туған телдә уҡытырға кәрәк, – тине Миҙхәт Закир улы.

Атаһы мәрхүм Закир Шакировты ла иҫенә төшөрҙө. Ул Ҡазанда «Мөхәмәдиә» мәҙрәсәһен, Мәскәүҙә халыҡтар университетын тамамлаған. Батша заманында Өфө губернаһының мәктәптәр идараһында милли мәктәптәр инспекторы булып эшләп, революциянан һуң Өфөләге башҡорт һәм татар балалары уҡыған мәктәп директоры булған. 1932 йылдан башлап Башҡорт дәүләт педагогия институтында башҡорт телен уҡытҡан, оҙаҡ йылдар кафедраға етәкселек иткән. Көнбайыш райондарҙа башҡорт балаларын туған телдә уҡытмауға күңеле ятмаған. М. З. Шакиров миңә 1922 йылда Кушнаренко районы Ҡараса-Йылға ауыл Советынан үҙенә бирелгән белешмәне лә күрһәтте. Унда «милләте «башҡорт» тип яҙылғайны.

– Өфө горкомында эшләгәндә, Кейекбаев менән дә был хаҡта һөйләшкәйнем. Үкенескә ҡаршы, ул йәшләй донъя ҡуйҙы, – тип дауам итте Миҙхәт Закир улы.

Кейекбаев телгә алынғас, иҫемә ул килеп төштө: КПСС-тың ҡала комитетына килгәнендә минең эргәмә лә инеп сыҡҡайны.

– Миҙхәт Закир улы – киң ҡарашлы кеше, мәктәптәр менән дә ҡыҙыҡһына, – тигәйне.

Икенсе килгәнендә Жәлил Ғиниәт улы М. З. Шакировтың көнбайыш райондарҙың башҡорт ауылдарында балаларҙы туған телдә уҡытыу менән ҡыҙыҡһыныуы, унан кәңәштәр һорауы хаҡында әйтте. Үкенескә ҡаршы, был осрашыу һуңғыһы булған икән. Ж. Ғ. Кейекбаевты 1968 йылда, 57 йәшендә, һуңғы юлға оҙаттыҡ.

Һөйләшеүҙе йәнә Миҙхәт Закир улы менән дауам итәйек.

– Ҡайһы бер кешеләрҙең был райондарҙа башҡорт балаларын туған телдә уҡытыуға ҡаршы икәнлеген беләм. Һуңынан беҙҙе ғәйепләмәһендәр өсөн, Үҙәк Комитеттың ризалығын алдым. Л. И. Брежнев мине ҡабул иткәндә, ошо мәсьәләне лә күтәрҙем. Был турала ул Үҙәк Комитетың секретары К. У. Черненко менән һөйләшергә тәҡдим итте. «Халыҡтар иҫәбен алғанда был райондарҙың кешеләре революцияға тиклем дә, унан һуң да милләтен башҡорт тип яҙҙырғас, был мәсьәләне үҙегеҙ хәл итегеҙ»,– тине К. У. Черненко.

– Мин райкомдарҙың беренсе секретарҙары менән һөйләшермен. Һин дә ошо райондарҙың РОНО етәкселәре менән был мәсьәләне хәл ит. Һәр ауылда ата-әсәләр йыйылыштарын үткәрһендәр. Мәктәптәрҙе уҡытыусылар, дәреслектәр менән тәьмин итеүҙе үҙең беләһең. Был эште 1978 йылда башларға кәрәк,– тип тамамланы М. З. Шакиров.

1978 – 1981 йылдарҙа 343 мәктәптә (130 – урта, 108 – һигеҙ йылыҡ, 105 башланғыс) уҡытыу башҡорт теленә күсерелде. Бынан тыш, байтаҡ райондарҙың, Нефтекама, Сибай, Белорет, Мәләүез, Учалы ҡалаларының 51 урта, 16 һигеҙ йыллыҡ рус мәктәптәрендә уҡыған башҡорт балаларына туған тел өҫтәмә предмет булараҡ уҡытылды.

Мәктәптәргә тейешле белеме булған йәш уҡытыусылар ебәрелде, элек шунда эшләгән, башҡортса белгән уҡытыусылар һайлап алынды. 1977 йылда уҡыусыларға дәреслектәр дәүләт иҫәбенә бирелеү хаҡында ҡарар сыҡҡайны. Мәктәптәрҙе дәреслектәр менән тәьмин итеү күпкә еңеләйҙе. 1978 – 1979 уҡыу йылы алдынан, был яҡтағы райондарҙың РОНО етәкселәрен, методистарын, мәктәп директорҙарын Балтас районы үҙәгенә саҡырып, йыйылыш үҙғарҙыҡ. Уның маҡсаты – туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәрен тәүге көндәрҙән үк методик яҡтан төплө, уҡыусыларҙы ҡыҙыҡһындырырлыҡ итеп уҡытыуға ирешеү, республика мәктәптәрендә уҡытыу-тәрбиә эшенең торошо, көнбайыш райондар ауылдарының тарихы, башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте менән таныштырыу ине. Йыйылышта ҡатнашыусыларҙы КПСС-тың Балтас район комитетының беренсе секретары Ғ. Ф. Фәтхуллин ҡотланы. Доклад менән мин, йәғни мәғариф министры С. Ш. Йыһаншин, СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы профессоры Ғ.Б. Хөсәйенов, халыҡ шағиры Назар Нәжми, БДУ доценты Р. Н. Байымов, яҙыусы Шакир Янбаев сығыш яһаны.

1979 йылдың декабрендә Илеш районы үҙәге Үрге Йәркәй ауылында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыуҙа белем һәм әхлаҡи тәрбиә биреүгә арналған фәнни-ғәмәли конференция үтте. Унда ҡатнашыусыларҙы КПСС-тың Илеш район комитетының беренсе секретары, Социалистик Хеҙмәт Геройы Т. Л. Рахманов ҡотланы. Пленар ултырышта түбәндәге докладтар тыңланды:

1. Башҡортостанда халыҡ мәғарифының үҫеше һәм мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙы артабан камиллаштырыу бурыстары. Докладсы – С. Ш. Йыһаншин – Башҡорт АССР-ы мәғариф министры.

2. Башҡорт тел ғилеме үҫеше мәсьәләләре. Докладсы – М. В. Зәйнуллин, – БДУ доценты.

3. Башҡорт совет әҙәбиәтенең үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге. Докладсы – К. Ә. Әхмәтйәнов, БДУ доценты.

4. Балаларға патриотик тәрбиә биреүҙә урындағы фольклор материалдарын файҙаланыу. Докладсы – Кирәй Мәргән , БДУ профессоры, яҙыусы.

5. Башҡорт теле дәрестәрендә белем һәм әхлаҡи тәрбиә биреү. Докладсы – Ф. Ғ. Исламова, РСФСР Милли мәктәптәр ғилми-тикшеренеү институты Башҡортостан филиалының өлкән ғилми хеҙмәткәре.

Икенсе көндө конференция эшен секцияларға бүленеп дауам итте. Башланғыс класс уҡытыусылары секцияһында докладтар менән БДУ доценты А. Ә. Ғәләмов, РСФСР Милли мәктәптәр ғилми-тикшеренеү институты Башҡортостан филиалының өлкән ғилми хеҙмәткәре Т. Х. Аслаев, БИУУ башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеты мөдире В. И. Хажин сығыш яһаны. Илеш районының Ҡарабаш мәктәбе уҡытыусыһы З. Х. Ғүмәрова, Балтас районының Нөркә мәктәбе уҡытыусыһы Ф. С. Әхмәтова, Дәүләкән районының Иҫке Яппар мәктәбе уҡытыусылары Х. С. Фәттәхова менән В. Б. Усманова, Күгәрсен районының Төпсән мәктәбе уҡытыусыһы М. Әлимғолов эш тәжрибәһе менән уртаҡлашты.

IV – X класс уҡытыусылары секцияһында РСФСР Милли мәктәптәр ғилми-тикшеренеү институты Башҡортостан филиалының ғилми секретары Р. Ғ. Аҙнағоловтың, өлкән ғилми хеҙмәткәре М. Ғ. Ғималованың, Стәрлетамаҡ педагогия институтының өлкән уҡытыусыһы Б. Ф. Ғафаровтың докладтары тыңланды. Әбйәлил районының Амангилде мәктәбе уҡытыусыһы Б. С. Әйүпов, Учалы районының Науырҙа мәктәбе уҡытыусыһы И. А. Шарапов, Сибай интернат-мәктәбе уҡытыусыһы С. С. Өмөтбаева, Ишембай районының Кинйәбулат мәктәбе уҡытыусыһы Н. Ф. Мифтахов, Салауат районының Арҡауыл мәктәбе уҡытыусыһы М. М. Мөғтәбәрова, Ишембай районының Әхмәр мәктәбе уҡытыусыһы Р. И. Мөхәмәтҡолова, Илеш районының Үрге Йәркәйҙәге 2-се мәктәбе уҡытыусыһы Г. Х. Ураҙғолова башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыуҙың үҫенсәлектәре тураһында сығыш яһаны. Секцияла ҡатнашҡан уҡытыусылар фәһемле фекер алышыуҙа ҡатнашты.

Конференцияға Башҡортостандың халыҡ шағиры, Социалистик Хеҙмәт Геройы Мостай Кәрим дә килгәйне. Кис яҙыусыларҙың Үрге Йәркәйҙә йәшәүсе халыҡ менән осрашыуы ойошторолдо.

– Кисәне конференцияның дауамы итеп һанайыҡ, – тине Мостай Кәрим миңә. – Уны үҙең алып барырһың.

Район мәҙәниәт йорто халыҡ менән шығырым тулы. Мостай Кәрим, Кирәй Мәргән, Ким Әхмәтйәновтарҙың сығыштары алҡыштарға күмелде. Кисә үҙэшмәкәр артистарҙың концерты менән тамамланды.

Шулай итеп, башҡорт ауылдарындағы балаларҙы туған телдә уҡытыу юлға һалынды. Рус, татар, сыуаш, мари, удмурт, мордва телдәрен уҡытыуҙы камиллаштырыу өсөн дә фәнни-ғәмәли конференциялар уҙғарылып, уларға Сыуаш, Мари, Мордва, Удмурт республикаларынан белгестәр саҡырылды.

1980 йылда республикабыҙ мәктәптәрҙең эш һөҙөмтәләре буйынса РСФСР-ҙың 73 төбәге араһында дүртенсе урынға күтәрелде. Беҙ тик Белгород өлкәһенән,

Мордва АССР-нан, Ставрополь крайынан ғына ҡалыштыҡ. 1971 йылда урта мәктәптәр 722 булһа, 1984 йылда 1160-ҡа етте. 1971 – 1984 йылдарҙа ауыл уҡытыусыларына 500 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлдө, бөтә мәктәптәр тейешле белеме булған уҡытыусылар менән тәьмин ителде. Иң мөһиме – йәштәрҙең 98 проценты мәктәптәрҙә, техникумдарҙа, киске мәктәптәрҙә урта белем алды.

1981 йылдан урындар иҡтисади зоналар буйынса билдәләнеп, Урал төбәгендә Башҡортостан һәр йыл беренсе урында торҙо.

Илдә мәғариф системаһын артабан үҫтереү өсөн офоҡтар киңәйҙе. 1983 йылда 10 йылға иҫәпләгән реформа проекты иғлан ителде. Уны бөтә мәктәптәрҙә уҡытыусылар, ата-әсәләр, мәғариф органдарында, йәмғиәт ойошмаларында тикшереп, өҫтәмә үҙгәрештәр индерҙе. Уларҙың иң мөһимдәре Мәскәүгә ебәрелде. Бер йылдан һуң 1984 – 1994 йылдарға иҫәпләнгән реформа хаҡында ҡарар ҡабул ителеп, ул урта мәктәптәрҙә уҡыу срогын 11 йыл итеп билдәләне. Уҡыу планына компьютер технологияһын өйрәнеү, ҡайһы бер предметтарҙы тәрән үҙләштереү өсөн факультатив дәрестәр индерелде. Урта мәктәптәрҙә уҡығандарҙың барыһы ла эшсе һөнәре алып сығасаҡ, профтехучилищелар урта белем биреүсе уҡыу йорттары итеп үҙгәртеләсәк; уҡыусыларҙы өйрәтеү өсөн автомобилдәр, тракторҙар ике кеше йөрөтөрлөк итеп сығарыласаҡ, уҡытыусыларҙың һәм мәғариф хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы байтаҡҡа артасаҡ ине.

Ләкин реформа яһалма ҡаршылыҡтарға дусар ителеп, аҙағына еткерелмәне. Уға ризаһыҙлыҡ белдереп, уҡытыусыларҙан, ата-әсәләрҙән мәғариф органдарынан, йәмғиәт ойошмаларынан юғары идара итеү органдарына хаттар яуҙы. СССР Халыҡ депутаттары Юғары Советы фән, мәғариф, мәҙәниәт комитетына реформаны яҡлап закон проекты әҙерләргә ҡушты. Уны СССР Педагогия фәндәре академияһының мәктәптәр менән идара итеү һәм финанслау ғилми-тикшеренеү институтының директоры, профессор Г. В. Худоминский, уның урынбаҫары профессор Г. П. Давыдов әҙерләне. Проекттың милли мәктәптәргә ҡағылған өлөшөн әҙерләү өсөн мине лә саҡырҙылар. Милли мәктәптәрҙә туған тел һәм әҙәбиәт, крайҙың тарихы, милли мәҙәниәте уҡытылғанлыҡтан, математика, сит тел дәрестәре аҙна һайын берәр сәғәткә ҡыҫҡартылды. Юғары кластарҙа аҙналыҡ дәрестәр һаны 40 сәғәткә етте, ҡайһы бер мәктәптәрҙә унан да артып китте. Был физиологик норманан күпкә артыҡ ине. Шуға күрә беҙ проектҡа ошондай пункт индерҙек: «Милли мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың дәрестәр һанын нормаға килтереү өсөн союздаш һәм автономиялы республикаларҙың хөкүмәттәренә милли урта мәктәптәрҙә уҡыу срогын 12 йылға еткерергә рөхсәт итергә».

Проект профилле комитет рәйесе Беляевҡа оҡшаны. Буласаҡ закон «Законодательные основы общеобразовательной средней школы» тип атала ине. Беляев миңә лә сығыш яһарға тәҡдим итте. 1988 йылдың 16 – 17 февралендә уҙған кәңәшмәлә унлап халыҡ депутаты, СССР Мәғариф министрлығы, СССР Педагогия фәндәре академияһы вәкилдәре ҡатнашып, проект буйынса доклад менән Г. П. Давыдов сығыш яһаны. Проекттың милли мәктәптәр өлөшө хаҡында мине тыңланылар. Милли мәктәптәрҙә уҡытыу срогын 12 йылға еткереүгә бер депутат ҡаршы сыҡты. Мин уға ошондай яуап бирҙем:

– Европала ике илдә генә – СССР-ҙа һәм Болгарияла, урта мәктәптәрҙә уҡыу срогы 11 йыл, башҡаларында 12 – 13 йыл, Көньяҡ Америкала – 12 – 14 йыл.

СССР Педагогия фәндәре академияһы академигы Малькова ла минең тәҡдимде яҡланы. Проектты хупланылар, ләкин ул Юғары Совет сессияһына

сығарылманы. 1982 – 1985 йылдарҙа бер-бер артлы КПСС Үҙәк Комитетының өс секретары: Л. И. Брежнев (1982), Ю. В. Андропов (1984), К. У. Черненко (1985) донъя ҡуйғандан һуң,  Генераль секретарь вазифаһына М. С. Горбачев һайланды. Бер ниндәй программаһыҙ, ул социаль-иҡтисади үҫеште тиҙләтергә, 2000 йылда бөтә кешеләрҙе торлаҡ менән тәьмин итергә, магазиндарҙы аҙыҡ-түлек менән тултырырға вәғәҙә итте. Ләкин уларҙың береһе лә үтәлмәне, илдә иген, ит, һөт, көнкүреш техникаһы, кейем етештереү ҡырҡа кәмене. Райондарҙан башлап үҙәк идара итеү органдары етәкселәренә тиклем алмаштырыу башланды.

1987 йылда Башҡортостанда ла КПСС Өлкә комитеты, Юғары Совет, хөкүмәт башлыҡтары алмаштырылды. Өлкә комитеттың беренсе секретары итеп Үҙәк Комитет тәҡдим иткән Р. Х. Хәбибуллин һайланды. Республика менән таныш булмаған, быға тиклем күрше төбәктәрҙә нефть сәнәғәтендә эшләгән был кешегә үтә ҙур бурыс йөкмәтелде. Район менән дә идара итеү тәжрибәһе булмаған кешегә, күп милләтле, сәнәғәте һәм ауыл хужалығы ныҡ үҫешкән, РСФСР-ҙың иң ҙур республикаһын етәкләү еңел булмағандыр. Уның мәктәптәргә килтергән зыянына ғына күҙ һалайыҡ. Башҡорт теле һәм тарихы ғалимдары, яҙыусылар, республиканың элекке етәкселәре менән кәңәшләшмәйенсә, көнбайыш, ҡайһы бер башҡа райондарҙағы башҡорт ауылдарында ул балаларҙы татар телендә белем биреүгә күсерҙе. Башҡорт мәктәптәренең иҫәбе күпкә кәмене.

1991 йылда СССР тарҡатылып, М.С. Горбачев бөтә вазифаларынан бушатылды. «Перестройка»ны ниндәй маҡсат менән башлауы хаҡында ул Төркиәнең Анҡара университетында сығыш яһағанда былай аңлатты: «Целью всей моей жизни было уничтожение коммунизма... А для ее достижения я должен был заменить все руководство КПСС и СССР, а также руководство во всех социалистических странах. Мир без коммунизма будет выглядеть лучше. После 2000 года наступит эпоха мира и всеобщего процветания... Но в мире еще сохраняется сила, которая будет тормозить движение к миру и созиданию. Я имею в виду Китай». 1989 йылда М.С. Горбачев Ҡытайҙа булған саҡта студенттарҙың ҙур демонстрацияһы уҙған. Ул, студенттар алдында сығыш яһап, был илдә лә үҙгәртеп ҡороу башларға тәҡдим итергә теләгән, ләкин Ҡытай етәкселәре уға осрашыуҙы рөхсәт итмәгән. 2008 йылда АҠШ-тың элекке президенты өлкән Д. Буш юҡҡа ғына М.С. Горбачевҡа Азатлыҡ миҙалы һәм 100 мең доллар бүләк итмәгәндер?!

1990 йылда М. З. Шакиров менән урамда осраштыҡ. Һөйләшеп ултырайыҡ тип, ул мине өйөнә алып ҡайтты. Ул партия хеҙмәткәрҙәре өсөн төҙөлгән йорттағы өс бүлмәле ғәҙәти фатирҙа йәшәй икән. Бергә эшләгән йылдарҙы иҫкә төшөрҙөк.

– Көнбайыш райондарҙағы башҡорт ауылдары балаларын туған телдә уҡытыуға күсереп дөрөҫ эшләнек, – тине ул. Ә бына Р. Х. Хәбибуллиндың башҡорт ауылдарында уҡытыуҙы татар теленә күсереүен ҙур хата тип иҫәпләүен белдерҙе.

1993 йылда Башҡортостан Республикаһының беренсе президенты итеп М. F. Рәхимов һайланды, башҡорт теленә дәүләт статусы бирелде. Башҡорт ауылдарында балаларҙы уҡытыу йәнә туған телгә күсерелде. Башҡорт ауылдарының тарихын, тамырҙарын тәрәнерәк белергә, милләтен билдәләргә Ә. З. Әсфәндиәровтың «Башҡортостан ауылдарының тарихы» китабы, «Ағиҙел» журналында, «Башҡортостан», «Киске Өфө» гәзиттәрендә баҫылған мәҡәләләр, телевидение

һәм радио тапшырыуҙары, ауылдарҙа уҙғарылған «Шәжәрә байрамдары» ҙур йоғонто яһаны. 2010 йылда Башҡортостан Республикаһы Президенты итеп Р. З. Хәмитов ҡуйылғас, ул дәүләт статусы алған башҡорт теленә, уны уҡытыуға үҙенең ыңғай ҡарашын белдерҙе. Башҡорт телен һаҡлауҙы, уны артабан үҫтереүҙе үҙенең иң яуаплы бурыстарының береһе итеп һанауын әйтте. Рөстәм Зәки улының был изге эшендә уңыштар теләйек.

Башҡорт телен һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә, уның абруйын күтәреүҙә «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы» конкурсы ҙур әһәмиәткә эйә. Быйыл ул ун етенсе тапҡыр үткәрелде. Конкурста 57 кеше, шул иҫәптән бишәү – Һамар, Силәбе, Ырымбур өлкәләренән, ҡатнашты. Туған телде тәрәнерәк өйрәнеү өсөн дәрестән һуң уҡыусыларҙың буш ваҡытын файҙалы итеп уҙғарыу тәжрибәһен дә ҡулланырға кәрәк. Бөйөк Ватан һуғышына тиклемге йылдарҙа юғары класс уҡыусыларының күптәрендә йәдкәр альбомдары була торғайны. Улар бер-береһенең альбомдарына шиғырҙарын, уймаҡ хикәйәләрен яҙҙы, хыялдары менән уртаҡлашты. Ҡайһы берәүҙәрҙә улар әле лә һаҡланғандыр, моғайын.

Һуғыштан һуң яҙыу машинкаһын, һуңғы йылдарҙа компьютерҙы файҙаланып, мәктәптәрҙә журналдар, китаптар сығарыла. Китаптарын типографияла баҫтырған мәктәптәр ҙә бар. Журналдар һәм китаптар башлыса юбилейҙарға арнала. Күберәге Ватан һуғышында һәләк булған йәки һуғышта ҡатнашҡан, тылда эшләгән олаталарына һәм өләсәләренә, яҡындарына бағышлана. Уларҙың тиражы ҙур түгел. Бер нисәһе мәктәп музейҙарында һаҡлана. Оҙаҡ йылдарҙан һуң улар бик ҡиммәтле ҡомартҡыға әйләнәсәк.

Уҡыусыларҙы журнал һәм китап әҙерләүгә йәлеп итеү, киләсәктә уларҙың ҡайһы берҙәренә журналист, хатта яҙыусы булып китергә ярҙам итәсәк. «Киске Өфө» гәзитендә М. Исхаҡовтың «Конкурс – 12» мәҡәләһен (7 – 13 апрель, 2012) уҡығас, шуға иғтибар иттем: жюри ағзаһы, БДУ доценты, элек Ҡырмыҫҡалы районында мәктәп директоры булып уңышлы эшләгән, хәҙер йыш ҡына гәзиттәрҙә шиғырҙарын баҫтырған, «Йыл уҡытыусыһы» конкурсы еңеүсеһе лә булған Фәнзил Санъяровтың конкурста ҡатнашыусыларға әйткән фекерҙәре иғтибарға лайыҡ. Ысынлап та, уҡытыусылар араһында ир-егеттәр аҙ. Киләсәк конкурстарҙа унда ҡатнашыусыларҙы элекке йылдағы еңеүселәр менән осраштырыу ҙа бик файҙалы булыр ине.

Тағы бер кәңәш. Сит өлкәләрҙән килгән уҡытыусыларҙың барыһына ла дәртләндереү грамотаһы тапшырыу, уларҙың исемдәрен гәзиттә күрһәтеү – ҙур әхлаҡи ярҙам булыр ине. Улар араһынан, бәлки, еңеүселәрҙе айырым билдәләргә кәрәктер.

**P.S.** XX быуаттың 20 – 30-сы йылдарында республикабыҙ халыҡтарының үҙ-ара бәйләнеше иң сетерекле проблемаларҙың береһе булып, ул хәл мәғарифҡа ла ҡағылған. Юғарыла мәғариф халыҡ комиссарҙарының йыш алмаштырылыуы, күптәренең аяныслы яҙмышы хаҡында әйтелде. Башҡорт халҡының күпкә кәмеүе, балаларын туған телдә уҡытыуға яһалма ҡаршылыҡтар тыуҙырыу тураһында фекерҙәр гәзит-журналдарҙа һирәк кенә күренгеләгән. Был хаҡта оҙаҡ йылдар мәғариф системаһында, «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналының баш мөхәррире, КПСС Өлкә комитетында, Өфө ҡала комитетының идеология секретары, пенсияға тиклем Йәмәғәт ойошмалары берлеге архивы директоры булып эшләгән Ғ. Д. Ирғәлин байтаҡ материал туплаған. Шуларҙың ҡайһы берҙәренә генә иғтибар итәйек.

Башҡорттарҙың кәмеүенең төп сәбәбе – уларҙың ассимиляцияға дусар ителеүендә, тип раҫлай Ғ.Д. Ирғәлин. 1897 йылда, Рәсәйҙә халыҡтарҙың иҫәбен алғанда, хәҙерге Башҡортостан биләмәләрендә башҡорттар – 40,98, рустар – 37,9, татарҙар – 8,41, башҡа милләттәр 12,71 процент тәшкил иткән. 1920 йылда башҡорттар – 32,06, рустар – 38,24, татарҙар – 20,23, башҡа милләттәр – 9,47; 1939 йылда башҡорттар – 21,3, рустар – 40,6, татарҙар – 24,6, башҡа милләттәр 13,5 процент теркәлгән. 1959, 1970, 1989 йылдарҙа уҙғарылған СССР халыҡтары иҫәбен алыуҙа ла башҡорттар урыҫ һәм татарҙарға ҡарағанда аҙыраҡ күренә.

Ғ.Д.Ирғәлин, 1910 йылда Ҡазан типографияһында баҫылып сыҡҡан «О татаризации народов Приволжья» исемле китаптан (авторы күрһәтелмәгән) өҙөк килтергән: «Татарское духовенство, татарская интеллигенция проводили миссионерскую политику по татаризации народов Приволжья: чувашей, марийцев, удмуртов... На таком же положении, как приволжские инородцы, находились некогда киргизы (тогда так называли казахов) и башкиры, а теперь они не отделяют себя от татар. Поэтому, пока не поздно, теперь же необходимо положить преграду татарскому влиянию на инородцев. В этой борьбе в защиту слабых инородцев от поглощения их исламизмом и татаризмом должны принять участие государство и общество».

1937 йылдың 22 сентябрендә «Известия» гәзитендә «Башҡортостанда халыҡ мәғарифының торошо» хаҡында мәҡәлә баҫылған. Ғ. Д. Ирғәлин ошо мәҡәләнән дә өҙөк килтерә: «... в республике систематически срывают преподавания в школах на родном башкирском языке. На всю республику есть всего 9 башкирских средних школ. Только в последние дни начала работать первая средняя школа в столице Башкирии – Уфе. Башкирских детей заставляют учиться на чужом для них татарском языке». «Советские архивы» журналында (1988 й., №5), башҡорт мәктәптәренең аҙ булыуының ошондай сәбәбе күрһәтелгән: «В 1929 – 1934 годах в Башкирской АССР, в некоторых районах с башкирским населением создавались только русские или татарские школы, так как местные работники школ считали, что создание школ на башкирском языке невозможно из-за отсутствия кадров и учебников».

Ғ.Д.Ирғәлин килтергән факттарға өҫтәп, шуны әйтке килә: башҡорттарҙы татарлаштырыу теләге ҡайһы берәүҙәргә хәҙер ҙә тынғы бирмәй. «Новые известия» гәзитенең хәбәрсеһе Александр Перовский: «В языкознании давно познавший толк» мәҡәләһендә (27.02.2004) былай тип яҙҙы: «... в серии статей «Кто ты, татарин?», опубликованной весной 2002 года в газете «Звезда Поволжья», ближайший советник – идеолог президента Татарстана по национальному вопросу Рафаиль Хакимов с предельной откровенностью писал о том, что башкиры – часть татарского народа, а их язык и республика – порождение большевиков. А в ноябрьском номере официального журнала «Татарстан» за 2003 год Р. Хакимов совершенно однозначно утверждает, что «башкирский язык – лишь диалект татарского, а не самостоятельный язык».

Р. Хәкимовтың ике миллионлы башҡорт халҡы хаҡында ошондай уйҙырмаһына «Ағиҙел» журналы уҡыусылары үҙҙәре баһа бирер, моғайын.

**Сабир ЙЫҺАНШИН,**
**1971 – 1985 йылдарҙағы Башҡорт АССР-ы мәғариф министры.**



**Рәшит**
**САБИТ**

# ЕГӘН БУЙҠАЙҘАРЫН БУЙЛАНЫМ

*Зөфәр ағайым иҫтәлегенә*

Эй, Егәнем! Гүзәллегеңде һүрәтләр өсөн ҡәләмемдең генә көсө етмәҫтер, сөнки уның өсөн рәссам булырға кәрәк. Әммә һиңә йөрәгем түрендә йөрөткән оло һәм ғүмерлек мөхәббәтемде белдерә алам. Ҡайҙа барып, ҡайҙа йөрөһәм дә, һине һағынып ҡайтам, буйҙарыңды буйламай, көмөштәй һыуыңа, йә шаршылы, йә талғын ағышыңа, ярҙарыңда үҫкән талдарыңа, аҫыл ҡоштарыңдың моңдарына һоҡланмай киткәнем юҡ.

Егәнем! Һине атайым Мәхмүт тә, ағайым Зөфәр ҙә, ҡустым Тәлғәт тә, ике туған ағайҙарым Ғәлләметдин менән Хәмиҙулла ла, Винер ҙа яратты. Бөгөн уларҙың береһе лә яҡты донъяла юҡ, әммә һиңә булған ҡайнар мөхәббәттәре, ихтимал, минең йөрәгемә күскәндер. Шуға ла мин, гүзәл Егәнем, һиңә элеккегә ҡарағанда ла ашҡыныбыраҡ киләм, ошонда туғандарымды күргәндәй, тауыштарын ишеткәндәй булам. Рухым улар менән серләшә...

## Тирмән быуаһы

...Май башы. Нәшриәттә мөхәррир вазифаһынан бер нисә көнгә бушап, Яңғыҙҡайыныма ҡайттым. Әсәйем, склероз менән сирләһә лә, үҙ аҡылында йөрөп ята. Ул, орсоҡтай ғына ҡарсыҡ, күрешкәс тә ҡыуаныс менән самауырын ҡуя һалды. Ул арала Зөфәр ағайым килеп етте, ҡайтҡанымды ҡапҡа төбөнән күреп ҡалған икән. Сәй эскәс, Егән буйына сығырға теләгәнемде әйттем.

– Әйҙә, улайһа, бергәләп йөрөп ҡайтайыҡ, – тине ағай ҙа.

50 – 60 йәшлек ирҙәр булһаҡ та, әсәй кәңәшен әйтергә онотманы:

– Яҙғы ташыу бөтмәгән, берүк һаҡланып йөрөгөҙ!

– Борсолма, әсәй, шаярырға бала-саға түгелбеҙ, – тинем.

---

*Рәшит Сабит (1937) Ғафури районының Яңғыҙҡайын ауылынан. БДУ-ны тамамлап, республика матбуғат сараларында, «Китап» нәшриәтендә, Яҙыусылар союзы аппаратында эшләне.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе 75 йәшлек юбилейы менән тәбрикләйбеҙ.*

Селәү ҡаҙып, ҡармаҡ алып ҡуҙғалыуыма, ағайым да ихатаһынан күренде.

– Түбәнге тирмәнгә барайыҡ, – тине ул.

Урам осонан Егәндең бирге яғындағы олпат тирәктәре, ҡыҙыл балсыҡлы яры ус төбөндәгеләй күренә. Тирмәне күптән булмаһа ла, ул урынды тирмән исеме менән йөрөтәбеҙ. Икебеҙҙең дә үҫмер саҡтарыбыҙ шунда үтте.

1956 йылда колхоз етәкселәре һыу тирмәнен бөтөрөп, уны электр энергияһына көйләне. Күрәһең, һыу тирмәне менән уның быуаһы мәшәҡәтле күренгәндер. Егәндең бейек булмаған ярында баҫып торабыҙ. Яҙғы ташыу шаҡтай ҡайтһа ла, йылға ярһып, ярҙарына бәрелеп-һуғылып аға әле. Ҡасандыр тирмән булыуын хәтерләткән, хәҙер бер ни ҙә ҡалмаған, һыу уртаһында ике бағана төбө генә һерәйеп тора.

– Анау бағана төптәре кәүездеке түгел микән?

– Дөрөҫ самалайһың, – тине Зөфәр ағай. – Йылға яҙғы ташҡында гел ошо ярҙы емерә. Тирмән өйөнөң урыны ла йылға эсендә ҡалды.

«Тирмән өйө» тигәс, бер ваҡиға хәтергә төштө.

...Бала саҡ. Ҡояшлы йылы көн булыуға ҡарамаҫтан, тирмән өйөнән дүрт-биш метрҙа ғына усаҡ яна. Беҙ, малай-шалай, шунда өс-дүрт егеттең үҙ-ара шаярып һөйләшеүен тыңлап торабыҙ. Бер саҡ өйҙән тирмәнсе Зәйнетдин килеп сыҡты ла:

– Тиҙәк себендәре шикелле, ниңә бында йыйылдығыҙ?– тип күҙҙәрен аҡайтты. Ул баҙыҡ кәүҙәле, ҡалҡыу буйлы, дүрткел йөҙлө кеше ине. Егеттәр тынып ҡалды, беҙ ҙә тирмәнсегә ҡарап ҡаттыҡ. Көтмәгәндә ул аяҡ аҫтында йөрөгән апаҡ бесәй балаһын тотоп алды ла янып торған усаҡҡа ташланы: «Йөрөмәһен донъя бысратып»,– тип мығырҙаны үҙе. Бисара, аяныслы мыяулап, ситкә һикерҙе лә минең аяҡ араһына килеп һыйынды. Күтәреп алырға эйелгәйнем, Зәйнетдин мине этеп ебәрҙе лә бесәй балаһын йылғаға ырғытты. Малайҙар «аһ!» итте, минең дә күҙҙәремдән йәш атылып сыҡты. Ул арала бесәй балаһы кәүез алдындағы ташҡынға эләгеп, тирмән турбинаһына төшөп тә китте. Түбәндә, ташлыҡта, ҡармаҡ һалған малайҙар уның ағып барған үле кәүҙәһен күреп ҡалған.

Тирмәнсе Зәйнетдин тураһында йәнә бер күңелһеҙ хәтирә. Беҙ тирмән тирәләй ҡыуышып уйнарға ярата инек. Бер саҡ Йәһүҙә исемле иптәшебеҙ яңылыш Зәйнетдингә килеп бәрелде. Теге аты-юлы менән һүгенеп, малайҙы тибеп осорҙо. Йәһүҙә ярты сәғәт самаһы тора алмай ятты, аҙна буйы сирләп йөрөнө. Бынан һуң беҙ тирмәнсенең күҙенә салынмаҫҡа тырыштыҡ. Байтаҡ йылдар үткәс, уның аҫылынып үлеүе тураһында ишеттем.

Һыу төбөнән ҡалҡып торған ике бағана төбө ошо әҙәм тураһындағы хәтирәне уятты. Меҫкен бесәй балаһы тап шул бағаналар алдына барып төшкәйне бит. Күңелем әрнеп ҡуйҙы.

Түбәнге тирмән быуаһы бер ниндәй техникаһыҙ, ҡул көсө менән төҙөлгәйне. Йәш йүкә, ҡарама, саған, имән ағастарын йылғаға буй һалалар ҙа, ярҙан сығарылған таштарҙы ватып, шуның менән ағас ҡатламын баҫтыралар. Был мәшәҡәтле эш яҙғы ташҡындан һуң йыл һайын тиерлек ҡабатланып, быуа үрендә Егән һыуы ике ярым-өс метрға күтәрелә. Шулай ҙа ағастар, таштар араһынан юл табып, күпмелер һыу түбәнгә һарҡый һәм аҡ һыртлы ажар тулҡынлы ташҡынға әүерелә. Шунда көтөү-көтөү ваҡ балыҡтар йыйыла.

Егән ярҙарына ҡайтҡас, быуаға ҡармаҡ һалырға киләбеҙ. Уның эре-эре таштарына ултырып, сабаҡтарҙы бер-бер артлы тартып сығарабыҙ. Дуҫым Сәйфетдин

менән күберәк ҡаптыра торғайны. Уға ҡарап көнләшеп тә ҡуя инем. Ғәлләм ағай быуаның уртаһындараҡ ҡармаҡ һала. Алабуғаларҙы ҡыйрата ғына, ҡайһы саҡ суртан да ҡаптыра. Шәйҙулла ағай иһә быуаның арғы ярында ғәләмәт оҙон һап менән балыҡ тота. Винер ағай тирмәндән түбәндәге шаршылыҡта ташбаш ҡаптыра. «Ҡыҙҙырылған ташбашҡа етәме ни инде», – ти ул. Зөфәр ағай ҙа быуаға йыш йөрөй ине. Һуғыш осороноң аслыҡ йылдарын балыҡ менән иҫән-аман үттек...

Шуларҙы кисергәс, быуаның юҡлығы күңелемдә үкенес, һағыныу тойғоһо уятты. Был ауыл тирәһендәге мөхиттең ярлыланыуына килтерҙе. Егәндә һыуҙың кәмеүе арҡаһында, ер аҫты һыуҙары менән туйынған Тамъян, Ерек мороно, Мулла сабыны кеүек күлдәр ҡороно. Ауыл янындағы Олоһаҙ ҙа кипте. Унда бит төрлө ҡоштар, ҡыр өйрәктәре оялай ине. Ә күлдәрҙә табан, ҡара балыҡ, суртандар үрсей торғайны. Хәҙер Ағиҙелдән дә балыҡ йылдан-йыл әҙерәк үрләй, Ағиҙелдә лә экологияның насарланыуынан киләлер был.

Беҙ баҫып торған яр морон рәүешендә Егәнгә инеберәк тора. Морон ағымды уңғараҡ бора ла, һул ҡулда аҙ ғына өйөрөлөп ятыусы ҡултыҡ барлыҡҡа килә. Бындай урынға балыҡтар йыйылыусан. Күп тә үтмәй, бер күкйөндө ярға ырғыттым. Икенсегә сабаҡ ҡаптырҙым. Ҡармаҡты өсөнсөгә ырғытыуым булды, ҡалҡыуысым һыу төбөнә китте. Ҡармаҡ һабын ҡапыл күтәргәйнем, балыҡтың башы ғына күренеп ҡалды, лескам «серт» итеп өҙөлдө.

– Кәмендә килограмлы ажау ине, – тине ағайым, уфтанып.

Алмаш ҡармаҡ алмауыма кәйефем бер аҙ ҡырылды, ләкин: «Эй, күрмәгән балыҡмы!» – тигән уй тынысландырҙы. Күктә яҙ ҡояшы йылмайғанда, Егәнем гөрләп-шаулап аҡҡанда, арғы яҡта әкрен генә елгә йәм-йәшел бөҙрә талдар тирбәлгәндә, ҡоштарҙың дәртле тауыштары яңғырағанда күңелһеҙләнергә мөмкинме?! Ҡармағымды юғалтыуымды ла онотоп:

– Матур шул беҙҙең яҡтар! – тип ҡуйҙым.

– Тәбиғәтебеҙ һәйбәт,– тине ағай, хуплап. − Тик ҡәҙерен белмәйбеҙ. Ана, тегендә ҡара әле! – тип ул Егән аръяғына күрһәтте. – Оҙон ау һалып ҡуйғандар. Хәҙер һәр малай-шалайҙа арзанлы Ҡытай, Вьетнам ауҙары күп. Ау, йылым, нәрәтә менән балыҡ тотоу тыйылған да бит. Тик законды беҙҙә бар тип тә белмәйҙәр шул. Донъя былай барһа, килер ваҡыт: «Элек был йылғала балыҡтар ҙа булған, имеш», − тип һөйләрҙәр.

– Эйе, шулай булыуы ихтимал, − тим, уйға ҡалып.

Һуңғы илле-алтмыш йылда Егәндә һыу кәмендә – яртылаш, ә балыҡтары аҙ тигәндә лә бер дүрт-биш тапҡырға кәмене. Киләсәктә ул кескәй генә инешкә әйләнмәҫ, тип кем әйтә ала? Хәйер, тәбиғәттең ҡото китеүенә күп йәһәттән кеше үҙе ғәйепле. Беҙ торған урындан бер саҡрымда Егән аръяҡлап Тархан тигән ҡалҡыулыҡ аҫтынан элек инеш ағып сыға ла Егәнгә ҡоя ине. Егерме-егерме биш йыл элек ул да ҡороно. Бер юл төшкәндә инештең башын барып ҡараным: мал тапап ҡороҡҡан.

Егәндең ҡушылдығы Ҡаламан асылда инешкә әйләнде. Бынан 50 йылдар элек ат йөҙҙөрөрлөк тәрән ине, беҙҙең ауылдан ҡайһы берәүҙәр унда ҡармаҡ һалырға ла йөрөнө. Ишетеүемсә, Ҡаламандың да сығанаҡтарын малдар тапаған икән. Егән буйы әрәмәләрендә мал йөрөтөү, тирәк һәм өйәңкене киҫеү һыу буйына ҙур зыян килтерә, сөнки был ағастар йәйге эҫе, ҡоро көндәрҙә йылға-күлдәрҙең һыу балансын һаҡларға ярҙам итә.

Ул арала ағайым дүртме-бишме сабаҡ ҡаптырырға ла өлгөргәйне. Полиэтилен тоҡсайҙағы балыҡтарҙы күтәреп ҡараным да:

– Беҙгә етерлек, – тинем. – Әйҙә, Аблай морононан әйләнеп ҡайтайыҡ.

## Аблай мороно һәм ҡыйыу төлкө

Яр буйлап ағым үренә атланыҡ. Көтөү йөрөгәнлектән, аяҡ аҫты тап-таҡыр. Бары унда-бында әрһеҙ дегәнәк һабаҡтары күҙгә ташлана. Бармаҡ башындай ғына үлән ҡояшҡа ынтыла. Яҙ һәр аҙымда үҙен һиҙҙерә. Таллыҡта ҡоштар күңелле сырылдаша. Мине яҙ кәйефе, тыуған яҡ күрке биләгән. Аблай моронона етәрәк сиҙәмдә ятҡан берәү ҡаршыбыҙға тороп баҫты. Күршебеҙ Винер ағай икән.

– Ҡармаҡ һалырға сыҡтығыҙмы? – тине ул, икебеҙ менән дә күрешеп.

– Нимә, Винер энем, төндә йүнләп йоҡлай алманыңмы әллә? Шешенеп бөткәнһең, – тине Зөфәр ағай, уның йөҙөнә ҡарап.

– Йоҡланым да ул, кисә ныҡ ҡына «төшөрөлгән», «баш төҙәтергә» рәт юҡ. – Винер ағай уфтанды. – Балыҡ кермәнеме икән тип, мурҙаны ҡарарға килгәйнем, яр башына ташлап киткән мөртәттәр.

Зөфәр ағайҙың йөҙөндә үкенесме, ҡыҙғаныумы сағылды:

– Эх, ҡустым, шул «төшөрөү»еңде туҡтатһаң ине, – тине ул. – Харап ҡына булаһың бит.

– Зөфәр ағай, һин дә аҡыл өйрәтмә инде. – Винер ағай үпкәләгәндәй итте. – Нисек теләйем – шулай йәшәйем. Мин – вольный казак.

– Һин дә беҙҙең Сабитовтар нәҫеленән бит. Мин һиңә ағай, мин әйтмәһәм, кем әйтер? Кемгә кәрәк һин?! – тине Зөфәр ағай ҡоро ғына.

Винер ағай ҡәнәғәтһеҙ генә ниҙер мығырҙаны. Уның хәрби-диңгеҙ флотында хеҙмәт иткән ваҡытта отпускыға ҡайтҡан сағы хәтергә төштө. Ниндәй күркәм матрос ине! Яурындары киң, беләк мускулдары ҡабарып тора. Көрәш буйынса Алыҫ Көнсығыш чемпионы. Шул саҡ беҙ ай буйы тиерлек бәрәңге баҡсаһы артындағы сиҙәмдә көрәш менән шөғөлләндек. Ул миңә классик көрәш алымдарын өйрәтергә тырышты. Мин, был спортты яратҡанға, Винер ағайҙы хәлдән тайҙырмайынса туҡтамай инем. Ә унынсы класты тамамлаған йылды, ауыл һабантуйында бер-бер артлы өс егетте ырғытып, арыу ғына бүләк алдым.

Әле элекке көрәшсенең туҙған сәсенә, төҫө ҡасҡан йөҙөнә, шешенке күҙ ҡабаҡтарына ҡарап: «Эх, Винер ағай, матрос сағыңдағы матурлығыңды ҡасан юғалттың икән?» – тип уйлап ҡуйҙым. Ихтимал: «Йылдар, энем, йылдар», – тиер ине ул. «Юҡ, йылдар ғына түгел, «йәшел йылан» да күркеңде урлаған бит», – тип әсендем эстән генә.

Ул арала Винер ағай яр башында ятҡан мурҙаһын Егәнгә ташланы ла йыуан ғына кәртә менән һыуға батырып ҡуйҙы. Ағай менән мин дә уның янына килдек.

– Винер ағай, мурҙа менән булашмаһаң ине, – тинем. – Браконьерҙар ҡоралы бит ул.

– Ниндәй браконьерҙар ҡоралы булһын? – Балыҡсының ҡаштары өҫкә күтәрелде: – Ана, браконьерҙар ҡоралы. – Ул киҫкен хәрәкәт менән Егән үренә күрһәтте: – Таллыҡ буйында – Инсафтың, Түбәнге тирмән үрендә – Әнүәрҙең, Түркештә – Фәристең, Ҡыҙыл яр аҫтында Мирхәттең алтмышар – етмешәр

метрлы ауҙары тартылған. Ә Ағиҙелгә етәрәк Мораҡ, Ҡарлы ауылдары браконьерҙары йылғаны ау менән тултырған.

– Ана шул арҡала Егәндә балыҡ бөтөп бара, – тинем мин әрнеү менән. – Ҡармаҡҡа ла ҡапмай. Ҡапһа ла, ваҡ-төйәк кенә.

Аблай төбәге – миңә иҫтәлекле, ҡәҙерле урын. Тәбиғәттең гүзәл мөйөшө ул. Уны ярымтүңәрәк рәүешендә Үлегән күле ураҡкан. Ошонда йәшел таллар, муйыл, балан, эт муйылы, гөлйемеш, ҡарағат, бөрлөгән үҫә. Һирәкләп өйәңке, тирәк, ерекләр ҙә осрай. Һуңғы йылдарҙа әрһеҙ америка сағандары ла күренә башланы. Ҡыҫҡаһы, флораһы бай төбәктең уртаһында өс гектар самаһы аҡлан бар. Унда ер еләге уңа. Гүзәл төбәкте, айырыуса Егән буйҙарын, иркенләп һыйыр көтөүе тапай, сөнки көтөүсе булып йыш ҡына аҡылға һай, тәбиғәтте уйламаған заттар яллана. Ошо Аблай төбәге янында йылғаның һул яры һыуға морон булып инеп тора, бында Егән тәрән һәм балыҡлы ла ине. Хәҙер морон юҡ, уны яҙғы ташҡындар тигеҙләгән.

...Миңә ун йәш тирәһе ине. Күрше малайҙар менән ошонда ҡармаҡ һалырға килдек. Тере ташбашҡа суртан, ажау йәки опто ҡаптырмаҡсы булдыҡ. Бына, ҡармаҡ һалып, яр буйында теҙелешеп торабыҙ. Бер саҡ лескамды ҡаты ғына тартып, нимәлер ҡармағымды төпкә һөйрәне. «Бер-ике минут көт! – тип кәңәш бирә Сәйфетдин. – Суртан, моғайын. Әкренләп ташбашыңды йота».

Мин түҙемһеҙләнәм, тулҡынланам. Беләк буйы суртан булһа, кизе-мамыҡ ебем түҙер микән? Сәйнәп өҙмәҫме? Ҡармағымды ипләп кенә тарта башланым. Бик еңел килә, әллә балығым ысҡынды микән? Ҡәләм ҙурлыҡ ҡына суртан һөйрәп сығарғас, аптырап ҡалдым.

– Ҙурҙы көткәйнеңме? – тип көлөштө малайҙар.

– Хәҙер ҙуры ҡаба, кило ярымлыһы, – тинем дә, ҡармағыма тере ташбаш ҡуйып, йылғаға ташланым. Оҙаҡ көттөрмәй, лескам һиҙелер-һиҙелмәҫ тартылып ҡуйҙы. Ҡармаҡ һабын күтәрһәм, ялпылдап, беләк буйын суртан килеп сыҡмаһынмы! Табышымды ярҙан ситкәрәк ташлап, иҫем китеп ҡарап торғанда, иптәштәрем дә килеп етте.

– О-о, шә-әп суртан! – тине Сәйфетдин, балыҡты ҡулына алып. – Кило ярым ғына тарта.

– Күрәҙәлегең бар икән, – тине Әмир. Башҡалар ҙа һоҡланыуҙарын белдерҙе.

Ике суртанымды шыйыҡ талға айғолаҡтарынан эләктереп, тиҙерәк әсәйемә күрһәтергә ауылға йүгерҙем. Был мин тотҡан ҙур балыҡтарҙың тәүгеһе ине.

Яҙын балыҡты Түбәнге тирмән буйында, йәйен Егәндең төрлө урындарында тотабыҙ. Һәүәҫкәр балыҡсы бер урынға ғына йәбешеп ятмай ул. Аблай мороно – балыҡлы һәм яратҡан урындарымдың береһе. Уға бәйле иҫтәлектәрем байтаҡ. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та булған береһен генә хәтергә төшөрөп китке килә.

Июнь башы ине, буғай. Аблай моронона балыҡ тоторға килдем. Бәләкәй силәгемдә унлап ташбаш йөҙөп йөрөй. Береһен буйлатҡыс ҡармағыма эләктереп, һыуға ташланым. Шунда уҡ ташбашымды нимәлер ҡарпыны. Бер аҙҙан ҡармаҡ һабын күтәрһәм, ташбаш та, ҡармаҡ та юҡ.

Икенсе ҡармаҡ бәйләп, ташбаш эләктереп һалыуым булды, теге нәмә быныһын да йотто. Ике ҡатлы капрон еп бысаҡ менән киҫкән кеүек ине. Шул рәүешле биш ҡармағым юҡ ителеп, запас та бөттө. Күңелһеҙләнеп, ҡайтырға йыйындым. Шул саҡ таллар араһынан Ғәлләм ағай күренде. Ҡулында – оҙон тал ҡолға, һирәк кенә шаҙралы йөҙө һәр ваҡыттағыса етди.

– Ҡайтырға булдыңмы?  Ҡапмаймы? – тип белеште.

Хәлде һөйләп биргәс, ағай, бер аҙ кәпәренгәндәй, яр буйына килде:

– Мин ул «януар»ҙы хәҙер һөйрәп сығарам.

Силәгемдән бер ташбаш алып, ҡармағына эләктерҙе лә мин һалған урынға ташланы. «Януар» көттөрмәне, йәнә ҡапты. Ғәләм ағай, башын бороп, ҡашын һикертеп ҡуйҙы: йәнәһе, хәҙер ул яр башында ялтырап ятасаҡ. Ҡулғаһын күтәргәйне, буш ебе генә килеп сыҡты.

– Әһә, – тине балыҡсы, ҡомары килеп, – һиҙҙем эшеңде, ҡойормон тешеңде.

Ул ебенә икенсе ҡармаҡ тағып ҡалды, мин ҡайтып киттем. Кискә табан Ғәләм ағай янына инеп, уның буш ҡул менән ҡайтҡанын белдем.

– Икенсе ҡармаҡты ла алып ҡалды, ен! – тине ул, йәне көйөп. – Өсөнсө ҡармаҡ менән күпме ултырһам да, ҡапманы.

Хәл быының менән генә бөтмәне, ҡыҙығы ун биш – егерме көндән булды. Күрше Ноябрь ауылынан (Яңғыҙҡайындан – ике ярым саҡрым самаһы) Йәғәфәр ағай беҙ ҡармаҡ һалған ергә килеп, ял итеп ултыра икән. Шунда ул ятыуҙа ҡорһағы менән әйләнеп ятҡан ҙур суртанды күрә. Айғолағы менән ҡойроғоноң һиҙелер-һиҙелмәҫ һелкенеүенә ҡарағанда, тере тойола. Йәғәфәр ағай сисенә лә һыуға төшөп китә. Суртанға яҡынайыуы була, теге һыртына әйләнеп, йөҙә лә китә. Әммә йыраҡ бармай, йәнә арҡаһына ята. Ағай янына йөҙөп килеү менән, суртан йәнә йөҙөп китә. Ағайҙы шулай албырғатып байтаҡ йөрөтә был. Йәғәфәр ағай, хәлдән тайып, ярға сыға, ә теге, ҡорһағын ялтыратып, һаман ята бирә. Бер аҙ ял иткәс, Йәғәфәр ағай тағы һыуға төшә һәм, суртанды ҡыуып йөрөй торғас,  ахыры, тотоп ала. Туғыҙ килограмм тартҡан был «януар»ҙың ауыҙынан ете ҡармаҡ сыҡҡан. Береһе ике иренен беркетеп, ашай алмай хәлһеҙләнгән икән.

Йәйҙең йәмле бер көнөндә йәнә Аблай моронона килдем. Балыҡ ҡапһа, ошонда ҡаба. Ысынлап та, тиҙ арала дүрт-биш йомро сабаҡ ҡаптырҙым. Көтмәгәндә йылымсылар килеп сығып, эште боҙҙо. Таныш булмаған егеттәр минең яндан Егәнде иңләп үтте. Асыу килһә лә, өндәшмәнем, сөнки ҡала егеттәрендә инабат юҡ: бәреп йығырға ла күп һорамаҫтар.

Балыҡ ҡапмай башланы. «Әллә икенсе урынға китергәме?» – тип торғанда, Егән аръяғындағы ташлыҡта төлкө күренде. Таллыҡ араһынан сығып, Егән буйына килә ине. «Нимә эшләр икән?» – тип уны күҙәтәм. Ул да миңә ҡарап тора, бер ниндәй өркөү, ҡурҡыу  ғәләмәте юҡ. Теле менән ялмап, шыпыршыпыр һыу эскәс, һыуға инеп, бер әйләнеп сыҡты ла ҡағынып алды. Шул саҡ артымда оҙон буйлы кешенең һыуға төшкән шәүләһен шәйләнем. Боролоп ҡараһам, оҙонса ҡоңғорт йөҙлө, ҡап-ҡара сәсле кеше икән. Арыраҡ брезент менән ябылған иҫке Газ-69 машинаһы күренә. Төпкә батҡан кескәй күҙҙәрен төлкөгә төбәп:

– Ах, какая красавица! – тине был.

– Да-а, красавица нашей природы, – тинем мин, уның һоҡланыуын уртаҡлашып.

Миңә сәйер генә ҡарап алды ла, был боролоп китеп барҙы. Бер аҙҙан машинаһын гөрөлдәтеп Түбәнге тирмән яғына йүнәлтте. Ә төлкө ашыҡмай ғына ташлыҡ аръяғындағы таллыҡҡа инеп юғалды. Күрәһең, ошо тирәлә йөрөп, кешеләргә күнегеп бөткән. Тыуған яғыбыҙ тәбиғәтендә тере йән эйәләре лә бар икән әле, тип ҡыуанып ҡуйҙым.

Отпускыға ҡайтһам, әҙме-күпме яңғыҙ йәшәгән әсәйемә ярҙам итергә тырышам. Мин барҙа, тынысланып ял итһен, тим. Өсөнсө көн инде – йәшелсә баҡсаһының иҫкереп, ҡойолоп төшөргә торған рәшәткәләрен йүнәтәм. Шөйлә матурлана ихата, әсәйем дә өйҙән сығып, тыныс ҡына күҙәтеп тора. Ҡасандыр оҙон ҡара сәстәре, аҡтары менән аралашып, һоро төҫкә кергән. Эш араһында уға ҡарап-ҡарап алам, ә үҙем: «Эй, ғүмер, кешеләрҙе шулай әкрен генә ҡартайта шул», − тип уйлайым. Күңелде әсенеү тойғоһо биләй. Һуңғы рәшәткәне ҡаҡҡас, әсәйгә боролдом:

– Бына, тирә-яҡты бер аҙ бөтәйттек, әсәй.

– Һәләк матур булды, улым! − ти ул ҡыуаныс менән.

Уның маҡтауынан күңелем күтәрелеп:

– Иртәгә яңы ҡапҡа ла эшләп ҡуйырмын, − тинем. − Төштән һуң Егән буйына сығып килергә ине.

– Сыҡ, улым, − тине ул, хәлемде аңлап. − Әлдә өс көн инде бер ҡайҙа барғаның юҡ.

Тамаҡ ялғағас, ҡармаҡ алып, Аблай моронона киттем. Йылғала һыу бер аҙ ҡайтҡан кеүек. Ҡармағымды һалырға торғанда, Үлегән тамағынан Винер ағай күренде.

– Тамаҡҡа мурҙа һалғайным, кемдер алып киткән, – тип һуҡранды ул, иҫәнләшеп. – Вәт мөртәт!

Уның һыҙланыуын аңлап, йәлләп тә ҡуйҙым. Кеше нindәйҙер өмөттәр менән мурҙа үрә, әммә хеҙмәтенең емешен күрмәй. Иртән килеүенә мурҙаһын ҡарап, яр башына ташлап китәләр. Бер көн Винер ағай ҡараҡты тоторға була, Егән буйында төн ҡуна. Кистән усаҡ яғып, алып килгән «ярты»һынан хушланып ултыра ла йоҡлап киткәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Уянып, тирә-яғына ҡараһа, мурҙаһы яр башында ята: «Ах, мөртәт!» − тип өҙгөләнеүҙән уҙа алмай бисара...

Бер саҡ Егән аръяғындағы таллыҡтан теге төлкө күренде. Аһ, һары шайтан, нindәй матур! Эҫенән әлһерәгән, ахыры, телен һәлендергән. Ялбыр ҡойроғон торбалай артҡа һуҙып, ашыҡмай ғына йылға буйына килде. Беҙгә иғтибар ҙа итмәй. Хәйер, шулай кеүек күренһә лә, ул, әлбиттә, беҙҙе күрә, улай ғына түгел, ҡарашы менән бөтә тирә-яғын иңләйҙер әле.

– Ай-һай-һай, − тип аптырай Винер ағай, – уның өсөн беҙ бармы-юҡмы, иҫе лә китмәй, әй.

Төлкө әүәлгесә һыу эсте, тәрәнерәк кереп, беҙҙең яҡҡа шаҡтай уҡ яҡынайып йөҙөп әйләнде. «Былай булһа, бер яуыздың ҡорбанына әйләнә бит был», − тип ерҙән ағас киҫәге алып, төлкөгә бәрҙем:

– Кешеләрҙән ҡурҡһын әҙерәк.

Төлкө йәһәт кенә таллыҡ араһына инеп юғалды. Бер мәл ҡибла яҡлап ҡара болоттар күренде, ел сыҡты. «Ямғыр яуыр, ахыры», − тип ҡармағымды йыя башлағайным, Тархан тауы аҫтындағы әрәмәлә мылтыҡ тауышы яңғыраны. Бер аҙҙан тағы аттылар. «Бер ҡәһәр һуҡҡаны теге төлкөнө эҙәрлекләйҙер», − тигән уй килде. Атыу өсөнсөгә ҡабатланды...

Энә осондай ғына ямғыр һибәләй башлағас, ел тынды. «Түбәнге тирмән үрендә киçеү бар, әлеге аусы шунан сығырға тейеш», − тип Егән түбәненә атланым. Яр буйлап бер аҙ барғас, тирәктәр араһында Газ-69 машинаһы күренде. «Ә-ә, был бит теге ҡара кешенеке», – тип киçеү тәңгәлендә хужаһын көттөм. Оҙаҡламай талдар араһынан килеп сыҡты ул. Аяғында – бейек

ҡуңыслы резина итек, һоро джинсы салбар, шундай төҫтәге күлдәк кейгән, еңдәрен һыҙғанған. Бер яҡ ҡулбашында – мылтыҡ, икенсеһендә – төлкө. Йөрәгем «жыу» итеп китте. «Аһ, ҡәһәр һуҡкан, һәләк иткән бит төлкөнө!» – тип нәфрәтләндем. Теге бәндә, кисеүҙе шаптыр-шоптор кисеп, миңә яҡынлашҡас:

– Вы уничтожили красу нашей природы, – тинем. – Бессердечный вы человек.

– Молчи, козел! Тебя не спрашивают, – тине теге теш араһынан.

– Однако вы сволочь! – тинем, асыуым ҡабарып.

– Еще что-нибудь скажешь, застрелю! – тип аҡырҙы был.

Был иманһыҙ менән һүҙ оҙайтыуҙың мәғәнәһе юҡ тип, ҡайтыр яҡҡа атланым. «Ҡулдары ҡороһон ҡәбәхәттең!» Илгәҙәк төлкө бигерәк йәл ине.

## Үрге тирмән

Ул түбәнгеһенән Егән үренә саҡрым ярым самаһында урынлашҡайны. Урыны ла шаҡтай һаҡланған, быуаның бер өлөшө лә бар. Был тирмән һуғыш башланғас та туҡтағайны. Мин унның уҡ кеүек һөйән бүрәнәләрҙән һалынған буш бинаһын да хәтерләйем. Беҙ, ете-һигеҙ йәшлек малайҙар, шуның эсендә ҡыуышып уйнай торғайныҡ. Икенсе килеүебеҙҙә ул юҡҡа сыҡҡайны. Колхоз һүтеп алған, тинеләр. Ул ваҡытта беҙҙең ауылда өс колхоз бар ине. Тирмән ҡайһыһының милке булғандыр?..

Егерме – егерме биш йылдар элек Үрге һәм Түбәнге тирмәндәргә бәйле бер ваҡиға ишеткәйнем. Үргеһендә күрше Дмитриевка ауылынан Николай тирмәнсе булып эшләп, ҡатыны Соня менән тирмән өйөндә йәшәгәндәр. Бер саҡ уға йомош менән Түбәнге тирмән тирмәнсеһе Мөхәммәт* килгән. Сибәр һәм һөйкөмлө Соняны күреү менән һушы китеп ғашиҡ булған. Күңеленән сығара алмағас, йомош табыпмы, былай ғынамы, Үрге тирмәнгә ҡабат-ҡабат килеп йөрөр булған. Ниһайәт, бер саҡ Мөхәммәт Соняға мөхәббәтен асып һалған. Уның бәхетенә, ҡатын да уны тәү күреүҙә үк яратыуын әйткән. Ике ғашиҡ өйләнешкәндәр, белеүемсә, уларҙың өсмө-дүртме балаһы булған. Ләкин һуғыш башланғас, Мөхәммәт фронтҡа китә лә әйләнеп ҡайтмай. Сағыштырмаса йәш көйө ирһеҙ ҡалған Соняны (ауылда уны Сәғирә тип йөрөтәләр) һоратыусылар ҙа була, ләкин ул Мөхәммәтенә хыянат итмәй, уны үлгәнсе көтә. Түбәнге һәм Үрге тирмән буйҙарынан үткәндә йыш ҡына Мөхәммәт менән Соня-Сәғирәнең мөхәббәтен иҫкә төшөрөп, күңел моңһоуланып ҡуя. Ғүмер юлымда ундай мөхәббәт насип булманы, ә бит тормош ҡайнар һәм хыянатһыҙ һөйөү менән гүзәл.

Миңә Мөхәммәт менән Соня-Сәғирәнең кесе ҡыҙы Хәлимә менән бер класта уҡырға тура килде. Ғәжәп сибәр, итәғәтле ҡыҙ ине ул, әммә, бәхетле булды, тип әйтә алмайым. Ни өсөндөр ҡыҙ өс класс ҡына белеме булған Бәҙғетдин ағайға кейәүгә сыҡты. Бик тыныс, аҙ һүҙле кеше ине ул, әммә, ғаиләле булғас, ниңәлер эскегә һабышты. Ә инде иҫереп алһа, ҡоторона, ғаиләһен туҙҙыра. Ундай саҡтарҙа Хәлимә балалары менән күршеләренә кереп ҡуна. Элекке һабаҡташым балаларын үҫтереп кеше иткәс кенә, көтмәгәндә ҡан баҫымы күтәрелеүҙән вафат булды. Көйһөҙ тормошоноң касафаты алып киткәндер, тим. Хәлимә тураһында уйлаһам, шундай фекергә киләм: затһыҙ бәндә затлының ҡәҙерен белмәй торғандыр.

---

*Мөхәммәт — исеме үҙгәртеп алынды.

Өс йыл самаһы элек Бәҙғетдин ағай ҙа донъя ҡуйҙы. Армияға киткәнсе ул ауыл малдарын көттө. Көтөүен бер ҡасан да Егән буйы әрәмәләренә индермәне. Быны Бәҙғетдин борондан килгән йола буйынса эшләгәндер, сөнки әрәмәләрҙе, урмандарҙы, һыу сығанаҡтарын малдан тапатыу гонаһ һаналған. Хәҙер шул изге йола һанға һуғылмай.

Армиянан ҡайтҡас, Бәҙғетдин ағай Яңғыҙҡайын МТС-ында ойошторолған курстарға йөрөп, тракторсы һөнәрен үҙләштерҙе лә, пенсияға сыҡҡансы шунда эшләне. Тырыш һәм ипле механизатор булыуын ишеткеләп торҙом. Тик бер ваҡыт Бәҙғетдин ағай Егән буйын ярға бик яҡын – ун – ун биш метрлап ҡына һыҙат ҡалдырып һөрөп ташлаған. Етмәһә, һөргән ер аша соҡор үтеп, ярға килеп тоташа. Яҙғы ташҡында, көслө ямғырҙарҙа шул соҡор аша тупраҡ менән ашлама – гербицидтар Егәнгә ағып төшәсәге көн кеүек асыҡ. Ленин исемендәге колхоз рәйесе Кәшфулла Йәнбәковты күреп, ошо турала әйткәс, елкәһен ҡашығандай итеп:

– Райкомдан сәсеүлектәрҙе киңәйтергә ҡушалар. Шуның касафаты инде был. Ярай, тракторсыларҙы иҫкәртермен, киләсәктә Егән буйынан йырағыраҡ һөрөрҙәр, – тине ул.

Тағы бер ғибрәтле лә, серле лә ваҡиғаны хәтергә төшөрөп үтке килә. Шулай Үрге тирмән быуаһынан үргә китеп барам. Салт аяҙ йәйге көн. Бер аҙ барғас, әрәмә башланды. Бында Егән һулға бөгөлә һәм алда таллы, тирәкле яр буйҙары асыҡ күренә. Әрәмә буйлап бер йөҙ илле метрлап эстә бер олпат тирәк йылғаға арҡыры ауған. Шунан бирерәк кемдер һыуға һикерҙе, ахырыһы, – көслө шапылдау ишетелде, тирә-яҡҡа тулҡындар таралды. «Иҫәр, тапҡан һыу инер урын», – тип һөйләндем эстән генә. Барып етеп, әйләнә-тирәне байҡаһам, бер кем дә күренмәне. «Әһә, бында ғәләмәт ҙур йәйен булырға тейеш. Ә, бәлки, суртандыр?» Өйгә ҡайтып, махсус ҡармаҡ әҙерләй башланым. Капрон епте биш ҡатлап иштем, төбөнә тимер сыбыҡ менән өс йәпле ҙур ҡармаҡ бәйләнем. Ем урынына турғайҙы ҡыҙыу ялҡында өттөм – йәйен өсөн бына тигән ризыҡ.

Иртәгәһен Егән буйына төштөм. Ебемде һүтеп, яр буйындағы беләк йыуанлыҡ йәш тирәккә бәйләнем. Йәнәһе, йәйенде һөйрәп сығарырға көсөм етмәһә, тирәк ебәрмәйәсәк. Шунан турғайҙы ҡармаҡҡа яҡшылап беркетеп, ятыуға ырғыттым. Бындай ризыҡты әллә ҡайҙан уҡ һиҙеп, йәйен килеп ҡабырға тейеш ине. Көтәм-көтәм, ләкин бер ниндәй хәрәкәт юҡ. «Ни хикмәт, әллә йәйен башҡа урынға күскәнме?» Төшкә табан түҙемлегем бөтөп, ҡармағымды тартып сығарҙым, өтөлгән турғайыма бер ни ҙә булмаған. Ҡармаҡты тәүге урындан ун метрлап ситкә ырғыттым да йәнә көтә башланым... Юҡ! Кискә табан ҡармаҡ ебемде сыбыҡ-сабыҡ менән күмеп йәшерҙем дә ҡайтып киттем: «Йәйен төнөн аҙыҡ эҙләй торған. Моғайын, килеп ҡабыр».

Икенсе көндө иртүк килдем. Ҡармаҡ нисек һалғанмын – шулай ята. Кәйеф ҡырылды, ләкин күңелемдә: «Бында йәйен түгел, суртан булғандыр», – тигән уй тыуҙы. Турғайҙы эре генә сабаҡҡа алмаштырып, йылғаның ситенәрәк ташланым. Шаҡтай тәрән һәм тыныс урын, суртан шундай ятыуҙы ярата. Оҙаҡ та үтмәне, ҡармаҡ бауы ҡыҙыулыҡ менән тартылып, ике ҡолас самаһы китте лә туҡтаны. Табышымды ярға һөйрәй башланым, ләкин ул еп-еңел ине. Терһәк буйы суртан әләккәйне ҡармаҡҡа, бер килограмм да тартмаç. «Ҙур булмаһа ла, балыҡ бит әле ул», – тип уны селтәрле һауытыма һалып ҡуйҙым. Артабан

бер ни ҙә ҡапманы. Танауым төшөп, кис кенә ҡайтып киттем. Зөфәр ағайға ошо хаҡта һөйләгәс, ул башын сайҡаны:

– Ай-һай, Егәндә күптән инде йәйен, бигерәк тә эре суртан күренгәне юҡ. Һин күргән ғиллә нимә булыр икән? Асыҡлармын әле.

Мин ауылға Яңы йылда ғына ҡайта алдым. Табында ултырғанда ағайым:

– Һин «йәйен» тигән нәмәне тәки белдем бит, – тине. – Экологтар Егәнгә бер нисә ҡондоҙ ебәргән икән. Шуларҙың береһе ярҙан һыуға һикергәндер. Ҡойроғо менән һыуға бәрһә, кеше һикергәндәй, тулҡындар уйната.

Беҙҙең тирәлә быға ҡәҙәр күренмәгән йәнлектең барлыҡҡа килеүенә ҡыуанып ҡуйҙым, ләкин иртә шатланғанмын икән. Ҡондоҙҙар ныҡ ҡына үрсеп, Егән буйындағы йыуан-йыуан тирәктәрҙе ауҙарып бөтөрҙө, урыны менән, салғы менән сапҡандай, талдарҙы ла юҡ итте.

Бер ваҡыт шулай Үрге тирмән менән Аблай мороно араһында талдар ышығында ҡармаҡ һалып ултырам. Ҡалҡыуысым, исмаһам, һелкенеп тә ҡарамай. Бер мәл талдар араһында ҡыштырҙау ишетеп, һул яғыма ҡараным һәм үҙемдән биш-алты аҙымда бер йәнлекте күрҙем. Бәләкәйерәк бесәй ҙурлыҡ, ҡап-ҡара, йөндәре шундай матур, нескә. Йәнлекте яныма саҡырырға теләгәндәй, ҡулымды күтәргәйнем, ул шунда уҡ һыуға сумды һәм башҡаса күренмәне.

Өс көндән һуң теге йәнлекте Егәндең ҡаршы ярындағы өйәңке төбөндә күреп ҡалдым. Бынан һуң да шул тирәлә күҙгә салынды ул. «Ояһы ла шунда микән әллә?» – тигән уй килде. Ай – ай ярым самаһы үткәс, өйәңке төбөндә теге ҡара йәнлек ике балаһы менән күренде. Ялан сысҡанынан саҡ ҡына ҙурыраҡтар, төҫтәре күкһел кеүек. Бәләкәй булһалар ҙа, хәрәкәтсәндәр, һыуҙа бер-береһен ҡыуып, сумып уйнайҙар. Һыҙғырғайным, йәһәт кенә өйәңке төбөнә шылдылар. «Үрсем бар, оҙаҡламай ишәйеп тә китерҙәр әле», – тип ҡыуандым.

Сентябрь урталарында ҡайтып, әсәйҙең бәрәңгеһен сығарып бөткәс, ғәҙәтемсә, Егән буйына ҡармаҡ һалырға төштөм. Көн болотло булһа ла, ҡоро һәм йылы ине. Башта Түбәнге тирмән ятыуында ҡармаҡ һалдым, әммә, бер-ике күкйөндән башҡа нәмә ҡапмағас, китергә булдым. Йылға арьяғына сығып, йылғаға ауған теге өйәңкегә барып еттем. Мине балыҡ ҡына түгел, теге ҡара йәнлек тә ҡыҙыҡһындырҙы. Матурлығы, үҙенә хас тыйнаҡлығы менән күңелемде яулағайны ул. Иҫән-һаумы икән? Балалары ни хәлдә? Әммә яр буйындағы үләндәрҙең тапалыуын, кеше аяғы эҙҙәрен күреп, шомланып ҡуйҙым. Беләк йыуанлыҡ тирәк төбөндә үләндәргә буялған ҡанды шәйләгәс, борсолоуым арта төштө. Йәнлек менән ниндәйҙер фажиғә булыуын тойғандай иттем, күңелемде әрнеү тойғоһо биләп алды.

– Балыҡ ҡапмағанға кәйефең киттеме? – тип ҡаршы алды Зөфәр ағайым. – Ҡайғырма, бөгөн булмаһа, иртәгә ҡабыр.

Мин уға исемен белмәгән ҡара йәнлек тураһында һөйләп бирҙем.

– Шәшке ул, икеме-өсмө балаһы ла бар ине, – тине ағай, көрһөнөп. – Һуңғы ваҡытта күренмәйҙәр шул. Тиреләренә була ерәйһе эләктергәндер.

Ағайым йәш сағында тоҙаҡ менән бик күп ҡуян тотто. Һуғыш ваҡытында шул ҡуяндар беҙҙе күпмелер дәрәжәлә аслыҡтан ҡотҡарҙы. Урманда ҡуяндар бихисап ине шул. Ҡайһы саҡ ауылға ҡәҙәре килеп етәләр ине. Әммә 1950 йылдарҙан һуң ҡуяндар кәмеп, ун йылдан яланда ғына түгел, урманда ла

күренмәй башланы. Ҡайһы бер фекерҙәргә ҡарағанда, ашлама-гербицидтарҙы күп ҡулланыу урман, ялан йәнлектәренә лә ҙур зыян килтергән. Ҡуяндар ағыуланған ужым менән туҡланып ҡырылған, имеш. Был фараз хәҡиҡәткә оҡшай.

Икенсе яҡтан, үткән быуаттың 50 – 60-сы йылдарында мылтыҡлы, машиналы кешеләрҙең күбәйеүе браконьерлыҡтың икеләтә-өсләтә артыуына булышлыҡ итте. 1985 йылда, буғай, Аблай төбәгендә бер ҡуян күренгеләп ҡалды. Егән буйына сыҡһам, оҙон ҡолаҡтарын һалпайтып, таллыҡ эргәһенән сабып үткеләне. Тик күҙгә табан ағайымдан уны кемдер атып алғанын ишеттем. Ул ауыл осондағы өйөнән Аблай төбәген, Егән буйҙарын яҡшы үк күреп тора ине.

## Түркеш

Түбәнге тирмән төбәгенән һуң Егән бейек яр аҫтынан һыҙылып аға ла ҡиблаға борола. Шул тәңгәлдән Егән аръяғында Түркеш тип аталған төбәк башлана. Уны йылға даға рәүешендә ураткан. Төньяҡтан бейек яр булғас, бында кешеләр әллә ни һуғылып йөрөмәй. Ҡарағат, бөрлөгән, балан өлгөргәндә генә кисеү аша үтеп, емеш йыйырға килеүселәр була. Апайыма эйәреп, мин дә йөрөштөргәйнем был төбәккә. Ер еләге ифрат уңа торғайны. Һул ярын даими ашап, Егән Түркеште ҡыҫты, еләкле аҡландар тарайҙы.

Түркеш – ҡыҙыҡлы топоним. Нисек барлыҡҡа килгән? Уйлап-уйлап, бер ни сығара алманым. Кеше исеменә лә оҡшамай. Ҡыҫҡаһы, сер...

… Йәйге матур көн, ҡояш көлөп тора. Түркеш  тәңгәлендә яр буйлап ҡармаҡ һалып йөрөйөм. Үс иткәндәй,  балыҡ ҡапмай. Кисеү тәңгәлендә уңайлы урын эҙләп йөрөй торғас, ҡыуаҡлыҡтар араһынан ике ҡатын килеп сыҡты. Береһе – аҡ йөҙлө, урта йәштәрҙә, башына зәңгәр косынка бәйләнгән. Икенсеһе – Лира апай, ҡараҡай ханым. Икеһенең дә ҡулында – пластмасса һауыт. Ҡыҙыл ҡарағат йыйғандар, ахыры. Лира апайҙың ҡултығындағы мәтрүшкәләргә иғтибар иттем: тамырҙары менән йолҡоп алынған.

– Лира апай, мәтрүшкәне былай йолҡмаҫҡа ине. Ул урында ҡабат үҫмәйәсәк бит, – тинем.

– Һабаҡтары бик беше, өҙөлмәй, гел йолҡоноп сыға, – тип аҡланды ул.

Өндәшмәй, ары атланым, әммә күңел тынысланманы. Өҙә-йолҡа торғас, тәбиғәттәге затлы үләндәр шулай юҡҡа сыға бит. Мулла сабынлығы буйҙарында мин бала саҡта мәтрүшкәләр сәсеп үҫтергән кеүек ҡуйы ине. Унда ла, Ерек мороно, Тамъян әрәмәләре буйҙарында ла ҡуҙғалаҡ, йыуа, ҡымыҙлыҡ, ҡуян тубығы, ҡаҡы, башҡа үләндәр күп үҫте. Хәҙер, көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә, уларҙы таба алмаҫһың. Әрәмәлә һарына ла бар ине, һуғыш ваҡытында күпме йыйһаҡ та, үҫеп тора ине. Хәҙер үләнгә ҡыҙыҡыусы ла һирәк, әммә улар юҡҡа сыҡты. Яландарҙа, әрәмәләрҙә яҙҙан көҙгә ҡәҙәр мал йөрөй шул.

Уйҙарымдан арынып, туҡталдым. Яр буйында үҫкән бер нисә төп муйыл яҙғы ташҡында тамырҙары менән аҡтарылып, һыуға ауған. Егән ярҙарына ҡайтҡас, шунда яр ишелеп, бәләкәй генә морон хасил булған. Ҡултыҡта, бер нәмәгә иҫтәре китмәгәндәй, йөҙөп йөрөгән ажауҙарҙы күреп ҡалдым. Ҡармағыма селәүсен эләктереп, һыуға ташлағайным, шунда уҡ нимәләр тартып алып китте. Катушкамды тиҙ генә урайым тиһәм, лескам сыуалған булып сыҡты. Ул арала балыҡ муйыл ботаҡтары араһына барып кереп, лесканы уралтты. Ҙур, ахырыһы: тулап, ботаҡтарҙы дер һелкетә, ләкин ысҡына алмай.

Сисенеп һыуға сумырға тура килде. Леска буйлап барып, муйыл ботаҡтары араһына керҙем. Балыҡ ҙур күренә, кәмендә кило ярым булыр. Айғолағынан тотоп, ҡармаҡты ысҡындырҙым да, бер ҡул менән ишеп, ярға сыҡтым. Теге ҡатындар йыраҡ китмәгән икән.

– Рәшит, шулай сумып та балыҡ тотаһыңмы ни? – тине Лира апай.

– Ҡайһы саҡ тура килә.

– Улай булғас, беҙгә лә тотоп бир әле, – тине Лира апай, шаяртып.

– Балыҡтар ҡасып бөттө шул, тотоп булмаç, – тинем, көлөмһөрәп. – Был балыҡ беҙгә лә, һеҙгә лә етер, кискә ҡунаҡҡа килегеҙ.

Бер нисә көндән йәнә килһәм, ашанан-аша ау тартылған. Ҡаршы ярҙа, еңел машина күләгәһендә, ике егет һыра эсеп ултыра. Ауға ҡарап-ҡарап алалар. Балыҡ тулып эләгеүен көтәләрҙер, ахыры. Тәбиғәтте һаҡлау буйынса закондар бар кеүек, тик уларҙың һағында тороусылар бармы икән? Һәр хәлдә, уларҙың беҙҙең яҡтарға күренгәне юҡ.

…Көҙгө болотло көн. Төндә ямғыр яуып уҙған. Төш етеп килеүгә ҡарамаçтан, юлдар һурыҡмаған. Бындай саҡта күңел болоҡһой, эшкә ҡул бармай. Һөйләшеп ултырырға тип, Зөфәр ағайымдарға киттем. Ҡашығаяҡ тирәһендә булашҡан Фәниә еңгәм:

– Әйҙүк, ҡәйнеш! – тип ҡаршы алды һәм төпкө бүлмәгә ымлап йылмайҙы: – Ана, ағайың «дәрес әҙерләп» ултыра.

Ағай, ғәрәп теле дәреслегенән башын күтәреп:

– Әйҙә, ултыр! – тине.

– Ағай, мулла булырға йыйынмайһыңдыр бит?

– Бәлки, булырға ла тура килер, – тип яуапланы Зөфәр ағай. – Мөхтәрәм муллабыҙ Зөбәй ағай, уның артынан Миңлеғәли ҡарт күптән әхирәттә. Мулла вазифаһын башҡарған Заһретдин ағай ҙа һикһәнде уҙҙы. Мулла булырҙай өлкән ағай-эне күренмәй. Ә халыҡта никах, йыназа уҡыу, балаға исем ҡуштырыу йолаларын атҡарыуға ихтыяж ҙур.

Ул арала Фәниә еңгәм сәй эсергә саҡырҙы:

– Төш етте бит. Тамаҡ ялғарға кәрәген дә онотмағыҙ!

Ҡаймаҡ менән аҡ ондан бешерелгән икмәк телеңдә йоторлоҡ ине. Үҙ кеше булараҡ, тартынып тормайым, ҡабаланмай ғына «һыпырам». Табын ахырына яҡынлашҡанда, ағай тамаҡ ҡырҙы. Ниҙер әйтергә теләгәнен һиҙеп, уға төбәлдем.

– Көн асылырға йыйынмай ҙа, – тине ул, тәҙрәнән тышҡа ҡарап. – Шулай ҙа Егән буйын бер әйләнеп ҡайтайыҡ әле.

– Ҡайһы яҡҡа барабыҙ һуң?

– Яркисеүгә.

Йәһәт кенә ҡайтып, резина итек, плащ, берет кейеп килдем. Ағай ҙа оҙон ҡуңыслы резина итеген, баллон курткаһын, шаҡтай таушалған һоро кепкаһын кейеп, әҙерләнеп торған. Арҡаһына аçҡан ағарып бөткән күптәнге һалдат ҡапсығын күреп:

– Бынһы ниңә кәрәк булды? – тип һораным.

– Әрәмәлә, бәлки, баланлыҡҡа юлығырбыҙ.

Ауылды сығып, баçыу юлынан киттек. Ағай, алтмыш бишен тултырһа ла, төçөн юймай. Йөҙө ап-аҡ, илаһи нур бөркөп тора кеүек. Кепка аçтынан күренгән ҡарағусҡыл сәстәрендә сал бөртөктәр ҙә юҡ, гүйә, тормош ауырлығын,

ҡайғы-хәсрәттәрҙе бер ҙә кисермәгән. Ә бит 1941 йылда ағайға 13 йәш булған. Колхоз аттары, үгеҙҙәре менән иген баҫыуынан ырҙынға көлтә ташыны, ер һөрҙө, тырматты. Айҙар буйы баҫыуҙан ҡайтмаған саҡтары булды.

Һуңыраҡ ағайым балта эшен үҙ итеп, колхоздың төҙөлөш бригадаһында хужалыҡ ҡаралтыларын бөтәйтте. Нигеҙҙә үҙ көсө менән өй һалып керҙе, кешеләргә лә бура бурап, йорт төҙөштө. Еңгәм менән икәүләп алты бала тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Эйе, ағайым ғүмер буйы күкрәк көсө менән көн күрҙе, ҡартлыҡҡа бирешмәй, төҫ-башҡа шаҡтай йәш күренә. Бының төп сәбәбе еңгәм менән татыу ғүмер итеү булғандыр. Икенсенән, ул тәбиғәтте лә яратты, Егәндә балыҡ тотто, урманда бәшмәк йыйҙы, балан тәлгәштәрен ҡапсыҡ тултырып алып ҡайтыр ине. Ҡышын һирәкләп аусылыҡ менән дә шөғөлләнде. Әммә тәбиғәткә зыян килтермәҫкә тырышты...

Арғы Ҡаҙҡалған инешен үткәс, ағай һүҙ башланы.

– Был юлдарҙан беҙҙең атай ҙа, олатай ҙа күпме үткәндер, – тине ул, хыялға бирелеп. – Тамъян тамағына атайымдың ике туған ағаһы Лотфулла бабай нәрәтәләр һала ине. Шуларҙы ҡарап, бер көн дүрт килолап балыҡ алдыҡ. Икешәр килолы ике суртан бөгөнгөләй күҙ алдымда. Бар ине Егәндең балыҡҡа бай саҡтары!

Һөйләшә-һөйләшә Яркисеүгә барып еткәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Әкрен генә иҫкән елгә ҡолас етмәҫ йыуан тирәктең япраҡтары шыбырлаша. Уның аҫтында ышыҡ, энә күҙендәй ямғыр тамсылары ла беҙгә теймәй.

– Бар ине был кисеүҙең ғәйрәтле саҡтары, ағымы ғәжәп көслө ине, – тине ағайым, Яркисеүгә бер аҙ төбәлеп торғас.

– Ағай, ошо яҡтан бер ҡош балаһы алып ҡайтҡаныңды хәтерләйһеңме? – тип ҡушылдым мин.

– Хәтерләйем.

– Бер ҡарт уны «көсөгән балаһы» тине. Белеүемсә, бөркөттәр нәҫеленән ине ул.

Ҡош балаһы төн буйы сырылдап, йоҡо бирмәне. Иртән тороуға яткан урынын шаҡтай бысратҡан да ине.

– Быны ояһына илтеп ҡуй! – тине әсәй ҡәтғи тауыш менән.

Ағайым ҡош балаһын иҫке бүреккә һалып, Ғәлләм ағай менән юлға сыҡтылар. Мин дә уларға эйәрҙем. Кисеүҙән сығып киләбеҙ, ә ул билдән юғары, ағым да көслө ине. Мин шытырлатып ағайҙың ҡулына йәбешкәнмен, ағып китеүҙән шөрләйемдер инде. Ул: «Ҡурҡма! Мин һине нығ тотам бит», – тип тынысландыра. Кисеүҙе сыҡҡас, һөҙәк кенә ҡомло ярҙан күтәрелеп, Егән буйлап аҫҡа киттек. Ярты саҡрымда Бәрейле тауаҫты тигән урын бар ине. Шул шырлыҡҡа барып керҙек, аяҡ-ҡулға кесерткән тейгәндә, мин шыңшып ҡуям. Ниһайәт, бер тирәк янына килеп еттек. Төбөнөң йыуанлығы – минең өс ҡолас та етмәҫ. Өс-дүрт метр өҫтәрәк тирәк икегә айырылып, береһенең башында ҡаҙ ояһындай ҡош төйәге шәйләнә. Шуға ҡарап бер аҙ торғас, ағайым Ғәлләм ағайға өндәште:

– Тирәк башына әллә һин менәһеңме?

– Юҡ-юҡ! – тине теге. – Үҙең алып төштөң, мендереп тә ҡуй инде.

Ботаҡтан ботаҡҡа үрмәләп, ағайым тирәк башына менеп етте һәм ҡош балаһын ипләп кенә ояһына ебәрҙе. Унда йәнә бер бала булған икән, сырҡылдашҡандары ишетелде. Шул саҡ ҙур ҡош ялпылдап килеп сыҡты ла ағайыма

ынтылды. Ҡанаттары киң, һәр береһе берәр аршин барҙыр. Ҡош дәһшәт менән ҡысҡыра, тирәк тирәләп айбарлана. Ботаҡтар араһынан уның кәкре тырнаҡтары беҙгә лә күренеп ҡала. Ләкин, бер нигә ҡарамай, ағайым түбән төшөүен дауам итте.

Бер аҙҙан ҡош, тынысланып, ояһына ҡунды. Ағайым ергә төшкәс, еңен ҡайтарып, һыҙырылған беләген күрһәтте. Шул саҡ тирәктең икенсе яғына «лап» итеп нимәлер килеп төштө. Барып ҡараһаҡ, муйынын һуҙып, теге ҡош балаһы ята ине. Йәне сығып та өлгөргән.

– Меҫкенкәйҙе инәһе ҡабул итмәгән, – тине Ғәлләм ағай.

– Ишеткәйнем шул, имеш, балаһын кеше тотһа, ҡош уны үҙенеке итеп танымай, тип, – йөпләне ағайым. – Юҡҡа алып килдек, әсәйҙе күндереп, аҫырарға кәрәк булған.

– Алып ҡайтмаҫҡа ине уны, – тип ныҡышты Ғәлләм ағай.

Шул хәлдәрҙе иҫләгәс, ағай саҡ ҡына йылмайып ҡуйҙы:

– Илле йыллап үтһә лә, хәтерләйем ул ваҡиғаны. Шырлыҡтан сығышлай, ҡарағат ашап йөрөнөк. Ана, ул урындар бынан да күренеп тора.

– Унда бит олпат-олпат тирәктәр генә күренә, – тинем мин.

– Туғайҙар (ауыл исеме – **Р.С.**) бөтөрҙө Бәрейле тауаҫтын. Ҡармыш тауы итәгендә сусҡа фермаһы төҙөнөләр. Һыйыр, ат көтөүҙәрен дә шунда көттөләр. Шулай итеп, йөҙ гектар әрәмәлек юҡҡа сыҡты, – ағай, уйға талғандай, Егән аръяғына ҡарап торҙо ла уфтанды: – Был туғайҙар бигерәк вайымһыҙ инде. Беҙ ғүмер буйы балан, муйыл, ҡарағат, бөрлөгән йыйған әрәмәләрҙе «уф» та итмәй юҡ иттеләр.

– Эй, ағай, яңғыҙкайындарҙы ла әҙәпле тип булмай инде. Аблай, Мулла сабынлығы, Үрге тирмән әрәмәләрен малдан тапатып бөтөрҙөләр. Хәҙер улар үтәнән-үтә күренеп тора.

– Шулай, ҡустым, тәбиғәт тә төҫөн юя, ярлылана. Ҡайһы берәүҙәр тәбиғәттән умырып алырға ғына белә, ә уны һаҡлау тураһында уйламай ҙа. Егән йылғаһы, әрәмәләр, тау-урмандар булмаһа, ауылдың йәме лә ҡалмай.

Өшәндергәндәй иткәс, иҫке усаҡ урынына ҡоро-һары ташлап, усаҡ тоҡандырҙыҡ. Кисеүҙән шыбыр-шыбыр ағым тауышы ишетелә, һыу өҫтөндә ваҡ балыҡтарҙың ара-тирә эрерәктәренең дә ҡарпығаны күҙгә ташлана. Арғы яҡта шаулап үҫкән ҡуйы ҡамышлыҡ, ҡултыҡ кеүек урында һыу өҫтөнә түшәлеп ятҡан томбойоҡ күренә. Элек Егәндә томбойоҡ түгел, ҡамыштар ҙа үҫмәй тиерлек ине, ярҙарын иңләп, ярһып аға ине йылғабыҙ.

– Егән буйына килһәм, тыным иркенәйеп китә, – тине Зөфәр ағай, усаҡтың күмерҙәрен болғатып. – Өйҙә тән ҡойолоп төшөп барған кеүек ине, әле хәл кереп китте.

– Ғүмерем буйы отпускымды Егән буйында үткәрҙем. Йәй көнө бит бында – йәннәт, санаторийың да кәрәкмәй, – тип ҡушылдым.

– Беҙ ошо яҡта йәшәүебеҙ менән бәхетле: йылғаһы ла, күле лә, тауы ла, урманы ла, әрәмәбеҙ ҙә бар, – тине ағай, йөҙө яҡтырып. – Тамъян әрәмәһенә кереп әйләнәйек әле.

Усаҡты һүндереп, Егән үренә атланыҡ. Оҙон ҡуйы таллыҡ беҙҙе йылғанан айырҙы. Бер аҙҙан Тамъян әрәмәһе башланды. Тал ғына түгел, муйыл, баланы ла, гөлйемеше, ҡарағаты ла, бөрлөгән сырмалсыҡтары ла күпләп үҫә бында, йыуан-йыуан тирәктәр ҙә бар. Үлән баҫҡан элекке арба юлынан эскә үттек. Асығыраҡ урында тәрән генә йырын Егән ярына табан һуҙылғайны.

– Тамъян тамағы ошо була инде, – тине ағай, миңә боролоп. – Ниндәй матур күл ине ул! Килолы ҡара балыҡ, сабаталай табандар күп ине. Лотфулла ҡарт гел ошонда балыҡ тотто.

– Хәмиҙулла ағай миңә шундай бер хәлде һөйләне, – тип ҡушылдым мин дә. – Ул Шәрифулла ағаһы менән атаһының нәрәтәләренә күҙ-колаҡ булырға килгән. Шәрифулла эре ҡармаҡҡа ҙур ғына сабаҡ эләктереп, Егәнгә ырғыта ла, ҡармаҡ һабын Хәмиҙуллаға тоттороп, үҙе әрәмәгә инеп китә. Көтмәгәндә нимәлер ҡармаҡты шундай итеп тарта – һигеҙ йәшлек малай саҡ һыуға йығылып төшмәй. Малай, ҡысҡыра-ҡысҡыра, ағаһын саҡырған. Ҡармаҡҡа ҙур суртан эләккән була, ауырлығы бер боттан артығыраҡ тарта.

– Хәмиҙулланың шаштырыбыраҡ ебәрә торған ғәҙәте бар, – тине ағай, көләмһәрәп. – Мәгәр ул саҡта Егәндә ун – ун биш килолы суртандар йыш осрай ине.

Юлыбыҙ Тамъян тамағының һыуһыҙ үҙәненә килеп терәлде. Арғы яҡтағы һуҡмаҡты үлән, ҡыуаҡтар баҫып киткән.

– Ҡустым, бер килгәндә хазиналы был төбәкте әйләнеп сығайыҡ әле,– тине ағай рух күтәренкелеге менән. – Һинең менән ҡасан былай йөрөргә тура килер?!

Уның йөҙө, күҙ ҡараштары сафланып, йәшәреп киткәндәй күренде. Йырын аша йәштәрсә һикереп сығып, бейек үләндәр, балан, эт муйылы, гөлйемеш ҡыуаҡтары араһынан атланы. Бер аҙ барғас, кеше ҡулы теймәгән ҡып-ҡыҙыл балан өйөмөнә тап булдыҡ. Ағай, туҡталып, ауыр тәлгәштәрҙе тотоп ҡараны ла, ғәжәпләнеп:

– Нисек әҙәм күҙенә салынмаған? – тине.

– Ҡапсығың бар бит, йыйып алайыҡ булмаһа.

– Бөгөнгә мәшәҡәтләнмәйек. Һиңә күрһәтәһе урындарым бар.

Сәйәхәтебеҙ дауам итте. Ҡыуаҡлыҡтарҙы ярып бара торғас, алда ялан күренде, ләкин беҙ ҡапыл уңға боролдоҡ. Күңел күтәрелде, үҙемде әкиәт донъяһындағылай хис иттем. Ағайҙың ҙа дәртле аҙымынан, ҡуйы үләндәрҙе ғәйрәт менән ярып барыуынан шуны тойҙом. Бер аҙ барғас, алдыбыҙҙағы буйы иңе йөҙ – йөҙ илле аҙым самаһы әрәмәгә килеп терәлдек.

– Бына, ҡустым, үҙем яратҡан, һиңә лә күрһәтергә теләгән урыным ошо, – тине ағайым. – Бында балан ифрат күп. Бик уңа.

Ләкин балан ҡыуаҡтарының ботаҡтары һындырылып, «туналып» бөткәнен күргәс, ағайҙың кәйефе ҡырылды:

– Бына бит ул халыҡ ниндәй! Былай ботарлағас, бер нисә йыл йүнле уңыш бирмәй инде. Тәлгәшләп кенә йыйһалар ни булғандыр? Бөгөн булһа, иртәгәһен ишәк ҡайғыртһын, тип уйлай шул ҡайһы берәүҙәр.

– Йәш сағыңда, ағай, һин дә уйламағанһыңдыр. Ҡош балаһын алып ҡайтыуыңды хәтерлә, – тип, үҙем дә һиҙмәҫтән, «утҡа кәрәсин» һиптем.

– Ул ваҡытта томана инек шул. Улай ҙа тәбиғәткә ҡарата хәҙерге кеүек мәрхәмәтһеҙлек юҡ ине.

Әрәмәнән сығып, ҡайтыр яҡҡа атланыҡ. Күңелемдән: «Һәр кем ағай кеүек фекер йөрөтһә икән, тәбиғәтебеҙ ал да гөл һаҡланыр ине», – тигән уй үтте.

– Кешелек әрәмә-урмандарҙы юҡ итеп, йылға-күлдәрҙе ҡоротоп, һин әйткәнсә, әкренләп кенә һәләкәтенә бармай микән? – тип мин уйҙарымды дауам иттем.

– Ундай хәүеф юҡ түгел, ләкин, уға саҡлы кешеләр тәбиғәт-әсәне һаҡлау мәсьәләһен ныҡлап үҙ ҡулдарына алыр, тигән өмөт бар. – Зөфәр ағай шундай көтөлмәгән һығымта яһаны.

Көтөү таҡырлаған болон аша ауыл яғына йүнәлдек. Ағай менән был сәйәхәтебеҙ һуңғыһы булыр, тип кем уйлаған...

## Егән буйлап

Сентябрь урталары уҙғансы көндәр болотло булып, һалҡын ел иҫеп, ямғыр яуып торҙо. Октябргә табан аяҙытты, әммә йылытманы. Иртәләрен күләүектәр ситендә ап-аҡ боҙ ҡатламы күренде. Шундай көндәрҙең береһендә мин тағы Яңғыҙҡайыныма ҡайттым. Әсәй ҙә көтөп торған, баҡсалағы бәрәңгеһенә ҡул тейҙермәгән. Салауат ҡалаһынан ҡайтып төшкән ҡустым, бер туған апайымдың улы Ғайса менән уны бер көндә сығарып, һарайға түшәнек тә иртәгәһен һайлап, баҙға төшөрҙөк. Эшебеҙҙе тамамлағас, Егән буйына йыйындым. Иҫке велосипедымды көйләп, сығып барғанда, әсәйем оҙата килеп:

– Эй, улым, ҡайтһаң, өйҙә ултырып сыҙамайһың: йә Егән буйына, йә әрәмәгә китәһең. Үҙенде бөтөрәһең бит, – тине, борсолоп.

– Юҡ, әсәй, Егән буйында мин ял итәм, − тинем дә, велосипедҡа атланып, урамдан елдерҙем.

Яңғыҙҡайын – ҙур ауыл. Стәрлетамаҡ ҡалаһы яғынан килеп ингәс, беҙҙең Тау аҫты урамын сыҡҡансы, ике саҡрым ярым ара үтәһең. Был юлы мин Иҫке ҡырсын тип аталған урынға йүнәлдем. Бала сағыбыҙҙың төйәге ул. Беҙ, малайҙар, урамда ҡыуышып уйнайбыҙ ҙа, тирләп-бешкәс, беребеҙҙең: «Өйҙәгеҙ Иҫке ҡырсынға!» − тип ҡысҡырыуы була, шунда уҡ кемуҙарҙан шунда йүгерәбеҙ. Яр буйында кейем-һалымдарыбыҙҙы ташлап, һыуға инәбеҙ. Йылға сите тәрән түгел, эскәрәк керһәң, беҙҙе күмә. Йөҙә белгәндәр шунда ынтыла, белмәгәндәр – ситтә шыптырлай.

Егән был тирәлә ике үҙәндән аға. Беҙ һыу ингән урындан арыраҡ ҙур оҙонса утрау аша икенсе үҙән юл ярған. Өлкәнерәк малайҙар, егеттәр шунда һыу инә. Унда Ҡаҙанлыҡ тип аталған тәрән һәм өйөрмәле урын бар. Һыу инеүселәр шунда йөҙөп килә лә, өйөрмә ағымында бер-ике әйләнеп, һыуға сума. Төптә ағым кәмей, ярға сығыуы уңайлы. Өйөрмәлә һыу инеү егеттәр өсөн мәртәбә һаналды. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был урын ҡапыл һайыҡты, беҙгә өйөрмәлә йөҙөү бәхете тәтемәне.

Беҙ бала саҡта шаулашып һыу ингән бирге үҙән дә ҡороно тиерлек, йылға йәйен арғы үҙәндән генә аға. Ҡармаҡ һалыусы, һыу инеүсе хәҙер күренмәй. Иҫке ҡырсында бер аҙ үрҙә һикереп һыу инергә яратыусылар өсөн уңайлы яр бар ине. Һыу ҙа унда шаҡтай тәрән. Егеттәр башы менән түбәнгә һикерә лә, һыу аҫтынан әҙерәк йөҙөп барғас, тындары бөтөп, ҡалҡып сыға.

Беҙҙең яҡтың ике егете – Миңлеяр менән Ғариф ағайҙар шул урынға һыу инергә килгәс, Миңлеяр ярҙан һикерергә әҙерләнә. Һыуға ҡарап торған Ғариф ҡысҡырып ебәрә:

– Һикерә күрмә!

– Нимә бар? − ти тегеһе, хәүефләнеп.

– Ана, һыу төбөндә нимәлер ята.

Ҡояш нурҙарында тештәре ыржайып ятҡан тимер тырманы күреп, «аһ!» итәләр. «Рәхмәт, ҡустым, үлемдән ҡотҡарҙың», − тигән Миңлеяр ағай, тулҡынланып. Тырма, күрәһең, тракторҙан ысҡынып ҡалған да, кемдер уны ошонда ташлаған. Шул иҫкә төшкән һайын, хаслыҡ ҡылған кешегә нәфрәтләнеп ҡуям.

Мин дә бер мәл, һыу инеп йөрөгәндә, шешә ватығына табанымды ярғайным. Күпме ҡан юғалттым! Яраны больницаға барып тектерергә тура килде. Ике аҙнанан артыҡ эшкә сыға алманым.

Хәҙер бында һыу һайыҡҡан. Яр буйында уйһыулыҡ барлыҡҡа килеп, олпат тирәк, өйәңкеләр үҫкән. Йәй көндәрендә халыҡ ошонда ял итә икән. Ике усаҡ урынында торонбаштар аҡырая, араҡы, һыра, һыуҙан бушаған быяла һәм пластик шешәләр, ҡағыҙ-фәлән тулып ята... Яҙын һыу баҫҡас, бөтөн сүп-сар ағып ташҡын менән китер, әлбиттә. Ләкин был әйберҙәрҙе йыйыштырғанда, кешеләрсә булыр ине...

Велосипедым менән Егәндең үренә елдерҙем. Машиналар күп йөрөп, юл таҡырайған.  Тирә-йүн бик матур, Егән бында ағын, киң һәм тәрән, балыҡтар ҙа мул. Ваҡ таштар менән ҡапланған бирге яр һөҙәк кенә булып юғары күтәрелеп, артабан сиҙәм башлана. Йыуан-йыуан тирәктәр ышығында машиналары, палаткалары менән ҡала халҡы ял итә. Ҡармаҡ һалалар, ау ҡоралар, балыҡты йылым менән дә һөҙәләр. Браконьерлыҡ һис тә тыйылмай.

Түркеш төбәге тәңгәленә еткәс, кеше тауыштары ишетеп, бейек ярға яҡынырак килдем. Бер нисә кеше балыҡ һөҙөп маташа. «Аб-ба, шул һыуыҡта!» – тинем, иҫем китеп. Дүрт кешенең барыһы ла таныш: ике туған ағайым Хәмиҙулла, бергә үҫкән дуҫым Сәйфетдин, ҡалған икеһе Стәрлетамаҡта йәшәгән үҙебеҙҙең ауыл егеттәре – Рауил менән Рәфҡәт. Мин, велосипедымдан төшөп, иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас:

– Самай һөҙә торған ваҡыт шул, – тинем мыҫҡыл ҡатыш.

Өндәшмәнеләр, үҙ хәсрәттәре көсләрәктер. Сәйфетдин менән Хәмиҙулла ағай резина кәмәләрҙә йылымдың ике башындағы таяҡтарҙы тотҡан. Икеһе оҙон арҡандар менән ике ярҙан тороп тарта. Бер аҙ барғас, гидрокостюм кейгән Рәфҡәт тиҙ генә кисеүҙән сығып, йылымды һөҙәк ярға һөйрәнеләр. Ярты силәк самаһы балыҡ кергән, күбеһе – йомро сабаҡ  менән ҡыҙыл күҙ. Әммә был ғына ҡәнәғәтләндермәне балыҡсыларҙы. Егәнде иңләй-иңләй һөҙөп, ары, Ҡыҙыл яр аҫтына, йүнәлделәр.

Аблай моронона сығып, Егән өҫтөнән Үрге тирмән аҫтына ҡәҙәр араны байҡаным. Киске шәфәҡ нурҙары төшөп, йылға ҡып-ҡыҙыл төҫкә мансылған. Гүзәл һәм илаһи күренеш. «Эй, Егәнем, ауылым күрке, ҡыуанысы һәм йыуанысы булып мәңге-мәңге йәшә!» – тинем. Хәүеф-борсолоуым юғалғандай булды.

## Һуңғы һүҙ урынына

Бала саҡтағы бер ваҡиға онотолмай. Мин, Сәйфетдин, Әмир, Яхъя Аблай төбәгенә кәзә һаҡалын, кәкүк утын ауыҙ итергә барҙыҡ. Иртә яҙҙа сәскә атҡан был үләндәрҙе ашарға ла ярай. Көн һалҡынырaҡ, еле лә бар. Асығыраҡ урында усаҡ яғып ебәрҙек. Бер аҙҙан йылынып, күңел күтәрелгәс, баҫтырышып уйнарға тотондоҡ. Усаҡты онотоп, ситкәрәк киткәнбеҙ. Иҫебеҙгә төшөп, әйләнһәк, ҡотобоҙ осто: ҡоро үләндәргә ут ҡабып, тирә-яҡты ялҡын солғаған. Бер урында һүндергәндәй итһәк, икенсе ерҙә ялҡын күтәрелә. Ҡул-биттәребеҙ бешеп, үҙебеҙ ҡоромға буялып бөттөк, хәлдән тайғас, төңөлдөк.

Бер нисә көндән килһәк, ике ярым – өс гектар самаһы ерҙе ҡара ҡором баҫҡайны. Ҡарағат, бөрлөгән, балан ҡыуаҡтары уттан зыянланған, ә тирәк, өйәңке, ерек, муйыл кеүек ағастарға бер ни ҙә булмаған. Аблай төбәгенең уртаһындағы өс гектарҙай аҡ яланда колхоз йәшелсә үҫтерә ине. Ут шунда ҡара ергә етеп туҡтаған. Шулай ҙа был миңә ғүмерлек һабаҡ булды.

Тәбиғәтте мин үҫмер сағымдан яраттым. Болондарға сыҡһам, төрлө сәскәләргә һоҡланам, бөжәктәр тауышын иҫем китеп тыңлайым. Урманға, әрәмәгә барһам, көндәр буйы йөрөп туймай инем. Ә Егәнем минең өсөн ауылыбыҙҙың йөҙөк ҡашы булды. Ситтә йәшәгәндә лә бер ҡасан да тыуған яғымдан айырылманым. Отпускыларым, йыш ҡына ял көндәрем дә ауылымда үтте. «Тыуған яғым», «Ауылыма», «Аблайым» кеүек шиғырҙарымда ихлас тойғоларымды сағылдырҙым. Тәбиғәтте һаҡлау кәрәклеге тураһында мәҡәләләр ҙә яҙғыланым. Уның күҙ алдымда йылдан-йыл ярлыланыуы мине һәр саҡ борсоп торҙо.

Былтыр ғалим, яҙыусы Ғайса Хөсәйеновтың «Тормош» тигән китабын уҡығанда, тәбиғәткә арналған урындары мине тәрән тулҡынландырҙы. Оло ғалим тәбиғәтебеҙгә үҙенең хәстәрлекле мөнәсәбәте менән әсир итә, ғибрәтле факттар килтерә. Ошонан һуң күңелемдә тыуған яғым, Егәнемә бәйле иҫтәлектәрем, тәьҫораттарым менән уртаҡлашыу теләге уянды. Ошо публицистик әҫәремде Ғайса ағайҙың яҙмаһындағы ҡайһы бер фекерҙәр менән тамамлайым.

«Тәбиғәтте белеүсе ғалимдар, хәҙер Ер шарында мең төр хайуан, тере йән, егерме биш мең үҫемлек төрө бөтә барыу, бөтөнләй юҡҡа сығыу өҫтөндә, ти. Ер йөҙөндә урмандарҙы ҡырҡыу арҡаһында, һәр минутта улар 20 гектарға кәмей бара икән. Әгәр уға янғын, ташҡындарҙан юҡҡа сыҡҡан миллион гектарҙарҙы ла ҡушһаң, күпме булыр?!.

Ҡоро ерҙең бушлыҡҡа, ҡом сәхрәһенә әйләнеүе минутына 44 гектарға тиң. Йәғни ер ҡыртышлап килер мәжүс төҫлө, йәшел ерҙең бушлыҡҡа, урмандарҙың ҡоро яланға әйләнеүе һәләкәтле тиҙлек менән бара, тигән һүҙ. Ерҙең байлығын алыу, тәләфләү бер көн ҡаҡҡа ултыртып ҡалдырыуы ихтимал. Ихтимал ғынамы?..

ЮНЕСКО мәғлүмәттәренә ҡарағанда, донъя океанына йыл һайын 10 миллион тонна нефть түгелә-сәселә. Рейн йылғаһы тәүлегенә мең состав тимер юл вагоны ташырлыҡ ағыулы химик матдәләр ағыҙа икән. Германияла мин үле йылғалар күрҙем. Мазут яғып эшләгән урта ҡеүәттәге бер электр станцияһы һауаға тәүлек эсендә 500 тонна ағыулы көкөрт тарата. Ә ул көкөрт, көкөртлө ангидрит рәүешендә һыу менән ҡушылып, көкөртлө кислотаға әйләнә. Ул кислотаның бер нисә грамы кешене үлтермәле.

Бына мин әле тыуған Ағиҙелем хаҡында уйлайым. Ҡасандыр саф һыулы булған йылға хәҙер нефть, мазут матдәләре менән ҡушылып, ярым болғансыҡ, мазут-нефтле йылғаға әүерелде. Аҙ-маҙ һаҡланып ҡалған ҡайһы бер әрһеҙ балыҡтарынан нефть еҫе килеп тора...

Һауа төрлө газ, туҙан, радиоактив элементтар менән ағыулана. Ҡош-ҡорт кәмей, төрлө йәнлек, үлән төрҙәре бөтә, йәшеллек һыйығая. «Кешеләрем, Ер шарын, үҙебеҙҙе туйындырған, йәшәткән еребеҙҙе, урман-тауҙарыбыҙҙы, йылға-күлдәребеҙҙе һаҡлайыҡ, һыуҙарыбыҙҙы шул саҡлы бысратмайыҡ!» – тип һөрән һалғым килә».

Ғалимдың һуңғы һүҙҙәренә ҡуш ҡуллап ҡушылып, үҙемдән: «Тәбиғәтебеҙҙе яратайыҡ, уға мәрхәмәтле булайыҡ!» – тип тә өҫтәйем.

# ЙӘШӘҮ МӘҒӘНӘҺЕ – ИГЕЛЕК ҠЫЛЫУҘА



*“Мәсетле ере гүзәл тәбиғәтле, әммә райондың уңған, тыңғыһыҙ кешеләре унан да гүзәлерәк. Әлләниндәй мәнфәғәт көҫәмәй, маҡтауҙар талап итмәй, һәр ваҡыт игелек ҡылып йәшәйҙәр”. (1965 – 1972 йылдарҙа КПСС-тың Мәсетле район комитетының беренсе сәркәтибе Абрар Мәсәлим улы Саҙретдиновтың райондың 80 йыллығына арналған сығышынан.)*

*Ысынлап та, уңған, тынғыһыҙ мәсетлеләр менән күп аралашҡаным бар. Күңелемде бигерәк тә сәнғәт, мәҙәниәт һәм мәғариф өлкәһендә эшләүселәр арбай. Улар өсөн рухи байлыҡ матди байлыҡтан өҫтөн булғанғалыр инде. Шундай шәхестәрҙең береһе Марат ағай Ғафаров менән әңгәмәләшеү, борсоған һорауҙарға яуап алыу бәхетенә ирештем. Һөйләшеү шул тиклем фәһемле булды, тәьҫораттарҙы ҡағыҙға теркәмәйенсә булдыра алманым.*

***Марат Фазлетдин улы ҒАФАРОВ** – районыбыҙҙың Борғатъя ауылында 1942 йылдың 30 июлендә донъяға килгән. Мәғрифәтсе, тыуған яҡты өйрәнеүсе, журналист. Рәсәй Федерацияһының мәғариф отличнигы (1997), Башҡортостан Республикаһы Журналистар союзы ағзаһы.*

*Яҡташыбыҙ 1973 йылда Башҡорт дәүләт университетын тамамлап, 1965 йылда “Салауатнефтехим” комбинатында эш башлай. 1970 – 1971 йылдарҙа Мәсетле районының “Уңыш” ирекле спорт йәмғиәте рәйесе була. 1971 йылдан Марат Фазлетдин улы уҡытыуға күсә, Мәләкәҫ һигеҙ йыллыҡ мәктәбе директоры, 1986 йылдан Мәсетле районы халыҡ мәғарифы бүлегенең методика кабинеты мөдире, 2004 йылдан Оло Ыҡтамаҡтағы 2-се урта мәктәп музейы етәксеһе, ә 2009 йылдан райондың тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы етәксеһе вазифаларында эшләй. “Әйле башҡорттары” (1993), “Ғәзиз тыуған ягым – Мәсетле” (2010) һәм “Мәсетле ере тарихҡа бай” (2012) исемле китаптар авторы. Рәшит Әхтәри исемендәге район премияһы лауреаты (2007), I һәм II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты (2002, 2007).*

**– Марат ағай, Һеҙ күптәргә мәғрифәтсе генә түгел, ә тынғыһыҙ эҙләнеүсе, тыуған яҡты өйрәнеүсе булараҡ билдәле. Киң мәғлүмәт сараларында мәҡәләләрегеҙ күренеп бара, китаптарығыҙ нәшер ителә. Бер йырҙа “Тынғыһыҙлай бик йыраҡта, ирешелмәгән теләктәр”, – тип йырланыла. Нисек уйлайһығыҙ: теләктәргә ирешеү өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

– Кеше теләге – икһеҙ-сикһеҙ даръя ул. Һәр теләге тормошҡа ашып торһа, әҙәм балаһы ожмахта йәшәр ине. Хоҙай башта әҙәмгә ожмахта йәшәү хоҡуғы биргән, әммә ҡушҡан тәғлимәтте Иблис ҡотҡоһо менән боҙоуы арҡаһында Хоҙай Тәғәлә уны ергә төшөрә. Шулай ҙа кешене иң аңлы, иң көслө, фекер ҡеүәһенә эйә булыусы итеп ҡалдыра, ерҙә үҙ көнөн үҙе хәстәрләп йәшәү ирке бирә. Кешенең йәшәү фәлсәфәһе, уның теләктәре шуға бәйле, тип уйлайым. Унда һәр ваҡыт ирекле донъя көтөү, үҙ теләген өҫтөнөрәк күреү уйы алдан йөрөй. Әммә кешелек йәмғиәтендә йәшәп, унан азат булып булмай. Һәр шәхес үҙ илендә, үҙ мөхитендә, үҙ ҡәүемендә булған йола-тәртиптәргә, ҡанундарға бойһоноп йәшәргә бурыслы. Бындай сәйәсәт элек-электән килгән һәм йәмғиәт ҡоролоштары (тәүтормош, община, ҡол биләүселек, феодализм, капитализм, социализм) ошоно дәлилләй. Элек шулай булған һәм киләсәктә лә шулай дауам итәсәк. Кеше шул фәлсәфәне аңлаһа, үҙ иркен, үҙ теләген башҡаларҙыҡынан өҫтөн ҡуймаһа, улар менән бер кимәлдә тотһа, донъя иркенерәк һәм тынысыраҡ буласаҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күпселек быны аңларға теләмәй, шуға күрә кешелек йәмғиәте ожмахтан алыҫлашҡандан-алыҫлаша.

Әйткәндәй, үрҙә иҫкә алынған йәмғиәт ҡоролоштарының тарҡалыуына ла төрлө теләктәрҙең тап килмәүе түгел, ә бер-береһен һанға һуҡмауы алып килде. «Бөтәһе лә бер тигеҙ», – тигән социализм сәйәсәтен дә шул уҡ афәт юҡҡа сығарҙы, тигеҙлек хөрриәте хыял ғына булып ҡалды. Сөнки, төрлө ҡараш-фекер айырмалығын бер ҡалыпҡа һалырға, бөтәһе менән дә бер баштан сығып идара итергә тырыштылар. Кешеләрҙә тигеҙлек, берҙәмлек тойғолары тәрбиәләнек, уларҙы яҡшылыҡҡа, игелеккә өндәнек. Әммә «юғарылағы» ике йөҙлөлөк сәйәсәте, йәмғиәттәге кире күренештәр: алдашыу, көнсөллөк, көсһөҙҙө йәберләү, олоно, кесене хөрмәт итмәүҙе көсәйтте. Һөҙөмтәлә яман ҡылыҡтар йәмғиәтте көтөлмәгән упҡынға ташланы. Әле баҙар иҡтисады, «ҡулланыусылар мәнфәғәте» сәйәсәтен алға һөрәбеҙ, кешенең тәмле ашап, татлы йәшәү теләген оҫта файҙаланған байлыҡ йыйыусылар сәйәсәте икәнен аңлап еткермәйбеҙ. Рухи байлыҡтың матди байлыҡтан юғарыраҡ икәнен инҡар итәбеҙ. Аҡса ҡолдарының самаһыҙ шашыуы ярлылар менән байҙар синыфтары барлыҡҡа килтерҙе. Әле һаман ике йөҙлө булып ҡалабыҙ. «Йәмғиәт мәнфәғәте!» тип һөрән һалабыҙ ҙа шәхси мәнфәғәтебеҙҙе алға этәрәбеҙ. Был күренештәр илебеҙҙең, донъяның киләсәге хаҡында борсоуға һала, сөнки берәүҙәр икенселәрҙең фекерен ишетмәй, ҡарашын һанға һуҡмай.

Кеше был донъяға байлыҡ тупларға түгел, ә игелек ҡылыу өсөн тыуа. Башҡарған ғәмәлдәренең дәүмәле мөһим түгел, ә изге булыуы мөһим. Был – уның ерҙә ҡалдырған эҙе. Тәбиғәт ҡанундарына буйһоноп йәшәргә, уны ҡурсаларға, һаҡларға, үҙ нәҫелен дауам итергә, йәмғиәт мәнфәғәтен инҡар итмәҫкә бурыслы. Кеше йәмғиәттән айырым йәшәй алмай һәм уны бәләкәйҙән быға әҙерләү, һәр баланы шәхес итеп тәрбиәләү өсөн шарттар булдырыу зарур. Йәғни, баланың нәҫеле, аймағы, ауылы, милләте тарихын белеп үҫеүе маҡсатҡа ярашлы. Оло быуынға хөрмәт менән ҡарау, башҡаларға кеселекле, ярҙамсыл, ғәҙел булыу, хеҙмәткә күнегеү, яратҡан һөнәр һайлау тормошта уңышҡа өлгәшергә ярҙам итә, абруй, хөрмәт ҡаҙандыра. Йәшәйештең ябай ҡағиҙәләрен үтәү теләктәргә ирештерә, әммә, бөтәһенә лә түгел. Кеше шулай ҡоролған: уға һәр ваҡыт нимәлер етмәй.

Мин – романтиктар быуыны, һуғыш осоро балаһы. Беҙ хыял шишмәһендә йөҙөп тәрбиәләндек, шуға ла бөтә теләктәребеҙ тормошҡа ашманы, әммә рухи донъябыҙҙы һаҡлап ҡалдыҡ. Әле лә, ирешелмәгән теләктәрҙе үтәү өсөн, үҙемсә тырышҡан көнөм.

**– Мәғрифәтсе академик Бестужев-Лада бер мәҡәләһендә: «Һәр милләттең үҙ пәйғәмбәре бар», – тип әйтә. Һеҙ шуның менән килешәһегеҙме?**

– Мәғариф өлкәһендә эшләгән күренекле ғалим Бестужев-Лада хаҡында совет заманында уҡ белә инем, әммә уның иҫкә алынған мәҡәләһе менән таныш түгелмен. Шулай булғас, ғалим фекерен туранан-тура аңлата алмайым, әммә мине лә дин-тәрбиә тураһында уйҙар борсой. Беҙ атеизм дәүләтендә тәрбиә һәм белем алдыҡ. Шуға ҡарамаҫтан, күңелемдә өләсәйемдең «Аллам», «Хоҙайым», «Тәңрем» тигән һүҙҙәре хәтерҙә ныҡ һеңеп ҡалған. Бала саҡта Тәңре төшөнсәһен аңламай инем. «Хоҙай» һүҙенең ғәрәпсә Алланың синонимы, иң бөйөк зат булыуын беләм. Пәйғәмбәр төшөнсәһе лә ғәрәпсәнән алынған, дингә нигеҙ һалыусы тигәнде аңлата. Ҡөрьән-Кәрим китабы һүҙлегендә 23 пәйғәмбәр исеме теркәлгән. Иң һуңғы пәйғәмбәр Мөхәммәт – ғәрәп донъяһында дин һәм дәүләт эшмәкәре, тиелә. Христиандарҙа Иисус Христос – Ғайса пәйғәмбәр, Мәрйәм улы Әл-Мәсих Ғайса, тип теркәлгән. Иң боронғо пәйғәмбәр булыуына ҡарамаҫтан, Будда исемлектә юҡ. Шулай уҡ төрки ҡәүемдәренең Тәңре Аллаһы ла дини исемлеккә индерелмәгән. Сөнки, Тәңре дине Христиан дине өҫтөн булған саҡта уҡ изге китаптарға индерелмәй, төшөрөп ҡалдырылған. Христиандар быны «төркиҙәр мәжүсилек, шаманлыҡ менән шөғөлләнә» тип аңлата. Минеңсә, ысынбарлыҡ иһә башҡасараҡ. Фараздарым мәртәбәле тикшеренеүселәрҙең ғилми эштәренә нигеҙләнә. Шуларҙың береһе – Морат Аджиҙың «Ҡыпсаҡ яланының әреме» исемле мөһим сығанаҡтарға таянған китабы.

Тәңре динен төркиҙәр беҙҙең эраға тиклем Индра (Тәңре) образында ҡабул иткән, изге тау Кайласҡа барып табынғандар. Легенда буйынса тауҙар ҡанатлы булып осоп йөрөгән, ә Индра ул ҡанаттарҙы ҡырҡҡас, тауҙар ҡатып ҡалған. Төркиҙәр Европаға Тәңре динен, йолаларын килтергән. Әрмәндәр беренсе булып, унан һуң башҡа милләттәр был динде ҡабул итеп, үҙҙәренсә үҙләштергән. Артабан иһә Тәңре онотолоуға дусар ителә, сөнки донъяның яңы хужалары элек ҡол булыуҙарын оноторға теләй. Ләкин донъяла бер мәғлүмәт тә онотолмай, сөнки Йыһан – үҙе мәғлүмәт һаҡлаусы, уны кешеләр хәтеренә еткереүсе. Шунлыҡтан бер хәҡиҡәтте икенсеһе менән баҫтырып ҡуйыу мөмкин түгел. Береһен юғары күтәреп, икенсеһен төшөрөргә маташыу ҙа ваҡытлыса ғына. Ваҡыт арауығы бик ҙур булыуы мөмкин әлбиттә, әммә ысынбарлыҡ үҙ урынына барыбер ҡайтасаҡ. Шулай булғас, бер ваҡытта ла өҫтөнлөк көсәргә ярамай, ә һәр хәҡиҡәтте аңлап, уның барлығын инҡар итмәй йәшәү фарыз.

Христиан дине Тәңре диненән Атилла ваҡытында уҡ үҙләштерелгән, тип аңлатыла. Был фараз Христиан динендәге йола-ритуалдар, сиркәү ҡулланған исемдәр-һүҙҙәр төрки сығышлы булыуы менән дәлилләнә. «Икона» төркисә айырым әйберҙе анлата, «Бог» – «мәңгелек», «йыһан», «донъя», «тыныслыҡ» тигән мәғәнәне бирә. «Кадило», «потир», «колокол», «псалтырь», «алтарь», «аминь», «парча», «епанча», «колобок», «кафтан» һ.б. бихисап һүҙҙәр төрки теленән алынған.

Ғөмүмән, христандарҙың, немецтың, урыҫтың тәреһе – барыһы ла Себерҙән, Алтайҙан сығыуы, Тәңре дине тәреһе булыуы билдәле. Тәңре дине тәреһенең дүрт яғы ла тигеҙ, тимәк, донъяның дүрт яғы ла тигеҙ икәнде аңлата. Быны дәлилләү өсөн төрки халыҡтар ҡулланған биҙәү орнаменттарына күҙ һалыу ҙа етә.

Минеңсә, һәр дингә нигеҙ һалыусы булған. Динде таратыусы, тәү дин пәйғәмбәре һәр милләттеке лә булғанмы, булырға тейешме, тигән һорау тыуа.

Бөтә диндәр ҙә һуғыш аша, көс менән таратылыуы билдәле. Бында бер ҡәүемдең икенселәрҙе бойһондороу теләге тора. Ошо күҙлектән ҡарағанда, минеңсә, һәр милләттең үҙ пәйғәмбәре булыуы бәхәсле, сөнки, күп милләттәр, яулап алыныу аша башҡа халыҡтар тарафынан буйһондоролоп, еңеүсенең динен, пәйғәмбәрен ҡабул иткән. Боронғо төркиҙәр Христиан һәм Ислам динен танып, үҙ Тәңреһен онотҡан. Шуға ла Тәңре уларҙан баш тартҡан. Һөҙөмтәлә, үҙ Аллаһын юғалтҡандарҙы кәмһенеү, ғазаплы буйһоноу аҙмышы көтөп, төркиҙәр бөтә донъяға һибелергә мәжбүр булған.

Башҡорт халҡына килгәндә, уның милләт булып ойошоу тарихынан сығып, былай күҙаллайым. Ата-бабаларыбыҙ Урал ерлегендә формалашҡан арий тоҡомдары (мадъярҙар) менән Алтайҙан күсенгән төркиҙәр менән аралашыу, бергә йәшәү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән төрки ҡәүеме булараҡ, оҙаҡ дәүер үҙ Аллаһын, үҙ пәйғәмбәрен онотмаған, Тәңрегә инанған. Ә һуңынан, ғәрәп миссионерҙары Ислам динен, Мөхәммәт пәйғәмбәрҙе тәҡдим иткән. Шулай ҙа Ислам дине Алтын Урҙа заманында ғына ҡабул ителгән. Тарихи күҙлектән ҡарағанда, был хәл кисә генә булған, тип тә әйтергә мөмкин. Ғөмүмән, Исламдың суфыйсылыҡ ағымы тарихи Башҡортостанда ныҡ таралған була. Быны ла, башҡорттарҙың, төрки халыҡтарҙың Ислам динен Тәңре диненә яраҡлаштырыуы, тип әйтеүселәр бар.

Шулай итеп, халыҡ хәтере боронғо Тәңре динен һаҡлап ҡалған. Пәйғәмбәре Урал батыр тураһында шиғри ҡобайыр ижад иткән. Урал образында, тыуған илендә йәшәгән башҡорт ҡәүеменең донъяға ҡарашы формалашыуы, яманлыҡ менән яуызлыҡ, фанилыҡ менән баҡыйлыҡ фәлсәфәһенең көрәше кәүҙәләнә. Урал – фани донъяны, Шүлгән (Үлгән) – теге донъя батшалығын билдәләй. Эпостың төп мәғәнәһе – тәбиғәттең мәңгелеклеге. Тәбиғәттең бер өлөшө, аңлы зат булараҡ тәбиғәтте ҡурсалау бурысы кешегә йөкмәтелгән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, донъя кимәлендә ҡарағанда, ул үҙен тәбиғәттән өҫтөн ҡуйып, тәбиғәтте үҙ мәнфәғәтенә буйһондороу өсөн тырыша. Әммә был мөмкин түгел, сөнки өлөш бер ваҡытта ла бөтөндән ҙурыраҡ була алмай. Тәбиғәт быны раҫлап, кеше алдына яңынан-яңы ҡатмарлыраҡ кәртәләр ҡуя, быға тиклем билдәле булмаған афәттәр ебәрә.

Башҡортто ҡайһы ваҡыт, әүҙем түгел, бошмаҫ, тип әйтәләр. Быны мин насар сифат итеп түгел, ә халыҡ күңелендә юйылмаған хәтер – самалы тормош фәлсәфәһе ятыуында күрәм. Тәбиғәттән артығын алмай, киләсәк быуынға һаҡлап ҡалдырыу өсөн ошолай йәшәргә дусар ителгән ул. Тимәк, халыҡ тәбиғәттән айырылмаған, уны буйһондорорға ла тырышмай. Башҡорт милләте үҙ пәйғәмбәре итеп эпостағы Уралды таныһа, Тәңре – илаһи зат онотолмаған булып сыға. Башҡорт халҡы артабан да үҙ динен, үҙ пәйғәмбәрен, үҙ фәлсәфәһен инҡар итмәһә, киләсәге лә ыңғай буласаҡ. Шул тәғлимәтте башҡорт халҡына ғына түгел, ә башҡа милләттәргә лә еткергән ғилми һәм әҙәби әҫәрҙәр күберәк ижад ителһен ине. Был йәһәттән башҡорттарҙың бик боронғо ҡәүем булыуын, уның тормош фәлсәфәһен яңы күҙлектән өйрәнеп, донъя кимәленә сығарған Салауат Ғәләмовтың хеҙмәттәрен баһаламау мөмкин түгел.

**– Яҡшылыҡ һәм яманлыҡ, игелек һәм яуызлыҡ. Игелек ҡасан яуызлыҡты еңер? Ғөмүмән, яманлыҡҡа ҡаршы көрәш нимә ул?**

– Был һорау бөтә кешелек йәмғиәтен борсой, сөнки яҡшылыҡ (игелек) һәм яманлыҡ (яуызлыҡ) араһындағы көрәш донъя яралыу менән башланған. Кеше аңлы биологик зат булыуы менән үҙенсәлекле, уға ҡараштар төрлөлөгө хас, сөнки бөтә кешеләр ҙә бер иш түгел. Йәшәйештә бер-береңдең ҡылыҡтарын ҡабул итеү йәки итмәү яҡшылыҡ һәм яманлыҡ күренештәрен барлыҡҡа килтерә лә

инде. Шул күҙлектән сығып ҡарағанда, яманлыҡты еңеп булмай кеүек, сөнки берәү яҡшылыҡ тип уйлаған эш икенсе кеше тарафынан яманлыҡ тип ҡабул ителә. Әйтәйек, берәүҙәр тәбиғәтте кеше мәнфәғәтендә сикһеҙ файҙаланыуҙы яҡшылыҡ тип белһә, икенселәр яманлыҡ тип күрә. Мин – икенселәр рәтендә. Донъя цивилизацияһының һуңғы ҡаҙанышы – компьютерлаштырыуҙың яҡшы яҡтары ла, яман яҡтары ла барлығын әйтер инем.

Минеңсә, кешелектең маҡсаты яманлыҡты еңеү түгел, ә уны кәметеү юлдарын табыу булырға тейеш. Был эшмәкәрлектә йәмғәтселектең һәм дәүләттең тырышлыҡтарын берләштереү зарур. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әле былдай берҙәмлек юҡ. Илдәге социаль ҡоролош, ҡанундар күпселектең ҡарашын түгел, ә матди байлыҡ тип күҙҙәре тонған аҙсылыҡтың мәнфәғәтен көсәй. Ундай кешеләр, үҙәренә ҡалһа, яҡшылыҡ ҡылабыҙ, тип уйлай. Ғәмәлдә иһә үткәнде инҡар итеп, рухи байлыҡтың бәсен кәметәләр. Минеңсә, был әхлаҡи тәрбиә етмәгәнлектән килә. Кешегә бәләкәйҙән тәбиғәткә, башҡа кешеләр мәнфәғәтендә игелек ҡылыу кәрәклеген аңлатҡанда, яманлыҡ улай ныҡ арта алмаҫ ине. Әлбиттә, әхлаҡи тәрбиә менән бер рәттән, йәмғиәттең ҡанундарына буйһоноп йәшәү тәртибен дә онотмаҫҡа кәрәк. Эш итеп килгән рәсми ҡанундарҙың әхлаҡи яҡтан камиллығы мотлаҡ. Әлеге заманда йәшәйештең төп ҡанундары боҙола, яманды – яҡшы, яҡшыны яман күрәбеҙ. Бына шул мине ныҡ борсоуға һала ла инде.

Кешенең йәшәү мәғәнәһе – тирә-яҡ мөхиткә зыян итмәү, Ер шарының күркәмлеген, байлығын тойоу, дөрөҫ, самалы файҙаланыу, киләсәк быуындар өсөн һаҡлау. Ер йөҙөндә тыныс тормош урынлашһа, шунан да яҡшыраҡ ожмах булырмы? Эйе, йәшәү мәғәнәһе бер генә – һәр кеше ерҙә үҙ эҙен ҡалдырһын, ҙурмы, бәләкәйме, бары тик яҡшы эҙ, киләсәк быуыны, тоҡомдары ғорурланып хәтерләрлек булһын. Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтер инем: яуызлыҡҡа ҡаршы көрәш ысулы бер генә – тәбиғәткә, башҡа кешеләргә ҡарата яҡшылыҡ, игелек ҡылыу.

**– Марат ағай, күңелегеҙҙе ниҙәр боросоғаны тураһында әйтегеҙ әле.**

– Ғәҙҙәттә интервью алғанда: «Һеҙ бәхетлеме?» – тигән һорау бирелә. Һуңғы ваҡытта мин дә был һорау тураһында уйлана башланым. Совет осоронда бәхет төшөнсәһенә йәмғиәттә ҡараш бер төрлө булһа, хәҙер иһә тирә-йүндәге үҙ-ара мөнәсәбәт, кешеләр араһында байлыҡҡа ынтылыш ҡарашты үҙгәртте. Бәхет төшөнсәһе әхлаҡҡа бәйле икәнен күрһәтә был үҙгәрештәр, йәғни кешелек донъяһы бәхет темаһын борон замандарҙан бирле тикшерә, философтар хеҙмәттәр ижад итә. Дин әһеле – үҙенсә, буржуаз этика – бер төрлө, ә коммунистик идеология икенсе төрлө аңлата. Ләкин тормош хәҡиҡәте был һорауҙы һәр яңы быуын алдына ҡуя, шуға күрә уға яңыса ҡараш, тикшеренеү булған һәм артабан да дауам итәсәк.

Әгәр совет осоронда үҙемде бәхетле һанаһам, хәҙер ҡарашым үҙгәрҙе, сөнки илдәге әхлаҡһыҙ күренештәр, эшһеҙлек, ауыл тормошоноң һүнә барыуы, күмәк хужалыҡтарҙың тарҡалыуы, мәктәптәр ябылыуы, халыҡтың сит тарафтарға сығып эшкә эҙләүе һ.б. кәмселектәрҙе күреп, үҙенде бәхетле һанап булмай. Бәхетте, үҙемсә, былай аңлай инем: ғаилә тормошонда тыныслыҡ, эшем менән ҡәнәғәт булыу, коллективта тыныс, аралашып йәшәү. Иң мөһиме: балаларҙы үҫтереү мәшәҡәте менән ваҡыт үтеүе һиҙелмәне. Был бәхет үҙем аңлағанса ине. Һуңғы ваҡыттта, заманса «бәхет» төшөнсәһе менән килешмәй, үҙ-үҙем менән бәхәскә инә башланым. Ҡайһы бер фәлсәфәүи фекерҙәр менән ризалашмау, бәхеткә үҙ мөнәсәбәтемде белдереү, бәлки, ҡайһы берәүҙәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятыр.

«Бәхет» төшөнсәһенә күҙ һалайыҡ. Күптәр уны башҡорт һүҙе тип бутала, ә ул Ислам дине аша ғәрәп теленән үтеп ингән. Башҡортса «бәхет» яҙмыш була. Ғәрәп-башҡорт-рус һүҙлегендә былай тиелә: «Бәхет: 1) яҙмыш (счастье, фортуна); 2) бәхет (счастье); 3) сәғәҙәт (везение). Бәхет – яңғыҙлыҡ исем. Икенсе төрлө рәхәт (йән тыныслығы), рух рәхәте – йән рәхәте, сәғәҙәт бәхет – мәңгелек бәхет (рәхәт) тигәнде аңлата. Башҡорт халыҡ ижадында бәхеткә ҡағылған тапҡыр әйтемдәр бихисап: «эшсән бәхетте эштән эҙләр»; «тырышлыҡ – бәхет асҡысы»; «бәхет башы – тәүфиҡ» (рухи байлыҡҡа ишара); «бәхет малда түгел»; «бәхетһеҙлек башы – ялҡаулыҡ» һ.б.

Был тапҡыр әйтемдәр халыҡ фәлсәфәһен асып һала. Күпселек әйтемдәр бер кешегә төбәлгән. Рухи байлыҡ, матди байлыҡ, һәм дәүләт идараһына ҡағылышлы әйтемдәр ҙә бар. Һәр шәхестең рухи яҡтан камил үҫеше генә бәхет килтереү тәү шарт булыуын халыҡ дөрөҫ баһалайҙыр, тип уйлайым. Әммә, кешелә шәхси эгоизм көслө була. Шулай ҙа ул йәмғиәт ағзаһы буларaҡ, коллективҡа ылыға һәм бәхетле йәмғиәт хаҡында хыяллана. Был ҡаршылык кешеләр араһында күп бәхәстәр тыуҙырып, шәхес талаптарҙы тәү сиратта үҙенә түгел, ә башҡаларға ҡуйыусан. «Башта – һин, унан һуң мин», тигән ҡараш был.

Бик күп осраҡта ниндәйҙер кимәлдә идара итеү даирәһенә өлгәшкән кешене «бәхетле» һанайҙар, сөнки ул, тәү сиратта, үҙенең, яҡындарының мәнфәғәтен ҡайғырта. «Бер кеше тәхеткә менһә, ҡырҡ кеше – бәхеттә», тигән әйтем шунан килә лә инде. Был яҡтан совет осоронда бер ни тиклем сикләүҙәр бар ине, әлеге заманда улары ла юҡҡа сыҡты. Эйе, бөгөнгө көндә донъя менән матди байлыҡ идара итә, ә был ғәҙел түгел. Ил идаралығында әхлаҡи шәхестәр булғанда ғына, ил халҡы бәхетле буласаҡ. Немец философы Фейербахтың: «Кешенең бәхеткә ынтылып йәшәүе тәбиғи, һәм һәр әхлаҡтың нигеҙе булырға тейеш», – тигән һүҙҙәрен идара итеүселәр белһен һәм күңеленә һеңдерһен ине.

Был фәлсәфәне Ф.Энгельс тәнҡитләп сыҡты, һәм уның фекерҙәштәре фәнни коммунизм теорияһы аша «бәхет кеше генына бәйле түгел, ә ҡайһы бер шәхестәрҙең эгоизмы ғына» тигән ҡараште алға ҡуйҙы. Ғәмәлдә был фекер яҡлау тапманы һәм социализм ҡоролошоноң емерелеүе менән тамамланды. Бәхет фәлсәфәһе бер кеше теләгенә төбәлгән булһа ла, уның бөтә йәмғиәткә лә ҡағылыуын инҡар итмәй. Артабан кешелек донъяһының уны ентекләп өйрәнеүе зарур. Был мәңгелек темаға фәҡәт рухи яҡтан үҫешкән шәхестәр генә асыҡлыҡ индерергә һәләтле. XXI быуат быға яуап таба алырмы икән?

Мин бер ябай ауыл малайы. 70 йәшкә еткәнсе социалистик ҡоролошто татыным, «80-се йылда коммунизм була» тигән хөрәфәткә ышандым, барына ҡәнәғәт инем. 20 йылдан ашыу баҙар шартында – капитализмда йәшәйем, әммә күңелем тыныс түгел. Иң көйгәнем, борсолғаным – киләсәк быуын нисек йәшәр, ил был көрсөктән сығырмы? Фекеремде йомғаҡлап шуны әйтке килә: кеше аҡылы – сикһеҙ рухи байлыҡ. Социаль тигеҙлек күҙлегенән сығып билдәләнгән бәхет өсөн көрәш туҡталмаясаҡ, сөнки ул теләк мәңгелек.

**– Әңгәмәгеҙ өсөн рәхмәт. Юбилейығыҙ менән Һеҙҙе. Һаулыҡ, оҙон ғүмер, бөтмәҫ йәшәү ҡеүәте, ижади уңыштар теләйем. Һеҙҙең фекерегеҙ йәмғиәт өсөн бик мөһим. Бөгөн аңламағандар иртәгә аңлар.**

**Әңгәмәне Рөстәм НУРИЕВ алып барҙы.**

*1812 йылғы Ватан һуғышына — 200 йыл*

# АЯМАҒАН ЙӘНЕН, ТҮККӘН ҠАНЫН

Ҡайһы бер тарихсылар, 1812–1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында Рәсәй империяһының еңеп сығыуы – уның бөтә халыҡтарының ҡаҙанышы, тип яҙырға күнеккән. Был ваҡиға тарихын ентекле өйрәнгән тарихсылар – Н. М. Богданович, Е. В. Тарле, Н. М. Дружинин, М. В. Нечкина, генерал-майор Е. В. Жилин, Л. Г. Бескровныйҙарҙың хеҙмәттәренән күренеүенсә, империяла йәшәгән 200-ҙән ашыу халыҡтың ни бары 12 – 15-енең вәкилдәре генә был һуғышта ҡатнаша. Бына улар: грузин, осетин, адыгей, кабардин, ҡалмыҡ, латыш, эстон, литва һ.б. Һуғыштың төп ауырлығы, һис шикһеҙ, урыҫ, белорус, украин халыҡтарының иңенә төшә. Ваҡиғалар шаһиты яҙыусы Сергей Глинка бер хеҙмәтендә, 1812 йылғы Ватан һуғышында мордва менән сирмештәр (мариҙар – **Ә.Й.**) ҡатнашты, тип яҙа. Ләкин ул яңылыша, аталған халыҡтарҙың был һуғышта ҡатнашыуы тураһында рәсми документтарҙа, тарихи әҙәбиәттә бер ниндәй ҙә мәғлүмәт осрамай. Инглиз ғалимы Роберт Фред Бауман «Башҡорттар миҫалында урыҫ булмаған халыҡтар Рәсәй империяһының хәрби хеҙмәтендә» тигән күләмле яҙмаларында: «Волга буйында йәшәгән татар, мордва, мари империяның иррегуляр ғәскәрендә хеҙмәт итмәгән»,– тип яҙа.

Башҡорт биләмәләрендә йәшәгән халыҡтарҙан хәрби кампанияла, башҡорттарҙан тыш, урыҫ, мишәр, типтәрҙәр генә ҡатнаша. Типтәрҙәр – төрлө халыҡ вәкилдәренән торған социаль төркөм. Улар араһында ерһеҙ ҡалған башҡорттар сама менән 70 процент тәшкил иткән. Ҡалған типтәрҙәр сыуаш, мордва, татар, мишәр һәм мариҙарҙан булған. Ырымбур һәм Силәбе казактары яуға – бишәр, мишәр һәм типтәрҙәр икешәр алай ойошторол оҙата. Өфө урыҫтарынан яуға «Өфө йәйәүле алайы» китә. Әйткәндәй, был хәрби берәмектә башҡорттар ҙа була. Бородино һуғышында күрһәткән батырлығы өсөн биш башҡорт орден һәм миҙалдар менән бүләкләнә. Бына улар: Ислам Бакиров, Тимерйән Солтанов, Арыҫлан Әхмәтов, Әхтәм Сөләймәнов һәм Салауат Нурыев.

Башҡорттар, Ырымбур һәм Силәбе казактары, ҡалмыҡтар өсөн Наполеон ғәскәренә ҡаршы хәрби хәрәкәттәр 1806 –1807 йылдарҙа башланған. 1805 йылдың октябрь – ноябрендә Австрияның Ульма һәм Аустерлиц тигән урындарында француз ғәскәре Рәсәй менән Австрияның йыйылма көстәрен тар-мар иткәс, урыҫ армияһына ярҙамға Ырымбурҙан 1000 казак, 600 ҡалмыҡ, 7000 башҡорт оҙатыла. Был сама менән, 14 башҡорт алайы, тигән һүҙ. 1806 йылдың көҙөндә башҡорттарҙан һуғышҡа тағы өс һыбайлы алай алына. Тимәк, 1806 –1807 йылдарҙа Наполеон ғәскәренә ҡаршы башҡорттар 17 атлы алай ҡуя. Уларҙың номерҙары ла билдәле: 1-се башҡорт алайы, 2-се, 3-сө һ.б. Алыштарҙа 1 – 5, 7-се алайҙарҙың ҡатнашыуы билгеле (1). Шулар араһында хәҙерге Учалы районының Иҫке Муйнаҡ ауылынан яҫауылдар Йософ Ғәлекәев менән Бикмөхәмәт Хоҙайбирҙин, йорт старшинаһы, йөҙ башы Айсыуаҡ Үҙәнбаев, казак Хөсәйен Муйнаҡов; Баймаҡ районының Күсей ауылынан Алламорат Байназаров менән Имәсәй Ишҡужин, Темәстән – Байгилде Солтанғолов менән Мәһәҙи Ишҡужин; Этҡолдан – Хәйерзаман Ирғәлин, Әйүп Солтанғолов, Сәйетбаттал Ирмәков һ.б.;

Бөрйән районының Байназар ауылынан Аслай Байрамғолов менән Рафик Атанғолов, Иҫке Монасиптан – яҫауыл Рәхмәғол Яҡшыбаев, Хоҙайбиргән Ишҡолов, Зыянғол Туғыҙбаев һәм Иҫәнғәли Ишембәтов; Тимерҙән – Ҡаһарман Сирбаев, Миңлебай Сирбаев, Һатлыҡ Күбәков, Байғазынан – Хәйбулла Ташбулатов менән Рәсүл Ишкилдин; Бикташтан – (ауыл юҡҡа сыҡҡан) Исламғәли Ишмөхәмәтов, Дәүләткилде Ҡолоҡасов һ.б.

Башҡорт алайҙары 1807 йылдың 2 һәм 7 июнендә Көнсығыш Пруссияның Фридлянд тип аталған урынында һәм Тильзит ҡалаһы янында барған ҡаты һуғыштарҙа була. Ике алышта ла урыҫ армияһы тар-мар ителеп, Рәсәй императоры 25 июндә Тильзит (хәҙер Калининград өлкәһенең Советск ҡалаһы) Франция менән солох төҙөргә мәжбүр була. Ике дәүләт араһында һуғыш ваҡытлыса туҡтап тора, башҡорттарҙы өйҙәренә ҡайтарып ебәрәләр.

Тильзит солохо Франция файҙаһына булыуға ҡарамаҫтан, ике империя араһындағы ҡаршылыҡтарҙы юҡҡа сығара алмай, сөнки Наполеон Европаны тотош баҫып алып, үҙ тәртибен урынлаштырырға хыял итә. Рәсәй императоры Александр I үҙ сиратында Европа илдәрен буйһондороу маҡсатын алға һөрә, Наполеонға ҡаршы хәрби союздаштар эҙләй. Шуның өсөн ике дәүләт тә яңы алыштарға әҙерләнә һәм 1812 йылдың яҙында уға әҙерлек тамамлана.

Батшаның 1811 йылдың 7 апрелендәге махсус указына ярашлы, Ырымбур хәрби губернаторы Григорий Волконский кантон башлыҡтары ярҙамында башҡорттарҙан тиҙ арала ике: 1-се һәм 2-се алайҙар ойоштора. Тәүгеһе – Ырымбур, икенсеһе Стәрлетамаҡ өйәҙҙәре башҡорттарынан була. Сембер, Серпухов, Луцк һ. б. ҡалаларҙы үтеп, алайҙар һуғыш башланыр алдынан империяның көнбайыш сигенә етә. Хәрби хәрәкәттәр башланыу менән башҡорттарҙан 3-сө, 4-се һәм 5-се алайҙар туплана. 3-сө алайға – Минҙәлә, 4-сегә – Бәләбәй һәм Бөгөлмә, 5-сеһенә Бөрө, Бәләбәй һәм Бөгөлмә башҡорттары йәлеп ителә. 1812 йылдың 8 авгусында Александр I «О сформировании Башкирских казачьих полков» тип аталған указға ҡул ҡуя. Унда, «составить один Атаманский тысячный полк из войска Оренбургского, и от 10 до 30 и более пятисотенных полков из башкирского и мещерякского народов, коим дать название Башкирских казачьих по нумерам», тиелә. Указға ярашлы, 1812 йылдың август-сентябрендә башҡорт кантондары 13 атлы алай ойоштора, уларҙы ат, ҡорал, башҡа кәрәк-яраҡ менән тәьмин итә. 1812 йылдың аҙағы – 1814 йылда башҡорттарҙан тағы һигеҙ алай туплана. Әммә уларҙың номерҙары булмай, ҙур юғалтыуҙар кисергән башҡорт алайҙарын ат һәм яугирҙар менән тулыландырыуға ебәрелә. Номерһыҙ алайҙарҙың ҡайһы берҙәрен Арзамас, Бобруйск, Вильно (хәҙер – Вильнюс) һ.б. ҡалаларға оҙатҡандар. Тимәк, 1811–1814 йылдарҙа башҡорт кантондары хәрәкәт итеүсе урыҫ армияһына 28 атлы алай ебәрә, бөтә кәрәк-яраҡ менән тәьмин итә. Профессор Әнүәр Әсфәндиәровтың фекеренсә, 1811–1814 йылдарҙа башҡорттар Наполеон ғәскәренә ҡаршы һәм көньяҡ-көнсығыш сикте һаҡлауға 27 меңләп яугир оҙата (2). Ҡалмыҡтар – өс, атап үткән Кавказ халыҡтары – берикешәр, латыш, литва, эстондар берәр йәйәүле алай ойоштора.

1806 –1814 йылдарҙа француз илбаҫарҙарына ҡаршы көрәштә халҡыбыҙҙың бөтә ҡәбилә һәм ырыуҙарынан вәкилдәр ҡатнаша. Айырыуса табын, ҡыпсаҡ, бөрйән, юрматыларҙың әүҙем ҡатнашыуы күҙгә ташлана. Тарихсылар, айырыуса этнографтар, Р. Кузеевҡа эйәреп, башҡорт халҡы үҙ эсенә 40-тан ашыу ҡәбилә һәм ырыуҙы алған, тип яҙырға ғәҙәтләнеп китте. Был фекер тарихи хәҡиҡәткә тап килмәй, сөнки башҡорттар биш халыҡтан, уларҙың ырыуҙарынан, тағы 40-тан ашыу вағыраҡ берләшмәләрҙән тора. Биш халыҡ тигәнебеҙ – табын, ҡыпсаҡ, бөрйән, әйле, юрматылар. Бик боронғо халыҡтарҙан иҫәпләнгән айырыуса табын, бөрйән, ҡыпсаҡтарҙың үҙ дәүләттәре, үҙ хандары булған. Был турала төрлө мәғлүмәттәргә таянып, мин «Ағиҙел»дең 2007 йылғы 10-сы һанында (133 – 166-сы биттәр) яҙып сыҡҡайным инде...

Ҡыпсаҡтарҙың, мәҫәлән, Дәште Ҡыпсаҡ, йәғни Ҡыпсаҡ далаһы, Ҡыпсаҡ иле тип аталған дәүләте тарихта тәрән эҙ ҡалдырған. Уның көньяҡ-көнсығыш сиге Алтай тауҙарынан, Һырдаръя йылғаһының түбәнге ағымынан һәм Балхаш күленән алып, көнбайышта Дунай йылғаһы тамағынаса еткән. Табындарҙың дәүләте иһә Табын ханлығы тип аталып, бик киң биләмәләрҙән торған. XII быуаттың тәүге яртыһында йәшәгән ғәрәп географы, сәйәхәтсе һәм тарихсы Әбү Абдаллаһ Мөхәммәт ибн Мөхәммәт Иҙриси IX – X быуаттарҙа йәшәгән ғәрәп сәйәхәтселәре Ибн Хаукәл, Ибн Джейхан һәм Ибн Факихаль Хамадани хеҙмәттәренә таянып, 1154 йылда төҙөгән картаһында Табын ханлығының көнбайыш сиген, Иҙел (Волга) йылғаһының һул, көнсығыш сиген Иртыш йылғаһы менән билдәләгән. Дәүләкән районындағы Асылыкүл XIX быуатта Ҡары-табын күле тип йөрөтөлгән. Күрәһең, Табын ханлығына күп һанлы һәм иң ҡеүәтле ҡарый-табын ҡәбиләһе нигеҙ һалып, башҡа табын һәм башҡорт ырыу-ҡәбиләләрен бер дәүләткә туплаған.

Татар-монгол илбаҫарҙарына башҡорттарҙың 14 йыл буйы ҡаршы тороуында ҡеүәтле Табын ханлығының роле баһалап бөткөһөҙ. Табындар бөрйән, үҫәргән, түңгәүерҙәр менән бергә татар-монголдарҙың 1229, 1230, 1232 һәм 1236 йылдарҙағы һөжүмдәрен беренсе булып кире ҡаға. Табын ханлығы булмаһа, башҡорттар Монгол илбаҫарҙарына күп йылдар ҡаршылыҡ күрһәтә алмаҫ ине, сөнки айырым ҡәбилә дәүләт кимәлендә ойошторолған ғәскәргә ҡаршы тора алмай.

Р. Кузеевҡа эйәреп, ҡайһы бер этнографтар табындарҙы Алтай яҡтарынан «алып килә». Йәнәһе, улар Башҡортостанда килмешәк. Яҙыусы һәм публицист Рәүеф Насиров «Тыуған яҡ» тигән хеҙмәтендә табындар Арал буйы далаларында, Ител (Волга) буйында, Бөгөлмә-Бәләбәй ҡалҡыулығының көнсығыш өлөшөндә, Ағиҙел йылғаһының урта ағымында 4-5 мең йыл элек йәшәгән, тип фараз итә. Һуңыраҡ табындар Башҡортостандың төньяғынан көньяҡ-көнсығышына күпләп күсеп ултыра башлай. Әле лә Табын ырыуҙары Урал һыртының төньяҡ армыттарын, Йайыҡ йылғаһының үрен, Мейәс, Өйәлге, Уй, Инйәр йылғалары буйҙарын, Ағиҙелдең урта ағымын биләй. Элегерәк улар Тубыл буйы далаларын, Тинес, Ҡарабалыҡ, Иртыш буйҙарында көн иткән. Табындар был яҡҡа Алтай яҡтарынан килмәгән, башҡа башҡорт ҡәбиләләре һәм ырыуҙары кеүек, иҫәпһеҙһанһыҙ мал-тыуарҙары менән Көньяҡ Уралдан Алтайға ҡәҙәр күсеп, илебеҙҙән бер китеп, бер ҡайтып донъя көткән.

Үҙ исеме аҫтында табындар II быуатта йәшәгән грек ғалимы Клавдий Птолемейҙың «География буйынса ҡулланма» тигән хеҙмәтендә телгә алына. Птоломей Тын (Дон – **Ә.Й.**) йылғаһының көнсығышында көн иткән пасиртай (паскиртай), табывой, буручан, гайновой ҡәбиләләрен атай. Табывойҙар, моғайын, табын, буручандар – бөрйән, гайновойҙар – ғәйнә булғандыр. Үҙ сиратында Клавдий Птоломей был мәғлүмәтте I быуатта йәшәгән ғалим Марин де Турҙың әҫәренән алған. Тимәк, табындар тарихи әҙәбиәттә бынан ике мең йыл элек билдәле булған.

Табын этнонимы нимә аңлата һәм ҡасан барлыҡҡа килгән? Ҡайһы берәүҙәр уны, «күмәк кешегә әҙерләнгән ашау-эсеү урыны, аш табыны», тип аңлата. Икенселәр, «аш тирәләй ултырған төркөм», тип яҙа. «Ҡунаҡ-һыйға йыйылған кешеләр төркөмөн аңлата», тип яҙыусылар ҙа юҡ түгел. Ләкин был фекерҙәрҙең береһе лә минеңсә «табын»дың мәғәнәһен тулыһынса аңлатмай. Халҡыбыҙ тарихына яңыса ҡараған тарихсыбыҙ Салауат Ғәлләмов, «Табын ҡәбиләһенең исеме боронғо индоарийҙа, табындар табынған эҫелек, ҡояш, ут, ялҡын ҡыҙыулығы аллабикәһе Табати исеменә ҡайтып ҡала», тип яҙҙы. Башҡорттар, әле лә «ут яҡҡанда, тап, таб ҡуллана», тип аңлата ғалим.

Табати, тапати аллабикәгә 2600 – 2800 йылдар элек Ҡара диңгеҙҙең төньяҡ далаларында дәүләт ҡороп көн күргән иран телле скифтар ҙа табынған. Улар

ашҡужалар, ишҡужалар (Ишҡужин), иран телле сарматтар, массагеттар һәм саҡтар менән туғандаш булған. 4000 йыл әүәл Көньяҡ Уралда, йәғни тарихи Башҡортостанда йәшәгән массагеттар һәм саҡтар – бик боронғо башҡорт ҡәбиләләре. Тимәк, скифтар ҙа боронғо ата-бабаларыбыҙ булып сыға. Утҡа, ҡояш, ялҡынға табынған табындарҙың бер өлөшө, сама менән 4000 йыл элек башҡа башҡорт ҡәбиләләре менән бергә йылы яҡтарға – Иранға, Төньяҡ Һиндостанға, Месопотамияның Загрос тауҙарына һәм башҡа яҡтарға күсеп китә. Икенсе өлөшө, ошонда ҡалып, үҙ дәүләтен ҡора.

Табындарҙың арҙаҡлы улы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев «Йәдкәр» тигән хеҙмәтендә бер нисә табын ханының исемен атай: Аҡташ хан, Ялман хан, Яуыш хан, данлыҡлы Майҡы хан, уның ейәне Ҡары (Ҡарый) хан, йәғни Ҡарый-табын хан, Фәйрүш хан, Туҡтар хан, Шәкәрле хан, Әсәт хан, Күрпәс хан. «Майҡы хан Яйыҡ йылғаһының үрге ағымынан түбәнгеһенә, Тубыл һыуынан Иртышҡаса ер биләп үҙенә табиғи (буйһонған – **Ә.Й.**) халыҡтарға ҙур хан булып торған, тип яҙған Өмөтбаев. – Дәхи (тағы) шул мәғлүмдер: Майҡы бей мәшһүр вә мәғрүф (йәғни күренекле) булған» (3). Аҡташ хан тураһында ғалим тағы бына нимә хәбәр итә: «Уның ҡырҡ сәрүәр (етәксе, күренекле кеше – **Ә.Й.**) улдары бар ине, һәр бер ерҙә бәктәр ине. Уларҙы кәңәшкә йыйҙы. Олуғыраҡтары Таш хан, Түләш хан, Улаш хан, Ҡимаш хан, Суж хан, Күләж хан, Дәтеж хан, Ептек хан. Ун ике кейәүе дәхи ун ике ерҙә ханлыҡ ҡылыр ине» (4).

Этнографтар, табындарға борондан алты нәҫел ингән, тип иҫәпләй: табын, ҡыуаҡан, бишул, һырҙы, бәҙрәк (йәғни йәрембәттәр – **Ә.Й.**) һәм ҡумрыҡтар. Табындар ике ҙур төркөмгә бүленә: көнсығыш һәм көнбайыш табындар. Көнсығыш тармағына ҡары һәм барын табындар ҡарай. Ҡарағай табын, теләү, күбәләк, ҡыуаҡан, ҡумрыҡ, бәҙрәк һәм һырҙы табындар Урал аръяғында йәшәгән һәм әле лә шунда. Ҡайһы бер тарихсылар һәм журналистар ҡары табын урынына, Р. Кузеев һәм Р. Янғужинға эйәреп, ҡара табын, тип яҙа. Был хәҡиҡәткә ҡаршы килә, сөнки ҡары табын ырыуына Ҡары хан, йәғни Олуғ хан, Ҡарт хан нигеҙ һалған. Көнбайыш табындарға кесе табындар, күрпәс-табындар, төкөнтабындар, кәлсер-табындар, дыуан-табындар, бишул-уңғар табындар, йомрантабындар, һарт-табындар, кенәзләр-күрпәс табындар, ҡумрыҡ- табындар һәм өс ауылда йәшәгән йәрембәт-табындар инә. Улар хәҙерге Архангел, Белорет, Ғафури, Ҡырмыҫҡалы һәм Ауырғазы райондарында көн итә. Этнографтар тағы бер төркөм – Татарстанда һәм төньяҡ-көнбайыш Башҡортостанда көн иткән ирехте-табындарҙы күҙ уңынан ысҡындырған. Был төркөм – ҡары табындарҙың бер өлөшө. Улар 1521–1524 йылдарҙа Ҡазан ханлығына Сәхибгәрәй хан идара иткән саҡта, уның саҡырыуы буйынса, Урал аръяғындағы ерҙәрен ҡалдырып, Сулман (Кама) буйына күсенә һәм ирехте табын булып китә, Сәхибгәрәй заманында ла, Шәғәли һәм Йәҙегәрҙәр ханлыҡ иткәндә лә Ҡазан ханлығында хеҙмәт ҡыла. 1552 йылдың сентябрь – октябрендә Иван Грозный ғәскәренән Ҡазанды һаҡлауҙа ирехтеләр ҙә ҡатнаша. Хәҙерге көндә улар Татарстандың – 12, Тәтешле районының – 20, Балтас районының – 4, атап әйткәндә Сәйтәк, Түбәнге Ҡансөйәр (бәлки, Ханһөйәр), Үрге Ҡансөйәр һәм Текән ауылдарында йәшәй. Атап үткән ауылдарҙа башҡорттар үҙҙәре генә йәшәһә лә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, туған телдәрен юғалтып, үҙҙәрен татар иҫәпләй.

Күп һанлы табындар Башҡортостандың байтаҡ төбәктәрендә, айырыуса Силәбе өлкәһе ҡалаларында, Учалы (Юшалы – **Ә.Й.**) ҡалаһында һәм 179 ауылда көн күрә. Шул иҫәптән Учалы районының – 82, Ғафури – 33, Ҡырмыҫҡалы – 28, Архангел – 20, Әбйәлил райондарының 12 һ.б. ауылдарҙа йәшәй. Силәбе өлкәһендә табындар – 42, Ырымбурҙа – 23, Һамар һәм Һарытау өлкәһендә – 8 ауылда теркәлгән. Улар Ҡорған өлкәһенең ике ауылында ла бар. Табындар халҡыбыҙҙың бөтә азатлыҡ көрәшендә, айырыуса 1735 – 1740 йылдарҙағы ихтилалда,

1773 – 1775 йылдарҙағы Пугачев-Салауат яуында һәм 1812 йылғы Ватан һуғышында, күпләп ҡатнаша. 1836 –1839 йылдарҙа иҫән булған ҡайһы бер ветерандарҙың исемдәре әле лә һаҡлана.

Архангел районына ингән 20 ауыл элек 7-се кантонға ҡараған. Аҙау ауылынан (5) – Ибенәмин Ишҡарин, Хөсәйен Йосопов, Ҡунаҡбай Әлибаев, Хәбибулла Тәкишев, Хәмзә Ишҡарин, Мәҡсәлмән Ибраһимов; Оҙондарҙан (6) – яҫауыл Ҡаранаев, Көсөкбай Ишкинин, Дәүләтҡол Дәүләтбирҙин, Ҡотлогилде Ҡорманаев, Туҡай Әбилев, Хәбибулла Барагин, Ибраһим Эткөсөков; Тирәкленән (7) – Мырҙабай Моратов, Моратбай Мөхәтов, Көсәпҡол Әбдрәшитов, Йомағужа Йосопов, Фәхретдин Ҡунаҡҡолов, Абдулла Кукбүрин, Абдрахман Мулҡашев; Муллаҡайҙан (8) – Фәйзулла Килдеғолов, Ишкен Байбулдин һәм Ҡәҙерғол Хашбаев; Абҙандан – яҫауыл Мырҙагилде Абыҙгилдин менән Исламғол Ҡаҙаҡҡолов; Ҡыҙғынан – Ҡорбанғәле Байрамғолов; Тәүәкәстән – Муллагилде Муллағолов; Әйтмәмбәт ауылынан Шәмсетдин Әләмин; Бәйестән – Ҡотлосура Йәйәнбаев менән Ҡотлозаман Мәүбәков; Тимербайҙан – Әлибай Сыңғыҙов, Аһынбай Сыңғыҙовтар ҙа француз яуында йөрөп ҡайта. Батырлығы һәм Парижды яулап алыуҙа ҡатнашҡаны өсөн улар «В память войны 1812 года» һәм «За взятие Парижа 19 марта 1814 года» тигән көмөш миҙалдар яулай (9).

Ауырғазы районының Үтәймулла ауылынан (10) Ватан һуғышында ҡатнашҡан алты кешенең исеме билдәле: яҫауыл Мөксин Хәсәнов, Әбделмәжит Әбделкәримов, Абдуляппар Вәлитов, Аблуллатип Дәүләткилдин, Сәйетбаттал Татлыбаев, Рәхимғол Динмөхәмәтов.

Хәҙерге Ғафури районының 33 ауылында көн күргән табындар ҙа 7-се башҡорт кантонына ҡарап, яугиҙары 9-сы һәм 12-се атлы алайҙар составында һуғыша. Ике көмөш миҙал тағып ҡайтып төшә улар. Сәйетбаба ауылының (11) уҙамандарын атап үтәйек: Аҡбулат Ғүмәров, Кинйәбулат Ғайсаҡаев, Хәмит Өмөбаев, Илбулды Ауазаев, Тоҡсура Яҡшығолов, Ырыҫҡол Бәйембәтов, Ғәлләметдин Әбдрәхимов (бәлки, Абдрахманов), Әхмәт Мырҙаҡаев һәм Атанғол Дәүләтҡолов.

Иҫке Тайыш (12) – боронғо табын ауылдары иҫәбендә. Уға, сама менән 1757 йылда Кәлсер-табын олоҫо старшинаһы Тайыш Эткинин нигеҙ һалған, тигән фекер бар. Ләкин ауыл күпмелер ваҡыт Салауат тип тә аталған. XVIII быуат урталарында, ихтимал, башында Мәсетле тип йөрөтөлгән. Тимәк, ауылдың кәмендә 250 – 300 йыллыҡ тарихы бар. Яңы Тайыш ауылы башта Юрмаш Тайышы тип аталып, һуңынан Суҡ ҡайын булып китә. 1812 йылғы Ватан һуғышында Иҫке Тайыштан яҫауыл Фәйзулла Тайышев, Хәмит Динисламов, Һәүәләй Әбделйәмилев, Кинйәбулат Мөхәмәтғәлин, Ҡунаҡҡужа Миңлеяров, Ҡотлогилде Нәҙершин, Хөсәйен Зәйетов (бәлки, Сәйетов), Сәйетбаттал Ҡотлобулатов, Билал Зөбәйеровтар ҡатнаша. Барыһы ла Париж ҡалаһынан урап, ауылына ике көмөш миҙал тағып ҡайта.

Һабай ауылында (13) Тайыш, Яңы Тайыш, Талпар, Юрмаш, Ҡауарҙы, Мораҙ, Оло һәм Кесе Ибраһим, Ташаҫты, Ерек һәм Еркле ауылдарындағы кеүек, кәлсер-табын тоҡомдары йәшәй. Аралар – ябалаҡ, бире, юныс, уранҡай. XIX быуат башында кәлсер-табындар иң хәлле башҡорт ырыуҙарынан һаналып, 53 мең (!) дисәтинәләп ерҙән файҙалана һәм башҡа халыҡтарҙы үҙ араһына индермәй. Һабайға Кәлсер-табын олоҫо старшинаһы Һабай Ҡотлин нигеҙ һалған. Ул 1773 – 1775 йылдарҙағы башҡорт яуында әүҙем ҡатнаша, полковник дәрәжәһендә була. Ошо яу башланғанда уның оло улы Иманғолға 13 йәш. Ике улы: 1789 һәм 1792 йылдарҙа донъяға килгән Ишемйәр менән Ибраһим Юлыҡ ауылында йәшәгән. Һабай тигән исем булмаған, ул Һабанғолдоң ҡыҫҡартылған варианты. XVII быуат документтарында уҡ осрай. Һабанғол Ҡотлоғужин (Ҡотлин түгел – **Ә.Й.**) Ҡотлоғужа ауылынан сыҡманымы икән, тип уйларға ла нигеҙ бар.

Һабай ауылынан 1812 йылғы Ватан һуғышында Бикмөхәмәт Азатов, Әбделмәжит Миңлеяров, Һөйөндөк Ҡояшев, Муллағол Зыяшев, Ҡотлоюл Этҡолов, Ихсан Урманшин, Кәлимулла Сыуашбаев, Алтынбай Көсәпов (ихтимал, Көсәпҡолов), йөҙ башы Хәбибулла Теләүғоловтар ҡатнаша. Барыһы ла 12-се башҡорт атлы алайында хеҙмәт итеп, Париждан урай, ике көмөш миҙал тағып ҡайта.

Юлыҡ та (14) табындарҙың боронғо ауылдары иҫәбенә инә. 1795 йылда унда 60 йорт-ғаилә күренә, бөтәһе – 334, йәғни һәр йортта уртаса 5-6 кеше йәшәй. 1812 йылда Юлыҡта 95 йорт теркәлеп, ауыл халҡы 482 кешегә етә. Тимәк, ауыл XVIII быуат урталарында, бәлки, унан да алдараҡ барлыҡҡа килгән, тип әйтергә мөмкин. Юлыҡта биш ара бар: ябалаҡ, күскилде, аҡҡүҙ, мәтәйес һәм дини араһы. Француз яуында был ауылдан урядник Динмөхәмәт Үтәғолов, хорунжий Шәрипҡол Яманғолов, Шәрипҡол Әлимғолов, Юлмөхәмәт Ҡайғолов, Хәсән Азаматов, Кинйәбулат Байыҡов, Иштуған Әүлийәров, Хәбибулла Ураҡаев, Абдулманнаф Ниғмәтуллин, Ишкенә Теләүбаҡыев, Әбделмәжит Урманшин, йөҙ башы Мәғрифәтулла Рәхмәтуллин, урядник Сәйетйәғәфәр Ҡолошев, Балдыбай Мәсәлимов, Шәрипҡол Моратов, Әбдулхәлил Әбдрәшитов, яҫауыл Мөхәмәтҡол Ҡунаҡҡолов һәм урядник Сәйетғафар Ҡотошовтар ҡатнаша. 2-се һәм 12-се атлы алайҙарҙа хеҙмәт итеп, улар Парижды яулай ике көмөш миҙал тағып, еңеүсе булып ҡайта.

Ҡауарҙыла (15) XVIII быуат аҙағында 113 йорт теркәлеп, 583 кеше йәшәгәне күренә. Тимәк, ауылдың XVII быуат башында нигеҙләнеүе ихтимал. Наполеон баҫҡынсыларына ҡаршы һуғышта Ҡауарҙынан: Шәмсетдин Ҡәнзәфәров, Әбүбәкер Хәсәнов, Сәғиҙулла Ҡояшев, Әлибай Күсәрбаев, Ғәҙелша Әкембәтов, Байтимер Байрамғолов, Дауыт Ғәлиев, Ибраһим Сәйетборханов, Юлдашбай Йомағолов, Бәҙретдин Ҡәҙерғолов, Яҡшығол Юлдашбаев, йөҙ башы Исмәғил Зыянышев һәм Йомағол Аҡмырҙиндар ҡатнаша. Улар ҙа 12-се башҡорт алайына хеҙмәт итә һәм һуғыштың бөтә михнәттәрен күреп, Париждан ике көмөш миҙал тағып ҡайта.

Үзбәк ауылының (16) барлыҡҡа килеүе, нигеҙ һалған кешеһенең исеме әлегә билдәһеҙ. Аҡҡол Мәсәғүтов, Ҡотлоғәлләм Дәүләтбаев, Ғөзәйер Ҡунаҡкужин, Әбделғәзи Көсәпов, Кинйәбулат Солтанов, Әбдулхәбир Аҡсурин, Фәйзулла Өмөтбаев һәм Байгилде Үзбәковтар 1812 йылғы Ватан һуғышында 12-се башҡорт алайында булып, ике миҙал алып ҡайта.

XVIII быуат аҙағында өс Үтәш (17) ауылы теркәлгән һәм уларҙа 57 йортта 348 кеше көн иткән. Өсөһөндә лә кесе табындар күренә. Аралары: бәшкәк, бесәй, таҙ, ҡалмаҡ, мәмәк. Был ауылдарҙан: Ҡорманғол Әлмөхәмәтов, Абдулла Рафиҡов, Мәүлетҡол Мөҡсинов, Мөхәмәтйәр Буранғолов, Ҡотлогилде Әбүкәев, Сәйфетдин Ишморатов, Исхаҡ Яманаев, Кинйәғол Хәлитов, Йомағужа Әмиров, Мостафа Әсәҙуллин, Тайып Танһыҡов (бәлки, Танһыҡбаев) һәм Сәйетборхан Ҡотлобаевтарҙың француз яуында йөрөп ҡайтыуы билдәле. Батырҙар 12-се атлы башҡорт алайында хеҙмәт итеп, Парижды алыуҙа ҡатнаша һәм икешәр көмөш миҙал менән ауылдарына ҡайта.

XVIII быуат башында Усман ауылында (18) тик кесе табын ырыуы кешеләре йәшәгән. Был ауылдан һуғышҡа Үлмәҫҡол Ныязғолов, Ноғман Килдеғолов, Ҡаһарман Ишдәүләтов, Ишҡыуат Һунаршин, Кинйәбулат Миңлебаев, Мырҙағол Таймасов, Ибраһим Бикҡужин, Ниғмәтулла Ибраев һәм Мәндей Яҡшембәтовтар алына, 12-се алайҙа хеҙмәт итеп, икешәр көмөш миҙал тағып ҡайталар.

Профессор Әнүәр Әсфәндиәров фекеренсә, Имәндәш ауылы (19) 1750 –1751 йылдарҙа барлыҡҡа килә. 1795 йылда унда 30 йортта 350 кеше йәшәгәне күренә. Бында кәлсер-табын һәм кесе табын тоҡомдары көн итә. Аралары: ябалаҡ, бире, уранҡай, төркмән, күскилде, юныс, аҡҡүҙ һәм ираҡай. Күренеүенсә, Һабай ауылынан күсеп килгәндәр ҙә күп булған. Француз яуында был ауылдан

Ғайса Хоҙайғолов, Мөхәмәткәрим Солтанморатов һәм Әхмәт Мырҙабулатовтар ҡатнашҡаны билдәле.

Тәүҙә Ишембәт тип аталған Толпар ауылына (20) тыумышы менән Имәндәштән булған Ишембәт Хоҙайғолов нигеҙ һала. Ауылда биш ара бар: ҡыйғас, соҡай, ҡатай, тырнаҡ, уранҡай. Һуғышта ҡатнашыусыларҙан Хәлит Хоҙайғолов, Ҡормаҡай Ишембәтов һәм Ямандай Нәзировтар күренә. Ҡалҡан ауылы (21), күрәһең, XVIII быуат урталарында барлыҡҡа килгән. Башта ул Әлтәшле тип йөрөтөлә. Назарғол Таймасов, Бикҡол Ҡоҙаҡаев, Сәғит Игебаев һәм Атанғол Дәүләтҡоловтар Наполеон баҫҡынсыларын ҡыйратыуҙа ҡатнаша.

Яугилде ауылы (22) элек Самыш тип аталған. Уға XVIII быуаттың урталарында нигеҙ һалына. Яугилденән һуғышҡа ике кеше – Ҡанмырҙа Ҡәйепҡолов һәм Кинйәбулат Көсәпҡолов алынғаны билдәле. Тәүҙә Ҡунаҡбай тип аталған Байымбәт ауылына (23) Кесе табын олоҫо старшинаһы Байымбәт Илсеғолов XVIII быуат урталарында нигеҙ һала. Француз яуында урядник Аҙнаш Аҡкөбәков менән Сәйетйәғәфәр Абдулмоталлапов ҡатнаша һәм ике көмөш миҙал менән бүләкләнә.

Ҡотлоғужа ауылына (24) Юрматы олоҫо старшинаһы Ҡотлоғужа Сәфәрғолов XVIII быуат урталарында нигеҙ һалған. Был ауылдан Француз яуында Усман Мәүлетҡолов, Хәмзә Әбделфәйезов һәм Мөхәмәткәрим Хәмитовтар ҡатнашҡаны күренә. Мораҙ ауылына (25) XVIII быуат урталарында Мораҙ Сөләймәнов нигеҙ һала. Хөсәйен Абушахманов менән Әлиша Үтәгәнов 1812 йылғы Ватан һуғышынан имен-һау йөрөп ҡайта.

Оло Ибраһим ауылында (26 «а») кәлсер-табындар көн күрә. Башта ауыл Аллағол, һуңынан Аллағыуат тип аталып, табындарҙың боронғо ауылдары иҫәбенә инә. Уға XVIII быуат башында, йәғни 300 йыл элек нигеҙ һалынған. Оло Ибраһим француз яуына ҡаршы Әбделмән Мортазин, Әбделфәйез Йәрмөхәмәтов, Әбделмөхәмәт Мөьминов, Мәмбәтҡол Әлишев, Зыянғол Бурашев, хорунжийҙар Әбделмән Әбйәлилев һәм Әбделмән Әбделәминевтарҙы оҙата. Йөҙимәндән – Мәһәҙи Көсәпҡолов, Аҡташтан – Хәсән Вәлитов менән Ҡалҡан Байымбәтов, Ташаҫтынан – Молҡаман Әбделйәмилев менән Хәбибулла Абдулбаҡыев, Яҡтыкүлдән – Ҡотлосура Зыянбаев менән Ҡотлозаман Маубикәев, Ҡаранйылғанан Кейекбай Ишемйәровтарҙың да Ватанды һаҡлауҙа ҡатнашыуы күренә (27).

Ҡырмыҫҡалы районында табын тоҡомдарының 28 ауылы бар. 1735 – 1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалдарын баҫтырғанда ҡанһыҙ палач, суҡынған татар генерал Леонтий Соймоновтың бойороғо буйынса язалаусылар табындарҙың 537 ауылын, 3899 йортон яндыра. Ҡырмыҫҡалылағы 28 ауылда дыуан-табындар, күрпәс-табындар, икешәр ауылда – йомран-табындар, бишул-табындар һәм кесе табындар көн күрә. 1812 йылда бөтә ауылдар 7-се башҡорт кантонына инә.

Үтәгән ауылына (28) Дыуан-табын олоҫо старшинаһы Емельян Пугачевтың көрәштәше Үтәгән Мыуашев нигеҙ һалған. 1812 йылғы Ватан һуғышында, 1813 –1814 йылдарҙа сит ил походтарында Үтәгәндән яҫауыл Абдрахман Аҡъегетов, Абдулмоталлап Бикбаев, Ишмөхәмәт Әҙмөханов, Байназар Уразымбәтов, Нурдәүләт Баязитов, Ғәлекәй Мыртаҡимов, Иҙрис Бикҡолов, Ҡаһарман Тойғонов, Ҡорманғол Әлмөхәмәтов, урядник Ҡаһарман Батыров, йөҙ башы Әбделвәхит Әбделкәримов, Мостафа Ишкилдин һәм Үтәгән Мыуашевтар ҡатнашҡаны билдәле.

Үрге Төкөн ауылынан Юлбарыҫ Назаров һуғышта һәләк була, Һөйөндөк Ҡорманғолов иҫән-һау әйләнеп ҡайта. Түбәнге Төкөндән (29) француз яуына алыныусылар күберәк: Арыҫланғол Сәфәрғолов, Ҡолмөхәмәт Муллағолов, Искәндәр Сәфәрғолов, Хоҙайҡолой Ниғмәтуллин, Күсәрбай Мерәсев, Ҡотлозаман Ҡотлоюлов

һәм Мөхәмәтйәр Буранғоловтар. Был яугирҙар ҙа 12-се башҡорт алайында һуғышып, Парижды яулап алыуҙа ҡатнаша, ике көмөш миҙал менән бүләкләнә. 1836 йылда уларҙың иҫән булыуы билдәле.

Бәпес ауылы (30) башта Мансур тип аталған. XVII быуатта барлыҡҡа килгән был ауыл – табындарҙың иң боронғо ауылдары иҫәбендә. Һуғышта ҡатнашҡандарҙан Юлдаш Ҡолсурин, Әһлиулла Ибраһимов, Миңлебай Бейешев, Ҡаһарман Ҡоломбәтовтарҙы күрһәтергә мөмкин.

Малай ауылына (31) XVII быуат уртаһында Малай Йәнбаҡтин нигеҙ һала. Ҡыҙрас Арыҫланғолов, Бейеш Ҡоҙаҡаев, Уйылдан Аҡъегетов, яҫауыл Хәмит Азатов, Рамаҙан Сәлимбаҡыев, Иҫәнғол Шәмиғоловтар 13-се башҡорт алайында хеҙмәт иткән. Парижды яулап, ике көмөш миҙал менән бүләкләнеп, ауылға ҡайтҡандар.

Шәрипҡол (32) XVIII быуат урталарында нигеҙләнгән. Башта Өмөтбай аталып, һуңыраҡ Яңы Мырҙа тип йөрөтөлгән. Француз яуына Шәрипҡолдан Ҡолбаҡты Ҡорамшин, Ишбулды Фәйзуллин, Мөхәмәтҡол Сураҡолов, Өмөтбай Арыҫланғолов һәм Йосоп Арыҫланғоловтар алына.

Күлдәр ауылы (33) тәүҙә Йәрмәкәй, һуңынан Суйынсы тип йөрөтөлә. Һуғышта унан Мөхәмәтәмин Хәсәнов, Бикбулат Ҡәҙербирҙин һәм Искәндәр Йәрмөхәмәтовтар ҡатнаша.

Ҡарлыман ауылынан (34) Наполеон баҫҡынсыларына ҡаршы яуға Дауыт Ҡолғонин, Мәхүмәт Ҡолғонин, Ҡотлоғужа Абаҡаев, Хәбибулла Илбулдин, Юныс Сәғитов, Байсура Юлсуриндар алына. Мөкәйгә (35) XVIII быуат аҙағында йөҙ башы Мөкәй Ҡолоев нигеҙ һалған. Ауылдан һуғышта ике кеше ҡатнашыуы билгеле: Сыңғыҙ Көҫәпов менән Йәрмөхәмәт Илешев.

Төбәк Таҙлары ауылы ла XVIII быуат аҙағында барлыҡҡа килә. Унан француз илбаҫарҙарына ҡаршы һуғышта Абдулғазы Үлмәҫбаев һәм Хәбибулла Ҡаранаевтарҙың ҡатнашыуы билгеле.

Учалы яҡтарын (36) табындар боронғо замандарҙан уҡ биләп йәшәгән. Табындар тоҡомдары 80 ауылда көн итә: ҡары-табын, барын-табын, ҡыуаҡан, тиләү, күбәләк-табын, аҡ-табын ырыуҙары. Бынан тыш, ҡары-табындар Силәбе өлкәһендә – 30, барын-табындар, теләүҙәр – 20, ҡыуаҡандар 9 ауылда йәшәй. Учалы табындары 14-се, 18-се атлы алайҙарҙа хеҙмәт итә, Парижды яулап алыуҙа ла ҡатнаша.

Буранғол ауылынан һуғышҡа урядник Нәзирбай Үмәтов менән Мөхәммәт Азатовтар алына. Наурыҙҙан (Науырҙа, Ҡушкилде) хорунжийҙар Абдулҡадир Килдебаев менән Абдулнасир Наурыҙов ҡатнаша. Һуңғыһы Изге Анна ордены һәм ике көмөш миҙал менән бүләкләнә. Байрамғолдан яуҙа Сәйфетдин Ҡәҙерғәлиндың ҡатнашыуы билдәле. Ҡолой (Кәкүк) ауылынан Нурғәли Зөбәйеров ике миҙалға лайыҡ була. Баҙарғолдан (Ваһап) Мөхәмәтйәр Яҡшымбәтов та ике миҙал менән бүләкләнә. Ишмәкәй (Сураҡол) ауылынан – Кинйәбулат Ишмәкәев, Истамғолдан (Ҡыштау) – Абдулнасир Көрмәнкәевтәр ҡатнаша. Изге Анна ордены һәм ике көмөш миҙал менән ҡайта. Абҙаҡтан (Кинйәкәй) – Сибай Ямашев, Рәсүлдән (Тайсын) Төхфәтулла Ҡорманаевтар ҙа француз яуын ҡайтарыуҙа батырлыҡ күрһәтә. Кесе Муйнаҡ (Буранғол) ауылынан урядник Мөхәмәтйән Буҙыҡаев 18-се башҡорт алайында хеҙмәт итә, Парижды яулап алыуҙа ҡатнаша, ике миҙал менән бүләкләнә. Артабан хорунжий, йорт старшинаһы, яҫауыл булып китә. 1832 – 1860 йылдарҙа IV кантон башлығы була, 1857 йылда генерал-майор дәрәжәһе ала. Уны маҡтап «Буҙыҡай кантон» тигән йыр ижад ителә. Тимәк, Мөхәмәтйән Буҙыҡаев – Юламан Ҡушаевтан һуң (1774 й.) табындарҙан сыҡҡан икенсе генерал. Уны бөйөк шағирыбыҙ Аҡмулла ла данлаған.

Ихсан ауылынан яуҙа урядник Ҡылыс Кизәев, Төхвәттән – Байрамғол Раҡаев, Көсөктән – Айҙарбәк Сәйетов, Һөйөндөктән – Әбделвәхит Этимгәнов, Ҡарт

Муйнаҡтан – Бурансы Әлимсурин һәм Ирназар Хоҙайназаров, Сөләймәндән – яҫауыл Әсфәндиәр Сөләймәнов менән хорунжий Ғәйнулла Бикбашев (бәлки, Бикбаев), Ҡолойҙан – Нурғәли Зөбәйеров, Мулдаҡайҙан – йөҙ башы Зәйнәғәбитдин Илсеғолов, Кәримдән – йөҙ башы Абдулнафиҡ Ҡотоев, Ҡаҙаҡколдан йөҙ башы Байбулат Ҡаҙаҡколовтар дошман яуына ҡаршы һуғыша.

Алтыаяҡ (Килмәк) ауылы ирҙәре Иҫәнгилде Ғәббәсов, Ғәбдин Ҡолгилдин, Йомағол Сыуашбаев, Хисаметдин Ҡоҙаҡаев, яҫауыл Рәсүл Килмәков 14-се алай составында алыша. 1921 йылғы аслыҡтан һуң, был ҙур ауыл яйлап һүнә барып, 1951 йылда унда ни бары 28 кеше ҡала. 1959 йылғы бөтә халыҡ иҫәбен алыуҙа ул иһә бөтөнләй күренмәй.

Әбләзи (Ҡарағай) ауылынан Әбдрәхим Әбләзин, Кейекбай Әмиров, Сәйетбай Әбделғафаров, Мөхәмәтәмин Хәмитов, Ноғоман Сәғитов, алай башлығы яҫауыл Абдулла Сурағолов һәм хорунжий Абдулҡадир Туҡбирҙиндар ҙа 14-се башҡорт атлы алайы составында һуғыша. Абдулла Сурағолов ике Изге Анна ордены һәм ике көмөш миҙал менән бүләкләнә. 1812 йылғы Ватан һуғышында ике Изге Анна ордены яулағандар бик аҙ була.

Әбйәлил районында (37) табындарҙың (күбәләк-табындар) 12 ауылы бар: Ярлыҡап, Аһылай, Байым, Иҫке һәм Яңы Балапан, Оло һәм Кесе Ғәбдин, Йәнекәй, Мораҡай, Рәхмәт, Туйыш һәм Яйҡар. Ярлыҡап ауылынан француз яуында Ишдәүләт Тайсинов (бәлки, Тайсин), Шәмиғол Илдәүләтов, Сөйәрғол Йомағолов, Туйыштан – Ҡунаҡбай Мөьминов. Байымдан – Шәйхрази Торсонбаев, Оло Ғәбдиндән – Сәйфелмөлөк Алдаров, Рәхмәттән – Әбйәлил Әбделсәләмов, Аҙнабай Ҡояшев һәм Яҡшымбәт Ибрасовтар ҡатнаша. Әбйәлил Әбделсәләмов менән Аҙнабай Ҡояшев һуғыштан ҡайтмай. Тәүгеһе ни бары – 20, икенсеһе 23 йәштә генә була.

Француз яуы башҡорттар аңында тәрән эҙ ҡалдырған. Ул ауыҙ-тел ижадында, төрлө легендаларҙа, бәйеттәрҙә, тарихи йырҙарҙа киң сағылыш тапҡан: «Любизар», «Ҡаһым түрә», «Эскадрон», «Ирәмәл», «Һары ла сәс», «Ерән ҡашҡа» тигән йырҙарҙа, «Абдрахман», «Аҡъегет», «Йәнһары батыр», «Икенсе әрме» тигән легендаларҙа. Был һуғышта башҡорттарҙың ҡатнашыуы тарихи әҙәбиәттә, шул иҫәптән Әбүбәкир Усмановтың һәм профессор Әнүәр Әсфәндиәровтың хеҙмәттәрендә лә күренә. 1962 йылда бөтә ил 1812 йылғы Ватан һуғышының 150 йыллығын билдәләне. Ошо айҡанлы республика матбуғатында бик күп мәҡәлә донъя күрҙе. Август – октябрҙә «Совет Башҡортостаны» гәзите биттәрендә Әбүбәкер Усмановтың «Тарихи еңеү», «Юйылмаҫлыҡ дан», «Башҡорт алайҙарын ойоштороу» тип аталған мәҡәләләре баҫылды, Лилия Пакутинаның «Бергәләп еңдек», Р. Ҡотошовтың һәм К. Нурғәлиевтың «Данлыҡлы йылдар, данлыҡлы юлдар», Р. Ҡотошовтың «Өнһөҙ шәхестәр», Ғайса Хөсәйеновтың «Легендаға әйләнгән батырлыҡ» һ.б. 1964 йылда Әбүбәкер Усмановтың рус телендә «Башкирский народ в Отечественной войне 1812 года» тип аталған хеҙмәте баҫылды. Урындағы архив һәм Мәскәүҙәге Үҙәк дәүләт хәрби-тарихи архивы документтарына нигеҙләнеп нәшер ителгән тарихи әҙәбиәткә таянып, ғалим халҡыбыҙҙың 1812 –1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында ҡатнашыуын етерлек кимәлдә һүрәтләй алған.

Был тарихты өйрәнеүгә профессор Әнүәр Закир улы Әсфәндиәров айырыуса күп көс һалды. 1968 йылда донъя күргән «Башҡортостан тарихынан» тип аталған йыйынтыҡта ғалимдың «Башҡортостанда кантон системаһын урынлаштырыу» тигән мәҡәләһе баҫылған. Унда ғалим тарихсыларҙан беренсе булып, Парижды алыуҙа биш түгел, ә туғыҙ башҡорт алайы ҡатнашыуы тураһында яҙа. 1971 йылда «Башҡортостандың феодализм һәм капитализм осорҙарындағы тарихы» тигән йыйынтыҡта ғалимдың башҡорттарҙың Рәсәй алып барған

һуғыштарҙа ҡатнашыуы тураһындағы мәҡәләһе бар. 1988 – 1996 йылдарҙа Әнүәр Әсфәндиәров «Башҡорт алайҙары – Парижда», «Башҡортостан халыҡтары 1812 йылғы Ватан һуғышында», «Парижды ла күрҙек беҙ…» тип аталған мәҡәләләр баҫтырып сығарҙы. 1812–1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында башҡорттарҙың ҡатнашыуы ғалимдың 2005 йылда донъя күргән «Башҡортостанда кантон идаралығы» тип аталған күләмле монографияһында ла сағылыш таба.

**Әхмәт-Гәрәй ЙӘНҒӘЛИН,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

**ҺЫЛТАНМАЛАР:**


*1. Центральный Государственный исторический архив Республики Башкортостан (артабан: ЦГИА РБ) ф. И-2, от 1, д. 14609, 11.1, 75, 76, 82, 83, 107, 108, 114, 115, 127, 128, 172, 173, 176, 177, д. 14633, лл 42, 43; д. 14637, лл 106, 128, 129, 176, 177; д. 4674, лл 11, 12, 49, 50, 58, 59, 60.*

*2. «Любезные вы мои, башкирцы». Сборник статей, документов и материалов под общей редакцией проф. А.З. Асфандиярова. Өфө, 1992 й., 20-се бит.*

*3. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев. «Йәдкәр», Өфө, 1984 й., 220-се бит.*

*4. Шунда уҡ, 244-се бит.*

*5. «Любезные вы мои...», 42-се бит.*

*6. ЦГИА РБ, ф.И-2, оп.1 д. 3724, лл 24, 25; д. 14609, л. 38; «Любезные вы мои», 41-се бит.*

*7. Шунда уҡ, д. 3724, лл, 24,25; д. 14609, л 37; «Любезные вы мои...», 45-се бит.*

*8. «Любезные вы мои...», 45-се бит.*

*9. ЦГИА РБ, ф.И-2, оп 1, д 3724, л 23; д. 14609, л. 35; «Любезные вы мои...», 41-се, 42-се биттәр.*

*10. ЦГИА РБ, ф. И-2, оп.1. д 14609, л 632, 53; «Любезные вы мои...», 44-се бит.*

*11. Шунда уҡ, д. 14609, л. 6; «Любезные вы мои...», 43-сө бит.*

*12. Шунда уҡ, д. 3724, лл. 36, 37; д. 14609, лл 44, 45; «Любезные вы мои...», 43-сө бит.*

*13. Шунда уҡ, д. 14609, лл. 84, 85, 178, 179; «Любезные вы мои...»*

*14. ЦГИА РБ, ф. И-2, оп.1, д, 3724, лл. 30-33, 35, 36; д. 14609, лл. 5, 43, 44, 150, 151, 156, 179, 180; «Любезные вы мои...», 42-се бит.*

*15. Шунда уҡ, д. 14609, л. 5; «Любезные вы мои...», 42-се бит.*

*16. «Любезные вы мои...», 43-сө бит.*

*17. Шунда уҡ, 43-сө, 44-се биттәр.*

*18. Шунда уҡ, 41-се, 44-се биттәр.*

*19. ЦГИА РБ, ф.И-2, оп 1, д. 14609, л.5; «Любезные вы мои...», 43-сө бит.*

*20. «Любезные вы мои...» 43-сө бит.*

*21. Шунда уҡ, 43-се бит.*

*22. Шунда уҡ, 44-се бит.*

*23. ЦГИА РБ, ф. И-2, оп. 1, д.14609, лл.150, 151.*

*24. «Любезные вы мои...», 45-се бит.*

*25. Шунда уҡ, 43-се бит.*

*26 «а» ЦГИА РБ, ф. И-2, оп, 1, д. 3724, лл. 29, 30; д. 14609, лл. 42, 43; А.З. Асфандияров. «История сел и деревень Башкортостана». Өсөнсө китап. Өфө, 1993 й., 10-сы бит.*

*27. «Любезные вы мои...», 43-сө, 44-се биттәр.*

*28. ЦГИА РБ, ф. И-2, оп.1, д. 3724, лл 17,44-47; д. 14609, лл 3,33; А.З. Асфандияров «История сел и деревень...», 62-се, 63-сө биттәр.*

*29. А.З. Асфандияров, 64-се бит.*

*30. Шунда уҡ, 65-се бит.*

*31. ЦГИА РБ, ф.И-2, оп 1, д. 14609, л 8; А.З. Асфандияров, 66-сы бит.*

*32. А.З. Асфандияров, 61-се бит.*

*33. ЦГИА, ф.И-2, оп. 1, д. 14609, л. 2; А.З. Асфандияров, 58-се бит.*

*34. А.З. Асфандияров, 59-сы бит; «Любезные вы мои...», 41-се бит.*

*35. А.З. Асфандияров, 60-сы бит.*

*36. «Учалинский район. Энциклопедия». Уфа-Учалы, 2009 й., Рәүеф Насиров «Тыуған төйәк». Өфө-Учалы, 2005 й., 37—39-сы биттәр; А.З. Асфандияров. Беренсе китап, 48-се, 52-се биттәр.*

*37. А.З. Асфандияров. История сел и деревень Башкортостана. Өфө, 2009 й., 33-сө, 35-се, 41-се, 42-се биттәр.*

## *Көнгәк*

*Ағиҙелдән томан күтәрелә,*
*Көтөү сыға Әүен артына.*
*Йәй айының алһыу таңдарында*
*Күңел әллә ҡайҙа атлыға.*

*Тау түбәһе нурға сума бер саҡ,*
*Һандуғастар һайрай туғайҙа.*
*Ағиҙелем, ебәк таҫма булып,*
*Көнгәк-тау тирәләй урала.*

*Ҡыҙҙар йыры, ҡурай тауыштары*
*Яңғырата Иҙел буйҙарын.*
*Әкрен иҫкән иртәнге ел менән*
*Алыҫтарға китә уйҙарым.*

*Оран һалып яуға киткән саҡта,*
*Фатихаһын биргән ҡарт Байыҡ.*
*Ҡаһым әйткән, ҡылыс йөҙөн үбеп:*
*«Дошманды беҙ еңеп ҡайтайыҡ!*

*Кемдер ҡайталмаһа сал Уралға,*
*Юлдар-йылдар аша дан ҡайтыр.*
*Яу ҡырында ауған батырҙарҙың*
*Төҫө булып алһыу таң атыр...»*

*Ағиҙелдән томан күтәрелә,*
*Көтөү сыға Әүен артына.*
*Йәй айының хозур таңдарында*
*Күңел-бөркөт күккә атлыға.*

**Радик ҒӘЗИЗОВ.**

# *«Ағиҙел»гә хаттар килә*

## *ҺАРЫ ЛА ҒЫНА ҺАЙРАЙ ҺАНДУҒАС*

*Беренсе майҙа, яҙ һәм хеҙмәт байрамында тыуғанғалыр, Алевтина Вәлиева яҙғы ҡояш кеүек сағыу кеше. Силәбеләр уны «Беҙҙең Әлфиә», «Беҙҙең Әлфиә апай» тиҙәр. Силәбеләге Бабич китапханаһы ла, Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә лә шундай рухи ынтылышлы гүзәл заттан уңды ғына.*

## Ул беҙгә Әсә кеүек

Ҡырҙа ут яғыу – мәшәҡәтле эш. Әмәлен табып ут тоҡандыраһың да дөрләп китһен өсөн уға утын өҫтәп тораһың. Шул саҡта алыҫтарҙан уның яҡтыһын күреп юлсылар килә, юлдаштар йыйыла... Сит өлкәлә беҙ ҡабыҙған мәҙәни усаҡ та шул саҡлы. Яныбыҙға килеп ингән юлдашыбыҙ, шунса йылдар рухи усаҡтың йылыһын һаҡлаусы йән терәгебеҙ хаҡында ла һөйләмәйенсә булдыра алмайым. Яҙмам баш йорттан ситтә йәшәүсе милләттәшем тураһында, рухташым һәм юлдашым хаҡында дан йыры булып яңғыраһа, һис тә яҙыҡ булмаҫ, тим.

1997 йыл. Силәбе ҡалаһы. Бабич китапханаһында әҙәби берекмә тергеҙелеп, ижад усағы ҡабына. Уның яҡтыһы йөрәге менән тойған, сәстәренә ҡырау төшкән, ҡураныс көүҙәле апай килә. Уның кескәй генә йөрәгендә Янғантауҙың ялҡындары ятыуын кем белһен?! Уның йөрәк ялҡыны тора бара беҙҙең усаҡҡа ҡушылып, Илмән тауҙа тирә-яҡҡа яҡтылыҡ таратыусы маяҡҡа әүерелде. Был – силәбеләрҙе йөрәк теле менән арбаусы һүҙ маһиры Әлфиә маяғы.

Әлфиә – ул үҙе яратып алған ҡушамат, ғәрәп телендә был һүҙ шиғри әҫәр йәки мең йәшәр тигәнде аңлата. Алевтина Нурулла ҡыҙы Вәлиева 1931 йылда Башҡортостандың Салауат районы Ҡаратаулы ауылында тыуған. Силәбе өлкәһенең Һатҡы мәҙәниәт училищеһының, аҙаҡтан Мәскәүҙә сит ил телдәре курсын тамамлаған. Салауат районында уҡытыусы булып эшләгән, заманында тыуған яғында депутат булып халыҡҡа хеҙмәт иткән. Аҙағыраҡ Силәбелә төпләнә.

Теләгән кеше үҙ Раббыһына юл табыр, тиҙәр. Бабич китапханаһына уны аҡыллыҡҡа табыныу алып килә. «Аҡмулла» әҙәби берекмәһе менән уның яҙмышы шунда бәйләнә. Бабич менән Аҡмулланың ышаныслы ҡулдарын тойоп, ул башкөллө әҙәби мөхиткә сума һәм шунда уның илаһи һәләте асыла ла инде. «Беҙҙең Әлфиә» «Беҙҙең Әлфиә апай» тигән хөрмәтле исеме халыҡ араһында шулай тарала.

Беҙ яҡындан аралашҡан һайын уның кешелек сифаттарын астыҡ, тормош

юлын һәм күңел донъяһын аңланыҡ. Ул утыҙынсы йылдарҙа тыуғандар менән уртаҡ яҙмышлы. Алдынғы ҡарашлы атаһы шул заманда нахаҡҡа ғәйепләнеп ҡулға алынғас, йән аҫрау өсөн ул баҫыуҙа ҡул бармаҡтарын өшөтә-өшөтә башаҡ сүпләгән. Ҡыҙғаныска ҡаршы, атаһы киткән еренән әйләнеп ҡайтмаған. Шулай ҙа йәшәү сәме уның кескәй йөрәгендә ҡара ҡан булып туңмаған. Тик бына өшөгән бармаҡтар ғына шул көйө урланған бала саҡ иленең тамғаһы булып ҡалған инде.

Беҙ быйыл «Ислам юлдарында» тигән йыйынтыҡ туплағанда, ул да «Иманлы юлдан яҙмаҫ» тигән мәҡәлә тапшырҙы. Шунда үҙенең сығышы тураһында: «Ер хәтере минең хистәремде бүлеп, бик алыҫтарҙа ҡалған бала сағыма алып ҡайтты. Әсәкәйем күҙ алдыма килеп баҫты. «Иманлы юлдан яҙмаҫ», – тип әйтер ине. Ул һөйкөмлө, асыҡ йөҙлө, йомшаҡ күңелле, уңған, ярҙамсыл, ҡул эштәренә оҫта абыстай ине. Ғәрәп, башҡорт, татар, урыҫ телдәрендә уҡый-яҙа белеп, матур телдә һөйләшер ине. Әсәйем – Фәхитә Әхмәтсафа ҡыҙы Баһауетдинова-Зинурова. Атаһы күренекле дин әһеле, ахун, Өфө губернаһының Златоуст өйәҙендә мосолмандар башлығы, «Әхмәҙиә» мәҙрәсәһендә указлы имам, мөҙәрис булған».

Ул – изге Салауат еренең терегөмөштәй бер тамсыһы. Берекмәлә әҙәби консультант булып бик күп файҙалы эштәр башҡарҙы. Әҙәби сараларҙа халыҡ алдына сығып, шиғри һүҙ менән күңелдәрҙә оҫкон ҡабыҙҙы. Аҡмулланың аҡ йәне уны шулай саф көйөнсә аралаған да, әҙәбиәт хаҡына берекмәгә тартып алғандыр, бәлки. «Беҙгә уны Хоҙай һаҡлаған», – тип әйтә икән Урал Ҡолошов, бында ла хаҡлыҡ бар. Үткер ҡарашлы, тура һүҙле, асыҡ күңелле апай арабыҙҙа абруй ҡаҙанды. Ҡоншаҡ район әҙәби берекмә етәксеһе Венера Нуртдинова уның тураһында шулай яҙҙы:

*Әлфиә апайҙың күңеле*
*Ихлас, саф – бала кеүек.*
*Аҡыл, кәңәш кәрәк саҡта*
*Ул беҙгә – Әсә кеүек.*

*Әлфиә апай! Һин булмаһаң,*
*Ҡояш та нурһыҙ кеүек.*
*Һин бит беҙҙең күңелдәрҙә*
*Иң яҡты йондоҙ кеүек.*

Әҙәби берекмәнең хәстәрлекле Әсәһенә әүерелеүе шунда беленде: ул ижади конференцияларҙа ла, уҡыусыларҙың семинарҙарында ла йөҙөп эшләне. Бик күп ҡулъяҙмалар уның ҡулы аша уҙып, ғәҙел баһа алды. Дарвин Таһиров, Венера Нуртдинова, Мәүлиҙә Ибраһимова, Фаиза Мәғәсүмова, Альвина Мөхәмәтйәнова кеүек башлап яҙыусылар уға рәхмәтле. «Силәбе шишмәләре», «Һөйөнсө», «Силәбе моңнары» кеүек йыйынтыҡтар шулай тупланды. Мәктәп уҡыусыларының да «Тамсыҡай», «Ынйыҡай», «Беҙ үҙебеҙ – башҡорттар» исемле йыйынтыҡтарын төҙөүҙә ҡатнашып, йәш ҡәләмдәштәргә фатиха бирҙе.

Ул шулай силәбеләрҙең ихтирамын мәрхәмәтле Әсә йөрәге менән яуланы,

ағинәй булып халыҡ яҙмышына төшкән ҡырауҙан бөрөләрҙе һаҡланы һәм яңылышмайынса үҙе һайлаған исем менән ил иңләп ғүмерен шиғри әҫәр итте.

## Милли ғорурлыҡ тойғоһо уятып...

Юлдың башы ат тояғында булһа, һүҙ оҫтаһының сере уның ҡатлы-ҡатлы күңел төбөндә. Уның күңелендәге илһам нурҙарына ҡойона-ҡойона үткән алыҫ юлдар ҙа беҙгә яҡын тойола. Салауат, Аҡмулла, Бабич, Сәләм, Мостай Кәрим, Рәми Ғарипов, Ҡадир Даян, Зәйнәб Биишева, Кәтибә Кинйәбулатова һ.б. шағирҙарҙың шиғырҙары уның телендә. Арғаяш, Ҡоншаҡ, Сосновка райондары, Магнитогорск, Мейәс ҡалалары, Башҡортостандың Учалы һәм Әбйәлил райондары – ҡайҙа ғына барһа ла, рухи ғәм таратҡаны өсөн уны халыҡ яратып ҡабул итә.

Ҡоншаҡ яғына юлланһаҡ: «Ҡоншаҡ яғы – ҙур-ҙур күлдәр иле. Ә Сабаҡлы – иң дә гүзәле!» – тигән юлдарҙы илһамланып уҡый. Уның шулай шиғырҙарҙы ялҡынланып яттан уҡыуы беҙҙең күңелдәргә күсә. Бындай шиғриәтле сәфәрҙәр айырыуса арабыҙҙағы йәштәр өсөн оло һабаҡ, әҙәбиәтте яратыу – кешелекте яратыу тигән тәрбиә мәктәбенә әйләнә. Уҡытыусылар өсөн был аралашыуҙың асыҡ дәресе генә түгел, ә бик күптәр өсөн халыҡ араһында рух уятыуҙа өлгө булырлыҡ.

Силәбе дәүләт университеты башҡорт бүлегенең студенттары менән осрашыуҙарҙа күп тапҡырҙар күңел байрамдары бүләк итте. «Ҡарлуғас» әҙәби түңәрәге ағзаларына ла илһам ҡанаттары ҡағылғандыр, моғайын. З.Ширванова, А.Ишбирҙин, Ю.Вәлиева кеүек ижади йәштәрҙең терәге лә, тоғро кәңәшсеһе лә булып ҡала әле лә.

Башҡорт, татар һәм урыҫ шағирҙарының байтаҡ әҫәрҙәрен яттан белә, шуларҙы зиһендәргә һеңдереп уҡый. Аҡмулланың байтаҡ шиғырҙары уның күңелендә тәсбих кеүек ҡабатлана. Уның менән булған шундай бер ваҡиға хәтерҙә ҡалған. Бабич китапханаһында «Ватандаш» журналы менән осрашыу кисәһе бара. Журналистар Сәлимйән Бәҙретдинов менән Закир Зиннәтуллин килгәйне. Әлфиә апай шунда ҡунаҡтар алдына баҫып, яңы журналдағы әле буяуы ла кипмәгән бер поэманы яттан һөйләп ебәрмәһенме?! Шунда Сәлимйән Бәҙретдинов, уның һәләтенә һоҡланып, ихтирам йөҙөнән «Ватандаш» журналын уға тотош бер йыл бушлай ебәреп тороуҙы вәғәҙә иткәйне.

«Әҙәби осрашыуҙар ваҡытында һәм Учалы яҙыусылар ойошмаһы, Аҡмулла әҙәби берекмәһе тарафынан уҙғарылған конференция, семинар кеүек сараларҙа Алевтина Вәлиева бик актив ҡатнаша. Уның үҙ-үҙен тотошо, бик күп шиғырҙарҙың әҫәрҙәрен яттан белеүе, уларҙы урынлы ҡулланыуы, һүҙҙең бәҫен, дәрәжәһен белеүе һәм нәфис һүҙгә маһирлығы һоҡландыра, күңелдә милли ғорурлыҡ тойғоһо уята, уй-кисерештәрҙе юғары бер ҡалыпҡа көйләй», – ти шағир Мәүлит Ямалетдин.

Бөгөн шиғыр уҡымайҙар, аҡҡа табыныу бөттө, тиҙәр. Ә Әлфиә апай уҡыусы алдына сығып ҡат-ҡат киреһен иҫбатлай, шуның иң юғары өлгөһөн күрһәтә. Хәҙерге заман «ауырыуына» дауа, әсә теленә талсыҡҡан күңелдәргә шифа, аҡҡа табыныусыларға һабаҡ итеп ергә ул Күк заты тарафынан

ебәрелгәндер, бәлки. Ул Аллаһы Тәғәлә биргән тел асҡыстары менән рухи ҡаҙаныштарҙы өләшеп йәшәй шул йәшендә лә. Шул һәләте менән ул үҙен дә, халҡыбыҙҙың шиңмәҫ рухын да данға күмә.

## Был донъяны данлап үткәрәйек...

Һандуғастар яҙҙы маҡтар өсөн ҡайта, әҙәм балаһы донъяны биҙәр өсөн тыуа. Бигерәк тә шиғыр йәнле кешеләр башҡаларҙа тормошҡа һөйөү тәрбиәләй. Беҙҙең Әлфиә апай ҙа, әҙәбиәткә мөкиббән кеше булараҡ, донъя хаҡында уйланып йәшәй. Һикәлтәле һикһән йыллыҡ юлды үткәндә, бигерәк тә балалығын һуғыш зәһәре урлаған кеше булараҡ, уның донъяла һығылыуҙары ла аҙ булмағандыр. Йылдар уның аяҡ-ҡулдарын яландарҙа туңдырһа ла, барыбер йөрәк йылыһын һаҡлаған. Ул әле лә яҙҙарына һуңлап булһа ла ҡайтҡан һандуғастай...

Беҙҙең Учалы – Силәбе төбәгендәге әҙәби мөхиттә маяҡ булырҙай аҫыл заттар аҙ түгел. Тауға ҡарап тау булып булмаһа ла, яҡташыбыҙ шағирә Кәтибә Кинйәбулатова әйткәнсә, беҙҙең дә әбейлектән күңел һүрелмәй. Әлфиә апай үҙе лә шул саҡмалы аҫылташтар менән аралаша торғас, бәлки, йөрәгенә ҡуҙ һалғандыр. Ул берсә олпат кешеләргә генә хас өгөт-нәсихәтле лә, берсә йәштәргә заман ритмынан туҡылған йөрәк хисле лә.

2003 йылда «Һөйөнсө» исемле яңы шиғырҙар китабына баш һүҙ яҙыу өсөн Кәтибә Кинйәбулатоваға тапшырҙыҡ. Ул беҙҙең ниәтте бик хупланы. Ҡулъяҙмалар менән танышҡандан һуң Алевтина Вәлиеваның шиғырҙарына туҡталып:«Ҡайҙа йәшәй?», «Кем һуң ул?» тип һораны. Уның өлкән йәштә булыуын әйткәс:«Эх, элек ҡайҙа булған икән?», – тигән үкенес белдергәйне яҡташыбыҙ. Әгәр ҙә заманында боронғо башҡорт илендә рухи усаҡҡа ҡуҙ өҫтәп тороусы булһа, моғайын, уның яҡындары хәҙер инде ситтәге бауырҙаштарҙың туң йөрәген иретер ине.

2006 йылда «Көҙгө моңдар» исемле шиғырҙар китабы Силәбелә үҙнәшер юлы менән донъя күрә. Учалыла «Аҫылташтар йыйыр саҡ» (төҙөүсеһе Мәүлит Ямалетдин), Силәбелә «Область вдохновения» (Силәбе өлкәһенең 70 йыллығына бағышланған), Ҡазанда «Чиләбе моңнары» (төҙөүсеһе Рәфис Корбан) исемле йыйынтыҡтарҙа баҫыла. Бына шулай китаптан китапҡа, йөрәктән йөрәккә күсеп йөрөрлөк күңел йәдкәрҙәре бар уның:

*Егет булһа – ут булһын,*
*Әйткән һүҙе уҡ булһын;*
*Уйы таҙа, пак булһын,*
*Эше гәҙел, хаҡ булһын;*
*Башын бирмәҫ ат булһын,*
*Үткер, изге зат булһын;*
*Тәкәберлек ят булһын;*
*Егет булһа – ут булһын!*
*Илкәйенә ҡот булһын!*

Был – йәш быуынға наказ, уның илһамлы ижадынан ысыҡтай күңел ынйыһы. «Алтын шәжәрә», «Аҡ толпарым – йөрәккенәм», «Үҙем башҡорт»,

«Хат», «Хафаланма» кеүек шиғырҙары юғары хис-тойғоло, юғары лирика. Граждандлыҡ позицияһы менән һуғарылған аҫыл әҫәрҙәр.

Аҡыллыҡҡа табынған кешегә донъяла ниндәй бүләк булыуы мөмкин?! Бына яңы ғына Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте «Силәбе башҡорттарының әҙәбиәт антологияһы» исемле хеҙмәтебеҙҙе сығарҙы. Был – «Аҡмулла» әҙәби берекмәһенең генә шатлығы түгел, ә халыҡ менән бергә яулаған оло ҡаҙаныш – күңел һәм дарман, ҡан һәм дан бейеклеге ул. Үтә лә еңел булмаған үрге яулауҙа, халҡыбыҙҙың рухи усағына ҡот өҫтәүҙә, кәңәшсебеҙ ҙә, терәгебеҙ ҙә, ғорурлығыбыҙ ҙа Әлфиә апай Вәлиеваның да хеҙмәте бар. Был китапты ул үҙенең һикһән йәшлек юбилейына ысын мәғәнәһендә иң оло шатлыҡ тип ҡабул итте.

Әҙәби берекмәнең абруйлы ағзаһы имам-хатиб, Зәйнулла Ишан хәҙрәттең бүләһе, шағир Булат Батталов та – хәҙер инде мәрхүм – рухташының күңел байрамынан ситтә ҡалмағайны. Барлыҡ силәбеләрҙең дә теләктәрен ул шулай белдергәндәй ихлас тәбрикләп шиғыр яҙғайны. «Аҡмулла» әҙәби берекмәһенең аҡ йәнле ағинәһенә бағышланған мәҡәләне фәҡәт аҡһаҡалдың хаҡ һүҙҙәре менән тамамлайыҡ:

*Эйе, бөгөн һинең тыуған көнөң,*
*Баҡсаларҙа һайрай һандуғас:*
*Һине данлап, бәхет теләп һайрай,*
*Беҙ ҙә килдек һине һағынғас.*

*Йәшә, Әлфиә, йәшә, донъя күркәм,*
*Һары ла ғына һайрай һандуғас.*
*Был донъяны данлап үткәрәйек,*
*Уға килеп инде бар булғас.*

*Йәшә, Әлфиә, йәшә бирешмәйсә:*
*Әсәйең бит һиңә көс биргән;*
*Төндәр буйы теләктәрен теләп,*
*Иманлы бул, тиеп үҫтергән.*

*Йәшә, Әлфиә, йәшә, донъя йәмле,*
*Өҙөлөп-өҙөлөп һайрай һандуғас.*
*Изге теләктәрең ҡабул булһын,*
*Был донъяға килеп бар булғас!*

**Ҡамса МОРТАЗИН.**
**Силәбе ҡалаһы.**

*Әҙәби-мәҙәни мөхит*

**Президент менән осрашыу**

18 июндә Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала идара рәйесе Риф Тойғонов етәкселегендә бер төркөм яҙыусылар менән осрашты. Ирекле фекер алышыу шарттарында үткән был сарала әҙиптәр бөгөнгө көндә Яҙыусылар ойошмаһының тейешле күләмдә финансланмауын, ә был әҙәби кисәләр, уҡыусылар менән осрашыуҙар, ҡәләм оҫталарының юбилейҙарын үткәреү, ижади командировкалар һ.б. менән бәйле, 230 ағзаһы булған Союздың (һан буйынса Мәскәү, Санкт-Петербург, Татарстандан ҡала дүртенсе урында), күҙ терәп торған берҙән-бер дәүләт ҡарамағындағы «Китап» нәшриәтенең шулай уҡ аҡсаға ҡытлыҡ кисереүен, һөҙөмтәлә күп кенә ҡулъяҙмаларҙың байтаҡ йылдар дауамында донъя күрә алмауын билдәләне, йәш ижадсыларға лайыҡлы иғтибар, Мәскәүҙәге А.М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында йәки БДУ, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ базаһында тәржемәселәр төркөмө асыу, әҙәбиәт музейын булдырыу, әҙиптәрҙе ял йорттарына ебәреп, ижад һәм ял итеү шарттары тыуҙырыу һымаҡ көнүҙәк мәсьәләләр күтәрҙе. Сөнки бөгөнгө ауыр заманда бындай эштәрҙе Республика Хөкүмәтенең, Президенттың ярҙамынан тыш ойошма һәм уның ағзалары башҡарып сыға алмаҫы көн кеүек асыҡ.

Президент һәр сығышты иғтибар менән тыңланы, күп мәсьәләләрҙә әҙиптәрҙең борсолоуын аңлауын һәм уларҙың урынлы икәнен белдерҙе, күтәрелгән проблемаларҙы хәл иткәндә үҙҙәренең дә әүҙемерәк, ныҡышмалыраҡ булыуын теләне. Әлбиттә, Хөкүмәт тарафынан финанс ярҙамы буласаҡ, республика былай ҙа мәҙәниәт, әҙәбиәт, сәнғәт өсөн аҙ эшләмәй, тик халыҡ йотлоғоп уҡырлыҡ юғары художестволы әҫәрҙәр ижад итегеҙ, тине һәм, яҙыусыларҙың ҡыуанысына, бындай осрашыуҙарҙың артабан да кәрәклеген билдәләне.

Осрашыу һуңында әҙиптәр Президентҡа автографлы китаптарын бүләк итте.

**Мәскәүҙә – шиғыр байрамы**

28 июндә илебеҙҙең баш ҡалаһы Мәскәүҙә, Рәсәй Яҙыусылар союзында, Башҡорт әҙәбиәте көнө үтте. Сара Рәсәй тарихы йылына һәм 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығына арналды. Унда ҙур телмәр менән Рәсәй Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Валерий Ганичев сығыш яһаны, Башҡортостан делегацияһы исеменән филология фәндәре докторы, профессор Рәшит Шәкүр тәрән йөкмәткеле телмәр тотто.

Шағир Мәүлит Ямалетдиндың ҡурай моңо һәм «Әрме» йырынан һуң шағирҙар Марат Кәримов, Хәсән Назар, Әнисә Таһирова, Факиһа Туғыҙбаева, Таңһылыу Ҡарамышева, Риф Мифтахов, Фәнил Күзбәков, Фәниә Ғәбиҙуллина, Мөнир Вафин, Мөхәммәт Закиров, Владимир Денисов, Әхмәр Үтәбай шиғырҙарын уҡыны. Әмир Әминев менән Юрий Горюхин «Ағиҙел» һәм «Бельские просторы» журналдары хаҡында һөйләне, йәнә Ғәлим Хисамов, Рәшит Низамов сығыштары тыңланды.

Байрамда Мәскәү яғынан яҡташтарыбыҙ, билдәле яҙыусы Йәмил Мостафин, ғалимә һәм шағирә Земфира Сәхипова, тәржемәселәр, мөхәррирҙәр Гарий Немченко, Сергей Гловюк, Аршак Тер-Марқарьян, Виктор Широков, Владимир Бондаренко, Николай Дорошенко яҡташтарыбыҙ, Социалистик Хеҙмәт Геройы Тәлғәт Хурамшин, армия генералы Владимир Бобров һәм башҡалар сығыш яһаны.

Шиғри байрамды Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина менән Рәсәй Яҙыусылар союзы идараһы секретары Николай Переяслов алып барҙы.

Икенсе көнөнә Башҡортостан әҙиптәре «Бородино һуғышы» музей-панорамаһын ҡараны, Переделкинолағы Корней Чуковский йорт-музейына, Ҡыҙыл майҙанға сәйәхәт ҡылды.

***

Истамбулда Башҡортостан көндәре уҙҙы. Республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов етәкселек иткән рәсми делегациябыҙҙың сәфәре Истамбулдың Фәтих районы башлығы Мостафа Демир менән осрашыуҙан башланды.

Сарала туғандаш райондар араһында ғына түгел (Өфөнөң Киров районы менән Фәтих районы бер нисә йыл элек дуҫлыҡ тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйғайны), шулай уҡ Башҡортостандың баш ҡалаһы менән боронғо Константинополь араһында тығыҙыраҡ бәйләнештәр булдырыу хаҡында һүҙ барҙы.

Рәсми делегация ағзалары ҡала паркындағы төрки телле халыҡтарҙың музей комплексында урынлашҡан Башҡорт халҡының тарихы һәм этнографияһы йортондағы күргәҙмәне ҡараны. Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа республикалар араһында мәҙәни генә түгел, иҡтисади бәйләнештәр ҙә нығый. Башҡортостан менән Төркиә араһындағы тауар әйләнеше әле ярты миллиард доллар самаһы тәшкил итә.

«Решат нури» театрында билдәле төрөк драматургы Тунджер Джюдженоглу пьесаһы буйынса «Күскен» спектакленең премьераһы үтте. Ә Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр дәүләт театры артистары бәләкәй генә ауылда йәшәгән йәш ғаилә хаҡында тамаша күрһәтте.

Истамбулдағы Изге София ҡорамы һәм Зәңгәр мәсет эргәһендә урынлашҡан Мәхмәт Акиф Эрсой паркында үткән милли һабантуй Башҡортостан көндәренең иң сағыу ваҡиғаһына әүерелде. Байрамға 10 мең самаһы ҡунаҡ килде. Ҡала үҙәгендә ҡурай моңо, башҡорт йырҙары яңғыраны. «Мираҫ» фольклор ансамбле, башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары сығыш яһаны.

***

Башҡортостан Яҙыусылар союзы йәш шағирҙар менән осрашыу үткәрҙе. Сараны идара рәйесе урынбаҫары Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина асты. Артабан Гөлнара Хәлфетдинова, Гөлдәр Бүләкбаева, Алмас Шаммасов, Кристина Андрианова, Гөлдәр Ишҡыуатова, Олеся Әхмәтрәхимова, Зилә Ғәлләмова, Рәйфә Билалова һәм БДПУ студенттары үҙҙәре менән таныштырҙы, шиғырҙарын уҡыны.

Шағирҙар Ирек Кинйәбулатов, Марис Нәзиров, Рәмил Йәнбәк, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина йәштәрҙең сығыштарын, уҡыған әҫәрҙәрен баһаланы, уларға эшлекле кәңәштәр бирҙе.

***

Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр дәүләт театрында Ғабдулла Туҡайҙың Өфөгә килеүенә 100 йыл тулыуға арналған «Эй, мөҡәддәс сазым, уйнаның һин ник бик аҙ?..» тип аталған Хәтер һәм ҡәҙер кисәһе булды.

Кисәне Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов асып, Ғ. Туҡай ижадының әһәмиәте хаҡында бәйән итте һәм шағирға арналған «Ташкенттағы Алай баҙары» тигән шиғырын уҡыны.

Йыр-моң менән үрелеп барған тамашала халыҡ шағирҙары Абдулхаҡ Игебаев, Ҡәҙим Аралбай, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары Ирек Кинйәбулатов, Хәсән Назар, шағирҙар Йомабикә Ильясова, Зөлфиә Ханнанова, Тамара Искәндәриә, Риф Мифтахов, Марис Нәзиров, Хәлисә Мөҙәрисова, Лилиә Сәғиҙуллина, Мөнир Вафин, Земфира Муллағәлиева, Дамир Шәрәфи, Салауат Рәхмәтулла, Мөхәммәт Закиров, Илдус Фазлетдинов сығыш яһаны.

Әҙәби сараны Фәнәүи Сәлихов, Илшат Ишморатов, Миңзифа Иҫкужина, Марат Шәрипов, Мәхмүт Фәтихов, Резеда Фәхруллина, Мәхмүт Нәҙершин һәм башҡа сәхнә оҫталарының сығыштары биҙәне.

Мәртәбәле кисәгә Татарстан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рәфис Ҡорбан, уның урынбаҫары драматург Данил Сәлихов, халыҡ шағиры, яҡташыбыҙ Рәдиф

Ғаташ килгәйне. Улар шулай уҡ мәшһүр шағирҙың ижады, бөгөнгө татар шиғриәтенә ҙур йоғонтоһо хаҡында һөйләне һәм ике республика араһында әҙәби-мәҙәни бәйләнештәрҙе тағы ла нығытыу кәрәклеге хаҡында бәйән итте.

***

Республикала «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!» байрамын уҙғарыу матур йолаға әйләнде. Ул байрамдарҙа ошо ауылдан сыҡҡан күренекле кешеләр ҙә ҙур ихласлыҡ менән ҡатнаша. Яңыраҡ Ҡырмыҫҡалы районының Абдулла халҡы ауылдарының нигеҙ һалыныуға 100 йыл тулыуҙы ла шул рухта үткәрҙе.

Сығышы менән ошо ауылдан булған шағир Ирек Кинйәбулатов, райондаштар профессор Тимерғәле Килмөхәмәтов, Ҡырмыҫҡалы яҡташтар йәмғиәте рәйесе, «Тамаша» журналының баш мөхәррире Фәнил Ҡоҙаҡаев һәм башҡа ҡунаҡтар килгәйне был күңелле байрамға.

Ауыл халҡын район хакимиәте башлығы Фәнзил Сыңғыҙов, район советы рәйесе Зөлфиә Ҡотлоева тәбрикләне, һәүәҫкәрҙәр матур концерт күрһәтте.

***

Шағир Рәмил Йәнбәк менән прозаик Ринат Камал республикабыҙҙың төньяҡ-көнсығыш райондарында ижади кисәләр уҙғарҙы.

Ҡыйғы районы үҙәгендәге 1-се һәм 2-се урта мәктәптәрҙә, Балаҡатай һәм Мәсетле район үҙәк китапханаларында, Мәсәғүт педагогия колледжында (Дыуан районы), Салауат районы балалар ижады йортонда уҙған осрашыуҙарҙа һүҙ бөгөнгө әҙәби процесс, «Ағиҙел» журналы һәм уға яҙылыу торошо хаҡында барҙы. Уларҙа уҡытыусылар, китапханасылар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, студенттар ҡатнашты.

***

Әҙиптәр Мансаф Ғиләжев, Фәнил Күзбәков, Рәшит Низамов, Фәрит Суфияров Краснокама районының Яңы Аҡтанышбаш мәҙәниәт йортонда, Николо-Березовка район үҙәге китапханаһында, балаларҙың Редькино йәйге ял лагерында әҙәбиәт һөйөүселәр менән осрашыуҙар үткәрҙе. Йәнле аралашыу мәлендә әҙиптәр генә түгел, залдағылар ҙа ихлас ҡатнашты, әҙәбиәт, мәҙәниәт, мәғариф, матбуғат проблемаларына бәйле фекерҙәре менән уртаҡлашты. Ҡунаҡтарҙы районның хакимиәт башлығы урынбаҫары Ф.Ғ. Дмитриева, мәғлүмәт-аналитик бүлек мөдире И.Ф. Хәмитова оҙата йөрөнө.

***

Көйөргәҙе районының Яманғол ауылында РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, билдәле яҙыусы һәм нәшер Раил Байбулатовтың тыуыуына 75 йыл тулыуға арналған әҙәби-музыкаль кисә, исем ҡушыу йолаһы уҙғарылды. Сарала Өфөнән әҙиптәр Рәшит Низамов, Әнисә Таһирова, Сабир Шәрипов, Күмертауҙан Кинйәғәли Абдуллин, Закир Аҡбәров, төбәктең мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре һәм әҙәбиәт уҡытыусылары ҡатнашты. Район хакимиәте башлығы урынбаҫары Люциә Хәмитова, мәрхүм прозаиктың тормош иптәше Лилиә ханым Байбулатова һәм башҡалар һағышлы иҫтәлектәре менән уртаҡлашты. Ҡунаҡтар әҙип ҡәберенә сәскәләр һалды, ауыл мәктәбендә Раил Байбулатов ижадына арналған бүлмәне, шулай уҡ Ермолаеволағы тарихи-крайҙы өйрәнеү музейын ҡараны.

Яҙыусыларҙы район хакимиәте башлығы Әхәт Ҡотләхмәтов ҡабул итте.

17 июндә күренекле шағирә, республиканың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге премия лауреаты, күптәнге авторыбыҙ һәм баҫмабыҙҙың элекке хеҙмәткәре

**Кәтибә Кәрим ҡыҙы**
**КИНЙӘБУЛАТОВА**

вафат булды.

Ил инәһе, аҡыллы апай һәм әхирәт хаҡында яҡты иҫтәлек редакция хеҙмәткәрҙәренең, меңәрләгән уҡыусыларыбыҙҙың йөрәгендә һаҡланыр.

**«Ағиҙел»селәр.**